# Ағиҙел

**Өфө,**
**июнь**
**2011**
**6 (1058)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Азамат ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү
буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.06. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 240 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0099.11.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2011 (6,1058)**

# БЫЛ ҺАНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ноғман Мусин.** Хәтер шаңдауы. Э с с е . Башы. ..........................5
**Хәбир Дауытов.** Аҡтүш һағышы. Х и к ә й ә. ............................44
**Мәхмүт Хужин.** Дәүрән. Х и к ә й ә . ........................................48

ШИҒРИӘТ

**Тамара Ғәниева.** «Офоҡтарҙы ашҡым килеп китте…»
Ш и ғ ы р ҙ а р . ...................................................................55
**Рәмил Йәнбәк.** «Мин ашҡындым гелән иртәгәгә…»
Ш и ғ ы р ҙ а р . ...................................................................63
**Тимер Ниәтшин.** Шәп булдымы? Ш и ғ ы р ҙ а р . .....................71

СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Талха Ғиниәтуллин.** Баш осонда йондоҙҙар… К о м е д и я . .....78

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Ләйсән Ғөбәйҙуллина.** Зиннәтле күңел. ................................90

*Ғабдулла Туҡайҙың тыуыуына 125 йыл*

**Абдулхаҡ Игебаев.** Шағир һәм әжәл. Ш и ғ ы р . .....................96
**Суфиян Поварисов.** Шиғриәт пәйғәмбәре. ............................98
**Әхәт Сәлихов.** Туҡай һәм башҡорт әҙәбиәте. .........................107

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Зәйтүнә Шәрипова.** Талант – тәүәккәллек ул.
*(Азат Абдуллинға – 80 йәш)* ..................................................113

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ ИЖАДЫ

**Тамара Сәйфуллина, Фәүзиә Йәнтилина,**
**Гөлсөм Вәлиуллина, Хажи Әхмәтйәнов.** Ш и ғ ы р ҙ а р . ......115

РУХИ ЫНЙЫЛАРЫБЫҘ

**Лео Яковлев.** Тормошо тураһында Ғүмәр Хәйәм үҙе
һөйләгән бәйән. .....................................................................120

ПУБЛИЦИСТИКА

**Ишғәли Нурғәлиев.** Башҡорт яҙмышы йәки параллель
һуғыштар. ...............................................................................138

ДОНЪЯ ӘҘӘБИӘТЕ ҮРНӘКТӘРЕ

**Лао Шэ.** Ай урағы. Х и к ә й ә . .................................................148

ЯҘМЫШТАН ЫҘМЫШ ЮҠ

**Әхмәт Муллағолов.** Ынауҙар һындыра алманы. ..................165

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


ПРОЗА

**Н. Мусин.** Эхо памяти. *Эссе. Начало.*
**Х. Даутов.** Собачья ностальгия. *Рассказ.*
**М. Хужин.** Давран. *Рассказ.*

ПОЭЗИЯ

**Т. Ганиева, Рамиль Янбек, Т. Ниатшин.** *Стихи.*

СЦЕНИЧЕСКИЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

**А. Генатулин.** Звезды над нами. *Комедия.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Л. Губайдуллина.** Искренность души.

*125 лет со дня рождения Габдуллы Тукая*

**А. Игебаев.** Поэт и смерть. *Стихотворение.*
**С. Поварисов.** Пророк поэзии.
**А. Салихов.** Тукай и башкирская литература.

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**З. Шарипова.** Решительность. (*80 лет Азату Абдуллину)*

ТВОРЧЕСТВО НАШИХ ЧИТАТЕЛЕЙ

**Т. Сайфуллина, Ф. Янтилина, Г. Валиуллина, Х. Ахметьянов.** *Стихи.*

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**Лео Яковлев.** Повесть о жизни Омара Хаяма.

ПУБЛИЦИСТИКА

**И. Нургалиев.** Судьба башкир или параллельные войны.

ОБРАЗЦЫ МИРОВОЙ ЛИТЕРАТУРЫ

**Лао Шэ.** Серп луны. *Рассказ.*

ЭТО – СУДЬБА

**А. Муллагулов.** Не сломили испытания.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…


---


**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Ноғман
МУСИН

# Хәтер шаңдауы

## Эссе

Фекерҙәрем тарҡау, ни тотоп, ни ҡуйырға белмәй йөрөгән саҡта тотондом был эшкә. Бына күпме ваҡыт инде көндәр шулай аңҡы-тиңке үтә. Ултырып яҙғы килә, хатта ваҡыты-ваҡыты менән күңелдә ниндәйҙер серле йомғаҡ төйнәлеп, йән өрөүҙе һорай башлаған кеүек, әммә ул ысынбарлыҡҡа әүерелә алмай, иртәнге томан эсенә инеп юғалған осар ҡош төҫлө, ғәйеп була ла ҡуя. Унан йөрөйһөң балтаһы һыуға төшкән кешеләй илереп-бөтөрөнөп.

Бына әле яңы йылдың тәүге таңы. Кисә кис ғаилә менән йыйылып ултырып, йәнә бер яңы йылды ҡаршыланыҡ. Табыныбыҙ мул, телевизорҙан байрам тапшырыуҙары бара, өҙлөкһөҙ телефон шылтырай – дуҫ-иштәр Яңы йыл менән ҡотлай. Бөтәһе лә күтәренке кәйефтә булырға өндәй һымаҡ, минең күңел төбөндә ниҙер быҫҡый ҙа быҫҡый, һис кенә лә тоҡанып китә алмай, хатта Яңы йыл табынында ултырғанымды ла онотоп ебәрәм. Минең һиңмайланып ултырғанымды ҡыҙым да һиҙгән, күрәһең.

– Әтей, ҡара әле, һин һөйләйһең бит, – ти.

---

**РЕДАКЦИЯНАН:** *Әҙәм балаһы ниндәй генә эш башҡармаһын, ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, ул дөйөм тормош ҡаҙанында ҡайнай; донъялыҡта үҙ урынын табыу өсөн барлыҡ тырышлығын һала, был көрәштә еңә, еңелә, хатта ҡорбан булып та ҡала. Әҙәби ижад әһелдәре лә ошо донъяуи асылдан ситтә ҡала алмай. „Алтмыш йыл буйы әҙәбиәт ҡаҙанында ҡайнаусы булараҡ, ҡайһы бер күҙәтеүҙәремде, баштан үткәндәрҙе ҡағыҙға теркәргә насип итте, — тине ҡульяҙмаһын редакцияға тапшырғанда күренекле яҙыусы Ноғман Мусин. — Әгәр әлеге яҙмаларымда тәнҡит юҫығында телгә алынған ҡайһы бер шәхестәр журналға үпкә-маҙар белдерҙенһә, мин уларға шәхсән үҙем яуап бирергә әҙермен, редакцияға дәғүә белдермәһендәр...“ Беҙҙеңсә, был ҡәтғи фекергә ниндәйҙер аңлатма биреүҙең кәрәге юҡ.*

*Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусинға — 80 йәш... Күп меңләгән уҡыусыларыбыҙ исеменән юбилярҙы — „Ағиҙел“дең мөхәрририәт ағзаһын һәм актив авторын ихлас күңелдән тәбрикләйбеҙ. Әйткәндәй, әҙиптең ижад һәм тормош биографияһы, йәнә беҙҙәге ярты быуатлыҡ әҙәби мөхит әлеге эссела ярайһы асыҡ тоҫмаллана.*

Экранға күҙ ташлайым. Үҙемде күрәм дә, күрмәйем дә, ни һөйләгәнемде лә аңламайым. Телевидениеға саҡырып алып, Яңы йыл тапшырыуында ҡатнашыуымды һорағайнылар, шуны күрһәтәләрҙер инде. Был ни хәл? Хатта үҙемде күреү теләге лә юҡ...

Аптырағас, үҙемдең эш бүлмәһенә инеп ултырҙым. Ут тоҡандырырға ҡул бармай. Бер кем булмаған яңғыҙлыҡ донъяһына сумғы килә. Шунда, бәлки, ниндәйҙер илаһи йән эйәһе менән осрашырмын кеүек. Был өмөтөмдөң дә аҡланмаҫына төшөнгәс, ятып ҡараным. Күҙгә әҫәр ҙә йоҡо ҡунмай.

Яңы йыл тапшырыуҙарын туйғанса ҡарап, ғаиләм дә үҙ урындарына таралып, йоҡоға талды. Ҡышҡы оҙон төн үтеп баралыр инде, ә минең болоҡһоу күңел һис кенә лә тыныслана алмай, иркенлек, осош, алыш, көрәш, бәрелеш, еңеү ауаздары талап итә.

Туҡта, быңдай сетерекле хәлдән ҡулға ҡәләм алыу ҡотҡара торғайны бит. Тороп ултырҙым. Өҫтәлемдә аҡ ҡағыҙ бите. Хәс тә бер гонаһһыҙ баланың саф күңеле төҫлө: тап-таҙа, ап-аҡ һәм үҙенә тормош, ғүмер сәхифәләрен теҙә башлауҙы көтә.

Уйланам, күңел төбөнән өр-яңы, серле, арбағыс фекерҙәр тартып сығарырға тырышам. Улар юҡ та юҡ, ҡайҙалыр буталып, аҙашып йөрөйҙәр.

Әүәлерәк быңдай хәлдәр булмай торғайны. Улай ғынамы, башҡа килгән фекерҙе теләһә ниндәй шарттарҙа ла ҡағыҙға төшөрөү йүне табыла ине. Анау “Ереккәнде ер ярата” тигән хикәйәне ҡайһылайыраҡ яҙғайным бит. “Совет Башҡортостаны” гәзите редакцияһында эшләп йөрөгән мәл. Университеттың киске бүлегендә лә уҡыйым. Йәшәгән төйәк – ике кескәй генә бүлмәле, ел үтә һуғып торған сарлаҡ. Ике бәләкәй бала, ҡәйнәм. Ҡатын китапханала эшләп йөрөй. Редакция йыш ҡына командировкаға ебәрә. Ауыл хужалығы бүлегендә эшләгәнгә күрә, төрлө райондар буйынса сабырға тура килә. Ижад тураһында уйларға ла форсат юҡ. Шулай ҙа яҙыла ине әҫәрҙәр. Әле иҫкә алған хикәйәне университетта лекцияла ултырғанда, өс кистә, яҙып бөттөм. Лектор һөйләй хәбәрен, тирәяғымда ултырғандар уның ауыҙынан сыҡҡан бер һүҙҙе ҡағыҙға төшөрөргә, хәтеренә һеңдерергә тырыша, ә минең күңел бөтөнләй икенсе яҡтарҙа, үҙем тотоп алған епте ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, башлағанымды ослап ҡуйырға ынтылам. Ошо хикәйә гәзиттә баҫылып сығып, уның тураһында хуплау һүҙҙәре ишеткәс, күңелдә ғәжәп бер кинәнес кисергәйнем бит.

“Һинең мөхәббәтең” тигән повесть, Ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтының Шишмә тәжрибә участкаһында бер нисә тапҡыр булып, ундағы өлкән ғилми хеҙмәткәр, күренекле селекционер Ҡунаҡбаев ағай менән һөйләшеп йөрөп, ошо хужалыҡтағы эштәр тураһында өс-дүрт очеркым гәзиттә баҫылғандан аҙаҡ, уйланып йөрөй торғас, ана шулай университетта лекциялар тыңлағанда яҙыла башлағайны.

Әле бына ваҡыт үҙ ҡулымда, тынысланып ултырып эшләргә айырым бүлмәм бар, ә яҙылмай ҙа ҡуя. Олоғая килә фекер һайыҡҡанмы, етер, яҙылған тиклеме яҙылған, тип үҙем дә аңлап бөтмәгән ҡәнәғәтләнеү тойғоһо тотҡарлыҡ яһаймы – белмәҫһең.

...Фәһимәнең оҙаҡ ваҡыт ауырып ятыуы, әлбиттә, күңелде өйкәп, кәйефте ҡырып тора. Әммә был хәлгә лә күнегеп үк киткән кеүекмен бит инде. Ҡыҙҙарым менән алмашлап уны төнөн дә тороп ҡарайым: торғоҙоп ултыртып, тәнен яҙып, ял иттереп, ҡабат яткырабыҙ. Балалар эшкә киткәндән аҙаҡ, иртәнгелеккә ашарға әҙерләйем дә, Фәһимәне уятып, уға ятҡан килеш гимнастика яһайым. Шунан торғоҙоп ултыртып кейендерәм, йыуындырам, сәстәрен тарайым. Былар миңә һис ниндәй эш һымаҡ та түгел, нисәмә йылдар буйы шул тиклем күнеккәнмен, бөтәһе лә ғәҙәти бер хәрәкәттәргә әүерелгән. Уны арбаға

ултыртып зал яғына сығабыҙ һәм, табын артына ултырғас, һәр саҡ ниндәйҙер ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерәм: „Аллаға шөкөр, бөгөн тағы ла иҫән-һау көйө яңы көндө башлайбыҙ“,– тигән уй килә башҡа. Күрәһең, бындай шарттарҙа фекер йөрөтөү даирәһе лә тарая төшәлер...

Туҡта, яҙа алмай ыҙалауымдың төп сәбәбе оҙаҡ ваҡыттар ошо тар донъяға бикләнеп, фатирымдан йүнле сығып та йөрөмәү арҡаһында түгелме икән? Төрлө кешеләр менән осрашып һөйләшеү, хатта һөйләшмәй генә тегендә-бында барып, тормоштағы хәрәкәтте, ығы-зығыны ҡарап йөрөү ҙә күңел төбөнә ҡорғаҡһып ҡатҡан уй-фекерҙәрҙе ҡуҙғатып ебәрер һымаҡ. Ижад кешеһе өсөн бер төрлөлөк, ысын тормоштан айырылыу оло фажиғәгә тиң, күрәһең.

Һәлкәүлеккә бирелеп, үҙ-үҙеңә баш була алмай йөрөһәң, яҙа алмауыңды аҡларға әллә ни тиклем һылтау табып була, әлбиттә. Өйҙә ултырып яҙырға фатир насар, хөкүмәт эшенән бушап булмай, яҙһаң да, китап сығарыу ҙур проблема һ. б. Тик былар береһе лә ысын ижадсы һылтана торған сәбәп түгел. Әйтер һүҙең йөрәгеңде ярып сығырҙай булып яралһа, уны ниндәйҙер һылтауҙар табып тыйып тотоу мөмкин түгел.

Минең бына яҙыусыны ижадтан тыя алмаған, ләкин уға эш барышында бик ныҡ ауырлыҡтар тыуҙырыусы бер хәлде башымдан үткәргәнем бар.

...Һалдат хеҙмәтенән аҙаҡ бер ни тиклем Өфөлә гәзит редакцияһында эшләгәндән һуң, ауылға ҡайтып йәшәй башлаған саҡ. Өфөлә редакцияла эшләүҙең файҙаһы ҙур булды: гәзит эшенә өйрәнелде, мәҡәләләр яҙыу, кеше яҙғанды шымартып эшләү, гәзиттең һәр һаны тикшерелә торған летучкаларҙа ҡатнашыу, берәм-һәрәмләп яҙыусылар менән осрашып танышыу (ҡайһы берҙә уларҙың дөйөм йыйылышында ҡатнашыу бәхете лә тейә ине) – бөтәһе лә әлегә хыялда ғына йөрөгән серле ижад донъяһына ылыҡтыра, яҙыу дәрте уята ине. Әммә күҙгә күренерҙәй әллә ни яҙа алманым ул саҡта.

Егерме беренсе аслыҡ йылдарында малай ғына көйө ауылдан сығып китеп, бәрелеп-һуғылып йөрөй торғас, отҡорлоғо, сослоғо арҡаһында тормошта үҙ юлын табып, Өфөлә нығынған, хәҙер инде яуаплы ғына вазифаларҙа эшләгән ауылдашым Мөхәммәт Диниев ағайҙарҙың бер бүлмәле генә фатирында баш төртөр урын тапҡанмын. Ямал еңгәй – лабырлап хәбәрен һөйләп торған алсаҡ күңелле ҡатын. Бала-сағалары юҡ, бик тә тыныс ҡына йәшәп ятҡан ғаилә. Әммә Мөхәммәт ағай – һәр тинен һанап йәшәй торған кеше. Ауыр тормош юлы уны шуға өйрәткәндер, бәлки. Эштән ҡайтып, кискелекте ашағас, утты һүндерә лә ҡуя. Электр – ул аҡса ашай торған нәмә, ти. Ҡараңғыла баш һәйбәт ял итә, күҙгә лә рәхәт булып ҡала, тип үҙенең был ғәҙәтен аҡларҙай һылтау ҙа таба. Ултырабыҙ шунда көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп. Ҡайһы саҡта түҙмәйем, урамға сығып китәм. Кистәрен Матросов исемендәге парк гөр килеп тора ине. Оркестр уйнай, асыҡ майҙансыҡта тансалар бара, төп яҡтараҡ урынлашҡан кафе тирәһендә лә гөж киләләр, ҡайһы берәүҙәр ағас биналағы кинозалға ашыға. Паркка иһә түләп инергә кәрәк. Унда йөрөүҙән әллә ни мәғәнә тапмаҫ кеүекмен, ул саҡта хәҙерге Өфө Сәнғәт академияһы бинаһына урынлашҡан Республика китапханаһына юл тотам.

Унда барып инеп, икенсе ҡатҡа күтәрелгәс, тәүҙә милли әҙәбиәттәр бүлегенә һуғылам. Унда мөләйем йөҙлө китапханасы Суфия апай йылмайып ҡаршы ала. Ул тәүге күргәндә үк күңелдә йылы тойғо ҡалдырғайны. Суфия апай йәш яҙыусыларҙың гәзит, журналдарҙа баҫылған әҫәрҙәрен йыйып барыу өсөн альбом булдырғайны. Армияла саҡта үҙемдең ниндәй шиғырҙарым донъя күреүен ошо альбомды ҡарағас белдем.

Ҙур булмаған уҡыу залдарында урын һәр саҡ тығын була ине. Ултырыр ер тапһам, кеҫәмдә йөрөткән ҙур ғына блокнотым менән ҡәләмде алып, ни ҙә булһа

һыҙғылап маташам. Шул саҡтағы өҙөк-йолҡоҡ яҙмаларым һуңынан ҡайһы бер әҫәрҙәрем өҫтөндә эшләгәндә ярҙам итеп тә ҡуйҙы.

Мин бит эш барышында яҙыусы алдына килеп тыуған бер ауыр хәл тураһында һөйләй башлағайным. Эйе, Өфөлә ана шулай ҡаңғырып йөрөй торғас, бында артыҡ балауыҙ һуҙа алмаҫтай булып, ауылға ҡайттым. Күңел төшөнкөлөгө юҡ ине: ҡәләмде арыу уҡ шымартҡанмын, яҙышыу ҡомары күңелде ашҡындырып тора. Үҙ өйөм, үҙ ғаиләм: ваҡытың барҙа ултыр ҙа тотон яҙырға.

Мәктәптә уҡытыуҙан тыш, өй тирәһендәге донъяуи эштәр ҙә байтаҡ. Шулай ҙа, ваҡыт табып, өҫтәл артына ла ултырам. Ғаилә күптән инде ял итергә ятҡан. Етеле шәм яҡтыһы, алдымда – аҡ ҡағыҙ. Өйҙә лә, урамда ла шылт иткән дә тауыш-тын юҡ. Рәхәтләнеп эшлә әйҙә.

Тәүҙә хәрби хеҙмәттә яҙа башлап, бер ни тиклем Өфөлә дауам итеп маташҡан “РОНО инспекторы” тигән повесть йоратына тотонғайным. Был әйбер үҙем күргән-белгән ҡыҙыҡлы ғына хәл-ваҡиғаларға таянып яҙыла башлағайны. Институтты бөткәс, Маҡар РОНО-һында инспектор булып эшләп йөрөгән саҡта алған тәьҫораттар касафаты. Яҙылған өлөштәрен уҡып ҡарағас, ул миңә оҡшаманы. Ваҡиғалар теҙеп яҙылған, әҫәрҙе бер епкә уҡмаштырған, уҡыусыны мауыҡтырырҙай сюжет һыҙығы юҡ. Йомағол тигән лесничийҙың аянысла яҙмышы тураһында яҙа биреп һалып ҡуйған хикәйәне лә, ҡайһылай итеп дауам итеү рәтен тапмайынса, ситкә ырғыттым.

Шулай ҙа артыҡ төшөнкөлөккә бирелергә лә форсат юҡ. Уҡытыу, өй эштәренән тыш, йәмәғәт эштәре менән күмеп ташланылар. Агитаторҙарға ла, лекторҙар төркөмөнә лә етәкселек итәм. Промартелдә, ауыл Советында, лесничествола стена гәзиттәре сығарыу ҙа үҙенән-үҙе минең елкәгә өйөлдө.

Һуғыш йылдарынан аҙаҡ йонсоған ауылдың ныҡлап терелә, аяҡҡа баҫа башлаған мәле ине был. Локомобиль көсө менән электр уты тоҡандырыу, таҡта ярыу цехы асыу буйынса ҡыҙыу эштәр бара. Мединститут бөтөп ауылға эшкә килгән рус егете Михаил Шапошников ташландыҡ хәленә еткән дауахана бинаһын яҡшылап ремонтлау эшенә тотонған. Промартель рәйесе Яҡуп Юлбаев ағай ҙур яңы клуб төҙөү дәрте менән янып йөрөй.

Мин дә ошо уҡ ҡаҙанда ҡайнайым бит инде, ниңә унан ситләшкән һымаҡ йөрөйөм? Ошо күренештәр тураһында “Бәхет һәм ғорурлыҡ” тигән очерк яҙҙым да “Совет Башҡортостаны” иң яҡшы очеркка иғлан иткән бәйгегә ебәрҙем. Күп тә үтмәй, ул гәзиттә баҫылып сыҡты һәм икенсе премияға лайыҡ булды.

Ҡайһы саҡта кескәй генә уңыш та ҙур эштәргә дәртләндереп ҡуя. Ниңә әле ҡасанғылыр эшкә ашмаҫ яҙмаларҙы ҡутарып ваҡыт үткәрәм, тинем дә, сәмләнеп китеп, өр-яңы әҫәргә тотонорға булдым һәм ҡағыҙ битенә “Зөһрә” повесының тәүге юлдары төштө. Атай йорто нигеҙенә яңы өй һалыу теләге лә ташлап китмәй ине. Йәйгелеген өй буратып йөрөү байтаҡ ваҡытты алды. Ә көҙөн ҡульяҙманы йәнә өҫтәлгә һалдым. Илле бишенсе йылдың аҙағында ҡульяҙма әҙер ине инде. Уны тиҙ үк таҙаға күсереп тә яҙҙым. Артабан ни эшләргә белмәй, аптырабыраҡ ҡалдым. Яҙыусылар союзына йә журнал редакцияһына ебәрһәм, уны кем уҡыр? Әллә эшкингән әйбер, әллә юҡ. Берәйһенән уҡытып, ниндәй ҙә булһа фекер ишетергә ине. Ә кемгә күҙ терәп бараһың?

Яҙғанымды үҙем йәнә ике тапҡыр уҡып сыҡтым, ә ул уҡыған һайын хөртөрәк тойола. „Юҡ менән ҡыялғанмын“ тигән уй ҙа килеп ҡуя башҡа. Ниндәйҙер төшөнкөлөккә бирелә м.

Ана шул саҡта тәүге тапҡыр ныҡлап тойҙом да инде мин ижад эшендә һине аңлаған, кәңәш бирерҙәй, дәртләндерерҙәй һүҙ әйтеүсе кеше кәрәклеген. Әгәр ҙә мәгәр ҡышҡы каникул мәлендә, йәғни илле алтынсы йылдың ғинуарында,

ҡыйыулыҡ итеп, Стәрлетамаҡ институтында уҡыған саҡтан уҡ яҡын кәңәшсем һәм ышаныслы таянысым Хәким Ғиләжев эргәһенә юлланмаһам, бәлки, яҙыусылыҡ эшенән төңөлөп тә ҡуйған булыр инем.

Хәким Ғиләжев был ваҡытта “Әҙәби Башҡортостан” журналының баш мөхәррире булып эшләй ине инде. Ҡайҙа хәҙерге баш мөхәррирҙәр кеүек яҡшынан-яҡшы фатирҙарға ынтылыу – Ибраһимов урамынан бер тыҡрыҡҡа барып ингәс, ағас йорттоң ике бүлмә йораты булған подвалында йәшәй. Тышҡа өҫкө рамдары ғына күренеп торған тәҙрәләрҙән рәтле яҡты төшмәгәнгә, көндөҙ ҙә ут яҡтыртып ултырырға тура килә. Эргәләрендә Хәким ағайҙың ҡәрендәше Әнисә менән Линаның һеңлеһе Рәйлә лә тора. Лина иһә радиокомитетта машинистка булып эшләй. Уның һәр саҡ эңер ҡараңғылығы китмәгән, дымсыл һауалы ошо торлаҡтарын тырышып-тырышып йыйыштырыуы, уға аҙ булһа ла яҡтылыҡ, күркәмлек өҫтәргә тырышыуы хәтерҙә. Миңә хатта уларҙың тормошо бик тә түңәрәк, бөтәһе лә етеш һымаҡ тойола ине. Хәҙер шул көндәрҙе хәтерләйем дә, бигүк рәхәт йәшәмәгәндәрҙер, киң күңелле, кешелекле булыуҙары уларҙың тормошона матурлыҡ, яҡтылыҡ өҫтәгәндер, тигән фекергә киләм. Журналда баш мөхәррир булһа ла, Хәким ағайҙың эш хаҡы бер мең ике йөҙ һум ғына ине, ә инде машинистка алған аҡсаны әйтеп тораһы ла түгел. Тик, ҡасан килһәм дә, мин уларҙың етешһеҙлеккә зарланғанын ишетмәнем...

Ҡулъяҙма күтәреп килгәнемдә иһә уларҙа өс көн торҙом. Повесымды ике төндә Хәким ағайға уҡып ишеттерҙем. Ул оҙон-оҙаҡ нотоҡ уҡыманы, әҫәрҙе камиллаштыра төшөү өсөн таһыллы кәңәштәрен бирҙе лә:

– Күҙгә күренерҙәй әйбергә тотоноп дөрөҫ эшләгәнһең. Ижадта ана шулай ҙурыраҡ маҡсаттар ҡуйып йәшәү кәрәк, – тигән дәртләндергес һүҙҙәрен әйтте.

Улай ғына ла түгел, элегерәк яҙып һалып ҡуйған хикәйәләремде лә алып килгәйнем, шуларҙың “Исемһеҙ бейеклек” һәм “Яҡшы һабаҡ” тигәндәрен алып ҡалды ла уларҙы “Әҙәби Башҡортостан”дың мең туғыҙ йөҙ илле алтынсы йылдағы дүртенсе һанында баҫып та сығарҙы.

Үҙемде ҡыҫып торған икеләнеү һәм билдәһеҙлектән ҡотолоп ҡайттым да повесымды өр-яңынан яҙырға ултырҙым. Яҙғы каникул мәлендә – хәҙер инде ниндәйҙер йәшерен өмөт һәм яҡты хыялдар менән – йәнә Өфөгә юлландым. Дәфтәр битенә яҙылған ҡулъяҙманы был юлы Хәким ағай үҙе уҡып сыҡты. Аҙаҡтан, ғәҙәтенсә һаран йылмайып:

– Мин ҡушмағандарҙы ла эшләп ташлағанһың бит, – тип хуплаған һымағыраҡ һүҙҙәрен әйтте лә өҫтәне: – Мин бер-ике көн редакцияға бармайым, өйҙә ултырып эшләй торған эшем бар. Ә һин ҡулъяҙмаңды Ғәйнан Әмиригә алып барып бир. Ҡарап, машинкаға тапшыра торһон.

Был иһә әҫәрем хупланыу ғына түгел, уға киң донъяға юл асыла тигән һүҙ ине.

Ғәйнан Әмири ул саҡта журналдың проза бүлеген алып бара ине. Журнал редакцияһына барғас, Хәким Ғиләжевтың һүҙҙәрен тулыһынса әйтергә тартындым. Тәүҙә редакцияға килмәй, тура Ғиләжевҡа барыуымды оҡшатмаҫтар кеүек. Шаҡмаҡ дәфтәр биттәрен оҙонсалай ҡуйып, һәр шаҡмаҡ һайын тығыҙ итеп яҙылған ҡулъяҙмамды Ғәйнан Әмиригә:

– Хәким Ғиләжев уҡып сыҡҡан (әйтерһең, уның уҡығанын мин күрмәгәнмен), һеҙгә бирергә ҡушты, – тип тапшырҙым.

Ғәйнан ағай миңә аптыраған һымағыраҡ ҡараны ла, ҡатырға папкаға һалған дәфтәр биттәрен асҡылап ҡарағас:

– Быны машинкала баҫтырып килтерһәң, арыу булыр ине, – тип күңелемә шик һала биреп ҡуйҙы ла аҙыраҡ өндәшмәй ултырҙы, шунан теш араһынан ғына сығарып әйтте: – Ярар, почеркың арыу икән дә былай.

“Зөһрә” повесы “Әҙәби Башҡортостан” журналының алтынсы, етенсе һандарында баҫылып сыҡты. Ғәжәп бәхетле, яҡты яҙмышлы әҫәр булды ул. Хәҙер ҡарайым да аптырайым: төрлө матбуғат биттәрендә уның тураһында бер-бер артлы ете мәҡәлә донъя күргән, хатта Рәшит Шәкүров “Литературная газета”ла рецензия баҫтырҙы. Уларҙың бөтәһендә лә тиерлек ыңғай фекер әйтелгән.

Әммә әтнәкәһеҙ ҙә булманы. Повестың һис ниндәй тотҡарлыҡһыҙ редакцияға килеп инеп, бик тиҙ баҫылып сығыуы ҡайһы берәүҙәргә оҡшап етмәгән, буғай. Бәлки, повесым баҫылғандан аҙаҡ ике йыл үткәс, төпкөлдәге ауылда йәшәп ятҡан ерҙән Өфөгә килеп, “Әҙәби Башҡортостан” журналында яуаплы сәркәтип булыу менән бергә проза бүлеген дә алып барыуымды өнәп еткермәүселәр булғандыр. Гәзит, журналдарҙа бер-бер артлы хикәйә, очерктарым донъя күрә, Яҙыусылар союзының проза секцияһы бюроһында сәркәтип (Шакир Насиров ағай рәйес ине), йәш яҙыусылар менән эшләү комиссияһында ағза (рәйесе – Сәғит Агиш).

Әҙәм балаларында көнсөллөк тигән ике ослораҡ бер сифат бар. Уның бер яғы ирҙәрсә намыҫсанлыҡ, тағы ла тырышыбыраҡ, яҡшыраҡ эшләү, матурыраҡ йәшәү сәме уята, кеше тигән исемде юғарыраҡ күтәрә. Ә икенсе бер яғы, ҡара яғы, – тормошта яманлыҡ, хаслыҡ, күрә алмаусылыҡ тигән боҙоҡ күренештәрҙә сағылыш таба. Кеше күңелен ҡорт кеүек кимереүсе ошо хайуани сифат әүәл-әүәлдән батшаларҙы ла, ҡолдарҙы ла үҙ-ара талаштырған, хатта ил менән ил араһында ыҙғыш, һуғыштар, үлтереш-ҡыйралыштар килтереп тыуҙырған. Ҡара көнсөллөк – кешеләрҙе һәм кешелекте һәр саҡ, ҡуйынына һырышҡан ҡара йылан шикелле, айырылғыһыҙ оҙата килгән иҫ китмәле яман күренеш. Быны үҙендә тоймаған, уның яман эҙемтәләренән йөрәге һыҙламаған кеше бармы икән?

Мине лә ситләп үтмәне был хәл, дөрөҫөрәге, ғүмер буйы артымдан ҡалмай оҙата килде. Тағы ла асығыраҡ итеп әйткәндә, аҡ көнсөллөк менән – „иң яҡшы эшләгәндәрҙән ҡалышмаҫҡа, улай ғына ла түгел, шуларҙан да яҡшыраҡ эшләргә“ тигән маҡсат менән йәшәргә тырыштым. Бындай сифат оҙаҡ йылдар буйы тәрбиәләнәлер. Хәтерләйем: малай саҡтан бесәнде бүтәндәрҙән шәберәк сабырға, үҫкәс инде, бесән өмәләрендә тиҫтәләгән кешеләрҙең алдынан төшөп сабырға һәм ал бирмәҫкә ынтылдым. Бура бурағанда үҙ нәркәмде бүтәндәрҙән алдараҡ эшен бөтөрөп һала инем. Маҡтаныбыраҡ әйткәндә, үҙемде һәр даим оло бәйгелә ҡатнашыусы һымаҡ тойҙом. Мин ярыш барған стадиондарға йөрөргә, телевизорҙан һәр төрлө спорт ярыштарын ҡарарға яратам. Ҡатыным, балаларым был ғәҙәтемде аңлап еткермәй, шунан ниндәй ҡыҙыҡ табаһың, тиҙәр. Был минең күңелемдә ярыш дәрте ҡуҙғата, тип әйтергә итәм дә өндәшмәйем. Аңлап еткермәйәсәктәр...

Аҡыл һатыуға, дөйөм фәлсәфәгә төшөп киттем, шикелле. Ярай, “Зөһрә” повесына бәйле хәлгә әйләнеп ҡайтайыҡ. Тормош һәр саҡ һин уйлағанса ғына бармай. Әлеге бәйгелә яңылыш баҫҡан, һөрөнөп йығылған саҡтарың да була. Бигерәк тә йәш саҡта – осоноп-ашҡынып, бер ынтылыуҙа бөтәһен дә ҡосағыңа алырҙай булып йөрөгән, саманы онотоп киткән мәлдәрҙән дә ҡотолоп булмай. Илле туғыҙынсы йыл аҙаҡтарында мин дә юлыҡтым бындай хәлгә. Яңылыштым, ҙур ғына хата ебәрҙем. Һәм был һөрләгөүемдә бер кемде лә ғәйепләргә хаҡым юҡ ине, үҙ гонаһымды үҙем күтәрергә әҙер инем. Ә инде минең тәртипте йыйылышта тикшергәндә өлкән үк ағайҙарҙың уны бишкә төрләндереп, бөтөнләй хаттинаштырып һөйләүҙәре ныҡ аптыратты ла, кәмһетте лә мине.

Иң тәүҙә Ғәйнан Әмири һөйләне. Үҙен әллә кемгә һанап йөрөй башланы, бигерәк осондороп ебәрҙек. Ә бит мин уның дәфтәр битенә сыймаҡлаған повесть йоратының ҡулъяҙмаһын лупа менән уҡып тигәндәй башынан аҙағынаса төҙәтеп сыҡтым, ти. Аҙаҡтан мин “Зөһрә”нең ҡулъяҙмаһын журнал архивынан

эҙләп таптым. Унда Ғәйнан Әмириҙең ун ике урында ҡулы тейгән. Уларҙың дүртәүһе дөрөҫ түгел – телде белмәүенең бәләһе. Һәм мин ҡулъяҙманы иҫтәлек өсөн үҙемә алып ҡалдым. Хәҙер ул Ҡолғоналағы ижад йортонда һаҡлана.

Ул саҡта Яҙыусылар союзының яуаплы сәркәтибе булып эшләгән Нәжибәк Хафизов иһә, нindәй яҙыусы ул Ноғман Мусин? Динис Исламов, Фәрит Иҫәнғолов кеүек талантлы прозаиктарыбыҙ бар саҡта, былдайҙарға арабыҙҙа урын булмаҫҡа тейеш, тип үк ебәрҙе. Бына бит нисегерәк. Ә бит үҙенең, Союзда яуаплы вазифала эшләп йөрөһә лә, ҡәләм тигәне самалы ине. Филармонияла эшләүсе Кәтүк менән Бағанайға көлкөлө сценарийҙар, скетчтар яҙа, дубляж өсөн ебәрелгән фильм сценарийҙарын башҡортсаға ауҙара (былың иң еңел аҡса эшләй торған кәсеп икәнен аҙаҡтаныраҡ белдем). Уның йәнә бер яратҡан шөғөлө – спорт ярыштарына йөрөү. Ошо хәл беҙҙең араны арыу уҡ яҡынайтып та ебәргәйне.

Хәким Ғиләжев журналдың йөкмәткеһен төрләндереү, яңынан-яңы рубрикалар асыу, ошо юл менән журнал уҡыусылар һанын, тимәк, тиражды ла арттырыу юлдарын эҙләй ине. Шуға, “Спорт” тигән рубрика асып, шунда республиканың күренекле спортсылары тураһында очерктар бирһәк, нисек булыр, тигән тәҡдимемде лә ул хуплап ҡаршыланы. Мин был рубриканы алып барыу өсөн автор ҙа таптым: ысын мәғәнәһендәге көйәрмән Нәжибәк Хафизов. Ул футболсылар, ул йылдарҙа бик көсәйеп киткән мотоуҙышсылар, боксерҙар һәм башҡа төр спортсылар тураһында яҙырға тотоноп китте. Уның ҡулъяҙмаһын ысын мәғәнәһендә баштан алып аҙағынаса мөхәррирләргә, машинкала ҡабат баҫтырып алырға тура килә ине. Нәжибәк абзыйым иһә рәхмәт йөҙөнән мине һәр төрлө ярыштарға саҡыра, стадионға Союздың “Москвич”ына ултыртып алып бара, кеҫәһендә хәмерле бер „бәләкәйе“ лә була ине. Мин хата эшләп, ауыр хәлгә тарығас, бөтөнләй икенсе яҡтан килтереп бәрҙе.

Үҙем бик ныҡ ихтирам иткән, бәләкәй саҡтан бер әҫәрен дә ҡалдырмай уҡып барған Сәғит Агиш ағай иһә тағы ла нығыраҡ ғәжәпкә ҡалдырҙы. „Мин был егетте күптән беләм, – тип таянып йөрөгән таяғы менән миңә табан күрһәтеп һөйләй башланы ла иҫ китмәле һүҙен әйтте: – ул студент ваҡытында уҡ парктағы араҡы киоскылары төбөн тапай торғайны“.

Бына, әй, мин әйтәм, ҡайҙан белә ул минең студент ваҡытты? Мин бит Стәрлетамаҡта уҡыным. Уның был һүҙҙәрҙе ҡайҙан алып әйтеүен уйлап йөрөй торғас, бер ваҡиға иҫкә төштө.

Мең туғыҙ йөҙ илле беренсе йылда Стәрлетамаҡта институтты бөтөп, оло маҡсатыма ирешкәндәй тыныс ҡына ауылда йөрөп ятҡанда, Хәким Ғиләжевтан телеграмма килеп төштө: „Тиҙ генә Өфөгә килеп ет“, – тигән. Әсәйем менән генә йәшәй инек, аҡса килер ер юҡ. Әсәйем Әүжәнгә алып барып һатып, шуның аҡсаһына бесән ваҡытына он алырға тип, үҙебеҙ ҙә ашамайынса, май йыя. Ә Хәким ағай Өфөгә саҡырыу ебәргән. Юллыҡ аҡсаны ҡайҙан табырға? Ниңә саҡырҙы икән Ғиләжев ағай? Хәлде әсәйемә әйткәс, ул һәр ваҡыттағыса рәтен тапты: Гөлбаныу инәй иҫке ҡуныҫҡа яңы баш һалып, итек тегергә биргән икән. Әле эше бөтмәһә лә, шул эшенә тейешле хаҡты һорап алып ҡайтты. „Саҡырғас, барып ҡайт. Әҙерәк аҡсаң ҡалһа, берәй таҡта сәй, аҙерәк шәкәр алырһың“, – тине.

Ғиләжев ағай иһә, Мәскәүгә – Әҙәбиәт институтына уҡырға бар, тип әйтергә саҡырған. Был турала минең ентекле үк яҙғаным бар, әле һүҙ икенсе бер нәмә тураһында. Мәскәү институтына ебәрергә документтарҙы әҙерләп йөрөгән арала, Ғиләжев ағайға эйәреп, “Әҙәби Башҡортостан” журналы редакцияһына барып индем. Ул саҡта бында Маҡсүт Сөндөклө, Назар Нәжми, Ғәйнан Әмири ағайҙар эшләй ине. Ә Сәғит Агиш – мөхәррир.

Әҙерәк һөйләшеп ултырғас, Ғиләжев ағай Сәғит Агишты эйәртеп алып сыҡты. Минең Өфөнө лә йүнләп белмәгән саҡ, барып йөрөр урыным да юҡ, ирекһеҙҙән улар артынан тағылдым. Ағайҙарым иһә Матросов исемендәге ял паркына барып инделәр ҙә ҡапҡаға яҡын уҡ торған киоск төбөнә туҡтанылар. Хәким Ғиләжев стакандарға араҡы һалдыра башлағанды күреү менән, күҙҙәренә оронсоҡ булып тормайым тип, артабаныраҡ үтеп китеү яғын ҡараным. Икенсе бер киоскыла өс тингә морс һалдырып эсеп, ары-бире йөрөп әйләнгәс, кире килгәнемдә, ағайҙарым апаруҡ ҡыҙарынып-бүртенеп, телдәре асылып тора ине. Сәғит Агиш ҡапыл көтөлмәгән хәбәр әйтте:

– Ҡарале, ҡусты кеше, ағайыңдарҙы аҙыраҡ һыйламайһыңмы?

Аптырап ҡалдым. Араҡы эсереүҙе һораймы икән ни? Кеҫә төбөндә ятҡан аҡсаны күңелдән генә иҫәплəй һалып алдым. Юл сығымынан әҙерәк артып ҡала, шикелле. Әсәйемдең "Аҡсаң ҡалһа, берәй таҡта сәй алырһың" тигән һүҙҙәре лә иҫкә төштө. Шулай ҙа сәм-намыҫ төрттө: шундай ағайҙар менән йөҙ грамм төшөрөүе үҙе ни тора! Өс стаканға йөҙәр грамм һалдырып, бейек түңәрәк өҫтәлгә тыҡ иттереп килтереп ултырттым. Күңелгә рәхәт булып ҡалды. Баҡсанан сығып, Ленин урамынан атлағанда ла үҙемде ошондай ағайҙар менән тиң итеп күрә инем хатта. Тик әсәйем өмөт иткән таҡта сәй генә булмаясаҡ...

Сәғит Агиштың йыйылышта әйткән һүҙҙәре иҫкә төшөрҙө миңә был хәлде. Бик хәтерле кеше ине Сәғит ағай, үҙе күргәнде, ишеткән-белгәндәрҙе ғәжәп бер оҫталыҡ менән, булмағанын да үҙенән ҡуша биреп, әммә ышындырырлыҡ итеп һөйләй торғайны. Моғайын, ана шул Матросов паркында булған хәлде иҫенә төшөргәндер.

Быларҙы кемгәлер хәтерем ҡалып, эсемдә кенә йөрөткән өсөн һөйләмәйем мин. Әҙәм балаларының ни тиклем төрлө-төрлө булыуын, кәрәк саҡта хатта үҙ-үҙен аямай бер-береһенә ярҙам итеүен, яйы сыҡҡанда көнсөллөк хисен ҡандырыу өсөн ярҙан этергә лә әҙер тороуын күрһәтеү өсөн генә яҙам. Мин, мәҫәлән, Агиш ағай әйткән һүҙҙәрҙе тиҙ оноттом, уға гел ихтирам менән ҡараным. Уның сағыу таланты, бынамын тигән әҫәрҙәре ваҡсылланыу тигән нәмәне ситкә тибәрә ине. Миңә хатта, ағай мәрхүм булғас, уның кәүҙәһен тимер юл дауаханаһы моргынан фатирына алып ҡайтырға, ваннаһына индереп йыуышырға, таҙа кейемдәрен кейҙереп, табутҡа һалышырға тура килде. Шул саҡта: “Ошо бәләкәй генә кәүҙәгә ни тиклем оло, матур уй-тойғолар, ҡоромаҫ талант һыйған”, – тип аптырағандай иткәйнем.

Ғәйнан Әмириҙең дә һүҙҙәрен оноҡҡан булыр инем. Уның “Мораҙым” повесын Һәҙиә Дәүләтшинанан „урлауы“ тураһында һүҙ ҡуйырғас (был мәсьәлә тәүге тапҡыр Мостай Кәрим рәйес булған саҡта уҡ идара ултырышында тикшерелгәйне), был кешегә ҡарата ҡарашым ҡырҡа үҙгәрҙе. Бының етди сәбәбе бар ине.

“Мораҙым” тураһындағы бәхәстәр, бер баҫылып, йәнә тоҡанып, байтаҡ йылдар дауам итте. Был хаҡта Ғәзим Шафиҡов яҙып сыҡты, Яҙыусылар союзында һөйләшеүҙәр булды, мәсьәләне һәр яҡлап тикшереү өсөн комиссия төҙөлдө, эш судҡа барып етте, ләкин ул аҙағынаса хәл ителмәгән көйө ҡалды. Сөнки бындай сетерекле күренеште иҫбатлау – бик тә ҡыйын хәл. Икенсенән, уны ентеклерәк тикшереү ҙә етмәне, шикелле. Мәҫәлән, яҙыусының архивында повесть ҡулъяҙмаһының ҡараламалары юҡмы? „Мораҙым“ повесы ҡасан, ҡайҙа, ни рәүешлерәк донъя күргән? Былар менән ҡыҙыҡһыныусы булманы. Ә ул иң тәүҙә “Әҙәби Башҡортостан” журналы биттәрендә донъя күрҙе һәм уҡыусылар тарафынан бик яратып, әйтер инем, быға тиклем бер әҫәргә лә ҡарата булмаған күтәренкелек менән ҡабул ителде. Редакцияға повесты һәр яҡлап маҡтап хаттар яуҙы, профессиональ тәнҡитселәр уны, өр-яңы бер күренеш, әҙәбиәтебеҙҙең уңышы, тип атаны. Авторҙы әҫәр буйынса үткән кисәләргә лә йыш саҡырҙылар.

Ул саҡта мин “Әҙәби Башҡортостан” журналы редакцияһында эшләй, юғарыла әйткәнемсә, яуаплы сәркәтип булыу менән бер рәттән, проза бүлеген дә алып бара инем. Берҙән-бер көн баш мөхәррир Хәким Ғиләжев:

– Ғәйнан Әмири ҡыҙыҡлы ғына әйбер тәҡдим итмәксе. Шуны йәһәтләп алдағы һандарға әҙерләргә кәрәк, – тине.

Әле бер кем дә, мөхәррир үҙе лә уҡымаған, күрмәгән әйберҙе шулай баҫырға әҙерләүҙең сәбәбен аңлаған кеүекмен. Редакция папкаһында ул мәлдә күҙгә күренерҙәй күләмле проза әҫәре юҡ ине.

Күп тә үтмәй, редакцияға Ғәйнан Әмири килеп инде лә алдыма ҡатырға папка һалды.

– Бына, Ноғман, – ти, – теге саҡта һин миңә повесыңдың ҡулъяҙмаһын тоттторғайның, хәҙер бына мин һинең хөкөмгә әҫәремде тапшырам.

Папканы асып ҡарайым: „Бит һандары күп булмаҒас, был бик бәләкәй әйберме икән ни?“ – тип уйланым. Зәңгәрһыу төҫтәге форматлы ҡағыҙға эре хәрефтәр менән һирәк итеп яҙылған. Һыҙып, төҙәтеп бысратылған урындар күренмәй. Үҙем бик йыш итеп, ваҡ хәрефтәр менән яҙғанғамы, ҡулъяҙма миңә бик ҡабалан, арамъя яҙылған, әллә ни кәрәге булмаған ҡағыҙҙарҙы хәтерләтте. Уны машинкала баҫҡанда биш-алты битенән көскә бер бит сығалыр, моғайын. Башымдан шундайыраҡ уйҙар үткән арала, Ғәйнан ағай:

– Әҫәремде ҡараламанан күсереп яҙып ултырам. Мин һиңә өлгөргән тиклемен килтереп торормон, һин уны ҡарап, Йәмиләгә машинкаға бир. Уның менән һөйләшкәнмен, баҫҡан хаҡын ҡайтарырмын, – тине лә өҫтәп ҡуйҙы: – Хәким йәһәтләргә ҡушты бит.

Мөхәррирҙең күрһәтмәһе булғас, әлбиттә, бүтән эштәрҙе ситкә ҡуйып, ошо ҡулъяҙмаға тотондом. Ғәжәп шыма һәм образлы тел менән яҙылғайны ул. Сюжет мауыҡтырғыс, тәүге биттәренән үк иғтибарҙы йәлеп итә. Иҫтә ҡалырлыҡ тормош деталдәре, геройҙарҙың сағыу портреттары. Телде яҡшы белгән, һәр һүҙҙе уйлап, урынлы яҙған оҫта ҡул икәнлеге һиҙелеп тора.

Ана шулай Ғәйнан Әмири ҡулдан яҙылған күсермәләрен әҙ-әҙләп килтерә, Йәмилә апай машинкала баҫҡандарҙы йәнә бер тапҡыр уҡып сығам. Шул саҡта Ғәйнан Әмириҙең ҡайһы бер сәйерерәк ҡылыҡтары иҫтә ҡалған. Ул эргәмә килеп ултыра ла, һин миңә ҙур ярҙам күрһәтәһең инде, ярай, ижади дуҫлыҡ шулай була ул, тип сөсөләнеп ала, шунан һорай башлай: “Был әҫәрҙә яҙған ваҡиғаларҙы миңә Маҡар районында прокурор булып эшләгән кеше һөйләгәйне. Шуға күрә һеҙҙең яҡ һөйләше менән яҙырға тырыштым. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыуыма шикләнеп тә ҡуям. Ҡайындан һыҙырып алған ҡайырыны туҙ тип әйткәйнем, беҙҙең яҡта туйыҙ тиҙәр. Хаталанманыммы икән? Шунан эшләнгән һауытты тырыз тиҙәрме ни? Ишетеүем буйынса, бүртә ат тип алдым да, уның төҫөн асыҡ ҡына күҙ алдына килтермәйем”, – тип серге, кейеҙ, көйөҙ тигән һәм башҡа һауыт-һабаларҙың аталыштарының дөрөҫ ҡулланылыу-ҡулланылмауын белешә. Ул саҡта ни мин, уны-быны аңламағас, уға ихлас итеп яуап бирергә тырышам. Аҙаҡтан төшөндөм: ул Һәҙиә Дәүләтшинаның телен аңлап еткермәгән икән.

Йәнә күңелгә шикле уй тыуҙырған бер хәл иҫкә төшә. Ул Йәмилә апай машинкала баҫып, мин уҡығандан аҙаҡ, һәр ҡулъяҙма битте кире алып китергә теләне. Тәүҙә, әҫәр тулыһынса машинкала баҫылып бөтһөн әле, тип бирмәй торҙом. Ул миңә күсермәләрен йыйып барыу өсөн яңы ҡатырға папка килтереп бирҙе лә, күсереп яҙыу өсөн байтаҡ көс түгелгән бит, бик һаҡлап тот инде, тине. Ә инде әҫәр машинкала баҫылып бөткәс, ул күсермәләрен алырға тип килде. Ә редакцияла әүәлдән килгән бер тәртип бар: әҫәрҙең типографияға киткән экземплярынан тыш, төп нөсхә редакцияла һаҡланырға тейеш. Шуға күрә мин

ҡулъяҙманы кире ҡайтарыуҙан баш тарттым. Ул иһә, был дөрөҫ түгел, хаҡың юҡ, фәлән дә төгән, тип ҡыҙып уҡ китте. Журналдың мөхәррир урынбаҫары Мөхөтдин Тажи ағай:

– Ниңә юҡҡа ныҡышаһың әле, Ғәйнан, Нөғәмән дөрөҫ әйтә, – тип һүҙ ҡыҫтырғайны: „Минең ҡулъяҙмала һинең ни ҡыҫылышың бар!" – тип екереп үк ебәрҙе.

Мөхөтдин ағай бик баҫалҡы кеше ине. Мин уның кемгә булһа ла тауыш күтәреп өндәшкәнен бер ваҡытта ла ишетмәнем. Әле лә ул Ғәйнан Әмири менән иргәләшмәне, урынынан тороп, өҫтәле тартмаһынан ҡыҙыл ҡаплы "Прима"һын алды ла:

– Нөғәмән, – ул миңә беҙҙең яҡтағыса шулай өндәшә ине, – ҡулъяҙманы үҙеңдә тот, – тип сығып китте.

Ғәйнан Әмири, мыҫҡыллы йылмайып:

– Харап, бирәү зам, имеш,– тип урынынан тороп, иҙәндә ары-бире йөрөп әйләнде. Миңә уҫал ҡарап: – Тиҫкәре кеше икәнһең, – тине лә ишекте ҡаты ябып сығып китте.

Әммә күсермәләрен барыбер кире алды ул. Ғиләжевҡа мөрәжәғәт иткән, күрәһең, мөхәррир, биреп ебәр, машинкала сыҡҡаны бар бит, тигәс, мин дә артыҡ ҡаршылашып торманым.

Ғәйнан Әмириҙең күсермәләрҙе ни өсөн редакция архивында ҡалдырмаҫҡа тырышҡанын һуңғараҡ аңланым. Уның ҡасан да булһа үҙенең ғәйебен раҫлаусы "вещдок" булыуынан ҡурҡҡандыр...

Йәнә лә бер күренеш "Мораҙым"дың Ғәйнан Әмири ҡулы менән яҙылмауын раҫлай. Ул йыйылыштарҙа, уҡыусылар менән осрашыуҙар ваҡытында күп тапҡырҙар „Мин повестың икенсе китабын яҙасаҡмын" тигән вәғәҙәләр бирҙе. Ибраһим Ғиззәтуллиндың илле йәшлек юбилей кисәһен үткәреү өсөн уның тыуған ауылы Түбәнге Әрмет ауылына барғанда иһә Ибраһим ағайға: „Икенсе китабымдағы Мораҙымдың прототибы һин буласаҡһың",– тигән һүҙҙәре лә хәтерҙә. Уның, Мораҙым һуғыштан ҡайтҡас, шахтер булып эшләйәсәк, тип Күмертауға ижади командировкаларға барып йөрөүен дә беләм. Ләкин ул икенсе китапты яҙа алманы. Ә бына уның Сталинград һуғышы тураһындағы "Осҡондар осоп һүнә" тигән повесын мөхәррирләгәндә "Мораҙым" менән был повестың ике ҡул тарафынан яҙылыуын күреп аптырағайным. "Осҡондар осоп һүнә"не автор машинкала баҫтырып килтергәйне. Уға бик күп төҙәтмәләр индереп, сыбарлап бөтөлдө һәм байтаҡ биттәре ҡайтанан машинкала баҫтырылды. Бәлки, төҙәтелгән төп нөсхә журнал архивында һаҡланалыр.

Үткәндәрҙе хәтерләгәндә, йәмһеҙ, күңелһеҙ ваҡиғаларҙы ҡағыҙға төшөргө лә килмәй. Үҙеңде һаҫыған сүплектә ҡаҙына башлаған һымаҡ тояһың. Шулай ҙа "Мораҙым" әҫәренә бәйле үҙем белгәндәрҙе эсемдә ҡалдырғы килмәне. Егерменсе быуат башҡорт совет әҙәбиәтендәге иң ғауғалы хәл, ниндәй генә шау-шыуҙар ҡубармаһын, аҙағынаса асыҡланманы бит – Һәҙиә Дәүләтшинаға авторлыҡ ҡайтарылманы. Быны киләһе быуындар ҙа белергә тейеш.

Әлбиттә, әҙәби тормошта, ижади мөхиттә иҫтә ҡалырлыҡ матур, фәһемле, ҡыҙыҡлы күренештәр күберәк булды. Илле һигеҙенсе йылдың ғинуарында, мәктәптә ҡышҡы каникулдар башланғас, ҡулъяҙма күтәреп тағы Өфөгә юлланыуҙы оноторлоҡмо ни? Ул йылда ҡыш бик һыуыҡ килгәйне. Петровскиға тиклем илле саҡрымды йәйәү килдем. Унда МТС-тың Стәрлетамаҡтан яғыулыҡ ташыусы тракторының санаһына тағылдым. Этләнеп йөрөүем бушҡа булманы. "Күксә урманында" тигән повесым балалар тормошонан ине. "Пионер" журналы редакцияһына барғайным, мөхәррир Шәриф Бикҡол ағай бик ихлас ҡаршы алды, тиң күреп, ҡыҙыҡһынып, хәл-әхүәлдәрҙе һорашты. Бына ошо тәүге тапҡыр яҡындан осрашып танышыу яҡты бер мәл булып хәтерҙә ҡалған, һәм

Шәриф Бикҡол ағайға ҡарата шул саҡта тыуған ихтирамлы ҡарашым бер ваҡытта ла үҙгәрмәне.

Ҡулъяҙма алып килеүемде әйткәс иһә, ул секретарь-машинисткаһына сәғәт икегә редколлегия ағзаларын йыйырға ҡушты. „Шул тиклем ерҙән килгәсһең, эште оҙаҡҡа һуҙмайыҡ. Повесыңды редколлегияла уҡып ишеттерерһең“, – ти. Хәтеремдә ҡалыуынса, төш ауыуға Сәғит Агиш, Рәйес Ғабдрахманов, Фәрит Исәнғолов һәм редакция хеҙмәткәрҙәре мөхәррир бүлмәһенә йыйылды. Ҡулъяҙманы, бер тапҡыр тәнәфес яһап, өс сәғәткә яҡын уҡыным. Шунан инде фекер алышыуҙар башланды. Ғабдрахманов менән Исәнғолов нигеҙҙә ыңғай фекер әйттеләр, редакция хеҙмәткәрҙәре лә һөйләне. Аҙаҡ килеп Сәғит Агиш һүҙ алды. „Әҫәр балалар өсөн ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә, теле лә шыма,– тип шулай уҡ ыңғай фекерҙәр әйтеп торҙо ла, – шулай ҙа повесты баҫып сығарырға ҡабаланмайыҡ әле. Ата кешенең, ул һуғыштан ҡасып ҡалған хәлдә лә, үҙ улын атып үлтереүе уғата аяуһыҙлыҡ түгелме? Автор ошо хаҡта уйлап ҡараһын ине,“– тип һүҙен йомғаҡланы. Аҙаҡ килеп, бүтәндәр ҙә уның ошо фекере менән килеште, үҙемдең күңелдә лә шик яралды.

Нисек кенә булмаһын, Өфөнән күтәренке күңел менән ҡайттым. Күренекле яҙыусыларҙың ҡулъяҙмамды тикшереүе үҙе генә лә миңә ҡанат ҡуйғайны. Оҙаҡҡа һуҙмай, мин был әҫәрҙе яңынан ҡарап сыҡтым, һәм ул “Пионер” журналының дүрт һанында донъя күрҙе.

Әҫәрҙәрҙең яҙылыу, унан һуң ҡулъяҙманы кемдәр уҡып, нисегерәк донъя күреү тарихын һөйләп бөтөү мөмкин түгел. Мин һәр романымды проза секцияһы ултырышында тикшереүгә ҡуйҙым, повестар редколлегия ултырыштарында тикшерелә ине. Унда кемдәрҙән ниндәй генә һүҙ-кәңәштәр ишетһәм дә, мин уларға ғүмерем буйы рәхмәтлемен. Сөнки улар һис ваҡытта ла, хатта яңылыш фекер әйткәндә лә, яманлыҡ теләмәгәндер, миңә ярҙам итеү йөҙөнән һөйләгәндәрҙер. Әҙәби ижад эшендә әҫәрең баҫылып сыҡмаҫ элек үк уның тураһында ҡәләмдәштәр фекерен ишетеү әйтеп бөткөһөҙ файҙалы булыуына иманым камил. Бер ауыҙ йылы һүҙ ҙә ҡәҙерле ҡайһы саҡта.

Ҙур күләмле әҫәрҙе уҡып ваҡыт әрәм итергә һәр кем әҙер тормай ине. Тәнҡит фекере әйтеп ара боҙоуҙан, яманатлы булыуҙан ҡурҡҡандар ҙа бар ине. Миңә мең туғыҙ йөҙ илле һигеҙенсе йылдан алып ҡырҡ йыл буйы проза секцияһы бюроһында ағза булырға тура килде. Әкрәм Вәли, Шакир Насиров, Фәрит Исәнғолов, Әнүр Вахитовтар төрлө йылдарҙа бюро рәйесе булды, үҙем өс тапҡыр ошо вазифаны башҡарҙым. Шунлыҡтан кемдәрҙең ҡәләмдәштәренең ижади яҙмышына нисек ҡарауын да, кемдәрҙең үҙ әҫәренә ҡарата әйтелгән фекерҙәрҙе нисек ҡабул итеүен дә арыу уҡ яҡшы беләм. Ошо урында әҙәбиәтебеҙ, прозаиктарҙың яңы әҫәрҙәренең артабанғы яҙмышы тураһында ғүмере буйы борсолоп, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған дуҫым – яҙыусы һәм оло ғалим Әнүр Вахитов хаҡында айырым туҡталып үткем килә.

Беҙ уның менән “Әҙәби Башҡортостан” журналы редакцияһында бер үк ваҡытта – ул университетты бөткәс, мин ауылдан килеп – эшләй башлағайныҡ. Шул саҡтан алып Әнүр яҡты донъянан киткәнгә тиклем ижадташ дуҫтар булып йәшәнек.

...Мең туғыҙ йөҙ алтмыш беренсе йылдың көҙө. Минең торған төйәк – Фрунзе (хәҙер – Зәки Вәлиди) урамындағы илле һигеҙенсе йорттоң сарлағы. Был сарлаҡтың яҙыусыларҙан бәхете булды. Унда миңә тиклем Абдулхаҡ Игебаев, Рәми Ғариповтар йәшәп киткән. Минән аҙаҡ Әсхәл Әхмәтҡужин йәшәне. Фатирһыҙ йөрөгән кеше өсөн аулаҡ ҡына торлаҡ ине ул.

Фәһимә өс һәм бер йәшлек балаларыбыҙҙы ҡарап өйҙә генә тора ине әле. Мин иһә форсат барҙа Республика китапханаһына китәм һәм унда аулаҡ урын табып,



*РСФСР яҙыусыларының*
*Өфөлә үткән ойоштороу пленумында.*
*Һулдан уңға: Ғәли Ибраһимов, Ғабдулла Әхмәтшин, Ш. Вахитов (журналист), Ноғман Мусин, Шакир Насиров, Ҡадир Даян. 1958 йыл, март.*

яҙырға ултырам. Берҙәнбер көн ана шунда “Ауылым юлы” повесын яҙып бөтөп, шатланып ҡайтып инһәм, өйҙә ҡунаҡтар көтөп ултыра – ҡатыны Дәүриә менән Әнүр килгән. Күңел тағы күтәрелеберәк китте.

Әҙерәк донъя хәлдәре тураһында һөйләшеп ултыра биргәс, Әнүр:

– Китапханала ни эш бөтөрҙөң? – тип һорай ҡуйҙы.

Бүтән саҡта, әҫәр яҙылып бөткәс, нисектер күңел бушанып ҡала, хатта нимәнелер юғалтҡан һымаҡ, ауараланыбыраҡ та, уның нисек килеп сығырына шикләнеберәк тә йөрөлә, машинкала баҫырға бирмәҫ борон иғтибар менән ҡабат уҡып сығыла, төҙәтмәләр индерелә ине. Был юлы иһә “Ауылым юлы”ның һәйбәт буласағына тәүҙән үк, һуңғы нөктәне ҡуйғас уҡ, ышаныс тойғоһо уянғайны. Сөнки уны башынан аҙағынаса уйлап бөткәс кенә – тыуыр ваҡыты еткәс кенә яҙырға ултырҙым һәм өс көн ярымда яҙып бөттөм. Шундай күтәренке кәйефтә булған өсөндөр инде, ҡараһы ла кибеп бөтмәгән ҡулъяҙманы папканан алып:

– Бына, Әнүр дуҫ, бер әйбер яҙып бөтөп ҡайттым әле, – тинем.

Әнүр уны асҡылап ҡарап ултырҙы ла уҡырға керешеп китте. Ҡатындар мәж килеп кухня яғында булаша, икәүләшеп магазинға ла барып килделәр. Мин иһә урамдағы колонканан һыу индереп, һарайҙан бер-ике ҡосаҡ утын ташып алдым. Әнүр иһә баш күтәрмәй ҡулъяҙманы уҡый. Ҡатындар:

– Тәүҙә ашап алайыҡ, – тиһә лә, ул үҙ шөғөлөнән туҡтаманы.

Ул уҡып бөткәс кенә ашарға ултырҙыҡ. Әнүр иһә әҫәр тураһында бер һүҙ өндәшмәй. Түҙмәйенсә һораным:

– Йә, нисек килеп сыҡҡан?

Әнүр эсендәген тиҙ генә тышҡа сығарып бармаусы, һәр һүҙен уйлап һөйләй торған кеше ине.

– Әҙерәк күңел тынысланғанын көт, тәьҫирләнеп киттем, – тине лә, аҡ йөҙөнә сабыр йылмайыу сығарып: – Шәп әйбер яҙғанһың, баҫыуҙан башҡа бер нигә лә эшкинмәҫ, – тип өҫтәне.

Минең баш күккә тейҙе. Дуҫымдың был һүҙҙәрҙе күңелемде күтәреү өсөн шарап тәьҫиренән генә әйтмәҫен белә инем.

Һәр саҡ ана шулай бер-беребеҙгә ихласлыҡ күрһәтеп йәшәнек беҙ. Ул башҡа кешеләр алдында ла борғоланмай, үҙ фекерен тура, ләкин әҙәпле итеп әйтер ине. Проза секцияһы ултырыштарында уның менән һүҙгә килешкән, бәхәсләшкән кешене лә хәтерләмәйем. Ул хатта тәнҡитте лә кеше хәтерен ҡалдырмаҫлыҡ итеп әйтә белә ине.

Әнүр арабыҙҙан күңелдәргә бөтмәҫ яра һалып, көтмәгәндә китеп барҙы. Уның эш өҫтәлендә минең һикһән икенсе, һикһән өсөнсө йылдарҙа донъя күргән “Тауҙар тыны”, “Шайтан ҡуласаһы”, “Хыялый ҡыҙ хикәйәте” тигән повестарым тураһында яҙа башлаған мәҡәләһе ятып ҡалды. Ул минең архивта дуҫлыҡ иҫтәлеге

итеп һаҡлана. Әнүрҙең “Сейәлетау” повесы аҙағынаса яҙылып бөтмәй ҡалғайны. Мин уны тәртипкә килтереп, һуңғы ваҡытта яҙылған хикәйәләрен дә туплап (ул саҡта китап нәшриәтендә эшләй инем), йыйынтығын сығарҙым һәм хушлашыу һүҙе рәүешендә “Кәләмдәштең аҡкош йыры” тигән мәҡәлә яҙып баҫтырҙым. Алмаштырғыһыҙ дуҫым ине Әнүр Вахитов...

* * *

Әҙәби ижадты, үтә индивидуаль хеҙмәт, тиҙәр. Был дөрөҫ тә. Һиңә теге йәки был әҫәрҙе яҙ, тип эш ҡушыусы, план биреүсе юҡ. Эш барышында, былай ярамай, тегеләйерәк яҙ, тип әйтеп тә тормайҙар. Яҙыусы алдына һалған аҡ ҡағыҙҙың ҡолона әйләнә, үҙенең тар ҡабырсығы эсенә бикләнеп ижад итә.

Икенсе яҡтан, ныҡлабыраҡ ҡараһаң, ижадсы бөтөнләй тормоштан айырылып, ниндәйҙер бушлыҡта ла эшләй алмай. Иң тәүҙә уны үҙе һүрәтләгән тормош бөтә тулылығы менән солғап ала. Ул уй-тойғолары, хыялы менән үҙе яҙған персонаждар араһында, ә геройҙарҙың үткәне һәм бөгөнгөһө, йәшәү, хәрәкәт итеү мөхите бар. Улар автор менән һәр саҡ актив мөнәсәбәттә, шуға ла автор уларҙың ҡайһы берәүҙәрен ярата, икенселәрен күрә алмай, хөкөм итә, хатта үлтерә. Йәғни әҫәр геройҙары уны ниндәй ҙә булһа эш башҡарыуға этәрә. Шулай булғас, нисек инде авторҙы, өҫтәл артында япа-яңғыҙы ҡала, тип әйтә алабыҙ?

Автор әҫәрен яҙып бөткәс иһә, уны төрлө һорауҙар биләп ала. Ҡулъяҙма менән танышҡас, ҡәләмдәштәре ни әйтер, редакция хеҙмәткәрҙәре ниндәй баһа бирер, әҫәр ҡасан, ҡайҙа донъя күрер? Ошо һорауҙарына ыңғай яуап алһа, яҙыусы иң ауыр һынау алдына баҫа: әҫәрен уҡыусы нисек ҡабул итер?

Бына бит ниндәй ҡатмарлы юлдар үтергә тура килә яҙыусыға. Ул эшенең аҙағынаса үҙен уратып алған мөхиткә айырылғыһыҙ бәйләнгән. Шуға күрә әҙәби ижадты үтә индивидуаль хеҙмәт тип атау бигүк дөрөҫ тә түгелдер.

Артабан ошо фекерҙе нығытыу өсөн, ижад процесының бер баҫҡысына ныҡлабыраҡ туҡталмаҡсымын. Был – әҫәрҙе ҡәләмдәштәр менән күмәкләп тикшереп, авторға әҫәрен камиллаштырырға ярҙам итеү.

Был эште башҡарыу өсөн Яҙыусылар союзында һәр жанр буйынса ижади секциялар ойошторолған. Ижад процесында уларҙың әһәмиәте ифрат ҙур, тик уның эшен тейешенсә ойоштора һәм баһалай белергә генә кәрәк. Алтмышынсы – һикһәненсе йылдарҙа ижади секцияларҙың абруйы бик юғары ине. Прозаиктың һәр күләмле әҫәрен, йәш яҙыусыларҙың тәүге йыйынтығын секция ултырышында тикшереү ғәҙәти бер күренешкә әйләнеп киткәйне. Әҫәрҙе проза секцияһында тикшереү, уның хупланыу-хупланмауы тураһындағы протокол күсермәһен күрһәтмәй тороп, ҡулъяҙманы „Китап“ нәшриәтенә ҡабул итмәйҙәр ине. Сөнки, минең белеүемсә, ижади секциялар ҙур яуаплылыҡ тойоп, бик актив эшләне. Ултырыштарҙа, бюро ағзаларынан тыш, теләгән бер яҙыусы ҡатнаша, әҫәр буйынса фекерен әйтә ала, журнал редакцияларынан, „Китап“ нәшриәтенән вәкилдәр саҡырыла. Идара ултырыштарында, ҡайһы саҡта партия йыйылыштарында ижади секцияларҙың эше тураһында отчет тыңлау ҙа уларҙың етәкселәренә бушанып китергә ирек бирмәй ине. Секция ултырышында әҫәре тикшерелеп, бирелгән баһа менән ризалашмай низағ ҡуптарып йөрөүселәрҙе хәтерләмәйем. Юҡ, булғыланы шикелле, шуларҙың бер-икеһен генә иҫкә төшөрөп үтәйек.

Йылын, көнөн асыҡ хәтерләмәйем. Зорге урамында йәшәгән саҡ ине. Хөкүмәт эшенә йөрөмәй, өйҙә генә яҙышып ултырған мәл. Әммә проза секцияһы бюроһының рәйесе вазифаһы елкәнән төшмәгән. Ҡатын – эштә, балалар – мәктәптә. Тыныс ҡына эшләп ултырғанымда ишектә ҡыңғырау шылтыраны. Барып

асһам, Әхмәт Әһлиуллин баҫып тора. Уны күреп беләинем, тик яҡындан таныш түгелбеҙ. Ҡайҙан килеп тапҡан, ниндәй йомош менән йөрөй икән?

Әлбиттә, ихласлыҡ күрһәтеп, түргә әйҙәнем, әҙерәк хәл-әхүәл белешеп ултырғас, сәй ҡуйып ебәрҙем. Эстәрле тиклем ерҙән килгән, юл кешеһенә вайымһыҙ ҡараш беҙҙең өсөн ят нәмә бит. Шунан ул миңә ниңә килеүен әйтте лә ҙур портфеленән ҡалын ғына папка сығарҙы.

– Был әҫәремде Эстәрлелә тикшереп маташҡайнылар. Беләһегеҙ бит, унда йүнле яҙыусы юҡ. Китап нәшриәтенә барғайным, тикшерелгәнлеге тураһында протокол һорайҙар, йә тәүҙә “Ағиҙел”дә баҫтыр, тиҙәр, – тип теҙеп алып китте.

– Һуң, Эстәрлелә тикшергәндәр бит.

– Мин уларҙың баһаһы менән риза түгел. Бына тигән әҫәрҙе юҡҡа сығарып маташалар. Һеҙ уҡып, фекерегеҙҙе әйтһәгеҙ, “Ағиҙел”дә баҫмаҫтармы икән, тим. Бәлки, секцияла тикшереүгә ҡуйырһығыҙ. – Мәғәнәле итеп өҫтәне: – Егетлек ерҙә ятып ҡалмаҫ ине.

Ул арала сәй ҡайнап сыҡҡас, кухня өҫтәленә генә әҙерләп, күңелемдә был кешегә ҡарата йәмһеҙерәк уйҙар тыуа башлаһа ла (мин уны быға тиклем дә әллә ни өмөтлө яҙыусы тип иҫәпләмәй инем), уны сәй эсергә саҡырҙым. Ә ул кухняға бер ярты тотоп килеп инде. Быныһы йәнә көтөлмәгәнерәк хәл ине. Мин, әлбиттә, бигүк “ҡоро" кеше түгел, кәрәк саҡта „шайтан һыуы“нан баш тартҡан юҡ. Тик әле, берҙән, бик әүәҫләнеп эшләп ултырам, икенсенән, был кеше менән эскем килмәй. Ғөмүмән, минең бер ҡыҙыҡ ғәҙәт бар: йомош менән йөрөгәндә һис кемгә лә ярты тығып барғаным юҡ, йомошон йомошлар өсөн өйөмә араҡы алып килеүсене лә өнәп еткермәйем. Туғандарса, дуҫтарса, иптәштәрсә булһа – рәхим ит, ә былай...

– Һин, Әхмәт абзый, был нәмәңде асып ҡыялма, сәй генә эсәйек, – тинем.

– Ниңә, күтәреп осмаҫ әле, – тип ныҡышмаҡсы булғайны, киҫә һуҡтым:

– Булмай. Ә ҡулъяҙмаңа килгәндә, тураһын әйтәм: проза секцияһында тикшереү өсөн ала алмайым, сөнки Эстәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһына ышанмаҫҡа һис ниндәй нигеҙем юҡ. Ә “Ағиҙел”дә баҫыу-баҫмауҙы уның редколлегияһы хәл итә. Әйҙә, сәй эсеп ебәрәйек.

Әһлиуллин ултырған еренән тороп, төҫһөҙ күҙҙәре менән бәзерәйеп ҡараны, өҫтәлгә ҡуйған шешәһен киҫкен хәрәкәт менән алды ла:

– Әҙәм түгел икәнсең! – тип ишек яғына атланы, плащын эләктергәс, асыуын тыя алмай, йәнә ыҫылданы: – Чукынып кит!

Ул сығып китте, ә минең күңелгә еңел булып ҡалды. Шуныһы йәл: графоман менән шулай ҡырыҫ һөйләшеүемдең файҙаһы булманы. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, уның ҡыҫҡартылған варианты журналда баҫылды. Журнал мөхәррире әҙәбиәттә әллә ни билдәле булмаған, кемдәрҙеңдер күрһәтмәһе буйынса эш итеүсе кеше ине. Бер нисә йыл үткәс, ул китап булып та сыҡты. Бик күп йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, ул китапты, үтмәй ятҡанлыҡтан, әле лә китап магазиндарында осратырға мөмкин.

Икенсе бер осраҡты телгә лә алғы килмәгәйне. Шулай ҙа был ғибрәтле хәлде онотоп булмай. Проза секцияһының сираттағы ултырышында яҡташым, бик тә ихтирам иткән кешем Рамаҙан Ҡотошов ағайҙың яҙмаларын һәм Наил Ҡотдосовтың яңы повесын тикшерергә булдыҡ. Ҡотошовтың ҡулъяҙмаһын секция ултырышына ҡуймаҫҡа ла уйлағайным, сөнки ул әҙәби әҫәр булыуҙан бик алыҫ тора, документаль әҫәр ҙә була алмай. Автор Бөйөк Ватан һуғышы алдынан һәм һуғыш башланғас ауылда үҙе күргән хәл-ваҡиғаларҙы теҙеп яҙып сыҡҡан. Өлкән үк йәштәге ағай коллектив фекер ишетһен тип, уны ике-өс кешенән уҡытып алдым. Ултырышта ҡулъяҙма тураһында тик бер төрлө генә фекер әйтелде: ул матбуғатҡа тәҡдим итерлек түгел. Мин иһә, яҡын кеше күреп, ағай, һин юҡҡа

ваҡытыңды әрәм итмә, һинең әле кандидатлыҡ диссертацияһы өҫтөндә эшләүеңде беләм, шул эшеңде ослап ҡуй, тип тә әйттем. Ихлас күңелдән әйттем. Сөнки ул саҡта Рамаҙан ағай авиация институтында уҡытып йөрөй ине, эше өсөн бик кәрәкле шөғөл. Тик ағайыбыҙ әйткәндәргә күтәрмәне, пыр туҙып сығып китте. Ҡотдосовтың повесы тураһында һөйләшеп ултыра инек, ахылдашып Нәжиб Асанбаев менән Вәзих Исхаҡов килеп инде. Асанбаев – Союздың партбюро секретары, Вәзих – яуаплы сәркәтибе. Ниңә шулай ҡабаланып килеп еткәндәр? Инеп аҙыраҡ ултырҙылар ҙа сығып китте былар. Секция ултырышы бөткәс, улар мине Исхаҡов ултырған бүлмәгә саҡырып индерҙе. Шунда ғына мин уларҙың ниңә шулай хәлдәре бөтөп килеп етеүҙәренең сәбәбен белдем. Ҡотошов ағай һөйләшеү барған журнал редакцияһынан сыҡҡан да тура эргәләге партия өлкә комитетына ингән һәм өлкә комитет секретары Ахунйәновҡа, унда әҫәр тикшерәбеҙ тип, йыйылышып эсеп ултыралар, тип хәбәр һалған. Ахунйәнов иһә Асанбаев менән Исхаҡовҡа тиҙ генә был хәлде тикшерергә күрһәтмә биргән. Ә улар күрҙеләр: эсеү түгел, бер ни ҙә юҡ, әҫәр тураһында ғәҙәттәгесә фекер алышыу бара. Наил Ҡотдосов егет кеше ине. Ул саҡта Бәләбәйҙә эшләп йөрөй ине әле. Унын унан күстәнәстәр алып килеүен белә инем. Нәжиб ағай менән Вәзихте шул күстәнәстән ауыҙ итергә саҡырҙым. Баш тартманылар – Наилдең ҡунаҡханалағы бүлмәһенә барып, матур ғына һөйләшеп ултырҙыҡ. Рамаҙан Ҡотошов ағай иһә ошонан аҙаҡ байтаҡ ваҡыт миңә үпкәләгән һымаҡ йөрөнө...

Ана шулай, яҙмаларына ваҡытында дөрөҫ һәм ҡәтғи яуап бирелмәү арҡаһында, бер ниндәй әҙәби ҡиммәте булмаған күпме хикәйә, повесть, хатта роман тамғаһы һуғылған китаптар донъя күрә, ә уларҙың авторҙары Яҙыусылар союзы ағзаһы булып китә. Бына мин кеҫәһенә яҙыусы билеты һалып йөрөгән ике йөҙҙән артыҡ кешенең илле-алтмышын ғына күреп йәки әҫәрҙәре буйынса беләм. Һикһәненсе йылдарҙан башлап, заманында, Американы ҡыуып етербеҙ, уҙып китербеҙ, тип һөрән һалғандағы шикелле, тәүҙә яҙыусылар һаны яғынан Татарстанды ҡыуып етәйек, унан инде уҙып китәйек, тип йыл һайын әҙәбиәт майҙанына ныҡлап аяҡ та баҫмаған ун – ун биш кешене Яҙыусылар союзына ағза итеп алырға тотондоҡ. Бешеп етмәгән йәштәрҙе лә, пенсия йәшен үтеп киткәндәрҙе лә. Шулай итеп әҙәбиәтте осһоҙландырыуыбыҙҙы, уның ҡәҙерен ебәреүебеҙҙе, хатта кешеләрҙе нәфис әҙәбиәтте уҡыуҙан төңөлдөрөүебеҙҙе һаман булһа аңламайбыҙ шикелле әле. Ә һәр төрлө йыйындарҙа, китаптар һатылмай, әҙәби журналдарҙың тиражы кәмей, тип саң һуғып маташабыҙ.

Ошо урында алыҫ – үҙемде Яҙыусылар союзына ҡабул иткән йылдар иҫкә төшә. Ул саҡта беҙ, йәш яҙыусылар, Союз ағзаһы булыу тураһында әллә ни уйламай ҙа инек, шикелле. Бына минең биш повесть, байтаҡ хикәйәләр донъя күрҙе, ә мине Союзға ағза итеп алыу тураһында һүҙ ҡуҙғатыусы булманы. Хәйер, мең туғыҙ йөҙ алтмыш икенсе йылда Союзға яуаплы сәркәтип булып килгән Назар Нәжми ошо хаҡта ҡолаҡҡа төшөрә биреп ҡуйғайны, ләкин был тиҙ үк онотолдо. Аҙаҡтаныраҡ ишеттем: ике кешене алғандар, минең кандидатура артығыраҡ булып сыҡҡан. Ул саҡта Союзға ағза итеп берәмтекләп кенә алалар ине. Мең туғыҙ йөҙ алтмыш өсөнсө йылда ла өс кандидатура булып киткән. Комиссия ултырышынан алда кемдәрҙе ағза итеп алыу мәсьәләһе идара ултырышында ныҡ ҡына тикшерелгән. Шулай ҙа был юлы „Ағза итеп алыу өсөн өс кешенең кандидатураһын комиссия ҡарамағына тәҡдим итергә!“ тигән ҡарарға киләләр. Сөнки мине ҡалдырып булмай – икенсе тапҡырға ҡарала, Ғабдулла Байбуриндың йәше өлкән – утыҙ һигеҙе менән бара, артабанға һуҙыу ярамай, ә Рәмил Хәкимовты партия өлкә комитетынан һис кисекмәҫтән ағза итеп алырға ҡушалар икән. Өс кешене бер юлы ҡабул итеү тәңгәлендә комиссия ултырышында ла төрлө фекер булды.

Шулай ҙа идара тәҡдим иткәнсә ҡарар ҡабул итте. Беҙҙең заманда Союзға ағза булып үтеү ана шулайыраҡ хәл ителә ине, ә хәҙер...

Хәҙерге күренештәрҙе күңел тарлығынан яҙмайым. Әҙәбиәтебеҙҙең киләсәге тураһында борсолоп йәшәлде, башлап яҙыусыларға һәр саҡ оло әҙәбиәт майҙанына сығырға ҡулымдан килгәнсә ярҙам итергә тырыштым. Үҙем лайыҡ тип иҫәпләгән тиҫтәләгән йәштәргә Яҙыусылар союзына инеү өсөн рекомендациялар яҙҙым. Мең туғыҙ йөҙ етмеш икенсе йылда, Яҙыусылар союзының әҙәби консультанты булараҡ, идара рәйесе Хәким Ғиләжев менән һөйләшеп, мәктәп йәшендәге башлап яҙыусы балаларҙы бөтә республика буйынса йыйып, байтаҡ мәшәҡәттәр күреп булһа ла, семинар үткәргәйнем. Унда ун дүрт бала килгәйне. Уларға ҡуныу урыны табыу үҙе бер бәлә булды. Ахыр килеп, университет тәңгәленән Ағиҙел буйына түбән төшкәс, һыуға батыусыларҙы ҡотҡарыу станцияһы торлаҡ итеп йыһазландырған иҫке теплоходҡа урынлаштырҙым.

Семинар Пионерҙар һарайында үтте. Унда Кирәй Мәргән, Муса Ғәли, Ғилемдар Рамазанов, Шәриф Биҡҡол, Фәрит Иҫәнғолов, Шакир Янбаев, Рәми Ғарипов, Ким Әхмәтйәнов кеүек күренекле яҙыусыларыбыҙ саҡырылғайны. Улар балаларға әҙәби ижад, уның серҙәре, үҙҙәренең әҙәбиәткә нисек килеүҙәре тураһында һөйләне. Семинарға килгән яҙыусыларға балаларҙың шиғырҙары, хикәйәләре таратып бирелгәйне. Төштән һуң улар үҙҙәренең ҡарамағына тапшырылған бала менән уның яҙмалары тураһында айырым-айырым ултырып һөйләште, артабан нисегерәк эшләргә кәңәштәрен бирҙе. Аҙаҡтан иһә барлыҡ башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһалды, ҡайһы берәүҙәрҙең шиғыр, хикәйәләре балалар матбуғатына тәҡдим ителде.

Райондарҙан килгән балаларҙы, артабан үҙ юлығыҙҙы ҡарағыҙ, тип ҡайтарып ебәреп булмай ине. Литфонд биргән әҙ-мәҙ аҡса балаларға төшкө аш ашатҡанда бөтә яҙғайны. Үҙемдән аҡса ҡушып, районға ҡайтыусылар өсөн поезға, автобусҡа билеттар һатып алып, уларҙы юлға оҙатып, был эш арыу ғына тамамланып ҡуйҙы.

Әммә семинарҙа ҡатнашыусылар менән бәйләнеш артабан да өҙөлмәне. Улар яңы әҫәрҙәрен миңә ебәрәләр ине. Ҡулъяҙмаларҙы ҡарап, уларҙың арыуҙарын матбуғатҡа тәҡдим итә барҙым. Унынсы класты бөткәндән аҙаҡ, Яҙыусылар союзы идараһы исеменән университет ректоры исеменә хат яҙып, уларҙы юғары уҡыу йортона урынлаштырыу хәстәрлеге күрелде. Әлбиттә, был семинарҙа ҡатнашыусыларҙың бөтәһе лә яҙыусы булып китмәне. Ә бына Йомабикә Ильясова, Гүзәл Ғәлиевалар – хәҙер күренекле шағирәләр, Марат Әбүзәров, ул саҡта бишенсеме, алтынсымы класта ғына уҡыған малай, иң актив яҙышыусы бала ине. Уны семинарға әсәһе оҙата килгәйне. Ул артабан БДУ-ла уҡый башлаған еренән Ленинград университетына күсеп, унда журналистика факультетын бөтөп ҡайтты. "Башҡортостан" гәзитендә бүлек мөдире булып эшләне, артабан "Ленинсы" гәзитенең мөхәррире итеп үрләтелде, республика Юғары Советында, Ҡоролтайҙа яуаплы вазифалар башҡарҙы. Ошо тынғыһыҙ эштәр уны әҙәби ижадтан айырып торҙо шикелле. Ғүмере фажиғәле өҙөлмәһә, ул һис шикһеҙ яҙыусылар сафына баҫыр ине. Пьесаһының үҙе үлгәндән аҙаҡ Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрында ҡуйылыуы тап ошо хаҡта һөйләй.

Оҙаҡ ҡына йылдар Яҙыусылар союзының йәштәр менән эшләү комиссияһында ағза булып тороу ҙа ниндәйҙер кимәлдә башлап яҙыусылар менән бәйләнештә йәшәргә, кәрәк саҡта ярҙам ҡулын һуҙырға мәжбүр итә ине. Һәр ҡәләм тибрәткән кешене етәккә алып өйрәтеү менән генә унан яҙыусы яһау мөмкин түгел. Иң тәүҙә Хоҙай биргән – тыумыштан килгән талант орлоғо булыу мөһим. Тик ана шул саҡта ғына һәләттең үҫеүенә, камиллашыуына ярҙам итеп

була. Икенсенән, нәфис һүҙ менән эш итергә ынтылышты үҫтереүҙә, камиллаштырыуҙа һине уратып алған мөхит һәм тәбиғәт тә ҙур урын тоталыр, тип уйлайым. Бына беҙҙең яҙыусылар араһында ҡалала тыуып үҫкәндәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Сөнки, беренсенән, ауыл халҡы ҡаланыҡыларға ҡарағанда телгә бай, ата-бабалар традицияһы, ғөрөф-ғәҙәттәр нығыраҡ һаҡланған, ауыҙтел ижады ла быуындан-быуынға күсә килә. Икенсенән, бала тыуған мәленән үк туранан-тура тәбиғәт менән мөнәсәбәттә йәшәй башлай. Ә тәбиғәт – кешелә матурлыҡты тоя белеү тәрбиәләгән берҙән-бер шишмә. Бәләкәйҙән төрлө эштәр башҡарырға өйрәнеп үҫеү һәр ҡәләм тибрәтәм тигән кешегә тормош тураһында киңерәк тойомлап һәм конкрет фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә.

Нисек кенә әйтһәң дә, әҙәби хеҙмәткә тотонорға, профессиональ яҙыусы булып китергә әҙер рецептар юҡ. Уға һәр кем үҙ юлы менән килә. Ә тәүге әҫәрҙәрең баҫылып, уҡыусылар араһында аҙмы-күпме танылыу алып, яҙыусы тигән исем тағылғас иһә, был тынғыһыҙ хеҙмәттең икенсе – тағы ла яуаплыраҡ һәм ауырыраҡ этабы башлана. Меңәрләгән йылдар буйына килгән әҙәбиәт донъяһында үҙ урыныңды табырға кәрәк. Был – тормошҡа үҙеңсә ҡарашың булыу, уны үҙеңсә аңлата белеү, үҙ стилеңдә, үҙ төп темаңды, үҙ жанрыңды табыу тигән һүҙ. Унан кирле, яҙыусы бит бер әҫәр яҙыу менән генә сикләнмәй, ул һәр әҫәрендә яңы һүҙ әйтергә, бүтәндәрҙе генә түгел, үҙ-үҙен дә ҡабатламаҫҡа тейеш. Художество оҫталығын әҫәрҙән-әҫәргә камиллаштыра барыу иһә яҙыусының ғүмерлек бурысы булып ҡала. Был күренештәрҙе талантлы яҙыусыларҙың ижадында бик асыҡ күрергә мөмкин.

Әҙәби ижадты иге-сиге күренмәгән даръяларҙа йөҙөүгә тиңләр инем. Һин уға үҙ иркең менән ташланғанһың, батһаң да, арыу-талыу белмәй йөҙһәң дә – үҙ ҡулыңда.

Ярай, теорияға, аҡыл һатыуға төшөп киттек, шикелле. Мин был һүҙҙәрҙе алтмыш йылға яҡын әҙәби ижад ҡаҙанында ҡайнаған кеше булараҡ һөйләйем. Уның алдан күреп булмай торған, һәр даим көтөлмәгән яҡтары менән асыла барыусы ҡатмарлы һәм ҡыҙыҡлы процесс икәнен асығыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн, үҙем күргән ҡайһы бер хәлдәрҙе иҫкә төшөрөп үтмәксемен.

Ижади секцияларҙа ҡәләмдәштәрҙең яңы әҫәрҙәрен тикшергәндә бик тә фәһемле һәм ҡыҙыҡлы, хатта сетерекле ваҡиғаларға шаһит булырға тура килә ине. Әйтеп үткәнемсә, әүәле һәр яңы роман йәки йыйынтыҡ проза секцияһы ултырышында тикшерелде. Унда ҡатнашыусылар көнәлгәре ҡулъяҙманы уҡып, фекер туплап килә, һәм фекер алышыуҙар бик ихлас үтә. Кирәй Мәргән, Зәйнәб Биишева, Ғәли Ибраһимов, Фәрит Иҫәнғолов, Динис Исламов, Яныбай Хамматов, Ибраһим Абдуллин һәм башҡаларҙың һәр яңы әҫәре ошо тараҡ аша үтте.

...Бына Зәйнәб апай Биишеваның “Кәмһетелгәндәр” романын тикшерергә йыйылғанбыҙ. Секция бюроһының рәйесе – Әкрәм Вәли. Ул ошо вазифала бер нисә йыл эшләне һәм йыш ҡына, ағай-эне, ҡасан ҡотҡараһығыҙ мине ошо мәшәҡәтле эштән, ҡулъяҙмалар уҡыу ваҡытты бик күп ала, тип зарлана торғайны. Йыйылыш протоколын алып барыу, сәркәтип булараҡ, мин фәҡирегеҙ өҫтөндә. Баязит Бикбай, Кирәй Мәргән, Әхнәф Харисов, партия өлкә комитетында бүлек мөдире булып эшләгән Миҙхәт Ғәйнуллин, журнал мөхәррире Хәким Ғиләжевтар бар. Күҙе насар күреү арҡаһында ҡулъяҙмаларҙы уҡый алмаһа ла, Сәғит Агиш проза секцияһы ултырыштарының һәр береһендә тиерлек ҡатнаша һәм, үҙенең ижад тәжрибәһенән сығыпмы, бүтәндәр һөйләгәндән эләктереп алыпмы, берәй ҡыҙыҡлы фекерен әйтмәйенсә ҡалмай ине. Был ултырышҡа ла килеп еткән.

Илленсе йылдарҙың аҙағы ғына ине бит әле. Ул саҡта башҡорт әҙәбиәтендә романдар йыш тыумай ине. “Кәмһетелгәндәр” – Зәйнәб Биишеваның да тәүге ҙур әҫәре. Шуға күрә һөйләшеү баштан уҡ етди төҫ алды. Бәлки, быға Зәйнәб



*Яҙыусылар союзының йәштәр менән эшләү комиссияһы ағзалары:*
*Һулдан уңға: Сәғит Агиш — рәйес, Ноғман Мусин — сәркәтип, Ғабдулла Әхмәтшин — ағза. 1959 йыл.*

апайҙың тәүҙә үк был романы яҙыласаҡ трилогияның тәүге китабы булыуын әйтеүе лә сәбәпсе булғандыр.

Әҫәрҙең ыңғай яҡтарын күрһәтеү менән бергә, етешһеҙлектәре тураһында ла әйттеләр, уны артабан камиллаштыра төшөргә кәңәш бирҙеләр. Әҫәрҙә артыҡ күп һүҙлелек урын алыуын, кәрәге булмаған, тиҙ үк онотола торған персонаждар килеп инеүен һәр сығыш яһаусы тиерлек билдәләп үтте. Ә Баязит Бикбай иһә, ғәҙәтенсә, ҡаға-һуға түгел, үҙ фекерен ҡыҫҡаса ғына ярып әйтте: әҫәрҙә ғаилә ығы-зығыһы, тормош-көнкүреш ваҡиғалары үтә күп урын ала, ваҡ-төйәк әҫәр түгел, роман бит был, тине. Аҙаҡтан Әкрәм Вәли, артыҡ һүҙ ыҫҡындырмаҫҡа тырышып, һаҡ ҡына йомғаҡлау һүҙен әйтте. Шунан, ғәҙәт буйынса, авторға һүҙ бирелгәйне, Зәйнәб Биишева еңел ҡуҙғалып, урынынан торҙо ла теҙеп алып та китте: „Һеҙ бында берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ яҙыусыны юҡҡа сығарырға килдегеҙме ни? Мин был әҫәремде ғүмерем буйы уйлап йөрөнөм, һәр детален, һәр һүҙен әллә нисәмә тапҡыр йөрәгем аша үткәргәнмен. Мин һеҙҙең кеүек бисә әҙерләгәнде ашап-эсеп, кикереп ятманым. Балаларымды, һуғыш инвалиды иремде тәрбиәләү арҡаһында күп йылдар яҙып бөтә алмай йөрөнөм мин уны...“

Апай, ҡыҙа барып, иң тәүҙә Баязит Бикбай ҡаршыһына барып баҫты: „Һин, Бикбай, ғүмере буйы мине күрә алманың. Харап, берәү роман яҙған икән (“Аҡселән ташҡанда”ны иҫенә төшөрәлер), – тип торҙо ла, көләмһерәй биреп, ғәҙәтенсә ҙур танауын ышҡып ултырған Кирәй Мәргән эргәһенә барҙы. – Бик шәп булғаһың, башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуы тураһындағы романыңды ниңә һаман яҙып бөтмәйһең? Етмәһә, аҡыл өйрәтеп ултырған булаһың...“ Әхнәф Харисовҡа ла эләкте: „Һинең теорияң буйынса кем йүнле әҫәр яҙа“,– тип ебәрҙе.

Зәйнәб Биишева һәр ҡайһыһының алдына туҡтай ҙа әсе-әсе генә һүҙҙәр ыҫҡындыра. Арыу ғына ир-егеттәр, уға ҡаршы һүҙ әйтеүҙән тыйылып, шып-шым ултыралар. Ошо күренешкә ниңәлер көлкөм килде, түҙә алмай, коридорға сығып киттем. Тәҙрә эргәһендә тәмәке көйрәтеп тора инем, Зәйнәб апай ултырыш барған “Әҙәби Башҡортостан” журналы редакцияһы бүлмәһенән килеп сыҡты. Әллә ҡайҙан күҙенә эләктем бит. Туҡ-туҡ атлап эргәмә килде лә: “Һин бында сығып ҡастыңмы ни әле? Һин дә, көсөк шикелле, шул мәғәнәһеҙҙәрҙең һүҙен һөйләйһең. Тәүҙә үҙең яҙып ҡара әле роман, шунан һөйләрһең”, – тип тетеп алып китте.

Әммә бына шулай күңелһеҙерәк осланған һөйләшеүҙең аҙағы һәйбәт булды. Ике-өс ай үткәс, Зәйнәб апай Биишева журнал редакцияһына романының ҡулъяҙмаһын алып килде. Уны ҡарап сығыуҙы Хәким Ғиләжев миңә тапшырҙы. Теге саҡтағы һөйләшеүҙән аҙаҡ, әҫәрҙе уҡып ниндәй ҙә булһа фекер әйтергә ҡурҡҡан һымағыраҡ та торҙом. Ни эшләйһең, ҡулъяҙма уҡыу – минең туранан-тура бурысым, тотондом уҡырға. Теге саҡтағы һөйләшеүҙән аҙаҡ апай әҫәрен төҙәтеү өҫтөндә эшләнеме икән? Ниндәй үҙгәрештәр, яңылыҡтар бар? Әҫәрҙе уҡып

сыҡҡас, аптырап ҡалдым: теге саҡта тәнҡит һүҙҙәренә риза булмаған һымаҡ булһа ла, автор уны өр-яңынан ныҡлап ҡарап сыҡҡан, күп урындарын яңынан яҙған, байтаҡ үҙгәрештәр индергән, әҫәр йыйнаҡлана төшкән.

Мөхәрриргә үҙемдең ыңғай фекеремде әйттем. Шунда уҡ романды ҡасаныраҡ баҫа башлау мәсьәләһен дә хәл иттек. Ошонан аҙаҡ, еңел һулап, Зәйнәб апайға телефондан шылтыраттым. Ул рәхмәтен белдерҙе, теге-был һорауҙар килеп тыуһа, хәбәрләшеп торорға ҡушты. Романдың ҡыҫҡартылған варианты (ул саҡта "Әҙәби Башҡортостан"дың күләме бик бәләкәй ине) журналдың дүрт һанында баҫылды. Беҙ уны рәссам Әхмәт Лотфуллиндың иллюстрациялары менән матурлап бирергә тырыштыҡ. Ул уҡыусылар һәм йәмәғәтселек тарафынан бик йылы ҡабул ителде һәм авторға киң танылыу алып килде.

Бына бит, әҫәр тураһында ихлас һөйләшеү, ул ҡырҡыу бәхәстәр тыуҙырһа ла, ыңғай һөҙөмтә бирә.

Ҡайһы саҡта, әҫәр тураһында һөйләшеү бер яҡлыраҡ йәки дөрөҫ булмаған йүнәлеш алһа, авторҙы бик ауыр хәлгә лә ҡуйырға мөмкин. Ғәли Ибраһимовтың "Кинйә" романының беренсе китабы проза секцияһының ултырышында ике тапҡыр тикшерелде. Ғәли Ибраһимов һәр әҫәре өҫтөндә арыу-талыу белмәй, бик ентекле эшләүсе егәрле әҙип ине. Ултырышта тәүге тапҡыр һөйләшеүҙән аҙаҡ, ул әҫәрен ныҡлап ҡарап сыҡты, уны композицион яҡтан йыйнаҡлау тәңгәлендә байтаҡ эш башҡарҙы. Тәүге вариант уғата оҙонға һуҙылғайны – туғыҙ йөҙ бит самаһы ине. Секция ултырышында икенсе тапҡыр тикшергәндә, ҡайһы бер сығыш яһаусылар, бигерәк тә үҙе лә романдар яҙған бер иптәш, романда барған тарихи ваҡиғаларҙы белер-белмәҫ көйөнсә, авторға ниҙәрҙер өйрәтеп маташты, уны уҡыусы аңламаҫтай һүҙҙәр ҡулланыуҙа ғәйепләне һәм, әҫәрҙе был килеш баҫырға ярамай, тигән фекер әйтте. Һуңғараҡ романды "Ағиҙел" журналының бер нисә редколлегия ағзаһы уҡып, йәнә кире фекер әйткәс, Ғәли Ибраһимов байтаҡ ваҡыт ни эшләргә белмәй йөрөнө. Бер мәл ósрашҡаныбыҙҙа:

– Аптыралды инде, ниңә аңларға теләмәйҙәр мине. Тарихҡа, һүрәтләнгән ваҡиғаларға үҙ ҡарашымдан баш тартып, һәр кем әйткәнсә эшләй башлаһам, мин кем булам инде? Ә бит миңә икенсе, өсөнсө китаптарҙы ла яҙаһы бар. Ни эшләп ҡарайһы икән? – тип ныҡ борсолоп хәбәр һөйләгәйне.

Мин яҡташ ағайҙың хәлен аңлай инем. Берҙән, үҙемдең дә ошондай хәлгә тарығаным бар. Мәҫәлән, "Һайлап алған яҙмыш" романын журналда баҫтырмау өсөн ҡайһы бер иптәштәр, шул иҫәптән ул саҡтағы журналдың баш мөхәррир урынбаҫары Рәйес Низамов, уғата ла тырышлыҡ күрһәтте. Был әҫәрҙе мин дә бик ныҡ әҙерлек менән, хатта Германияға барып, немецтарҙың тормошон үҙ күҙем менән күреп, өйрәнеп яҙғайным – мине иһә тормошто белмәүҙә ғәйепләнеләр. Ҡулъяҙманы партия өлкә комитетының бүлек мөдире Клара Төхвәтуллинанан уҡытып алғас ҡына (ҡулъяҙманы ул үҙе уҡығандырмы, башҡа берәйһенән уҡытып алғандырмы – уныһы миңә мәғлүм түгел), ул "Ағиҙел"дә донъя күрҙе.

Икенсенән, ҡайһы бер етешһеҙлектәре булыуға ҡарамаҫтан, тәүҙән үк әҫәргә ыңғай ҡараштa булыуымды, әҙәбиәтебеҙҙә ысын мәғәнәһендә эпик пландағы тарихи әҫәр тыуыуын әйтеп сығыш яһаным. Өсөнсөнөн, Ғәли ағайҙың бик ентекле әҙерлек алып барғандан һуң әҫәр өҫтөндә ҙур тырышлыҡ менән һәм яуаплылыҡ тойоп эшләүен белә инем. Ул оҙаҡ ҡына ваҡыт архив материалдарын өйрәнде, ун һигеҙенсе быуаттағы башҡорт тарихын яҡшы белеүсе ғалимдар менән аралашырға тырышты. Мәҫәлән, тарих фәндәре кандидаты, ваҡытында партия өлкә комитетының секретары булып эшләгән Әбүбәкер Усманов ағай журнал редакцияһына килгән арала, Ғәли ағай уның менән коридорға сығып, тәмәке көйрәтә-көйрәтә, оҙаҡ итеп һөйләшеп торор ине. Бер саҡ:

– Әбүбәкер ағай менән һөйләшеп һүҙең бөтмәй инде, – тигәйнем, Ғәли ағай, ғәҙәтенсә, мут йылмайып:

– Былай һөйләшеп кенә һүҙ бөтөрлөк түгел шул. Ул кеше ун һигеҙенсе быуаттағы башҡорт ихтилалдары, бигерәк тә Пугачев яуы, Салауат Юлаев тураһында бик күп фактик материал туплаған. Танышыу өсөн ҡайһы бер материалдарын биреп тороуҙы һорағайным, яҡын да килмәй. Шуға күрә, бәхәсләшкән булып, уны ипләп-ипләп һауып маташам, – тине.

Әҫәренең күп өлөшөн яҙыусыларҙың “Аҡлан” ҡасабаһындағы дача өйөндә яҙҙы. Эшләр өсөн аулаҡ булғанлыҡтан, ул форсаты барҙа ҡыш көнө лә шунда барып ултыра ине. Финдәрсә таҡта ҡораманан ғына төҙөлгән йорт булғанлыҡтан, мейесенә яҡһа ла, уны йылытыу ҡыйын булғандыр. Бер барғанымда, мөрйәһенән төтөн сыҡҡанды күреп, хәл белешергә инһәм, Ғәли ағай ҡалын пальто, бүрек, бейма кейгән көйө кухня бүлмәһендәге өҫтәл артында яҙышып ултыра.

– Ни эшләйһең инде, ҙур әйбер яҙғанда, фекер ебе сейәлмәһен өсөн, тыныс урын кәрәк, – тине ул, аҡланырға теләгән һымаҡ.

Шул саҡта ул мине “Кинйә” өсөн ҡайһы бер әҙерлек материалдары менән дә таныштырғайны. Улар бик күп һәм ҡалын ике папкаға тупланғайны. Бөтәһенән дә бигерәк уның үҙе төҙөгән ике ҙур һүҙлеге ғәжәпкә ҡалдырҙы.

– Архив материалдарында, ғәрәпсә, төркисә китаптарҙа (ағай уларҙы бик һәйбәт уҡый ине) осраған, хәҙер онотолған һүҙҙәрҙе шунда теркәй барҙым, – ти.

Миңә бөтөнләй аңлашылмаған ҡайһы бер һүҙҙәр айырым биттәргә теҙеп яҙылған.

– Ә былары – үҙем тапҡан һүҙҙәр, – ти Ғәли ағай, йылмайып. – Яҙып ултырғанда тос ҡына эпитеттар, афоризмдар кәрәктеме, үҙемдән сығарып яҙам да ҡуям.

Һуңынан ҡульяҙмаһын уҡыған саҡта әҫәрҙең теле бик бай булыуға, ҡайһы бер ят тойолған һүҙҙәр осрауға, бүтәндәр ошо күренешкә бәйләнеп маташһа ла, мин һис тә аптыраманым.

Әҫәр, оҙаҡ ҡына ваҡыт донъя күрә алмай ятҡандан аҙаҡ, журналда баҫылды, унан айырым китап булып сыҡты. Ғәли Ибраһимов, бик тә аптырағас, ҡульяҙмаһын күтәреп Мостай Кәримгә барған. Мостай ағай уны уҡып сығып, ыңғай фекерен әйткәс кенә, әҫәргә юл асыла. Аҙаҡтаныраҡ бер йыйылышта Мостай Кәримдең әҫәргә яуапһыҙ ҡараш арҡаһында “Кинйә”нең оҙаҡ ҡына ваҡыт донъя күрә алмай ятыуы тураһында борсолоп һөйләгәне хәтерҙә.

Хәҙер уйлап ҡуям: әгәр “Кинйә”нең тәүге китабы шундай ҡаршылыҡтарға осрамаһа, Ғәли Ибраһимов үҙ трилогияһының өсөнсө китабын да яҙып бөткән булыр ине. Ул өсөнсө китап өҫтөндә һуңғы һулышына тиклем эшләне, тик, үкенескә ҡаршы, тамамлай алманы.

Хәтеремдә, “Кинйә”нең икенсе китабы рус телендә баҫылып сыҡҡас, китап нәшриәтенең нәфис әҙәбиәт бүлеге мөдире булып эшләгән Раил Байбулатов:

– Ноғман ағай, әйҙә, Ғәли ағайға китабын алып барып бирәбеҙ, бер ыңғай хәлен дә белешербеҙ, – тине.

Китапты, сәй эсерлек күстәнәс алдыҡ та киттек. Зөһрә еңгәй ишек асып, алсаҡ йөҙ менән ҡаршы алды. Ғәли ағай иһә койкала ятып тора ине. Койка эргәһендәге ике ултырғыста ҡульяҙмалар өйөп ҡуйылған. Ғәли ағай бик йыйнаҡ, бөтмөр, төгәллекле, таҙалыҡты ярата торған кеше ине. Әле лә, ҡульяҙмалары боларыбыраҡ ятҡанға уңайһыҙланғандай итеп:

– Ҡараштырып ятҡан була инем дә... әҙләп-әҙләп хәл ҡәҙәрем эшләге килә бит, – тине.

Рус телендәге китабына бик ҡыуанды, теремекләнеп китеп, өсөнсө китабының тәүге ике бүлеген бөтөнләй эшләп бөтөүен, ҡалған өлөшөнөң әлегә

ҡаралама һәм план килеш тороуын һөйләп алып китте. Ғүмер булып, шуның осона сыға алһам, үкенмәҫ инем, тип көрһөндө.

Теләге ҡабул булып етмәне ағайҙың, ошонан аҙаҡ күп тә тормай, ул арабыҙҙан китеп барҙы.

Үҙе мәрхүм булғандан һуң “Кинйә”нең өсөнсө китабын уҡыусыларға еткереү өсөн, яҙыусының ҡыҙы Һөйөклөнөң һәм уның ире Байрастың тырышлығы менән, төрлөсә юлдар эҙләп ҡаралды. Уны төҙәткеләп, тәртипкә килтереү менән яҙыусы Марсель Искәндәр байтаҡ шөғөлләнде. Һуңғы бер осратҡанымда ул: “Кинйә”не ҡарап бөттөм. Туғыҙ йөҙ биттән артығыраҡ булды. Бына әле шул эш өсөн әҙерәк аҡса бирмәҫтәрме икән тип Союзға китеп барам“, – тигәйне. Яҙыусылар союзы уның эше өсөн түләгәндерме-юҡмы, унығын белмәйем, ошонан аҙаҡ күп тә тормай, Марсель вафат булды. Бынан аҙаҡ Ғәли ағайҙың ҡыҙы Һөйөклө ҡулъяҙма өҫтөндә байтаҡ эшләне. Шунан аҙаҡ өсөнсө китап фрагменталь план-күҙаллауҙар рәүешендә “Ағиҙел” журналында донъя күрҙе. Ғәжәп, ошо килеш тә ул ҡыҙыҡһынып уҡыла. Сөнки ул фактик материалға шул тиклем бай – уны автор ҡайҙан табып, нисек туплаған, тип хайран ҡалаһың. Икенсенән, уның йәне бар: ваҡиғалар, буласаҡ геройҙар туҡтауһыҙ хәрәкәттә, беҙ уларҙың уй-фекерҙәрен, маҡсаттарын күрәбеҙ. Хатта миндә шундай уй ҙа тыуып ҡуйҙы: был – кинофильм өсөн сценарий. Берәй кинорежессер тотонһон ине ошо эшкә.

...Артабан ҡайһы бер яҙыусыларыбыҙҙың үҙ әҫәрҙәре өҫтөндә, бигерәк тә ҡулъяҙма секция ултырышында йә редколлегияла тикшерелгәндән һуң, уны камиллаштырыу тәңгәлендә нисегерәк эшләүҙәрен хәтергә төшөрөп үтәйек әле...

Янибай Хамматов һәр әҫәрен проза секцияһында тикшерергә алып килә ине. Ул тарихи темаларға һәм документаль әҫәрҙәр күп яҙҙы. Уларҙың һәр береһенә, ваҡиғаларҙы һүрәтләү ҡоласы, хикәйәләү һәлмәклеге, геройҙарҙың эшмәкәрлек һәм фекер йөрөтөү кимәле жанр талаптарына тура киләме-юҡмы, “роман” тигән тамға һуғыла ине. Мин үҙ эшенә бирелгән, егәрле кешеләрҙе ихтирам итәм, шундайҙарҙан өлгө алып йәшәргә һәм эшләргә тырышам. „Ғүмер бер бирелгән, Һәр яҡты көндөң файҙаһын күрергә“ тигән төшөнсә – минең өсөн яңғырауыҡлы буш һүҙ түгел, ә йәшәйеш һәм тормош ҡағиҙәһе. Бына шуға күрә, әҙәбиәткә һуңлабыраҡ, ләкин ҙур тормош тәжрибәһе йөкмәп килгәндән аҙаҡ, ғәжәп бер дәрт һәм ныҡышмаллыҡ менән ижад итеүгә тотонған Янибай Хамматовты ихтирам итә инем. Ул бер әҫәрен яҙып бөтә лә, уның баҫылып сығырын да көтөп тормай, икенсеһенә тотона, ал-ял белмәй эшләй. Хатта йәй көндәре дачала йәшәгәндә лә, баҡса эшенән бушаған арала, өҫтәл артына ултыра.

Мин уның ни рәүешлерәк эшләүен дә арыу уҡ белә инем. Ул тәүге осорҙа әҙерләгән материалдарын ныҡлы өйрәнеп, уларҙың кәрәклеләрен һайлап алып, тәртипкә килтергәс яҙа башлай ине. Әҫәрең өсөн, бигерәк тә тарихи йәки документаль әҫәр яҙыу өсөн, материал һайлап ала һәм уларҙы файҙалана белеү бик мөһим. Һуңға табан үтә ҡабаланыуҙан, күберәк яҙып өлгөрөргә тырышыуҙан йәки үҙен хәҙер бик тә оҫта итеп тойоуҙанмы, әҫәрҙәренә талапсанлыҡ кәмей төштө. Мин был фекерҙе яҙыусының бөтә ижад юлын арыу уҡ яҡшы күҙ алдына килтергәнгә һөйләйем. “Ағиҙел” журналы редакцияһында, унан китап нәшриәтендә эшләгән дәүеремдә уның ете романы минең ҡул аша үтте һәм уларҙы тейешле кондицияға еткереү өсөн байтаҡ көс түгергә тура килә ине.

Композицион йыйнаҡлыҡ, сюжет үткерлеге, геройҙарҙың баҙыҡлығы яғынан “Бөртөкләп йыйыла алтын” тигән тәүге романын уның иң һәйбәт әҫәре тип иҫәпләйем. Сөнки уны автор оҙаҡ ваҡыт, ҡабат-ҡабат эшләгән, проза секцияһында, журнал редколлегияһында тикшергәндән аҙаҡ та был әҫәрен ентекле ҡарап сыҡты. Журналға бирелгән варианты Фәрит Иҫәнғолов тарафынан әҙерләнде. Ә китабы һүҙ оҫтаһы Шакир Насиров ағайҙың махсус мөхәррирлегендә

донъя күрҙе һәм әҫәр уҡыусылар күңелен яуланы, хатта ул әҙәбиәтебеҙҙә яңылыҡ һымаҡ ҡабул ителде.

Бына ошо уңыштан аҙаҡ Яныбай Хамматов әкренләп үҙенә булған талапты кәметте, ҡулдан яҙыуҙан туҡтап, туранан-тура машинкала баҫа башланы. Тәүҙә ҡулдан яҙмайынса, машинкала туранан-тура ғариза ла яҙа белмәгәс, был миңә бик сәйер, нәфис һүҙ менән эш итеүгә яуапһыҙ ҡараш һымаҡ тойола. Стиль ҡытаршылығы, хикәйәләүҙәге бер төрлөлөк уға яҙыу оҫталығын үҫтерә барыуға ҡамасауланы. Етмәһә бит әле, Яныбай Хамматовтың махсус филологик белеме лә юҡ ине.

Проза секцияһы ултырыштарында әҫәрен тикшергән һайын ҡәләмдәштәре уға ошо етешһеҙлектәрен күрһәтә, уны төҙәтергә кәңәштәр бирә ине. Ә ул рәхмәт әйтә, ихлас күңелдән сәй эсергә саҡыра.

Әйткәндәй, секция ултырышынан аҙаҡ сәй өҫтәле артына йыйылып ултырып, әҙ-мәҙ мәйен дә ҡапҡылап алыу ғәҙәткә ингәйне һәм ул ижади һөйләшеүҙең дауамы һымаҡ ҡабул ителә торғайны. Бындай дауам итеүҙең ҡыҙығыраҡ осланып ҡуйғаны ла булды. Ибраһим Абдуллиндың “Хуш, Рим!” тигән романын тикшергәс, ағай, һөйләшеүҙән бик ҡәнәғәт ҡалған кешеләй:

– Киттек, егеттәр, – тине.

“Өфө” ресторанына барып индек. Ағайыбыҙ ваҡланып торманы, өҫтәл артына ултырыу менән, мул ғына итеп заказ биреп ташланы. Һөйләшеү тәүҙә әле генә тикшерелгән әҫәр тураһында барҙы, унан дөйөм донъя хәлдәренә күсеп кителде, күңелдәр күтәрелде. Ә инде ашап-эскән өсөн иҫәпләшеү ваҡыты еткәс, беҙҙе ошонда алып килгән ағайыбыҙ:

– Йәгеҙ, егеттәр, кемдә күпме бар, сығарып һалығыҙ. Әҫәремде тәнҡитләгән өсөн һеҙҙе һыйларға тейеш түгел дә инде мин, – тигәс, аптырауҙа ҡалдыҡ.

Ресторанға инеп ултырыуҙы уйламағас, күптәребеҙҙең кеҫәһе буш булып сыҡты. Шулай ҙа, эҙләнә-һәрмәнә торғас, түләрлек аҡса йыйылды. Ошондай хәлдән аҙаҡ та күңелдә насар ойотҡо ҡалманы, уны бер мәрәкә хәл итеп иҫкә ала инек...

Яныбай Хамматов ижады тураһында һөйләүҙән ситләшеберәк киттек бит әле. Иң үкенеслеһе – ул ҡәләмдәштәре фекеренә бигүк ҡолаҡ һалып еткермәне, тикшерелгән ҡулъяҙмаһы өҫтөндә ныҡлап эшләмәй башланы. Уның байтаҡ әҫәрҙәрен мөхәррирләүем тураһында әйткәйнем инде. Мин быны, авторға ҙур хеҙмәт күрһәттем, тип уйлауҙан яҙмайым. Әйтергә теләгән фекерем – яҙыусы һәр яҙғанын үҙе еренә еткереп эшләргә тейеш. Ниндәй генә шәп мөхәррир ҙә автор кеүек әҫәренең эсенә инеп, уның кеүек үк уйлап эш итә алмай. Йәшерәк быуын яҙыусылар ошо турала онотмаһын ине, тим. Хәҙер ана машинкала ғына түгел, туранан-тура компьютерҙа яҙыусылар күренә башланы. Мин быны уларҙың әҫәрен уҡығанда уҡ күреп-белеп торам: ниндәйҙер робот уйлағанса һәм яҙғанса ҡоролоғонда, нәфис әҙәбиәткә хас эмоциаллектең әҫәре лә юҡ. Бындай әҫәр йораттарының уҡыусы күңелендә матурлыҡҡа ынтылыу хисе тәрбиәләренә шикләнеп ҡарайым. Хатта уның зыяны ла барҙыр әле: бындай ағас телдә яҙылған әҫәрҙәр уҡыусыны нәфис әҙәбиәттән биҙҙерә.

Бына әле яҙыусының ижад процесында һәр төрлө фекер алышыуҙарҙың бик кәрәкле, файҙалы күренеш булыуы хаҡында яҙам, һәм тормошта булған хәлдәр бер-бер артлы күҙ алдынан үтә. Мин ғүмерем буйына күңелһеҙ, хатта йөрәккә яра һалырлыҡ күренештәрҙе ситкә тибәреп, күңелемә яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ һеңдереп йәшәргә тырыштым. Әлбиттә, яманлыҡ, яуызлыҡ та яҡшылыҡ, изгелек менән бер рәттән йөрөй. Ер өҫтөндә йәшәгәндә уларҙы ситләтеп үтеү мөмкин түгел. Ошо күренеш һәр кемдә тормошта үҙ юлын тоҫмаллауҙа күп ауырлыҡтар тыуҙыра, ҡатмарлы һынауҙар алдына ҡуя. Кешелек донъяһы быуаттар

буйына эшкәртә, тормош иләгенән үткәрә килеп, кеше ҡанына күсергән иң юғары ҡиммәттәр, ҡағиҙә-тәртиптәр буйынса йәшәргә тырышҡан әсәйем: „Улым, яҡшылыҡҡа, изгелеккә табын, күңелеңдә кер, кешеләргә үс йөрөтмә, хаслыҡ ҡылма, яман уй кешене эстән кимерә, сәләмәтлекте бөтөрә“, – тип ҡабатлай торғайны. Хатта ул: „Яманлыҡты яҡшылыҡ менән баҫырға кәрәк“,– тип тә әйтә ине.

Йәшәй торғас, тормош, ғүмер тураһында уйлана торғас, уның ошо һүҙҙәренең ни тиклем дөрөҫ булыуына ышандым. Кемдер күңелде ҡырырлыҡ, тормошомда, ижадымда ауырлыҡтар тыуҙырырлыҡ яманлыҡ ҡылғанда ла, бик ҡыйын булыуға ҡарамаҫтан, уны буйға һеңдерергә, яуызлыҡ менән яуап бирмәҫкә, үс һаҡламаҫҡа тырыштым. Уйлай китһәң, ижади мөхиттә ҡараштар тура килмәүе, теге йәки был күренешкә ҡарата бәхәстәр ҡубыуы, һәр кемдең дә берҙәй үк уңыш менән эшләй алмауы элек-электән килгән һәм ул ғәҙәти бер хәл кеүек. Шулай ҙа үҙебеҙ йәшәгән, ижад иткән дәүерҙә күҙәтелгән күңелгә ятышһыҙ ҡайһы бер күренештәрҙе ғибрәт өсөн иҫкә алып үтке килә.

* * *

...Төнгө сәғәт өс. Йоҡо осоп, йәнә тороп ултырҙым. Әүәлгене хәтерләйем тиһәң, бөгөнгө тормошобоҙҙа булып ятҡан йән ҡыйғыс күренештәр иҫкә төшә лә, уйҙар бутала. Йәмғиәт тормошон, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу, сафландырыу өсөн әле ниҙәр эшләнә һуң? Ҡайһы бер ыңғай күренештәр – тышҡы күренештәр – бар, әлбиттә. Ҡалаларҙа, ауылдарҙа йорттар төҙөлә, юлдар һалына, уларҙа машиналар мыжғып йөрөй, яңы мәҙәниәт һарайҙары, мәктәптәр тормошобоҙға йәм өҫтәгән кеүек. Әммә йәмғиәтебеҙҙең тын алышына, ҡан йөрөшөнә – сәләмәтлегенә ныҡлабыраҡ күҙ һалһаҡ, быларҙың тышҡы ялтырауыҡ ҡына икәнен күрмәү мөмкин түгел. Мәҙәниәт йорттарындағы китапханаларҙа китаптар юҡ дәрәжәһендә, булғандарын да уҡыусы бик һирәк. Мәктәптәрҙә компьютерҙар, бүтән төрлө заманса уҡытыу өсөн күргәҙмә әсбаптар әллә ни хәтлем. Шул уҡ ваҡытта балалар мәктәп ишеге алдында тороп тәмәке тарта, һыра һемерә, токсикомания, наркотиктар менән мауығыу ҙа улар өсөн ят күренеш түгел. Күп балалы әсәләргә миҙал тапшырыу, ата-әсәһеҙенә лә, атаһыҙ тыуған балаға ла аҡса түләү һәйбәт. Тик ниңә һуң әле башлы-күҙле булып донъя көтә башлаған йәштәрҙең яртыһынан күберәгенең никахы тиҙ үк боҙола, һәм ирһеҙ ҡатындар, бисәһеҙ ирҙәр һаны арта бара?

Әле бына ошо көндәрҙә генә телевизорҙан ҡот осҡос бер хәлде күрһәттеләр. Мәләүездән Өфөгә килгән бер ҡатын ике йәшлек малайын көрткә ырғытып киткән. Сәбәбе: торор урыны юҡ, эшкә урынлаша алмай. Ә инде мәктәптә йәки вузда уҡыған ҡыҙҙарҙың бала табып, уларҙы ҡарап үҫтереүҙән баш тартыуы, хатта изге йән эйәләрен сүплеккә сығарып ташлауы тураһында аҙ ишетәбеҙме ни? Рәсәйҙәге ярлы ғаиләләрҙә йәшәүсе ике миллион самаһы баланың уҡый алмайынса наҙан ҡалыуы, шул уҡ ваҡытта заман байҙарының балалары сит илдәрҙә уҡыуы, Рәсәй ҡалаларында миллионерҙар балалары өсөн айырым мәктәптәр асылыуы беҙҙе киләсәктә ниндәй хәлгә төңкәтәсәк?

Хәҙер килеп, балалар булмау йәки аҙ булыу сәбәпле, ауылдарҙа бик күп мәктәптәр ябылды. Ғөмүмән, мәктәптәрҙе ябыу юғарынан бирелгән күрһәтмәләрҙән сығып, рәсми рәүештә бөтә ил буйынса бара. Ауылдарҙағы балаларҙы наҙан ҡалдырасаҡ был ҡот осҡос сәйәсәттең насар һөҙөмтәләрен күҙаллау ҡыйын түгел. Мәктәп булмағас, бәләкәйерәк ауылдар ҙа бөтәсәк. Башланғыс класс балаларын көн дә сит ауылдарға йөрөтөп уҡытыу мөмкинме ни? Улар бит ғаилә йылыһынан, тыуған төйәгенән өҙлөкһөҙ айырылып торорға мәжбүр. Ошо арҡала хәҙер күпме уҡытыусы эшһеҙ ҡалды. Был күренештең йәнә лә бер яман яғы бар:

Тыуған ил, ватансыллыҡ тойғоһо, тыуған төйәккә һөйөү шул ерлектә тыуған иң изге традицияларға тоғролоҡ булғанда ғына үҙенең ыңғай һөҙөмтәләрен бирә. Кешелек сифатын билдәләүсе был юғары ҡиммәттәр былай ҙа бик түбән төшкән мәлдә йәшәйбеҙ. Хәҙерге йәштәр өсөн бит тыуған ауылын ғына түгел, тыуған илен ташлап сығып китеү, тамағы туйған ерҙә аҙып-туҙып йөрөү ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Уларҙың, ҡамғаҡ кеүек, һырыныр урын тапмай йөрөп ятыуы, ғаилә ҡороп төпләнеп йәшәмәүе ауылдарҙа балалар һаны кәмеүгә, мәктәптәр ябылыуға килтерә лә инде. Бына шулай был процесс, бөтә нәмәне тураҡлап үҙенә йотоусы абжур ҡуласа һымаҡ, ил-еребеҙҙе тарҡатыусы хәтәр күренешкә әүерелгән.

Ошо урында үҙемдең тыуған яҡта булған бер хәл иҫкә төшә. Тыуған ауылыма ҡайтып барғанда Маҡар ауылында туҡтағайным, мәктәпкә һуғылып, ата-әсәләр, уҡыусылар менән осрашыу үткәреп китеүемде һоранылар. Әлбиттә, ихлас күңелдән ризалаштым. Маҡар – бай тарихы булған, тәбиғәттең бик матур еренә урынлашҡан төйәк. Селтерби, Йәнәлтау, Тубыҡтау, Ҡарауыл тауы, Һикәҙе йылғаһы буйындағы матур үҙәндәр... Уны халыҡ юҡҡа ғына „Икенсе Швейцария“ тип атамай. РСФСР-ҙың халыҡ артисы Ғәлимйән Ҡарамышев ошо ауылда тыуып үҫкән, атаҡлы ғалим Жәлил Кейекбаев, яҙыусы Шакир Насиров, Советтар Союзы Геройы Зөбәй Үтәғолов Маҡар мәктәбендә белем алған. Был мәктәп Бөйөк Ватан һуғышы йылдарынан һуң ғына ла күпме балаларға белем биреп, уларға ҙур тормош юлына сығырға ярҙам иткән.

Маҡар ауылы тураһында ҡыҫҡаса ғына һөйләп үтеүемдең сәбәбе: мин ошо ауыл мәктәбендә уҡығаным өсөн ғүмерем буйы ғорурлыҡ тойғоһо йөрөтәм. Бында уҡырға ил өҫтөнә күп ғазаптар килтергән һуғыштан һуң килгәйнем. Фашистарҙы еңеп, тыныс тормош башланғас ни, күңелдәрендә дәрт тоҡанған балалар мәктәпкә ябырылды. Ул саҡта башҡорт урта мәктәбе районда берәү генә ине, күрше ауылдарҙа етенсе класты бөтөүселәр бөтәһе лә Маҡар мәктәбенә килеп тулды. Туғыҙынсы класс ике төркөмгә бүленде: “а” һәм “б” кластары, алтмыштан артыҡ инек. Үрҙә әйткәнемсә, ике мең дә һигеҙенсе йылда барғанымда быйыл туғыҙынсы класта өс кенә бала булыуын белгәс, иҫ-аҡылдарым ҡороно. Ә беренсе класта ете бала, тинеләр. Ҡасанғылыр волость, унан район үҙәге булған Маҡар (алтмышынсы йыл баштарына тиклем хәҙерге Ишембай районы Маҡар районы тип йөрөтөлә ине) хәҙер һуғыштан һуңғы йылдарға ҡарағанда йорттар һаны яғынан ике тапҡырға ҙурыраҡ һәм республикалағы иң эре ауылдарҙың береһе иҫәпләнә. Ә мәктәпкә йөрөрлөк балалар ҡайҙа һуң? Иҫ китмәле күренеш бит был. Кешеләре эшһеҙлектән интеккән ауылдың киләсәге ниндәй?

Яуап табып булмаҫтай һорауҙар күп. Шуның өҫтәүенә килеп бит әле, Мәскәүҙәге аҡыллы баштар республикалағы башҡорт мәктәптәрендә милли компоненттарҙы бөтөрөү тураһында закон сығарып ята. Был – милләттәрҙең киләсәгенә быҒау һалыу өсөн уйлап сығарылған сәйәсәт, милли рухты бөтөрөргә ынтылыу. Был йомро баштар балала туған теленә, тыуған еренә, ата-бабалар традицияһына һөйөү, ихтирамлы ҡараш тәрбиәләмәй тороп, юғары рухлы гражданин үҫтереп булмауын аңламаймы икән ни? Уларға сик ҡуйырҙай власть ҡайҙа?

Ниндәй генә өлкәгә күҙ ташлаһаң да, ябай хеҙмәтсәндәрҙә асыу тыуҙырырлыҡ хәлдәр. Тормоштоң байҙарға һәм ярлыларға бүленеүен әйт әле. Ер аҫты байлыҡтарын, эре компанияларҙы, сәнәғәт һәм сауҙа предприятиеларын үҙ ҡулында тотҡан олигархтарҙың шәхси самолеттарына йәш ҡыҙҙар тейәп байрам, хатта ял һайын Францияға, Италияға, Испанияға барып, миллионлаған һумлыҡ шағараҡ ҡороуҙарын асыҡтан-асыҡ яҙалар. Әлбиттә, был хаҡта власть башында ултырыусылар ҙа белә. Тик шулай ил байлығын туҙҙырыусыларға кәртә ҡороу тураһында уйлаусы юҡ. Ә кем борсолһон был хаҡта? Хөкүмәт башында ултырған

вице-премьерҙар, министрҙар ҡатын айырып, йәшенә өйләнеүҙе, сысҡан да үткеһеҙ ҡоймалар менән уратылған зиннәтле һарайҙарҙа йәшәүҙе үртеш иткән. Дәүләт Думаһы депутаттары, парламент ултырыштарында ла рәтләп ултырмайынса, коммерция – күберәк аҡса һуғыу, байлыҡ арттырыу менән шөғөлләнә. Шуға күрә лә Дәүләт Думаһында коррупцияға ҡаршы көрәш тураһындағы закон проектының ун йылдан артыҡ ҡабул ителмәй ятыуына бер ҙә аптырайһы түгел. Сөнки ул закон проектында „Дәүләт байлығын урлағандарҙың, әгәр уның урлыҡ юлы менән ҡулға төшөрөлөүе раҫланһа, ул милекте конфискацияларға“ тигән статья ла бар ине. Хәҙер килеп, илдә законлылыҡты нығытыу һағында торорға тейешле депутаттар Енәйәт кодексынан “милекте конфискациялау“ тигән төшөнсәне бөтөнләй алып ташлау тураһында ҡарар ҡабул иткән.

Ә Федерация Советында үҙебеҙҙең Башҡортостандан сенатор булып кем йөрөгән бит: беҙҙең нефтте һатып байыған, бер нисә кешене үлтереүҙә ҡатнашҡан, миллионлаған һум һалымын түләмәгән, Өфөләге иң яҡшы һәм ҡиммәтле Президент-отель ҡунаҡханаһын үҙ ҡулында тотҡан Игорь Изместьев тигән бәндә. Ул Салауат ҡалаһында тыуған, уны беҙ “демократия сәскә атҡан осорҙа” үҙебеҙ тәрбиәләп үҫтергәнбеҙ һәм шундай хәлгә алып барып еткергәнбеҙ.

Мин, ғөмүмән, республикабыҙ етәкселеге алып барған ҡайһы бер йүнәлештәрҙе аңламайым. Ижтимағи тормошҡа, йәмғиәттең үҫеш закондарына элеккесәрәк ҡараштә булыу ҡамасаулаймы, хәҙерге ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе аңлап еткермәйемме? Әммә республика байлығын, халыҡ ҡаҙаныштарын һаҡлауға ҡараш ниндәй генә сәйәси ҡоролош булғанда ла берҙәй үк булырға тейеш. Ул – милли байлыҡты тарҡатмау, уны сит ҡулдарҙан, бигерәк тә аҫтыртын уй менән эш итеүселәрҙән күҙ ҡараһылай һаҡлау. Хәҙер беҙҙең иң эре сәнәғәт предприятиелары, нигеҙҙә үҙ еребеҙҙә етештерелгән сеймал менән эшләүсе шәкәр заводтарына тиклем Мәскәүҙә, хатта сит илдәрҙә йәшәгән миллиардерҙар ҡулына күсеп бөткән. Уларҙы инвесторҙар, тағы әллә кемдәр тип атайҙар. Йәнәһе, улар предприятиеларҙағы ҡорамалдарҙы яңырта, етештереү күләмен арттыра. Сит кешенең атына ултырһаң, үрәсәгә нығыраҡ йәбеш, тиҙәр. Предприятиеларға әлеге инвесторҙар хужа итеп үҙ кешеләрен ҡуя, әкренләп төп белгестәрҙе лә үҙ кешеләренә алмаштырһалар, беҙгә күкиш күрһәтмәҫтәр, тип әйтә алабыҙмы? Ана бит, Мәскәү мэры Лужковтың ҡатыны Октябрь проспектындағы “Мир” сауҙа комплексын һатып алғайны. Хәҙер уға быға тиклемге майҙандар ғына тар. Ул комплексты Ауыл хужалығы институтына табан һуҙырға теләй. Ә бының өсөн тегенселәр әҙерләй торған училищенең дүрт ҡатлы бинаһын, Полиграфия комбинатын алып ташларға кәрәк. Мәскәү байына Өфөләге берҙән-бер тегенселәр әҙерләү колледжы ниңә кәрәк? Ә беҙҙең хөкүмәт, Батуринаның тауҙай вәғәҙәләренә ышанаыпмы, әллә бүтән берәй нәмәгә ымһыныпмы, Полиграфкомбинатты ҡала ситенә



*Яҙыусы ҡатыны Фәһимә менән «Аҡлан» дачаһындағы өйө янында.*

күсереүҙе планлаштыра ла башлағайны. Бында бит китаптар баҫыу менән генә сикләнмәйҙәр, был бинала республиканың барлыҡ журналдарының редакциялары урынлашҡан, „Китап“ нәшриәте үҙ көсө менән миллионлаған һумға төшөрөп, баш ҡалабыҙҙағы берҙән-бер башҡорт китаптары магазинын асты. Был бинала йөҙәрләгән кешеләр эшләй. Мәскәүҙәргә ярамһаҡланып, шуларҙың бөтәһен ҡала ситенә сығарып ырғытырғамы? Нәфселәре сиктән ашҡан сит байҙарҙың ана шулай яңынан-яңы талаптар ҡуйып, хаттинашып китеүе лә, беҙҙең менән бөтөнләй иҫәпләшмәй башлауҙары ла бик ихтимал.

Был юлдарҙы уҡығас, ҡайһы берәүҙәрҙең: “Ә ниңә һуң ошоларҙы фашлап әҫәр яҙмайһың?” – тиеүҙәре мөмкин. Яҙыусылар бар был турала: аҡса, байлыҡ өсөн талаш, һуғыш, үлтереште һүрәтләгән детектив әҫәрҙәр һәләк үтемле хәҙер, телевизорҙан да ошо хаҡта әллә ни тиклем тапшырыуҙар ҡарайбыҙ. Әммә улар кеше күңеленә матурлыҡ, изгелек тойғолары сәсмәй, Изместьев кеүектәрҙе генә үрсетә.

Минеңсә, бына ошондай иҫ киткес күренештәр Борис Ельцин кеүек үҙ амбицияларын яҡлап илде туҙҙырған башкиҫәрҙәр власты ҡулға алғандан бирле мәҙәниәткә иғтибар бирелмәүе, улай ғына ла түгел, йәшәйешебеҙ тарихы барлыҡҡа килтергән иң ҡәҙерле ҡиммәттәрҙең аяҡ аҫтына һалып тапалыуы арҡаһында килеп тыуҙы. Ленин, Сталиндан алып Гастелло, Матросов, хатта Павлик Морозовҡа тиклем бөтәһен дә юҡҡа сығарырға тырышып, шул уҡ ваҡытта Николай батшаның, Деникин, Каппель кеүек генералдарҙың һөйәк-һаяғын сит илдәрҙән ҡаҙып алып ҡайтып, монастырҙарға күмеү юлы менән халыҡты рухи яҡтан тәрбиәләү, юғары әхлаҡ нормалары булдырыу мөмкинме ни? Үҙҙәрен бик тә күпте белгәнгә иҫәпләгән, үҙ исемдәрен яманлыҡ ҡылыу аша булһа ла кешеләргә танытырға теләгән миһырбанһыҙ әҙәмдәр шундайын боҙоҡлоҡҡа барып етте – уларға ил тарихын боҙоп күрһәтеү, айырым шәхестәргә генә түгел, илгә, халыҡҡа ҡара яғыу ҙа бер ни тормай. Йәнәһе, улар иҫбатларға тырышҡанса, мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ беренсе йыл һуғыш башланыуҙа СССР ғәйепле. Хәсән күле, Фин һуғыштары ла беҙҙең ғәйеп менән башланған. Хәҙер ана хатта Чуд күлендәге алышты унда Александр Невскийҙың батырлыҡтарын юҡҡа сығарырға тырышып яҙып сыҡтылар. Ил тарихына, халыҡ хәтеренә ҡара яғыусыларҙы иң юғарылағы власть органдары ниңә күрмәй? Бына ошондай һуҡырлыҡ, төптән уйланмаған ҡайһы бер аҙымдарыбыҙ халҡыбыҙҙы ҡол итергә ынтылған, әле һаман да тамырҙары ҡоромаған фашистик идеология тирмәненә һыу ҡоя. Етмәһә, ошондай яман күренештәргә йәшел юл асылған шарттарҙа Эстонияла һәм бүтән ҡайһы бер илдәрҙә фашистарға ҡаршы көрәштә батырлыҡтар күрһәткән һуғышсыларға ҡуйылған һәйкәлдәрҙе емереүселәрҙе тәнҡитләп маташабыҙ.

Һуңғы ун биш йыл эсендә мәҙәниәтебеҙҙе артабан үҫтереү тураһында Рәсәй хөкүмәтенең бер ниндәй ҙә эффектлы сара күрмәүе күп нәмә хаҡында һөйләй. Рәсәй һәм Башҡортостан президенттарының илдәле бер араға йәшәү рәүешебеҙҙе илдәләүгә арналған йыллыҡ мөрәжәғәттәрендә, әгәр уларҙы иғтибар менәнерәк уҡыған булһағыҙ, мәҙәниәт, рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм артабан үҫтереү тураһында бер ауыҙ һүҙ ҙә юҡ. Бюджетта иһә мәҙәниәткә ҡалдыҡ-боҫтоҡ ҡына аҡса бүленә. Ә бит мәҙәниәт – йәмғиәттең йәне. Йәнһеҙ ниндәй тормош була ти инде? Хәҙер килеп, илдә әхлаҡ нормалары тамам боҙолоуға барып еткәс, ошо дәрәҫлектә иҫкә төшөрөп (бәлки, берәй аҡыллы йән ошо хаҡта уның ҡолағына шыбырлағандыр), Президент Владимир Путин Дәүләт Советы ултырышында шул мәсьәләне күтәреп сыҡты. Изгелекле, кешеләр күңеленә яҡтылыҡ нуры һибеүгә йүнәлтелгән эш бер ваҡытта ла һуң түгел. Әммә кеше күңелен рухи яҡтан имгәтеү бик тиҙ булһа ла, уны уңалтыу өсөн тиҫтә һәм тиҫтә йылдар кәрәк буласаҡ.

Үҙебеҙ үк тыуҙырған ауыр хәлдән сығыу юлын ниҙән башларға һуң? Әлбиттә, был һорауға бер ҡатлы ғына яуап биреү мөмкин түгел. Шулай ҙа йәшәйештең үҫеш, яңырыш тарихына күҙ һалһаң (Ҡөрьән йәки Библияны уҡып ҡарау ҙа зыян итмәҫ), әүәлдән әйтелгән тормош ағышының башы "ҺҮҘ" тигән дөрөҫлөктө йәнә бер ҡабатлағы килә. Шуға күрә бына беҙ, яҙыусылар, кешене Кеше итеүсе, тормошто алға этәреүсе һүҙ менән эш иткән үтә лә яуаплы бурыс башҡарыусы заттан икәнлегебеҙҙе онотмаһаҡ ине. Ил тормошона байҡау яһау, бөгөнгө һәм яҡын киләсәктәге иҡтисади һәм сәйәси үҫеш йүнәлештәрен билдәләү хакимдарҙың бурысы булһа, халыҡтың күңелен дауалау, уны рухи яҡтан ярлыландырмай тормошҡа һөйөү, матурлыҡҡа табынып йәшәү кеүек сифаттар тәрбиәләү һәр саҡ һүҙ оҫталарының өҫтөнә төшкән. Донъяның бөйөк һүҙ оҫталары (бынан мең йыл алғараҡ күҙ һал), аҡыл эйәләре, яҙыусылар, сәсәндәр кеше аҡылын тәрәнәйтеү, унда намыҫ сафлығын һаҡлау өсөн ни тиклем бөйөк эштәр башҡарған бит! Аҡыл эйәһе Федор Достоевский: "Яҡшылыҡҡа һәм матурлыҡҡа ынтылыу башланғысы (ойотҡоһо) булмай тороп, яңы быуынды юлға сығарырға ярамай", – тип юҡҡа ғына әйтмәгән. Үҙебеҙ белгән тиклем башҡорт әҙәбиәтенә күҙ һалһаҡ та, ошондай тенденцияны асыҡ күрергә мөмкин. Улар милли үҙаңды, күңел сафлығын һаҡлап ҡалырға саҡырыу менән генә сикләнмәгән – халҡыбыҙҙы үҙ илен, үҙ ерен, үҙ азатлығын һаҡлау өсөн көрәшкә лә күтәргән.

Бөгөнгө яҙыусыларыбыҙ үҙ өҫтөнә ятҡан ошондай ҙур миссияны нисегерәк үтәй? Әлбиттә, һәр әҙип ҡулынан килгәнсә дөйөм эшкә үҙ өлөшөн индерергә тырыша. Һәр жанрҙа ла яңынан-яңы әҫәрҙәр тыуа тора, ҡәләм оҫталарының халыҡ менән туранан-тура осрашып һөйләшеүе лә кешеләр күңеленә матурлыҡ орлоҡтары сәсергә ярҙам итә. Әммә бөгөнгө кеүек халыҡтың рухи яҡтан бик ныҡ бөлгөнлөккә төшкән мәлендә беҙҙең эштең тәьҫирлелеге күпкә юғарыраҡ булһын ине, тигән теләк тыуа.

Бының өсөн, беренсе сиратта, әҫәрҙәребеҙҙең художество кимәлен күтәрергә кәрәк. Ә һуңғы буталсыҡ йылдарҙа әҙәби ижадтағы был мөһим талапҡа иғтибар йомшарҙы. Былай тип әйтеү генә лә аҙҙыр. Ҡәләм тибрәткән һәр кемдең етлекмәгән, художестволы әҫәр менән һис ниндәй уртаҡлығы булмаған яҙмалары гәзит, журналдарҙа баҫыла, хатта китап булып сыға, уларҙы Яҙыусылар союзына ағза итеп алабыҙ. Ошо арҡала һүҙ ҡәҙерен дә ебәрҙек түгелме?

ҺҮҘҘЕҢ тәрбиәүселәнешен тейешле кимәлгә күтәреү өсөн яҙыусы абруйының юғары кимәлдә булыуы шарт. Бөгөн ошо хәл нисегерәк һуң әле?

Яҙыусылар ойошмаһын кәбән ҡойоу өсөн ҡоролған таған менән сағыштырһаҡ, Мостай Кәрим ағайыбыҙ ошо тағандың үҙәге булған һымаҡ тойола. Ул үҙенә һөйәлгән тағандарҙы һәр саҡ ныҡлы тотоп торҙо. Уның ҙур таланты, власть кешеләре алдындағы абруйы ауырыраҡ мәлдәрҙә беҙҙе яҡларға булышлыҡ итте. Уның бер ауыҙ йылы һүҙе беҙҙе дәртләндерә, орошоп өндәшеүе үҙ эшебеҙгә яуаплыраҡ ҡарарға мәжбүр итә ине. Ул арабыҙҙан киткәс, Мостай ағай белдекле, абруйлы, шул уҡ ваҡытта ҡаты ҡуллы ил башлығы булған икән, тип тә уйлап ҡуям. Хатта Сталин иҫкә төшә. Хәҙер тик кире яҡтарын ғына һөйләһәләр ҙә, уның культы үҙ ваҡытында ил халҡын бергә тупларға, бик ҙур ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам иткән. Әле бына Рәсәй баҙар иҡтисады йәтмәһенә эләгеп, унан ысҡына алмай тыпырсынғанда, беҙ, бигерәк тә егерменсе быуат кешеләре, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, Сталин исемен иҫкә төшөрөүсән булып киттек. Бер ҙә юҡтан түгелдер был...

СССР тигән ҙур илдә йәшәгән саҡта күп милләтле әҙәбиәт донъяһында шундайыраҡ хәл дә күҙәтелә ине: һәр союздаш һәм автономиялы республикала милли әҙәбиәт башында торған, һәр урында, һәр кимәлдә ошо әҙәбиәтте кәүҙәләндереүсе булараҡ сығыш яһаған бер яҙыусы була торғайны. Улар – СССР йәки

РСФСР Юғары Советы депутаты, улар – дәүләт премиялары лауреаттары, улар – Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, ҡыҫҡаһы, уларҙың абруйын күтәреү өсөн бөтәһе лә эшләнде.

Хәҙерге күҙлектән ҡарағанда, был хата күренеш һымаҡ. Дөйөм көс менән яуланған әҙәби ҡаҙаныштарҙы ниңә бер кешегә генә ҡайтарып ҡалдырырға? Аҙаҡ килеп, был уғата ҙур абруйҙың кире эҙемтәләре лә күренде: оло абруй тигән хөрмәтле һәм ауыр йөктө күтәреүселәр үҙҙәрен бөтә нәмәгә баш итеп тойоуҙан ҡотола алманы. Улар үҙ ойошмаларындағы яҙыусыларға һәр төрлө маҡтаулы исем биреүсе, лауреат итеүсе түрәгә әйләнеп китте, хатта үҙҙәрен әҙәбиәттең кендеге итеп тоя башланы.

Ҙур талант эйәһе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми үҙенең Хәсән Назар ижады тураһындағы мәҡәләһендә (ул “Ағиҙел” журналында баҫылды) тәү башлап рәсми рәүештә ошо турала һүҙ ҡуҙғатты. Ул бит үҙе лә “Халыҡ шағиры” тигән юғары исем йөрөттө, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең дәүләт премиялары лауреаты ине, ошондай юғары исемдәр йөрөткән яҙыусылар менән аралашып йәшәне. Был фекерҙе әйтергә нимә мәжбүр итте икән уны? Ижади уңыштарҙы маҡтаулы исем түгел, әҫәрҙең художество кимәле билдәләй йәки был күренеш дөйөм әҙәбиәт үҫешенә, яҙыусы шәхесенең йәмғиәттә тотҡан абруйын дөрөҫ билдәләүгә зыян итә, тип уйланымы?..

Бына мин үҙем, яҙыусылар менән алтмыш йыл ҡатнашып, һәр төрлө йыйындарҙа, съездарҙа булып йәшәгән арала, ошолай бер кешене күтәрмәкләп йөрөтөүҙең икенсе бер кире һөҙөмтәһен дә күрҙем.

Әҙәбиәттә үҙ урынын юғарыраҡ кимәлдә билдәләүҙе төрлө кеше төрләсә аңлай. Әлбиттә, уның иң дөрөҫ юлы – уҡыусы күңелен яуларлыҡ яҡшы әҫәр ижад итеү. Ә ҡайһы берәүҙәр уны ниндәй ҙә булһа лауреат исеме алыу аша (ә хәҙер ниндәй кимәлдәге генә лауреат исеме юҡ) яуларға ынтыла, икенселәре етәксе эшкә, бигерәк тә Яҙыусылар союзының рәйесе булып үрләү аша абруй ҡаҙанырға тырыша. Һәр төрлө юлдар менән әллә нисәмә районның лауреаты (улар бик күп: Аҡмулла, Чекмарев, Зәйнәб Биишева, Фәтих Кәрим, Ким Әхмәтйәнов, Хәким Ғиләжев, Ғәли Ибраһимов, Булат Рафиҡов, Рәми Ғарипов, Муса Мортазин, Рәшит Әхтәри һ. б.) булыуға өлгәшкәндәр байтаҡ булып бара. Һәр төрлө ойошмаларҙан, районларҙан, айырым кешеләрҙән хат яҙҙырып, республика күләмендәге дәүләт премияһын алырға ымһыныусылар ҙа ишәйеп китте, хатта ошондай юл менән үҙ маҡсаттарына ирешкәндәр ҙә бар. Юғары вазифала эшләүселәр алдында ялағайланыу, уларға ошаҡ йөрөтөү аша ярарға тырышыу кеүек әҙәм балалары аңынан һис тә һепереп ташлап булмай торған йәмһеҙ сифаттар хас бындайҙарға. Хәҙер ана үҙ маҡсаттарына ирешеү өсөн халыҡ тормошон яҡшыртыу тәңгәлендә бер ни ҙә ҡыла алмаған “Берҙәм Рәсәй” партияһы ышығына ынтылыусылар күбәйҙе. Был ышыҡ депутатлыҡ урынын яуларға, умырып эш хаҡы алып, ҡаҡшамаҫ хоҡуҡтар ҡапламаһы аҫтында рәхәтләнеп йәшәргә мөмкинлек бирә. Ә инде ошондай юлдар менән етәксе постарға үрләүселәрҙе иҫкә алһаҡ...

Был турала һөйләге лә килмәй, юғары кимәлдә хәл ителә торған мәсьәлә ләстит хәбәргә әүерелер һымаҡ. Икенсе яҡтан, уныһы ла беҙҙең әҙәби тормош тарихындағы заман күренешен сағылдырыусы хәл бит.

Илленсе йылдар башынан республиканың Яҙыусылар ойошмаһын Мостай Кәрим етәкләне. Утыҙын саҡ үтеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт шиғриәтенең алдынғы сафына баҫҡан, Ватан һуғышының утлы юлдарын үткән, бер нисә тапҡыр үлем күҙенә тура ҡараған, үҙенән өлкән ҡәләмдәштәренең дә ихтирамын яулап алырға өлгөргән шәхес ине инде ул. Был абруйлы һәм яуаплы йөктө ул ун йылдан артыҡ тартты. Ул рәйес булған саҡта бик тә теүәллекте

яратҡан Хәниф Кәрим, аҙаҡтаныраҡ – харап йылғыр һәм эшмәкәр Нәжибәк Хафизов Союз идараһының яуаплы сәркәтибе эшен алып барҙы. Аҙаҡ килеп, Мостай Кәрим был вазифаға, йәғни сәркәтип итеп Назар Нәжмиҙе ултыртты. Бер-ике йылдан уның был „ход“ты ниңә эшләүе асыҡланды: ул ижадташ дуҫын үҙ урынына әҙерләгән. Юғарылағы ойошмалар ҙа, ҡәләмдәштәре лә Мостай Кәримдән рәйеслек вазифаһын дауам итеүен һорауҙарына ҡарамаҫтан: “Миңә ижад эшенә ныҡлап тотонорға кәрәк”, – тип үҙ урынына Назар Нәжмиҙе тәҡдим итте. Ә Назар Нәжми, үҙ сиратында, бик тә итәғәтле, эшһөйәр Шәриф Биҡколды яуаплы сәркәтип итеп алды.

Назар Нәжми үҙенең тәбиғәте менән етәксе креслаһында оҙаҡ түҙеп ултыра торған кеше түгел ине. Уға иркенлек, үҙе теләгәнсә йәшәп ижад итеү мөһим. Уның, йәш саҡта күберәк ваҡытты елғыуарлыҡта үткәрелгән, шуның байын хәҙер ҡайтарырға кәрәк, тигән һүҙҙәрен дә ишеткән бар ине. Шулай итеп, бер һайлау срогы – биш йыл рәйеслек эшен алып барҙы ла (шул саҡ уға илле йәш тулды) был вазифанан бушатыуҙарын һораны.

Билдәле булыуынса, кемде лә булһа яуаплы посҡа тәғәйенләгәндә һуңғы һүҙҙе партия өлкә комитеты, уның беренсе секретары әйтә ине. Был юлы уларҙың ҡарашы “Ағиҙел” журналының баш мөхәррире булып эшләгән Хәким Ғиләжевта туҡталды. Хәким Ғиләжев ун өс йыл баш мөхәррир булып эшләгән осоронда берҙән-бер әҙәби журналыбыҙҙы ғәжәп популяр баҫма итеүгә өлгәшкәйне. Ул журналды ҡабул итеп алғанда тираж ике мең ете йөҙ самаһы ғына булһа, мең туғыҙ йөҙ алтмыш һигеҙенсе йылға был һан ҡырҡ меңдән ашып китте. Быға, әлбиттә, баш мөхәррирҙең журналда баҫыласаҡ әҫәрҙәргә талапсан ҡарашы, авторҙар менән актив эш алып барыуы, йөкмәткене байытыу өсөн эҙләнеүҙәр – журналда яңынан-яңы рубрикалар асыу, хатта уның тышҡы күренешен үҙгәртеү өсөн бер нисә тапҡыр конкурс иғлан итеү арҡаһында өлгәшелде. Ә һуң “Әҙәби Башҡортостан” исемен “Ағиҙел”гә алмаштырыу, уның күләмен арттырыу еңел булдымы ни? Ул йылдарҙа был эш бик күп инстанциялар аша, хатта Мәскәүгә барып етеп хәл ителә ине. Ана шулай журналдың даны артыу менән бергә, Хәким Ғиләжевтың да абруйы ныҡ күтәрелгәйне.

Ошо урында Хәким Ғиләжевтың авторҙар менән нисек эшләүе, журналда баҫыласаҡ материалдың документаль яҡтан дөрөҫлөгөнә (бында һүҙ очерктар тураһында бара) бик талапсан булыуы хаҡында бер ҡыҙыҡлы ваҡиғаны иҫкә төшөрөп үтке килә.

Атаҡлы опера йырсыһы Баныу Вәлиеваның илле йәшенә ҡарата материал бирергә булдыҡ. Бындай темаға радиокомитетта эшләгән Мәғәсүмов һәм әүәлге мәҙәниәт министры урынбаҫары, шулай уҡ хәҙер радиокомитетта эшләп йөрөгән Рәжәп Хәйруллиндар яҙғылай ине. Улар икеһе лә Баныу Вәлиева ижадына арналған материал килтереп еткерҙе. Мөхәрриргә шул турала әйткәйнем, ул уҡып сыҡ та, ҡайһынын яҡшыраҡ, шуныһын бирербеҙ, тине. Очерктарҙы уҡып ҡараһам, улар һүҙмә-һүҙ бер-береһен ҡабатлай. Ғиләжевҡа ошо хаҡта әйткәйнем, ул ҡульяҙмаларҙы үҙе ҡарап сыҡты ла авторҙарҙы саҡырып килтерергә ҡушты. Ҡасандыр радио аша тапшырылған бит былар. Ҡабат урлашмаҫтай итәйем әле мин уларҙы, ти.

Бик тә һиммәтле ике ағай редакцияға бер-бер артлы килеп инделәр. Хәким Ғиләжев уларҙы ҡаршыһына ултыртты, әҙерәк хәл-әхүәл һорашып, һәүетемсә һөйләшеп ултырҙы ла, теге ҡульяҙмаларҙы өҫтәле тартмаһынан алып, алдына һалды.

– Әйтегеҙ әле, ағайҙар, быларҙы ҡайһынығыҙ яҙҙы? – Өлкән үк йәштәге ағайҙар, аптырашып, бер-береһенә ҡарай, Ғиләжев иһә мәсьәләне аңлатыбыраҡ бирә: – Былар бит икеһе лә бер ҡул менән яҙылған. Ҡайһығыҙ автор?

Бер аҙҙан ике ағай зыу килеп талашты ла киттеләр. Береһе, мин фәлән ваҡытта уны радио аша тапшырыу өсөн әҙерләгәйнем, ти. Икенсеһе, юҡ, мин элегерәк яҙҙым, ҡыҫҡартылған варианты гәзиттә лә сыҡты, ти. Хәким Ғиләжев уларға көлөмһөрәп ҡарап ултырҙы ла киҫә генә әйтте:

– Кем автор икәнде ҡайтҡас асыҡларһығыҙ. Журналда ҡасандыр, кемдер яҙған материалдар бирелмәй. Икенсе ваҡыт улай ҡыялмағыҙ.

Абзыйҙар шыпан-шыпан сығып китеү яғын ҡараны. Тура һүҙле кеше ине Хәким Ғиләжев...

Яҙыусылар союзына яңы етәксе һайлау мәсьәләһе килеп баҫҡас, ул үҙенән-үҙе тиерлек хәл ителде: рәйес өҫтәле артына Хәким Ғиләжев ултырҙы. Әлбиттә, уны был эшкә өйрәтеп тораһы түгел. Ул саҡта журнал мөхәррире идара рәйесенең урынбаҫары ла булып иҫәпләнә, рәйес теге йәки был сәбәп менән эштә булмағанда, уның вазифаһын ваҡытлыса ул башҡарып тора ине. Шуға күрә йөктө еңел генә тартып алып китте ул. Әммә, һуңынан асыҡланыуынса (мин быны белә-күрә йөрөнөм), тәүҙән үк ике хата ебәрҙе.

Әҙәбиәттә рәтләп исеме лә билдәле булмаған Вәзих Исхаҡов төрлө юлдар менән "Ағиҙел" журналы редакцияһына көтмәгәндәрәк эшкә урынлашты. Ябай хеҙмәткәр булып түгел, мөхәррир урынбаҫары вазифаһына. Был эштең нисегерәк хәл ителеүен дә күрә йөрөй инем. Быға саса "Ҡыҙыл таң"да, радиокомитетта, унан университетта эшләп киткән Исхаҡов, эшһеҙ ҡалғас, бер килке журнал тирәһенә эйәләште. Бигерәк тә Хәким Ғиләжевтан бер иле лә ҡалмаҫ ине: төшкөләккә барғанында ла, эштән һуң ҡайтырға сыҡҡанында ла уның артынан эйәрә. Һәр яҡлап өлгө булырҙай Ғиләжевтың бер йомшаҡлығы бар ине: саҡырған кеше булһа, баш тартмай, төшөрөп алып һөйләшеп ултырыуҙы ғәҙәти эш тип ҡарай. Вәзих Исхаҡов иһә уның ошо яғына һуҡтырҙы һәм Әхиәр Хәкимов эштән киткәндән аҙаҡ бушап ҡалған урынға – мөхәррир урынбаҫары булып килде лә ултырҙы. Мөхәрриргә үҙенең һәр әйткән һүҙен ауыҙын асып тыңлаған, әммә ҡулъяҙмаларҙы уҡып, кәрәк урында уларҙы төҙәтергә, камиллаштырырға ҡулынан килмәгән ярҙамсыһы оҡшай төштө. Мәскәүгә эш менән барамы, сит яҡтарға яҙыусылар менән башҡорт әҙәбиәте көндәре үткәрергә китәләрме – уны бер ваҡытта ла артынан ҡалдырманы, үҙен ҡарарға алып йөрөнө. Яҙыусылар союзының рәйесе итеп һайланғас иһә, яуаплы сәркәтип итеп эшкә алды. Был осорҙа Ғиләжевҡа һырпаланыусылар байтаҡ булыуын да беләм. Шундайҙарҙың береһе Әсғәт Мирзаһитов "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире булыуға өлгәште. Исхаҡов менән Мирзаһитов тураһында ят күреберәк яҙыуымдың мәғәнәһен уҡыусы һуңғараҡ аңлар, уның бер әтнәкәһе лә бар.

Биш йыл эшләгәндән аҙаҡ Хәким Ғиләжевтың рәйеслекте ҡалдырырға уйы юҡ ине. Яҙыусылар союзының әҙәби консультанты булараҡ, һәр эштә актив ҡатнашырға тура килде, партбюро секретарының урынбаҫары булараҡ, партияның Башҡортостан өлкә комитеты менән дә эш буйынса бәйләнеш тота инем. Хәким ағай эш тураһындағы ҡайһы бер фекерҙәре менән дә уртаҡлаша, кәңәшләшә ине. Ул хәҙер инде – Башҡортостандың Юғары Советы депутаты, партия өлкә комитеты ағзаһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Илле йәшлек юбилейы мәлендә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде. Ниңә эште яңы дәрт менән дауам итмәҫкә?..

Тик һин бер төрлө уйлайһың, тормош, яҙмыш икенсе яҡтан килтереп бәрә бит ул.

Мең туғыҙ йөҙ етмеш өсөнсө йыл. Башҡортостан яҙыусыларының нәүбәттәге съезына әҙерлек бара. Беҙгә, аппарат хеҙмәткәрҙәренә, эш етерлек, һәр төрлө ойоштороу мәсьәләләрен хәл итергә кәрәк. Ә Хәким Ғиләжев, съезда һөйләү өсөн

отчет доклады яҙам тип, дачаһына китте. Эштәр шулай һәүетемсә генә барғанда, берҙән-бер көн бүлмәлә яңғыҙым ғына ултыра инем, Әсғәт Мирзаһитов менән Фәрит Иҫәнғоловты эйәртеп, Вәзих Исхаҡов килеп инде. Уларҙың ниңә шулай һөрләгөшөп йөрөүен аңламай торҙом. Ултырыр урын тапмағандай, тар бүлмәлә ары-бире йөрөйҙәр. Вәзих Исхаҡовы ғына:

– Хәким Ғабдрахманович эргәһенә барып әйләнмәнеңме? Хәле нисек икән? Берәй ярҙам кәрәкмәйме? – тип бытылдап хәбәр һөйләй.

Ахырҙа, бағаналай кәүҙәһен ҡаты тотоп, өҫтәлем ҡаршыһына Мирзаһитов килеп баҫты.

–Ноғман, бер мәсьәлә тураһында һөйләшергә индек әле һиңә, – ти.

Быларға минең ниндәй кәңәш кәрәк булды икән, тим. Ҡиәфәттәре бик етди ине уларҙың.

Һүҙҙе Фәрит ялғап алып китте:

– Съезд етә бит. Бына беҙ ошонда торған кешеләр – Союздың эш аттары. Әгәр киләсәктә Яҙыусылар союзына етәкселекте үҙ ҡулыбыҙға алһаҡ, бер ҙә хилаф булмаҫ ине.

Уның был һүҙҙәре мине шаңҡытты, үҙ ҡолаҡтарыма үҙем ышанмай торҙом. Мирзаһитов Фәрит башлаған һүҙҙе дауам итә:

– Хәким Ғабдрахмановичты бөтәбеҙ ҙә ихтирам итәбеҙ. Ләкин бит ул һуңғы ваҡытта теҙгенен йомшартты. Бик йыш төшөрә, холҡо боҙола башланы, ижад эше лә артҡа ҡалды.

Ҡапылғара ни тип әйтергә лә белмәнем. Егерме һигеҙенсе йылда тыуып, ир ҡоро йәшенә еткән өс ир. Уларҙың бөтәһенең дә һәр яҡлап үҫеп китеүендә Хәким Ғиләжевтың ҡатнашы бар. Баш мөхәррир вазифаһын үтәй башлағас, ул Фәрит Иҫәнғоловты китап нәшриәтендә эшләгән еренән үҙенә урынбаҫар итеп алды. Әсғәт Мирзаһитов армия хеҙмәтенән ҡайтҡас, ул "Ҡыҙыл таң" гәзите редакцияһына эшкә урынлашҡанда ла Хәким Ғиләжевтың тел ярҙамы булғайны. Мирзаһитов армия хеҙмәтенә тиклем сәнғәт техникумын ғына бөткән, редакцияла эшләү тәжрибәһе лә, яҙыу-һыҙыуға маһирлығы ла юҡ ине. Ғиләжев уны гәзит редакцияһынан үҙе етәкләгән журналға эшкә алды һәм яуаплы сәркәтип итеп ултыртты. Фәрит Иҫәнғолов хәҙер аппаратта штатта тормаһа ла, партбюро секретары, Әсғәт Мирзаһитов – "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире, Вәзих Исхаҡов, юғарыла әйткәнебеҙсә, Союз идараһының яуаплы сәркәтибе. Һуңғы ваҡытта ижади эштәре лә күҙгә күренеп алға бара. Ни етмәй икән быларға, тип уйлап торҙом да һораным:

– Был мәсьәләне тормошҡа ашырыу өсөн ни эшләргә кәрәк инде?

– Бына хәҙер үк өлкә комитетҡа – Ахунйәновҡа инеп, коллектив фекеребеҙҙе әйтәбеҙ, – ти Иҫәнғолов. – Унда күмәкләберәк барған яҡшы. Тағы ла бер нисә кеше беҙҙең тәҡдимгә ҡушыласаҡ.

Мин тынyслана төштөм, күңел төбөмдә быға са ҡулға-ҡул тотоношоп эшләп йөрөгән ҡәләмдәштәргә ҡарата нәфрәт һымағыраҡ тойғо уянды. Өҙә генә әйттем:

– Ә мин һеҙгә ҡушыла алмайым. Хәким Ғиләжев мине институтта уҡытты, әҙәбиәткә килеүҙә ярҙам итте. Шундай кеше өҫтөнән йөрөргә намыҫым ҡушмай. – Тегеләр өндәшмәйерәк торғас, өҫтәнем: – Һеҙ ҙә бит уның ҡанаты аҫтынан сыҡҡанһығыҙ. Шуны онотманығыҙмы?

Мирзаһитов тамаҡ ҡырып ҡуя ла ҡәтғи генә:

– Ғүмер буйы ҡанат аҫтында йөрөп булмай, – ти.

Бер урында тороп сыҙай алмай борғоланған Вәзих Исхаҡов:

– Эйе шул... бик дөрөҫ, Әсғәт Мәсҡутович, – тип уны хуплай.

– Ә һиңә ни етмәгән, Вәзих? – тип әйтеүҙән тыйыла алманым. Теге иһә күҙен тозорайтып ҡараны.

– Унылы минең эш, – тип ишеккә йүнәлде.
Фәрит Иҫәнғолов:
– Ярай, Ноғман, бирәйбә, – тигәс, эйәртенешеп сығып киттеләр.

Бер аҙ уйланып ултырҙым. Хәким Ғиләжевтың ышанып ҡараған кешеләре бына ни ҡыланып йөрөй. Вәзихтең ҡойроҡто төрлө яҡҡа һелтәргә әҙер тороуын, болғансыҡ һыуҙан да ҡоро сыға торған кеше икәнен белә инем. Анау бер саҡ, етмеш икенсе йылда, Стәрлетамаҡтың "Ашҡаҙар" ҡунаҡханаһында ғауғалы, сетерекле хәлдән дә бик еңел ҡотолдо бит.

Ул саҡта беҙ: Шәриф Бикҡол, Рәми Ғарипов, Вәзих Исхаҡов һәм мин Стәрлетамаҡтағы әҙәби берекмәнең йыйылышын үткәрергә барғайныҡ. Йыйылып һөйләшкәндән аҙаҡ пединститутағы әҙәби кисәлә ҡатнаштыҡ. Әҙәби кисәне һәйбәт кенә үткәреп, ҡунаҡханаға ҡайтҡас, тура ресторанға индек. Көн буйы йөрөп арыу уҡ асыҡтырғайны. Беҙҙең менән Эстәрле егеттәре лә бар ине. Үҙҙәренсә Өфөнән килеүселәрҙе ҡунаҡ итеп, тамаҡ сылатып алырға ҡыҙышып торалар. Көн буйы ижад тураһында һөйләшеп йөрөгәндән аҙаҡ, был бер ҙә яҙыҡ эш һымаҡ түгел. Тик мәжлестә йәйләп ултырырға минең генә форсат юҡ. Ҡатыным, әсәһенең ауырыуы тураһында хәбәр алып, Бөрйән районына киткәйне. Өйҙә балалар яңғыҙы ғына ҡалды. Төнөн булһа ла ҡайтып етергә кәрәк. Тамаҡ ялғап алдым да такси тотоу өсөн автовокзалға киттем.

Ә егеттәр ресторанда ултырыу менән генә ҡәнәғәтләнмәгән, мәжлесте Шәриф Бикҡол менән Вәзих Исхаҡов торған бүлмәгә инеп дауам иткәндәр. Ана шунда Вәзих менән Рәми һуғышып киткән дә инде. Арлы-бирле генә сикәләшеү түгел, һауыт-һаба ҡыйралған, ултырғыстар, өҫтәл ватылған.

Был, әлбиттә, Яҙыусылар союзының идара ултырышында тикшерелде. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, мәжлес ҡунаҡхана бүлмәһендә дауам иткәндә һөйләшеү тел мәсьәләһенә күсеп китә. Шул саҡ Вәзих Исхаҡов, башҡорт теле тип күп һөйләһәң дә, Рәми, һинең үҙеңдә урыҫ ҡаны бар бит, тип һүҙ ҡыҫтыра. Рәми иһә бындай һүҙҙе һис тә яратмай ине. Ошонан аҙаҡ китә лә инде ыҙғыш... Ҡунаҡхана хеҙмәткәрҙәре емерелгән, ватылған әйберҙәр тураһында акт төҙөй. Хәл партияның Стәрлетамаҡ ҡала комитетына мәғлүм була. Улар өлкә комитетына хәбәр итәләр.

Ул саҡта дүшәмбе көн эшкә барып саҡ ҡына ултырғайным, өтәләнеп Вәзих килеп инде. Мин нисек йөрөп ҡайтыуҙарын һорашырға ла өлгөрмәнем, ул үҙе һөйләргә тотондо. Бына шулай-шулай, эш боҙолдо бит әле, нишләп ҡарарға инде, ти. Мин уға, хәлде тәүҙә Хәким Ғиләжевҡа һөйләп бирергә кәрәк, тигәйнем, ул, юҡ, мин өлкә комитетҡа инәм әле, Ахунйәновҡа үҙем һөйләп бирәм, тип сығып китте. Ул унда кемгә нимә һөйләгәндер, әммә ошо бик тә сетерекле хәлдән һис ни булмағандай ҡоп-ҡоро сыҡты Исхаҡов. Хатта идара ултырышында бөтә ғәйепте Рәми өҫтөнә ауҙарырға маташты. Шул саҡ Мостай Кәрим ағайҙың, тел өсөн һуғышыуға барып етеү, бер яҡтан, һәйбәт һымаҡ, ләкин һин татар, һиндә урыҫ ҡаны бар, тип бер-береңә ҡул күтәреү ысын башҡортҡа килешмәй, тигән һүҙҙәре хәтерҙә ҡалған...

Бына хәҙер ошо кеше үҙен күтәрмәкләгән етәксеһен урынынан алып ташлатырға йөрөй. Фәрит менән Әсғәткә ни етмәгән? Мирзаһитов – рәйеслеккә, Иҫәнғолов журналда баш мөхәррир булырға ынтыламы? Яҙыусы өсөн юғары вазифа ниңә шул тиклем кәрәк? Был һорауға яуапты мин әле булһа таба алғаным юҡ.

Ул саҡта мин бер аҙ уйланып ултырҙым да, был хаҡта һис кисекмәҫтән Хәким Ғиләжевҡа хәбәр итергә кәрәк, тип тимер юл вокзалына төшөп киттем. Ул саҡта яҙыусыларҙың Аҡландағы дачаларына электричкала йөрөй инек. Ғиләжевтың өйөнә барып инһәм, ул Александр Филиппов менән верандаһында ултыра. Алдарында – бөҫкәрә төшкән шарап шешәһе. Икәүләшеп съезда һөйләнәсәк

докладты яҙалар икән: Хәким ағай әйткәнде Александр ҡағыҙға теркәй бара.

Аҙыраҡ ултырғас, ниңә килгәнемде әйткәйнем, Ғиләжев тәмәкеһен нығ-нығ һурып ултыра бирҙе лә миңә уҫал ҡараны.

– Һин дә ошаҡ менән йөрөй башланыңмы?

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, аптырауҙа ҡалдым, хатта йөрәгем сәнсеп ҡуйҙы.

–Үҙ ҡолағым менән ишетеп, үҙ күҙҙәрем менән күргәнде әйтеү ошаҡ буламы ни? Һеҙгә ҡайтып, өлкә комитетта күренеү кәрәк.

Ғиләжев ҡулын һелтәне:

–Мин Шакиров менән (өлкә комитеттың беренсе секретары) һөйләшкәнмен. Ул миңә, урыныңда ҡалаһың, тине. Бер бүлмәле фатир ҙа бирҙе әле. Бар, юҡты һөйләп йөрөмә.

Яҡшылыҡ эшләйем тип килгән ерҙән ғәрләнеп сығып киттем, хатта, ниңә юҡ-ҡа борсолам әле, миңә кем рәйес булһа ла барыбер ҙә инде, тип уйланым.

Ниңәлер ошоға оҡшашыраҡ икенсе бер ваҡиға иҫкә төштө. Ул саҡта Ғиләжев "Ағиҙел"дең баш мөхәррире ине әле. Уның урынбаҫары Әхиәр Хәкимов менән редакцияның шиғриәт бүлеге мөдире Рафаэль Сафин уның өҫтөнән партия өлкә комитетына хат яҙған. Йәнәһе, Хәким Ғиләжев эскелек менән шөғөлләнә, йыш ҡына эшкә килмәй, ҡулъяҙмаларҙы уҡымай һ. б. Был хат Яҙыусылар союзының партия ойошмаһы йыйылышында тикшерелде. Унда партия өлкә комитеты секретары Таһир Ахунйәнов та ҡатнашты. Минең белеүемсә, быға тиклем журнал тарихында булмаған күренеш ине был. Хатта яҙылған мәғлүмәттәр тураһында һөйләшеү бик ҡыҙыу барҙы. Килтерелгән ғәйепләүҙәр нигеҙҙә ҡоро һүҙҙәрҙән тора ине. Шуға күрә фекер алышыуҙа ҡатнашыусы ҡайһы берәүҙәр хат авторҙарына, ялыуҙы ниндәй маҡсат менән яҙҙығыҙ, тигән һорау ҡуйғас, улар аңлайышлы итеп яуап та бирә алманы. Аҙаҡтан Хәким Ғиләжев сығыш яһаны. Уның йомғаҡлау рәүешендәрәк әйткән һуңғы һүҙҙәре хәтерҙә ҡалған. Әхиәр Хәкимовты үҙем урынына әҙерләрмен, тигән ниәтем бар ине. Әле ул үҙенең быңдай яуаплы эшкә әҙер түгеллеген күрһәтте, тигәйне ул. Был йыйылыш тураһында тулыраҡ белергә теләгән кеше архивтан партия йыйылышының протоколын табып уҡый ала. Ә уның аҙағы былайыраҡ бөттө: Хәким Ғиләжев үҙ эшен дауам итте, ә Әхиәр Хәкимов менән Рафаэль Сафинға эштән китергә тура килде.

Ә алдараҡ – мең туғыҙ йөҙ етмеш өсөнсө йылдағы съезға әҙерлек барғанда Ғиләжевҡа ҡаршы заговор ойоштороусылар хаҡында яҙыуым ошо эштең дауамы һымаҡ тойолдо миңә. Был юлы Ғиләжевтың „соратниктар"ының һүҙе һүҙ булды – Хәким Ғиләжев эштән бушатылды. Ә уға был хаҡта һуңғы минутҡаса белдереүсе булмаған. Съездан һуң яңы идара ағзалары йыйылып, шунда өлкә комитет секретары Таһир Ахунйәнов Мирзаһитовты идара рәйесе вазифаһына тәҡдим иткәс, шаңҡып ҡала Ғиләжев. Яңы һәм иҫке идара ағзалары ҡатнашлығында үткән мәжлестә лә ул ошо хәленән ҡотола алманы, тауыш күтәрҙе, кемдәргәлер ғәйеп ташлап маташты, хатта мәжлесте өҙөп, тәнәфес иғлан итергә мәжбүр булдылар. Шул саҡта Ғиләжев менән иплап һөйләшеп, уны тынысландырыусы ла булмауы ғәжәпкә ҡалдырҙы. Ә ошонда ултырған күптәр кисә генә уның тирәһендә һырпаланып йөрөй ине бит. Хәким ағайҙы нисек тә тынысландырырға тырышып, залдан алып сығып, Яныбай Хамматов менән өйөнә оҙатып ҡуйҙыҡ.

Мирзаһитов иһә рәйес креслоһына ултырғас, көтөлмәгәнсәрәк ходтар яһаны. Рәйес Низамов – "Ағиҙел"дең баш мөхәррире, Рафаэль Сафин Союздың яуаплы сәркәтибе итеп ҡуйылды. Вәзих Исхаҡов иһә бөтөнләй эшһеҙ ҡалды. Мин әҙәби консультант булып эшләүҙе дауам итә инем. Съездан һуң ай ярым самаһы ваҡыт үткәс, Мирзаһитов саҡырып индерҙе. Мин, әлбиттә, теге саҡта уларҙың тәҡдименән баш тартҡас, уның ғәҫәрө миңә лә төшөрөн белә һәм рәйестең ниҙә

булһа эшләрен көтөп йөрөй инем. Мирзаһитов иһә бик ҡаты тотоноп, мине һеңгәҙәтергә уйлаған. Эргәһенә барып инеү менән, бик ҡаты ғына итеп:

– Ноғман, эштән китергә һорап ғариза яҙ. Яҙмаһаң, мин һине статья менән сығарам, – тине.

Ошондайыраҡ һөйләшеү буласағын көтөп йөрөгәс, аптырап ҡалманым. Бер йылда хәрби хеҙмәттән ҡайтып, бер үк ваҡытта тиерлек гәзит редакцияһында эшләй башлағанға, байтаҡ йылдар аралашып йәшәгәнгәме, ул минән ике йәшкә оло булһа ла, үҙебеҙҙе тиңдәштәр һымаҡ күрә, бер-беребеҙгә исем менән өндәшә инек. Әле лә әүәлгесә үк:

– Әсғәт, – тинем, – әгәр улай үтә ҡаты һөйләшһәң, ғариза ла яҙмайым, эштән дә китмәйем.

Мирзаһитов аптыраны.

– Нисек инде?..

– Бына шулай, минең ниндәйҙер статьялар менән ҡыуырлыҡ ғәйебем юҡ.

Былдай ҡаршылыҡты көтмәгән, күрәһең, аҙыраҡ өндәшмәй ултырғас, теш араһынан ғына әйтте:

– Бар, уйла. Иртәгә инерһең.

Иртәгәһенә ингәйнем, үҙе һүҙ башланы:

– Низамов менән һөйләшкәнмен, журналға проза бүлеге мөдире булып бараһың.

Әлбиттә, ҡаршылашып торманым, сөнки беләм: теге саҡтағы кеҙелегемде яңы рәйес ғәфү итмәйәсәк. Икенсенән, “Ағиҙел” журналы – минең өсөн өйрәнгән эш. Ә минең урынға әҙәби консультант булып Фәрит Исәнғолов ултырҙы. Тик оҙаҡ эшләй алманы был урында, сәбәбе табылыу менән, Мирзаһитов уны эштән ҡыуҙы һәм унда яҙыусылар араһына көскә килеп морон төрткән, һәр төрлө ялыуҙар яҙыу менән шөғөлләнгәне өсөн “Совет Башҡортостаны” гәзитенең мөхәррире Абдулла Исмәғилев, унан аҙаҡ китап нәшриәтендә баш мөхәррир булып эшләгәндә һәр төрлө махинациялары өсөн нәшриәт директоры Нуретдинов тарафынан эштән ҡыуылған, күҙгә күренерҙәй әҫәре лә булмаған Әмир Гәрәевты тәғәйенләне.

Хәйер, кемде эштән сығарып, кемде уның урынына алыуҙы һәр етәксе үҙенсә хәл итә. Ә бына Әсғәт Мирзаһитовтың эсендә кер һаҡлау ғәҙәтен һис кенә лә аңлай алмай инем. Теге саҡта партия өлкә комитетына бергә инеүҙән баш тартыуымды, уларҙың ни эшләп йөрөүен Ғиләжевҡа барып әйтеүемде (аҙаҡтаныраҡ Ғиләжев уны бик ныҡ әрләгән икән) ул бик йыш иҫкә төшөрә торҙо. Мең туғыҙ йөҙ етмеш бишенсе йылда “Мәңгелек урман” романының беренсе китабын журналда баҫыуҙан тыйып тороу, китап нәшриәте директорына, Нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса комитетҡа, хатта партия өлкә комитетына китаптарымды сығармауҙы һорап Яҙыусылар союзы идараһы исеменән яҙылған хаттар (улар, бәлки, архивта һаҡланалыр әле), мең туғыҙ йөҙ һикһән өсөнсө йылда Ғайса Хөсәйеновтың минең әҫәрҙәрҙән сөй эҙләп, юҡ ғәйептәр тағып яҙылған мәҡәләһенең “Ағиҙел”дә баҫылып сығыуы (былдай мәҡәләләрҙең Ахунйәнов менән Мирзаһитовтың хуплауынан тыш баҫылмауы һәр кемгә билдәле), аҙаҡ килеп, республика яҙыусыларының һигеҙенсе съезындағы докладында минең ижадҡа ҡара яғып һөйләүе уның ошондай насар ғәҙәтен раҫлай.

Быларҙың һәр береһе йөрәккә яра һалып үтһә лә, үҙемде яҡлау, Мирзаһитовты ғәйепләү өсөн ҡайҙалыр, кемгәлер барып йөрөү башыма ла инмәне, яманлыҡҡа яманлыҡ менән яуап биреү ғәҙәтем юҡ. Әгәр үҙемде яҡларға теләйем икән, күҙгә күҙ ҡарап ирҙәрсә һөйләшеүҙе ғәҙәт иткәнмен. Үҙ-ара насар мөнәсәбәтте бөтөрөү маҡсаты менән, бер шампан ҡыҫтырып, Мирзаһитовтың

өйөнә барып та һөйләшеп ултырып ҡараным. Һиҙәм: кемдәрҙер насар хәбәр йөрөтөп, араны боҙорға тырыша, ул һаман „ҡара тырма“һын һөйрәүҙе ташламаны. Яҙыусылар союзының туғыҙынсы съезында мин идара рәйесенең эш алымындағы етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләп сығыш яһарға мәжбүр булдым.

Тағы бер ҡабатлайым: был хәлдәрҙе иҫкә төшөргәндә миндә һис ниндәй көнсөллөк, күрә алмаусылыҡ, үс ҡайтарыу кеүек тойғо булманы. Рәйеслек йөгөн Әсғәт Мирзаһитов ун биш йыл буйы тартты һәм ҡәләмдәштәре өсөн байтаҡ изге эштәр ҙә башҡарҙы. Республиканың Юғары Советы депутаты, партия өлкә комитеты ағзаһы, Мәскәүҙә СССР Яҙыусылар союзы секретары (йыл һайын шунда барып бер ай эшләп ҡайта ине) булды, уға Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы ла бирелде. Иртәрәк вафат булыуы уға барлыҡ ижади пландарын тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирмәгәндер, бәлки. Шулай ҙа уның тормош һәм ижад юлы бер дөрөҫлөктө раҫлай: яҙыусы үлгәндән һуң уның ғүмерен әҫәрҙәре дауам итә, тиҙәр. Яулап алған юғары посы Әсғәт Мирзаһитов әҫәрҙәренең ғүмерен оҙайта алманы. Үҙе иҫән саҡта театрҙарҙа гөрләп барған пьесалары сәхнәләрҙән төшөп ҡалып бөтөп бара. Йәнә әйтәм: яҙыусы юғары вазифаға үрләүҙе түгел, яҡшы әҫәр яҙыуҙы төп маҡсаты итеп ҡуйһын ине.

Әсғәт Мирзаһитовтан аҙаҡ Яҙыусылар союзына етәксе булып Динис Бүләков килде. Был вазифаға алдан дәғүә итеп, ниндәй ҙә булһа ойоштороу эштәре алып барып йөрөмәне. Бығаса ла, Телевидение һәм радио тапшырыуҙар комитеты рәйесе булараҡ, яуаплы эш алып бара ине. Бүтән тиңдәштәре араһында сағыу ижады менән дә, ихлас күңелле, кешеләр менән ҡатнашмаҡлы, хатта ир-егеттәрсә буй-һыны менән дә айырылыбыраҡ тора ине ул. Беҙ, ҡәләмдәштәре, уны бер тауыштан идара рәйесе итеп һайлап ҡуйҙыҡ. Уға альтернатив кандидат булараҡ Рауил Бикбаевтың исеме лә күрһәтелгәйне, уның өсөн тауыш биреүселәр бик аҙ булды.

Йөктө еңел генә тартып алып китте Динис. Юғарылағы етәксе даирәләр менән аралашыу, улар менән яҙыусылар тормошо һәм ижадындағы проблемаларҙы хәл итеү тураһында һөйләшеү ҙә уның өсөн ғәҙәти бер эш һымаҡ ҡына ине.

Идара ултырыштары һәм яҙыусыларҙың йыйылыштары бик тә эшлекле үтә. Әсғәт Мирзаһитов, СССР һәм РСФСР Яҙыусылар союздарындағына оҡшатырға тырышып, идаранан тыш, секретариат тигән нәмә булдырғайны. Тиҫтә самаһы яҙыусы идараның штаттан тыш секретары булып китте. Тәүҙәрәк был үҙешмәкәр түңәрәктең ни өсөн кәрәклеген берәү ҙә аңламаны, бер аҙ ваҡыт үткәс, төшөндөк: унда тар даирәлә хәл ителә торған, мәҫәлән, яҙыусыларға фатир биреү кеүек мәсьәләләр тикшерелә һәм хәл ителә башланы. Йәнәһе, мәсьәлә коллегиаль рәүештә хәл ителә. Дөйөм йыйылыштарҙа иһә секретариат тулы составында президиумға менеп ултыра. Ижади секция етәкселәренең отчетын тыңлауға арналған йыйылышта (унда президентыбыҙ Мортаза Рәхимов һәм башҡа етәкселәр ҙә ҡатнашты) мин проза секцияһының эше тураһында доклад менән сығыш яһағанда был берләшмәне “Яҙыусылар союзының политбюроһы” тип атаным һәм уның уставта ҡаралмағанлығын әйттем. Динис Бүләков был фекергә ҡушылды һәм “политбюро” таратылды.

Динис Бүләковтың рәйес булараҡ эшмәкәрлеген хуплап, яҙыусылар уны ошо вазифаға икенсе мөҙҙәткә һайлап ҡуйҙы. Ошо нәүбәттәге съезды ҡайһылайыраҡ итеп үткәреүгә арналған идара ултырышы ваҡытында булып үткән бер ваҡиғаны иҫкә алһам, ҡәләмдәштәрем һәм әҙәбиәт һөйөүселәр быны өйҙән сүп сығарыу тип ҡабул итмәҫ, моғайын.

Ике съезд араһында ҡаты ауырыуҙан һуң Әсғәт Мирзаһитов вафат булды. Уның вафатынан һуң хәҙер инде “Ағиҙел”дең баш мөхәррире булып эшләгән Булат Рафиҡов, Әсғәт Мирзаһитов урынһыҙға тәнҡитләүҙәр арҡаһында арабыҙҙан

ваҡытһыҙ китте, тип яҙып сыҡты. Был "урынһыҙға" ғәйепләүҙең бер осо миңә лә эләгә ине. Шуға күрә идара ултырышында ошо мәҡәләнең дөрөҫлөккә тап килмәүен әйткәйнем, бер ни тиклем бәхәс ҡубып алды. Мин, үҙ позициямды яҡлау өсөн, яҙыусы кешегә етәксе булып оҙаҡ эшләргә ярамай, берҙән, ул үҙ үҙенә тәнҡит күҙлегенән ҡарау һәм хеҙмәттәштәренең тәнҡитен ҡабул итеү һәләтен юғалта, икенсенән, яуаплы эш уның ижады артҡа ҡалыуға килтерә, шуға күрә Яҙыусылар союзының рәйесе тураһындағы регламентҡа уставҡа үҙгәреш индерергә кәрәк, тигән фекерҙе әйтмәйенсә түҙмәнем. Ултырышта иң өлкән кәңәшсебеҙ Мостай Кәрим ағай ҙа бар ине. Бер аҙ бәхәсләшкәндән аҙаҡ, бынан һуң идара рәйеслеген өс йылға ике мөҙҙәттән дә арттырмай (бөтәһе алты йыл була инде) һайларға, тигән фекер хупланып, уны яҙыусыларҙың алда торған съезында тикшереүгә ҡуйырға, тигән тәҡдим ҡабул ителде. Яҙыусыларҙың унынсы съезында иһә ул артыҡ ҡаршылыҡһыҙ ҡабул ителде һәм уставҡа ошо хаҡта үҙгәреш индерелде.

Ошо нигеҙҙә Динис Бүләков икенсе ҡабатына өс йылға идара рәйесе итеп һайланды. Әйткәндәй, был юлы ла Рауил Бикбаевтың исеме альтернатив кандидат буларак тәҡдим ителгәйне, тик ул үтмәй ҡалды.

Ошонан аҙаҡ Динисебеҙ тағы ла ҡанатланыбыраҡ эшләп алып киткәйне. Идаралағы эштәрен уңышлы алып барыу менән бергә, яңы әҫәрҙәр ижад итергә лә өлгөрҙө. "Ғүмер бер генә" тигән романы уның ижади үҫеш баҫҡысында ҡырҡа күтәрелеш булһа, башҡорт прозаһында һикһәненсе йыл аҙаҡтарында – туҡһанынсы йыл баштарында Ельцинса "дермократтар" башлаған реформаларҙың илгә һәләкәт, кешеләр күңеленә рухи бөлгөнлөк һәм боҙоҡлоҡ алып килеүен һүрәтләгән тәүге күләмле әҫәр булды. Был романы өсөн уға республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелеү ҙә бик урынлы ине.

Динис Бүләков үҙе лә ошо әҫәрендә барған ҡатмарлы ваҡиғалар эсендә йәшәне. Яҙыусыларҙың ижад эшендәге буталсыҡтар, китап нәшер итеүҙә килеп тыуған ауырлыҡтар, ҡайһы бер әҙиптәрҙең халыҡта уянған милли тойғоно үҙ маҡсатында файҙаланып, яҙыусылар ойошмаһын бүлгеләргә тырышыуы... Динискә бик ауырға тура килде был осорҙа эшләүе. Ҡайһы бер мәлдә аптырап ҡалған, уңға йә һулға тайпылған саҡтары ла булғандыр, әммә ул йомшарып төшмәне. Хатта ошо осорҙа үҙенең яңы романын – "Туҙҙырылған тамуҡ" романын яҙырға ла форсат тапты. Тик бына иң буталсыҡ йылдар үтеп, тынысыраҡ йәшәйем, иркенләберәк эшләйем тип йөрөгәндә, уның арабыҙҙан ҡапыл китеп барыуы бик тә яманһыу булды. Кемдә нисектер, әммә миндә, насар тәьҫораттарҙан һаҡлай алманыҡ Динисте, тигән үкенес тойғоһо ҡалды...

Ошо урында йәнә бер хәл иҫкә төшә. Яҙыусылар союзының түбәнге ҡатындағы залына ниндәйҙер бер кәңәшмәгә йыйылғайныҡ. Унда күп кенә яҙыусылар ҡатнашты. Кәңәшмәгә ул саҡта Башҡортостан хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Миҙхәт Мәмбәтов та килгәйне. Ул һәр саҡ яҙыусылар менән аралашып йәшәүсе, әҙәби тормошҡа бик яҡын кеше. Әлеге кәңәшмәлә ул сығыш яһап, эштәге ҡайһы бер етешһеҙлектәргә туҡталды, Динискә лә иптәштәрсә тәнҡит һүҙҙәре әйтте: һуңғы ваҡытта теҙгенеңде бушатыбыраҡ ебәрҙең. Үҙеңде нығлап ҡулға алып, ҡәләмдәштәреңдән насар һүҙ ишетмәҫлек итеп эшлә, тигәйне, Динис тоҡанды ла китте. Әле һин бында килеп, беҙгә аҡыл өйрәтмәксе булдыңмы? Үҙебеҙҙең эште беҙ үҙебеҙ беләбеҙ, тип ебәрҙе. Дөйөм йыйылышҡа һәйбәт маҡсат менән килгән етәксенең йөҙөнән алыу уның холҡо кире яҡҡа үҙгәрә башлауын күрһәтә ине. Ошонан аҙаҡ бер нисә көн үткәс, Яҙыусылар союзына килгәнемдә, үҙемде өлкәнерәк һәм Динискә яҡын кешегә иҫәпләп, Динис, һин теге көндә Миҙхәткә ҡаты бәрелеп, дөрөҫ эшләмәнең шикелле, ул беҙҙең менән дуҫтарса аралашып йөрөһә лә, етәксе кеше лә

бит әле, тинем. Килгән бер кешенең аҡыл өйрәткәнен тыңлап ултыра башлаһаң... Килеп ултырығыҙ ҙа эшләгеҙ, тип шулай уҡ кире хәбәр һөйләп алып китте.

Уның иң яҡын дуҫтарының килгән һайын шешә тығып килеүе лә һағайта ине. Беләм: Динис кәүҙәгә ныҡлы күренһә лә, күңеле йомшаҡ ине...

Ярай, Союзға етәкселек хаҡындағы уй-фекерҙәрҙе ослап ҡуяйыҡ. Ошондай ҡапыл килеп тыуған фажиғәле хәлдән аҙаҡ яҙыусылар алдына „Кемде рәйес итеп һайларға?“ тигән ярайһы уҡ ҡатмарлы һорау килеп баҫты. Ҡапылдан ғына съезд үткәреп, был мәсьәләне унда хәл итеү мөмкин түгел ине. Туҡһан етенсе йылда буласаҡ ун беренсе съезға хәтлем әлеге идара ағзалары араһынан кемде лә булһа идара ултырышында рәйес итеп һайларға, тигән ҡарарға киленде. Һәм шул саҡта рәйеслек урынына бер нисә кешенең ымһыныуы беленде лә инде. Әҙәм балаһының күңелен, ул ниндәй генә һөнәр кешеһе булмаһын, башлыҡ булыу, кемдәрҙәндер өҫтөнөрәк йәшәү теләге ташлап китмәй, күрәһең. Әлбиттә, һәр ойошмаға кемдер етәкселек итергә тейеш. Ләкин мине ижади ойошмала ошондай эшкә атлығып тороусылар булыуы аптырата. Хеҙмәттәштәрең ихлас күңелдән һайлап ҡуйҙымы, үҙеңдең граждандыҡ бурысыңды үтәмәй хәлең юҡ. Әллә бер ҡатлыраҡмын, әллә әҙәби ижадты тормошомдоң ҡаҙығы итеп күргәнгәме, түрә булып ултырыуҙы төп маҡсат, йәшәү кредоһы итеп ҡуйыусыларҙы һис кенә лә аңлап еткерә алмайым.

Талантлы шағир Рауил Бикбаевты (уға инде „Башҡортостандың халыҡ шағиры“ тигән юғары исем дә бирелгән, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына ла лайыҡ булған) рәйес булыу теләге нисәмә йылдар буйы ташлап китмәүе ғәжәпләндереп тә ҡуя. Ул бығаса гел бер урында – Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләне, төплө, үҙенсәлекле, бик күп ғилми хеҙмәттәр яҙған ғалим һәм талантлы шағир ине. Ләкин бер ниндәй ҙә етәксе эштә эшләп ҡарағаны юҡ. Икенсе яҡтан, Динис Бүләковтың ғүмере фажиғәләрәк өҙөлгәндән аҙаҡ, Яҙыусылар союзының төп креслоһында етәкселек эшендә бер ни тиклем тәжрибә туплаған, хәмер тигән нәмә менән уйнауҙан тыйнағыраҡ кеше ултырғанды күрге килә. Уңайлы мәл килеп сығыу менән Рауил Бикбаевтың рәйес урынын биләргә ынтылыуын (өсөнсө тапҡыр бит!) шуға күрә оҡшатып етмәнем.

Идара ултырышында рәйеслек посына ике кандидатура ҡаралды: Рауил Бикбаев һәм ул саҡта матбуғат министры булып эшләгән Ғәлим Хисамов.

Идара ултырышында был кандидатуралар буйынса бәхәс ҡыҙыу ғына барҙы. Мин Ғәлим Хисамов яҡлы инем. Йәшерен тауыш биреү һөҙөмтәһендә Рауил Бикбаев ике тауыш артығыраҡ алды һәм Союз идараһының рәйесе булып китте. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, миндә, Рауил Бикбаевҡа ҡарата бигүк дөрөҫ ҡарашта булманым, ахырыһы, тигән уй тыуҙы. Әммә ул һайлау ваҡытында үҙенә ҡаршы булыуымды бер ҡасан да онотманы, һәр яҡлап иҫкә төшөрә торҙо.

Бикбаев үҙенә йөкмәтелгән бурысты тәүәккәл генә тартып алып киткәйне.



*Фәрит Бикбулатов, Ноғман Мусин, Гөлшат Әлмөхәмәтова. 2001 йыл.*

Хеҙмәттәштәре, ҡәләмдәштәре менән дә һәйбәт мөнәсәбәттә, йыйылыштарҙа, һәр төрлө тантаналы кисәләрҙә бынамын тигән итеп сығыштар яһай. Миңә ул хатта икенсе яҡтан йәмәғәт эшмәкәре булараҡ асылғандай тойолдо. Ул, моғайын, бүтәндәрҙә лә ошондай уҡ тойғо уятҡандыр.

Хәҙер инде сираттағы съезда уны бер тауыштан йәнә идара рәйесе итеп һайланыҡ. Уның, уйлаған эштәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн өс йыл ваҡыт аҙ, тигән фекеренә ҡушылып, уставҡа йәнә үҙгәреш индерҙек һәм рәйеслек ваҡыты дүрт йылға тиклем оҙайтылды. Был срокта ла һәйбәт кенә эшләне ул, хатта етәкселек эшенә оҫтарып уҡ китте. Ошо арала уның алтмыш йәше юғары кимәлдә билдәләп үтелде, орден менән бүләкләнде.

Ошонан аҙаҡ йәнә дүрт йыл үтеп, яҙыусыларҙың нәүбәттәге съезын үткәреү мәле яҡынлашты. Ана шул саҡ, съезға әҙерләнгән мәлдә, Рауил Бикбаев яңынан рәйес булып ҡалырға теләүен, әммә рәйеслек срогын биш йылға тиклем оҙайтырға кәрәк, тип әйткәс (йәнәһе, бүтән юғары власть органдарын биш йылға һайлап ҡуялар бит), уға ҡарата теге саҡтағы тәүге шик тойғоһо ялалды. Түрә булып ултырыуҙың үҙе өсөн файҙалы яҡтарына ләззәтләнеү унда был урында оҙағыраҡ эшләү теләге уятманымы? Әгәр шулай икән, бының яҡшыға илтмәүе бар бит.

Әлбиттә, рәйес кешегә йәшәү һәм эшләү өсөн уңайлыҡтар бирелгән: шәхси машина, ҡайҙа теләй – шунда ултырҙы китте, китаптарын республиканан ситтә лә сығарыуға юл асыҡ. Һуңғы мәлдә Рауил Бикбаев яйы сыҡҡан һайын сит өлкәләргә, яҡын һәм алыҫ сит илдәргә тик үҙе генә йөрөүҙе (әйтерһең, бүтән яҙыусыларҙың бындай сәфәрҙәргә хаҡы юҡ) ғәҙәт итеп алғайны.

Нимә генә тиһәң дә, идарала рәйес булып ултырыу ваҡыты съезда биш йылға тиклем оҙайтылды һәм был посҡа яңынан Рауил Бикбаев һайланды. Бынаһына ла әллә ни борсолмаҫ инең, съезда әҙәбиәтебеҙ, һуңғы ваҡыттарҙа унда килеп тыуған проблемалар тураһында фекер алышыу булманы тиерлек. Әүәле партия контроле ҡаты саҡта ла яҙыусыларҙың төп йыйылышы былай шыма үтмәй торғайны. Уны ана шулай юғары кимәлдә үткәреү хәстәрлеге алдан уҡ күрелмәүе һиҙелеп тора. Икенсенән, партия өлкә комитеты хөкөм һөргән саҡтағы шикелле үк, етәксе буласаҡ кешенең кандидатураһы алдан уҡ юғарыла хупланып, уның өсөн формаль рәүештә генә ҡул күтәртеү хәленә алып барып еткерелеүе һәр төрлө инициативаны баҫа, коллектив ағзаларында дөйөм эшкә ҡарата вайымһыҙ ҡараш уята бит. Бының ижад кешеһе өсөн кире тәьҫире ғәйәт ҙур.

Хәйер, бындай хәлгә аптырайһы ла түгел. Туҡһанынсы йылдарҙа демократизм лозунгыһы аҫтында власть яратыусылар кешелек донъяһы өсөн был изге төшөнсәне үҙҙәре үк аяҡ аҫтына һалып тапаны бит инде. Тәүҙәрәк „Һайлау йәшендәгеләрҙең яртыһы килеп тауыш бирһә, шул етә“ тигән закон хөкөм һөрҙө. Шунан был һан егерме биш процентҡа тиклем кәметелде. Кешеләр һайлау участкаларына йөрөмәй башлағас, депутаттарҙы исемлек теҙмәһе буйынса өйөрө менән бер юлы Дәүләт Думаһына һайлауға күселде. Хәҙер инде, ана, һайлауға нисә кеше килһә лә ярай, тип, проценттар бөтөнләй алып ташланды. Шулай булғас, ҡайҙалыр юғарыла төҙөлгән исемлеккә кем эләккән, шулар депутат булып үтә лә китә. Бында илебеҙҙәге закондар сығарыу органының составын асығыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн, йәнә бер аныҡлыҡ индерәйек. Кандидаттар теҙмәһенә нигеҙҙә “Берҙәм Рәсәй” партияһында ағза булып тороусылар теркәлә. Күҙ буяу өсөнмө, парламент залын биҙәү өсөнмө, әллә ир затындағы депутаттарҙың эсе бошоп китмәһен өсөнмө, сибәр артисткалар, спортсменкалар аралашып китә башланы был ҙур йыйында ултырыусылар араһында.

Юғары органдарға һайланған депутаттарҙың халыҡ алдында һис ниндәй яуаплылыҡ тоймауы, күберәк үҙ яйҙарын яйлап йәшәүе ошо арҡала килеп сыға ла.

Илебеҙ киләсәге өсөн бик ҡурҡыныс хәл был. Халыҡтың вайымһыҙлығы, боҙоҡлоҡтарға түҙеп йәшәүе бер ваҡытта ла сикһеҙ булмай. Вайымһыҙлыҡ илдәге сәйәси тормоштоң йомшарыуына, власть башында тороусыларҙың ил хәстәрлеге менән йәшәмәүенә, коррупцияға бирелеүенә, йәмғиәттең икегә бүленеүенә килтерә. Тора-бара иһә был күренеш ябай хеҙмәт кешеләрендә асыу тыуҙыра, йоҙроҡтар йомарлана...

Бына ошо фонда етәкселәрҙең үҙ тирәһенә таныш-белештәрен, ярамһаҡтарҙы, ошаҡсыларҙы йыйып, шуларға таянып эш итә башлауы – бик тә күңелһеҙ хәл. Тормошта рәхәтерәк йәшәүҙе хужа ышығында тапҡан, ошо рәхәтлектән айырылмаҫ өсөн һәр төрлө әшәкелектәр эшләргә әҙер торған бәндәләр тормош атмосферабыҙҙы һаҫытты, кешеләрҙә власҡа, киләсәккә ышанмау тойғоһо уятты. Дәүләт лидерҙарының, улар тирәһендә мыжғыған һәр төрлө сәйәсмәндәрҙең, иҫәпһеҙ күп фәнни тикшеренеү үҙәктәренә оялаған фән әһелдәренең, егерме – егерме биш йылдан бөтәһе лә ал да гөл буласаҡ, тип һис ниндәй нигеҙһеҙ вәғәҙәләр биреүенә, ә ил етәкселәренең шулар һүҙен ҡабатлауына һис кем ышанмай хәҙер. Исмаһам, халыҡта оптимистик рух тәрбиәләрҙәй күп милләтле илебеҙҙә дуҫлыҡ, берҙәмлек идеяларын яҡларҙай, идеологик таяныс булырҙай абруйлы партия ла юҡ бит. "Берҙәм Рәсәй" тигән ойошма иһә ил байлығын имеп, үҙ файҙаларын ғына ҡайғыртып, яҡты донъяның рәхәтлеген татып ҡалырға ынтылыусылар өсөн йылы оя ғына. Хәҙер ана ошо партияла ағза булып тормаһаң, Дәүләт Думаһына, республика Ҡоролтайына, хатта урындағы советтарға ла депутат итеп һайлана алмайһың, етәксе эштәргә үрләү тураһында уйлап та ҡарарға ярамай.

Уйлай китһәң, харап инде. Халыҡ, илебеҙ яҙмышына бәйле быңдай сетерекле хәлдән нисек ҡотолорға һуң? Иң беренсе сиратта, кешеләрҙә йәшәүгә ышаныс тойғоһо уятырға, тормоштоң ҡәҙерен белергә, ямандан бигерәк, яҡшыны күрә белергә өйрәтергә, уларҙы рухи ярлылыҡтан ҡотҡарырға кәрәктер. Әүәле бының өсөн Ҡөрьән сыҡҡандар, намаҙлыҡҡа ултырғандар, доға ҡылғандар. Йәғни әҙәм балалары үҙ күңелен изге һүҙ аша таҙартырға, йәшәү дәрте алырға тырышҡан. Ошондай уҡ изге бурысты үтәү бөгөнгө яҙыусының иң төп бурысы булырға тейеш, тип уйлайым. Үткәнебеҙ, бөгөнгөбөҙ, киләсәгебеҙ тураһында тәрән уйланып яҙылған художестволы әҫәрҙәр ижад итеп, нәфис һүҙ менән кешеләр күңеленә саф намыҫ орлоҡтары сәсһәк, беҙ үҙебеҙ алдына ҡуйылған миссияны ниндәйҙер дәрәжәлә үтәр инек.

Башҡорт әҙәбиәте, ижади донъяла төрлө тайпылыштар булыуға ҡарамаҫтан, ошо яуаплы бурысты мөмкин тиклем үтәргә тырыша. Әммә бит Рәсәй тигән ҙур илдә кешеләр күңеленә тәьҫир итерлек ҡара көстәр ҙә етерлек. Ил тарихында һис ниндәй яҡтылыҡ һәм яҡшылыҡ күрмәгән, немецтарҙа әсирлектә булғандан аҙаҡ һөргөндә булған Солженицын, бурҙарҙы, бандиттарҙы, кеше үлтереүселәрҙе төп герой итеп күтәргән Донцова, Маринина, Акунин кеүек яҙыусы шәрәмәттәренең китаптарын ҙур тираждар менән баҫып сығарыу, һәр төрлө әшәкелектәр тураһында телевидение аша тәүлек әйләнәһенә барған тапшырыуҙар – күпме бысраҡлыҡ яуа бит әҙәм башына. Был хәлде бөтәбеҙ ҙә, шул иҫәптән ил башлыҡтары ла күрә, ләкин уға сик ҡуйыу, бик тә булмаһа, ауыҙлыҡлай төшөү хаҡында бер кем дә ҡәтғи сара күрмәй. Хатта миңә ҡайһы берҙә илдә бер ниндәй власть та, закондар ҙа юҡ һымаҡ тойолоп китә.

*(Аҙағы бар.)*



**Хәбир ДАУЫТОВ**

# АҠТҮШ ҺАҒЫШЫ

## хикәйә

Хәмдиә кейенеп бөткәс, артынан оҙатып ҡалған Аҡтүште арҡаһынан һөйөп иркәләне, хатта морононан үбеп тә алды.

— Беҙ ҡайтҡансы өйҙә күҙ-колаҡ булып тор. Ашарыңа ҡалдырҙым. Шамил менән уйнарға сығырһың,— тип ике ҡатлы ишекте шағыршоғор килтереп биш йоҙаҡҡа бикләне лә эшкә ашыҡты үҙе.

«...Күҙ-ҡолаҡ булып тор, имеш. Биш йоҙаҡ — көн дә ошо хәл. Ышанмағас, ниңә шулай йыуатырға кәрәк? Минең кем икәнде онотоп ебәрәме икән ни? Беҙҙең нәҫел күп һөйләгәнде яратмай. Ни өсөн донъяға яратылғаныбыҙҙы яҡшы беләбеҙ: кешегә тоғро хеҙмәт итеү... Бәлки, мин дөрөҫ уйламайымдыр? Аллаһы Тәғәлә беҙҙе донъяға яралтҡандыр ҙа: «Үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрегеҙ»,— тип Ер шарының төрлө мөйөшөнә таратҡандыр. Ер йөҙөндә һәр кем этте үҙенең дуҫы тип һанай түгелме ни? — Ошо уйҙарҙан һуң Аҡтүш, бер аҙ маһайған төҫлө, ҡойроғон болғап алды. Тик уның кәперәйеүен күреүсе генә булманы, сөнки өйҙә ул япа-яңғыҙ ине. — Туҡта. Кеше — этте, әллә эт кешене дуҫ

*Хәбир Кәрим улы Дауытов Күгәрсен (элекке Йомағужа) районының Аралбай ауылында тыуып үҫкән. Бала сағы ауыр йылдарға тура килә. Шулай ҙа райүҙәк мәктәбендә тырышып уҡый, һуңынан Өфөлә кооперация техникумын тамамлай, ситтән тороп Мәскәү сауҙа институты дипломын ала.*

*Әҙиптең хеҙмәт кенәгәһендә нигеҙҙә бер генә яҙыу: Башҡортостан потребителдәр союзы... Был системала Х. Дауытов ҡырҡ йылдан ашыу эшләп, хаҡлы ялға сыҡты. СССР потребителдәр кооперацияһы отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған сауҙа хеҙмәткәре исемдәренә лайыҡ булды, башҡа наградалар ҙа алды. Яҙыусы прозабыҙға үҙ һүҙе, үҙ йөҙө, үҙ темаһы менән килде һәм бына егерме йыллап инде ҡәләмен егәрле генә тибрәтә. Уға тәүге танылыуҙы «Болотһоҙ күкрәү» китабы (1993 йыл) алып килһә, 2005 йылда иһә «Намыҫ һәм нәфсе» романы өсөн Күгәрсен районының Зәйнәб Биишева исемендәге әҙәби премияһы тапшырылды.*

*Әҙип 1999 йылдан БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Ҡотло булһын 75 йәшең, хөрмәтле ҡәләмдәш!*

итеп һайланымы икән?..» Ишек һаҡлап, сәғәттәр буйы эшһеҙ ятҡан Аҡтүштең башында ошондай һорау ҙа тыуҙы.

Ята торғас, Аҡтүштең эсе боша башланы. Өйҙә эҫе, һауа тынсыу. Етмәһә, хужабикәһе, ашығып, форточканы асырға онотҡан. Бүлмәнән бүлмәгә йөрөп сыҡты ла, маъмай йәнә үҙ урынына шымтайып йомарланды. Оҙаҡламай теле һалынып төштө, йыш-йыш тын алды. Кешенеке һымаҡ, күңелкәйе һыҙылып-һыҙылып һулҡылданы. Исмаһам, телевизор тоҡандыра белмәй. Ҡарар ине әкәмәт хайуандарҙы. Ауыл тормошон һағына ул. Ауыл аштарын...

Эйе, Аҡтүш иркен тормошто һағына. Көсөк сағынан уҡ өйрәнгән эйәһе — дуҫы Ғәфүрҙе, хәстәрлекле Ғәлиманы юҡһына. Иркен өй алды, һарай-ҡуралар, ауыл урамы, ундағы иптәштәре, ишек алдындағы «үҙ йорто» күҙ алдынан китмәй. Ул бит унда көнөн дә, төнөн дә бәйһеҙ йәшәне. Бәхетле ине... Ошо хаҡта уйлай-хыяллана торғас, әлһерәп йоҡоға талғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Тауыҡ төшөнә тары инә, тигәндәй, Аҡтүш быға тиклем рәхәтләнеп йәшәгән ауылын ҡабат күрҙе төшөндә.

Яҙғы йәмле көн тыуа. Бына ҡарап үҫтергән инәһеләй яҡын күргән хужабикә — Ғәлимә менән ҡапҡаны асып, малдарҙы көтөүгә ҡушып ебәрҙеләр. Көтөүсенең эте менән, алыҫтан булһа ла, «Һау-һау»лашып алдылар. Йәнәһе: «Ҡара һин унда, малдарҙы яҡшы көт, берәһен дә ситләтмә».

Ғәлимә кетәктән ҡаҙ, өйрәк, тауыҡтарын сығарып, ихатаның төрлө мөйөшөнә ем һипте. Һарайҙан яңы сыҡҡан ҡош-ҡорт, ҡанаттарын ҡаға-һуға йүгерешеп, емле урынға тартылды. Аҡтүшкә был ҡыҙыҡ тойолдо. Улар менән хатта ярышып сабышты. Тик хужабикәнең «ҡурҡытаһың бит» тип бармаҡ яныуына буйһоноп ҡына ситкәрәк шылды.

Башта ҡаҙҙар — бер ситтәрәк, ҡалғандары унда-бында суҡынды. Бер саҡ, Аҡтүш һиҙмәйерәк ҡалдымы, бөтәһе лә буталышҡан, имеш. Китте ихатала сыр-сыу, һәр кем үҙенсә тауышлана, үҙенсә буталана, һис уны-быны аңларлыҡ түгел. Ҡаҙҙар — өйрәктәр урынында, өйрәктәр, тауыҡтарҙы баҫтырып-ҡурҡытып, уларҙың өлөшөн ашай, ә тауыҡтар тегендә-бында йүгерешеп ҡарай ҙа бит — ем юҡ, яңы сыҡҡан үләне-фәләне менән ҡырып-сүпләп бөтөргәндәр, мәсекәйҙәр.

Эштең ниҙә икәнен аңлап алған Аҡтүш ҡаҙ, өйрәк төркөмөн пыранзаран туҙҙырырға кереште. Ҡош-ҡорто тауышына ихатаға сыҡҡан Ғәлимә этен орошорға тотондо. Аҡтүш, уның сыҡҡанын күргәс, хужабикәне ишетмәй, тегеләрҙе тағы ла көслөрәк баҫтыра башланы. Йәнәһе, ғәҙеллек урынлаштыра. Их, хужабикә уны аңлаһа, һис тә уға асыуланмаҫ ине, аңламай шул, аңламай.

Ә эт бөтәһен дә аңлай. Йорт, йорт тирәһе уға ышанып тапшырылған. Был тирәнән бер әйбер ҙә юғалырға тейеш түгел. Шуға ул үҙен һәр саҡ уяу тота.

... Бер нисә йыл элек тә Аҡтүш менән бик хикмәтле хәл булып алғайны. Йәш ине әле ул саҡта Аҡтүш.

Йәйге көн. Ҡаҙ-өйрәктәр алпан-толпан йылға буйына аҙымланы.

Ихатала тауыҡ себештәре генә сепелдәшә. Хужалар эшкә таралып бөткәс тә, уларҙы үҙ һағына алды Аҡтүш. Һәр береһен күҙ уңында тоторға тырышты. Ем эҙләп йә сиңерткә, башҡа бөжәктәр артынан сабып таралыша башлаһалар, ихатаны бер урап сыға. Себештәр аласыҡ алдына йыйыла. Күп тә үтмәй, тағы тырым-тырағай һибелеп бөтәләр. Бигерәк ғәмһеҙ, бигерәк сабыйҙар шул әле улар.

Бер мәл Аҡтүш аңлайышһыҙ шәүләне шәйләп алды. Өҫкә ҡараһа, уларҙың өй тәңгәлендә, юғарыла, бер ҡарағош осоп йөрөй. Ситкәрәк китеп тора ла тағы уларҙың тәңгәлендә өйөрөлә. Оло тауыҡтар, ҡарағоштоң шыҡыйып түбәнәйеүен һиҙеп, ҡурҡыныс яҡынлашыуын белдереп, үҙ телдәрендә оран һалды. Өлгөргәндәре һарайға инеп йәшенде, ҡайһы берҙәре үлән араһына, япраҡ аҫтына боҫто.

Һауанан уҡ булып атылған йыртҡыс ҡош себештәрҙе күҙ уңынан юғалтһа ла, хәрәкәтен үҙгәртмәй, уҫал ҡарашын тимер сетка аҫтындағы йән эйәләренә төбәне. Ә тимер селтәр күҙәнәктәре ваҡ ине шул, көс менән тығылған томшоғон кирегә һурып ала алманы һәм, оло ҡанаттарын тимер ауға ҡаға-һуға, тыпырсынырға тотондо. Аҡтүш килеп йәбешмәһә, бәлки, ысҡынып, ҡабат һауаға күтәрелер ҙә ине. Секунд эсендә ботарлап ташланы Аҡтүш ҡыйыу ҡошто.

Кис, эштән ҡайтҡас, Ғәфүр ихатаға тулған ҡош йөндәрен, ҡауырһындарҙы күреп, аяғы араһында уралып-буталған Аҡтүшкә:

— Күршенең әтәсен туҙҙырып ырғыттыңмы әллә? Ни булды? — тип һорашырға кереште. Эт, хужаһының борсолоуын аңлап, себештәрҙе ҡаплаған тимер селтәр өҫтөндә ятҡан ҡош яғына өрҙө. Бөтәһенә лә төшөнгән хужа:

— Тәжрибәһеҙ, йәш төйлөгән булған бит, — тип, теге ҡошто йәлләгәндәй, селтәрҙән ысҡындырып, һарай артындағы кесерткәнлеккә быраҡтырҙы. — Маладис, йыртҡысҡа йыртҡыс булыу кәрәк. — Хужаһынан йылы һүҙ сыҡҡас, эт, артҡы аяҡтарына баҫып, уның түшенә үрелде, ҡулдарын яланы. Бер-береңде аңлашыу, эй, рәхәт икән!

* * *

Мәктәптән яңы ҡайтҡан Шамил өҫ-башын алыштырып та торманы — сумкаһын ырғытты ла Аҡтүште тышҡа әйҙәне. Ул ашыҡһа ла, эт ҡуҙғалманы. Башҡа көндәрҙәге кеүек, ишекте асыу менән тышҡа ташланманы. Эт малай менән лифтҡа ултырып төштө. Күп ҡатлы йорттар араһындағы ағастар артында еҫкәнеп йөрөгәс, Шамилды өйгә табан эйәртергә тырышты. Шамил аптыранды: ни булған быға?

Элек саф һауаға сыҡһалар, инә белмәй торғайнылар. Шашып-ярһып уйнарҙар ине. Бер-береһен баҫтырышалар. Ул яғалашыу, ул көрәшеү! Бөгөн дә көн һәйбәт, тик Аҡтүш көйһөҙ, ул өйгә ҡайырыла.

Кисен Аҡтүш хужа менән хужабикәне лә урынынан тормай ғына ҡаршы алды. Бындай йонсоу, күңелһеҙ сағын күргәне булмағас, Хәмдиә иренә:

— Хәлил, ҡара әле, ауырып-фәлән китмәнеме икән? — тип өндәште. Хужаһы элеккесә шаяртырға иткәйне лә, эте ҡуҙғалманы, бер нөктәгә

моңһоу текләгән көйө һуйҙайып ятыуын дауам итте. Ашауҙан баш тартты. Хатта магазиндан алған витаминлы ашты ла еҫкәп кенә ҡуйҙы. Төнө буйы йәлләткес шыңшып сыҡты, хатта илаған кеүек тойолдо өйҙәгеләргә.

Хәлил иртәнсәк, эшен ташлап, Аҡтүште ветврачҡа алып барҙы. Теге эттең ни менән ауырыуын асыҡ ҡына әйтә алмаһа ла, дарыуҙарҙы услап тоттороп ҡайтарҙы.

И-их, Аҡтүшкә дарыу ғына ярҙам итә алманы. Һаман ашаманы. Алғы тәпәйҙәренә башын һалып, ишек төбөндә һуҙылып ятыуын белде. Өҙләкһеҙ ыңғыраšты, иламһырап шыңшыны. Ә бер төндө бүре һымаҡ олорға тотондо. Йоҡоға китә алмай ятҡан Хәмдиә, Хәлиленең ҡабырғаһына төртөп:

— Ишетәһеңме, тигенгә түгел был. Эт олоуын насарға юрайҙар, үҙ башына булғыры. Иртәгә үк берәй ергә алып барып ырғыт, — тип ҡәтғи бышылданы.

Хәлилдең, ауылға ял көнө ҡайтырмын, әлегә йәшәп торһон, бәлки, һауығыр, тигәнен ҡатынының ишеткеһе лә килмәне.

— Ялға тиклем дүрт көн бар бит. Юҡ, иртәгә үк алып кит. Уф, ялыҡтым, сиргә һабыштым. Зинһар, һүҙемде тыңла инде. Аҡыллы ғына берәй көсөктө үҙебеҙ үҫтереп алырбыҙ.

Иртәнге сәйҙе эскәс, Хәлил Аҡтүшкә ашарына бирҙе.

— Аша, ас көйө юлда ныҡлап ауырып китеүең бар. Аша ла, үҙеңде ауылға алып барам, — тип ашлы сеүәтәне алдына этеберәк ҡуйҙы. Бәй, эт кеше телен аңламай, тиң инде! Һәлберәгән ҡолағы әкренләп ҡарпайҙы. Күҙҙәрендә һүрән нурҙар тоҡанды. — Эйе, йыйын, хәҙер элекке хужаңа — Ғәфүр ҡартҡа алып барам. — Аҡтүш һикереп торҙо ла өтәләнә-өтәләнә ашты һемерә башланы.

Быны күҙәтеп торған хужалар бер-береһенә ҡарашып, эйәк ҡаҡты. «Ауырыу түгел, һылтау. Ауылын, ҡарттарын, донъяһын юҡһыныу ғына булған бит».

— Бер йыйынғас, алып барып тапшыр инде, — тине Хәмдиә иренә.

Аҡтүш шул саҡ ни эшләргә белмәй өҙгөләнде. Хәлилдең дә, Хәмдиәнең дә түштәренә һикереп, уларҙың биттәрен үпте, ҡулдарын яланы. «Рәхмәт ҡала тормошон күрһәтеүегеҙгә, шатмын мине аңлағанығыҙға...» Ишек асыла башлағас, гүйә, хушлашҡандай еҫкәнә-еҫкәнә кухняға, йоҡо бүлмәһенә, залға инеп сыҡты.

Ишек асылыу менән эт аңлайышһыҙ көс-дәрт менән урамға атылды. Хәлил сыҡҡанда, машинаға инеп тә ултырғайны инде. Тәҙрә аша күҙҙәре ялт-йолт килә. «Хуш, ҡала, һаумы, ауыл! Унда һәр саҡ иректәһең. Эт — кеше түгел, бөтәһенә лә сыҙай алмай!»



**Мәхмүт**
**ХУЖИН**

# ДӘҮРӘН

## хикәйә

Балсыҡ ҡатыш ҡара тупраҡ өйөмөнә ул байтаҡ ваҡыт текәлеп торҙо. Юҡ, уйланғандан түгел. Киреһенсә, башында бер генә уй ҙа юҡ. Бушлыҡ унда. Ниндәйҙер аңлашылмаған бушлыҡ. Әйтерһең дә, унан бар булған нәмәһен сығарып ташлағандар ҙа, ҡола ялан тороп ҡалған. Ә ул шул яланда бер үҙе. Ҡурҡыныс.

Алдағы тупраҡ өйөмө иһә ябай өйөм түгел. Ҡәбер ул, уның төбөндә әсәһенең һалҡында шыҡрайып туңған үле кәүҙәһе ята. Ҡасандыр ошо фани донъяла өтә баҫып, күптәрҙе көнләштереп донъя көткән, яңыраҡ унынсы тиҫтәне ваҡлай башлаған әсәһе Шәһиҙә ҡарсыҡ. Дәүрәндең үҙе тыуғанда илле йәшкә аяҡ баҫырға торған әсәһенән башҡа кеме бар ине һуң? Атаһы ул сәңгелдәктә ятҡанда уҡ яҡты донъянан китеп барған. Тағы ла дүрт апаһы бар. Ҡатын-ҡыҙ нимә, улар – йомшаҡ зат, ебегән заттар. Апайҙары менән Дәүрән әллә ни иҫәпләшеп барманы. Хәйер, тегеләр ҙә уны ауыҙлыҡларға тырышманы кеүек. Ғаиләлә берҙән-бер ир бала булғас, үҙ яйына ҡуйҙылар. Әсәһе генә ҡуйманы. Хәтәр үҙ һүҙле улын еңә алмаһа, таяҡҡа йәбеште һәм туҡманы. Нисегерәк ҡайыҙланы әле!

Әсәһенең һуңғы һәм мәңгелек йортона текәлеп онотолоп торған Дәүрән ҡапыл өшөп, ҡалтыранып китте. Бая башты рәхәт итеп иркәләп торған спирт парҙары сығып бөткән икән дә. Өшөтәр ҙә шул, урамда бит ноябрь аҙағы. Ҡар яумаһа ла, ер күптән туңған. Уның аяғында – тирҙән дымланып бөткән йоҡа йөн ойоҡ та кирза итек. Уныһы ла күптән киптерелмәгән, еүеш.

Дәүрән зыяратты күләгәләр биләүен шәйләне. Көн менән төн алмашынғанда әруахтар донъяһында ҡалырға ярамай, тигәнде ишеткәне бар. Ҡағына-һуғына, ул тиҙ генә  зыяраттан сығыу яғына ыңғайланы. Бер нисә тапҡыр абынып йығыла ла яҙҙы. Быңдай мәлдәрҙә Дәүрәндең йөрәге табан аҫтына саҡлы тәгәрәй. Әйтерһең, үңәсенә йәбешергә самалап, әжәл аяҡ сала.

«Баш төҙәтергә кәрәк». Әруахтар донъяһынан сыҡҡас, башына килгән тәүге уй шул булды. Апайҙары хәйер өләшкәндә эләккән ҡағыҙ аҡсаларҙы үҙенә лә биреүҙәрен иҫенә төшөрөп, Дәүрән түш кеҫәһен һәрмәне. Урынында ятамы икән, йәнәһе. Бармаҡ биттәре шығырҙап торған бер нисә ҡағыҙҙы һиҙгәс, ул

---

*Мәхмүт Хужин (1953) – публицист. Һуңғы йылдарҙа проза өлкәһендә лә әүҙем эшләй. Автор был юлы  журнал уҡыусыларына яңы хикәйәһен тәҡдим итә.*

йылмайып ҡуйҙы. «Күпме икән? – Хәтеренән генә кеҫәһендәге аҡсаның илле һумлап булырға тейешлеген самаланы. – Бер шешә самагунға етә». Аҙымдарын ҡыҙыулата төшөп, Дәүрән итәк аҫтынан көмөшкә менән һатыу итеүсе Миңъямал ҡарсыҡ өйөнә тәнтерәкләне.

«Өйҙә булырға тейеш, уты яна», – тигән уй уға йылы биргәндәй итте. Ҡарсыҡҡа Дәүрән ишеләрҙән башҡа кеше йөрөмәй. Эскеселәрҙе һалҡын ҡаршы ала әбей, аҡсаларын ҡабул итә лә, шешәһен тоттороп, тиҙерәк оҙатыу яғын ҡарай. Дәүрән менән дә шулай булды: аҡсаһын алғас, хужабикә тоноҡ шешәне һатып алыусының ҡулына төртөп тигәндәй тотторҙо. «Тауар»ын ҡорһағы тәңгәлендә салбар ҡайышына ҡыҫтырған Дәүрән уны кемгә барып бушатырға икәнлеген самалай башланы. Ошонда, ишек алдында уҡ, ул шешәнән бер уртларға самалағайны ла, тыйылды: «Алкаш түгел бит әле мин. Өйгә ҡайтырға ярамай, унда апайҙар ҡолаҡ итен сәйнәр. Эсеүҙән баш тартмауҙары ла ихтимал. Ниңә бер шешә нәмәне алар белән бүлешергә? Үҙҙәре алып эсерһен ҡустыларын...»

Аңҡы-тиңке атлай торғас, Мәсәбих тиҫтеренең йорто янына ла килеп еткән икән. Улар йыш ҡына бергә эсә, береһенең «рәт»е булһа, икенсеһе менән мотлаҡ уртаҡлаша. Унан һуң Мәсәбих туған да, уның әсәһе Мәликә менән Дәүрәндең атаһы Мостафа бер ҡарындан тыуғандар. Мәликә апай ҙа хәҙер оло инде, йыш сырхаулай, күберәк ятып тора.

Дәүрән тупһа аша атлауға, Мәсәбих кухняһында ашарға әҙерләп йөрөй ине. Тиҫтерен күргәс, йылмайып ебәрҙе. Буш ҡул менән килмәҫен белеп тора шул. Кирза итеген көс-хәл менән сискәс, бысраҡ курткаһын бер мөйөшкә ырғытып, Дәүрән шешәһен тыҡ иттереп аш өҫтәленә ҡуйҙы. Мәсәбих күнегелгән хәрәкәт менән тиҙ генә шешәне асты ла, шкафтан ике шәшке өҫтө алып, шыйыҡсаны ғолғолдатып ҡойорға кереште. Йәһәт ҡыланды ул, үҙенең дә башы ауыртыңҡырап тора. Хәйер, был баш ауыртыу ғына түгел, ҡатмарлыраҡ: иҫе теүәл түгел тиһәң, дөрөҫөрәктер.

Шул саҡ төпкө бүлмәлә диван шығырҙағаны ишетелде. Мәликә ҡарсыҡ ҡуҙғалды, ахырыһы.

– Дәүрән, инәйеңде ҡуйҙығыҙмы? – тип һораны ул хәлһеҙ тауыш менән. – Апайыңнар мындамы әле?

– Инәйемде ҡуйҙыҡ. Дәүрән тиҙ генә көмөшкәһен эсә һалды. Йә сығып асыулана, ҡыуа башлар. – Апайымнар мында әле. Тағы бер-ике көн торалар шикелле.

– Ярар. – Ҡарсыҡ ҡабат һүҙ ҡуҙғатманы. Алғы яҡҡа ла сыҡманы. Сығып та ни эшләһен, Мәсәбихен барыбер тыя алмай бит инде.

Көмөшкә, ҡаты булған, ахыры, Дәүрән үҙенең ҡапыл иҫереүен тойҙо. Танауы һәленеп төштө, күҙҙәре һеҙөлдө. Шулай булмай ни, бөгөн уның ауыҙына йүнләп аш тейгәне лә юҡ. Өйҙә мәйет ятҡанда тамаҡ ҡайғыһымы? Тиҫтеренең ебеп төшөүен ҡайғы билдәһе тип ҡабул иткән Мәсәбих:

– Ни гәрүй, – тине руссалап. – Все там будем.

Ул үҙенсә Дәүрәнде йыуатырға уйлағандыр инде. Ә тегеһе ысынлап асыуланды.

– Там булырға йыйынмайым әле мин. – Дәүрән һөҙөлгән күҙҙәрен шешәләшенә йүнәлтте. Томан аша Мәсәбихтең ҡош суҡып алырлыҡ та ите ҡалмаған йөҙөндәге суҡмарҙай танауын, бесәйҙекеләй йылтыраған күҙҙәрен генә күрҙе ул. – Һин шулай гел буҡ-һаҡ һөйләр ҙә ултырырһың инде. Нимә, күҙеңде таҫырайтаһың, һал!

Тиҫтеренә хәтере ҡалған Мәсәбих шешәләгене бөтөргәнсе бүлеп һалды ла ҡуйҙы. Шәшке өҫтәре мөлдөрәмә тулды. Ярай, ул өйөндә бит, иҫерһә, ятыр ҙа йоҡлар. Уның ыңғайына Дәүрән дә оңҡолдай-оңҡолдай шәшкеһен түңкәрҙе. Түңкәрҙе лә шунда уҡ башы менән өҫтәлгә бөгөлдө. Күрмәһә лә, төпкө бүлмәлә барыһын да ишетеп ятҡан Мәликә ҡарсыҡ:

– Мәсәбих, һин Дәүрәнде илтеп ҡуй инде, – тине. – Өйөндә йоҡлаһын.

Арыҡ Мәсәбих нисек етте шулай тиҫтерен яурынына һалып, сығып китте.

Ярай әле, ике өй аша ғына тора. Апалары өйҙә, Дәүрәндең совет заманынан ҡалған иҫке телевизорын ҡарап, әкрен генә һөйләшеп ултыралар. Иҫерек ҡустыһын күреп, оло апаһы Рәхилә пыр туҙып асыуланырға тотондо:

– Ниткән көн дә эсеү ти ул! Нисек һине Хоҙай һуҡмай! Хайуандан да хужы булып бөткәнһең! – тип теҙҙе ул. – Ана, нисек лаяҡыл булып ҡайтҡан. Иртәгә тағы баш төҙәтергә һорай бит инде ул.

Дәүрән, ике күҙен әйләндереп, ниҙер әйтергә уҡталғайны, Мәсәбих диванға төртөп ебәргәс, башын ҡалҡыта алманы.

…Яғылмаған һалҡын өйҙә йоҡлап ятҡан Дәүрәнде әсәһе уята:

– Тор, улым. Эшкә бармайһыңмы ни?

Дәүрәндең иһә йылы юрған аҫтынан бер ҙә сыҡҡыһы килмәй, ята бирә.

– Әле һин шулаймы! – Әсәһе юрғанды һыҙырып тартып ала.

Дәүрән өшөй, ҡалтырай. Һалҡын уның һәр күҙәнәгенә үтеп инә. Теше шаҡылдап уянып китте ул. Диванда итеген дә һалмай йоҡлап ята, имеш. Өҫтөнә ябылмаған, шуға өшөгән икән. Тороп баҫҡайны, башы шаулап китте. Ауыртыныуға Дәүрән хатта ыңғырашып ҡуйҙы. Тәнтерәкләп алғы яҡҡа сығып, баш төҙәтергә берәй нәмә ҡалманымы икән, тип эҙләнде. Һыуытҡысты барып асһа, шатлығынан йырлап ебәрә яҙҙы: унда бер «аҡбаш» ултыра. Саҡ ҡына эселгән. Үҙенә ярты стакан ҡойоп һемергән Дәүрән шешәне соланға сығарып, бойҙай араһына йәшерҙе: «Яйлап төпләрмен әле». Араҡы быуынына төштө, тағы ла ауырайтты. Үлтереп асыҡҡанын тойҙо Дәүрән. Бәхетенә, һыуытҡыста колбаса, ҡыяр телемдәре табылды. Тик эсеп йөрөп ҡыҫылған ашҡаҙан былдай һалҡын аҙыҡты күп ҡабул итә алманы, тулған кеүек итте. Дәүрән бәүелә-бәүелә өйгә инде лә диванына ауҙы.

...Күҙенә йоҡо ҡунманы ирҙең. Үҙенең ғүмер буйы әсәһенә тупаҫ һүҙле, игелекһеҙ булыуы иҫенә төштө. Элек ул был ғәҙәте өсөн бер ҙә уйланмай, борсолмай торғайны. Был юлы иһә башында икенсе төрлөрәк уйҙар ҡуйырған кеүек ине. Үкендерә торғандары.

Тәү тапҡыр әсәһенә йәмһеҙ исем ҡушҡаны өсөн асыуы килде уның. Беренсе класҡа уҡырға барғас булды был хәл. Уның исемен ишеткән оло урам малайҙары шарҡылдап көлөшә башланы:

– Дәүрек – һәүрек!

– Дәүрәү – әүрәү!

Илап, дәрес бөткәнен дә көтмәй өйөнә ҡайтып китте малай. Әсәһенә ысынлап асыуланды:

– Мал исеме ҡушҡанһың. Мине малайлар мыҫҡыл итә.

– Юҡты һөйләмә, – тип ҡаршы төштө Шәһиҙә. – Олатайың, минең атайым, улым булһа, Дәүрән тип ҡушыр инем, ти торғайны. Дәүрән – Ҡөрьән телендә уҡымышлы тигәнде аңлата икән. Ә һин мал тиһең.

– Уҡымышлы, – тип ауыҙын ҡыйшайтты малай. Башҡа һүҙ әйтмәне.

Ғөмүмән, үҙ исеменән ғүмере буйы ғәрләнде ул. Армияға барғас, урыҫ малайҙары араһында үҙен Дима тип йөрөттө. Тегеләргә нимә, – киреһенсә, әйтеүе уңайлы, Дима тиҙәр ҙә ҡуялар. Тик Табылдыла, Дима тип әйтегеҙ, тип булмай, бында ул Дәүрән булып ҡайтты. Исемен алмаштырырға булыр ине лә, тик егет ҡыйманы. Ауылдаштары уны барыбер Дәүрән тип йөрөтәсәк бит.

Әсәһенә тупаҫ булыуҙың икенсе сәбәбе етди, үтә етди һәм ғүмергә онотолмаҫлыҡ, ҡәбергәсә иҫтән сыҡмаҫлыҡ ине шул. Үҙенең имгәнгән аяҡтарына, ҡулына күҙе төшкән һайын хәтергә төшөрөп торалар.

…Хәрби хеҙмәтте Дәүрән Сочи ҡалаһында үтте. Ошондай йылы, ҡыштар бөтөнләй булмаған яҡтар барлығын белә, йәшәп ҡарағаны ғына юҡ ине. Ҡала үҙе нимә, ошонда Дәүрән-Дима Валя менән мауығып китте. Һылыу ҡыҙ ине украинка Валя, ҡуңыр йөҙлө, башҡорт ҡыҙҙарыныҡылай дегеттәй ҡара һәм тулҡынланып торған сәсле. Буй-һыны ла заказ менән эшләнгән тиерһең, тик күҙҙәре генә йәшкелт-зәңгәр. Йәштәр бер-береһенә тиҙ һәм ныҡ эҫенешеп китте.

Валя хатта Диманы ата-әсәһе менән дә таныштырҙы. Өйләнешергә лә Дәүрән-Диманың бер һүҙе етә ине. Ләкин ул армиянан кәләш, унан да бигерәк мәрйә алып ҡайтырға батырсылыҡ итмәне. Ауылдаштары көләсәк, кемдең урыҫтан бисә алғаны бар?

Тәүҙә бер үҙе генә ҡайтып килергә ҡарар итте ул. Һуңынан хат яҙырмын йә үҙем килермен, тине. Валяһы ут йотоп, теләр-теләмәҫ кенә ризалашып тороп ҡалды. Әммә Дәүрән тотҡарланды, көн дә телеграмма йәки хат көткән ҡыҙ түҙмәне – ике ай тигәндә Табылдыға килеп тә төштө.

Валяны күреү менән Дәүрән быуынһыҙланды. Көтмәгәйне ул бындай хәлде. Ләкин һыр бирмәне, яҡты йөҙ күрһәтергә тырышты. Ер аяғы ер башынан килгән, тимәк, ярата. Әсәһе лә тәүге сәғәттәрҙә йылы мөнәсәбәттә торҙо. Шулай бер-ике көн үтеп тә китте. Шәһиҙә ҡарсыҡ белеп-һиҙеп тора: ҡыҙ тиктәҫкә килмәгән, уның берҙән-бер улын, Дәүрәнен, алып китергә килгән. Ауылда торорға йыйына тиһеңме ни ул? Ҡала ҡыҙы, етмәһә – мәрйә. Күҙ терәп торған берҙән-бер улын сит-ят яҡтарға нисек итеп ебәрһен ул? Ошоларҙы уйлап, ҡарсыҡ нык торорға ҡарар итте. Мәле сыҡҡанын көттө.

Бер көн Дәүрән йомош менән район үҙәгенә киткәс тыуҙы ундай мәл. Аулаҡта ҡалғас, әсә кеше мәғәнәле генә:

– Һинең, ҡыҙым, Дәүрәнгә ҡатын булырға самалағаныңды күреп торам, – тине. – Ҡайҙа торорға йыйынаһығыҙ?

– Сочиҙа. – Валя ни, тәжрибәһеҙ кеше, уйлағанын әйтте. – Атайым беҙгә йорт һалып бирергә вәғәҙә итте.

Шәһиҙә ҡарсыҡ өсөн бынан да яман хәбәрҙең булыуы мөмкин түгел ине.

– Ҡыҙым, ни бит әле... Дәүрән – берҙән-бер улым. Ул китһә, мин кем менән тормон? Ҡартайғанда мине кем ҡарар?

– Бәй, улың ғүмер буйы һинең менән йәшәмәҫ инде. Ирҙәр ҡасан булһа ла өйләнә. – Ҡыҙыҡай, ошондай һөйләшеү була ҡалһа тип, алдан уҡ һүҙҙәрен әҙерләп ҡуйғайны. – Ҡыҙҙарың бар бит, шулар ҡараһын.

Шәһиҙә ҡарсыҡ әҙәп һаҡларлыҡ дәрәжәһен юғалтты.

– Шулаймы? Ах, йылан! Бар, хәҙер үк сығып кит был өйҙән! Уйнашсы! Нишләп мин һиңә берҙән-бер улымды тоттороп ебәрәйем ти? Мине алйотҡа иҫәпләйһеңме?

Шәһиҙә ҡарсыҡ, ғәҙәттә, ипле һөйләшеүгә ҡарамаҫтан, туҙынып китһә, әйтмәгәнен ҡалдырмай, хатта һүгенеүгә барып етә. Күҙе аҡайып, ауыҙынан күбектәр бәреп сыҡҡан әбейҙән Валя ысынлап та ҡурҡты. Саҡырылмаған ҡунаҡ, тиҙ генә сумаҙанын эләктереп, артҡы ҡапҡанан сығып йүгерҙе.

Дәүрән ҡайтып ингәндә, әсәһе тынысланып та бөтмәгәйне әле.

– Валя ҡайҙа? – тип һорауға ҡарсыҡ ҡыҙыулыҡ менән:

– Ҡыуҙым мин ул уйнашсыңды! – тип ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Бындай хәлдең ҡотолғоһоҙлоғон Дәүрән һиҙә йөрөй ине. Бер ни ҙә өндәшмәй кире боролоп ихатаға сыҡты ла, мотоциклға атланып, район үҙәгенә илтә торған юлға төштө. Автобусҡа ултырып өлгөрмәгәндер әле, тип уйланы ул, тиҙлекте арттырғандан-арттыра барып. Ләкин ауылдан ике саҡрым да китә алманы егет – руль тота белмәгән ҡулдар мотоциклды бер йөк машинаһы аҫтына алып барып индерҙе…

Иҫенә килгәндә, ул тәнендә сыҙап булмаҫлыҡ ауыртыныу тойҙо. Бар тәне һыҙлай, аяҡтар, ҡулдар, баш… Әйтерһең дә, шаҡаралар, сәнсәләр, ҡырҡалар. Үҙенең дауахана палатаһында ятҡанын шәйләне Дәүрән. Ҡуҙғалырға иткәйне, ҡот осҡос ауыртыу уны иҫенән яҙҙырҙы. Хирург уның ике аяғының да бер нисә урындан, һул ҡулының беләктән түбән һыныуы тураһында хәбәр итте. Башының да сатнаған урындары бар икән.

– Валя, Валя! – тип һөйләнде Дәүрән, эргәһенә кемдеңдер килеп ултырыуын томан аша ғына күреп. Әсәһе икән. Ә Валя иһә китеп өлгөргән. Бөтөнләйгә.

Дәүрәненең ниндәй хәлгә төшөүен күреп, ҡарсыҡ буҫығып иланы ла иланы. Ләкин һуң ине инде.

Ярты йыл түшәктән тора алманы Дәүрән. Ғазапланып ятҡан мәлдәрендә, нишләп шунда үлтереп кенә ҡуймаған икән, тип үкенде. Исмаһам, былай интекмәҫ ине. Ҡасан тороп, үҙ аяғына баҫып китә ала әле ул? Ана, ярауы ла аҫтында бит. Шәфҡәт туташтарының «утка» килтереп биргәненә тилмереп ҡарап ят инде. Үҙ һүҙле, ғорурлыҡ тигәне тәкәбберлек сигенә еткән Дәүрән өсөн ошоноһо бигерәк тә үлемесле.

Ни тип киләһе итте икән Валяһы ла? Үҙем хәбәр итермен, тигәйне бит. Түҙмәгән инде. Ул килмәһә, Дәүрән былдай ғазап сигеп ятмаған да булыр ине. Уның, бәлки, мөхәббәт тә булғандыр. Тик Дәүрән үҙе Валяны яраттымы икән һуң? Был һорауға егеттең яуабы әле лә юҡ.

Ҡултыҡ таяҡтарында йөрөй башлағас, уны дауахананан сығарҙылар. Үҙенең имгәнеүендә ул әсәһен генә ғәйепләне. Имеш, Валяға өйләндермәйем тип, ҡарсыҡ үҙ балаһын ғүмерлеккә ғәрип яһаны. Хәтере ҡалыуҙан бигерәк бәғере таштай ҡатҡан Дәүрән ошо мәлдән алып әсәһенә  бер ҡасан да йылы һүҙ ҡатманы, яғымлы итеп ҡараманы.

Ҡултыҡ таяҡтарынан ҡотолғандан һуң, ул кемгә булһа ла өйләнергә ҡарар итте. Бәлки, ҡатынлы булыу тыныслыҡ, ҡәнәғәтләнеү алып килер, тип фекер йөрөттө Дәүрән. Тик кемгә? Үҙе белгән барлыҡ ҡыҙҙарҙы хәтеренән барлап сыҡҡандан һуң, күршеләге Гөлфиәгә туҡталды. Быйыл ғына унынсыны тамамлаған ҡыҙыҡай, күрәһең, күршеләге һылыу егеткә күптән күҙ атып йөрөгән. Шунда уҡ ризалашты. Шәһиҙә ҡарсыҡ, улының күңелен күрергә була, ныҡ тырышты, юҡты бар итеп, ҙурҙан ҡубып туй үткәрҙе. Ләкин килен тыштан күҙгә салынмаһа ла, уҫал һәм сая ҡыҙ булып сыҡты. Йәш сағынан уҡ Урта Азияға бәхет эҙләп киткән әсәһе лә бер ҡасан һәм бер кем алдында ебеп төшмәй, берәүҙе лә алдына сығармай торған ҡыйыу ҡатын шул. Алма ағасынан йыраҡ төшмәй икән. Килгәндең иртәгәһенә үк Гөлфиә ҡәйнәһенә үҙенең тештәре барлығын күрһәтте. Ҡушҡан йомошҡа:

– Үҙеңдең дә ҡулың бар, – тип ҡырт киҫте.

– Һуң, килен, – тип ҡарағайны Шәһиҙә, йәш килен, ирешергә һәм бирешмәҫкә әҙерлеген белдереп, бөйөрөнә таянды.

– Мин һиңә эстәрәпке булырға килмәнем! – Үҙенә күрә әсәһенең инструкцияһы ине был.

– Кемгә барғаныңды беләһең, ҡыҙым,– тигәйне Фатима. – Йыуаш булма. Бер башыңа менеп ултырһалар, нисек ҡотолорға белмәҫһең. Үҙ һүҙеңде һүҙ итеп өйрән. Ирҙәр ҙә бөгөлә ул.

Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай, тиҙәр бит. Дәүрән ғаиләлә үҙенең сикләнмәгән властын урынлаштырырға ынтылһа, Гөлфиә үҙ туҡһанын туҡһан итергә тырышты.  Шуға күрә өйҙә йыш ҡына дауыл ҡупты. Аҙағы билдәле: Гөлфиә әсәһенә ҡайта ла китә. Дәүрән эсеп, күңеле йомшарғас, уны алып ҡайта. Улдары Булат тыуғас та дауам итте был. Ошолай дүрт-биш йыл үтте, ике ҡоҙағый һуғышыр сиккә етешеп талашҡас, ғаиләлә торорлоҡ рәт ҡалманы.

Дәүрән – хәҙер буйҙаҡ егет. Клубҡа сыға, өйләнмәгәндәргә эйәреп киске уйындарға күрше ауылдарға ла йөрөштөргөләй. Шулай ҡышҡы көндәрҙең береһендә ул саҡтарҙа Стәрлетамаҡта милицияла эшләп йөрөгән Мәсәбих өйләнеп ташланы. Туйына ҡәләше яғынан бер нисә әхирәте лә эйәреп килгәйне. Шуларҙың береһе, Вәсилә, Дәүрәнгә йәбеште лә ҡуйҙы бит. Буйҙаҡ ир ҙә ыңғай торҙо.

Туй үтте, Вәсилә Дәүрән янында ҡалды. Уға, эре һөйәкле, һылыулығы менән маҡтана алмаған ҡыҙға, билдәле, Дәүрән өйләнергә йыйынмай ине... Яратыу тойғоһо юҡ бит. Бер яғы менән генә ярай ала ине Вәсилә: ул – эш аты ине... Бер нисә көндә ҡәйнәһенең өйөн ҡурсаҡ йорто яһаны ла ҡуйҙы. Шулай ҙа өйҙәш кеүек йәшәне йәш ҡатын. Туй үткәрмәнеләр, Дәүрән уны ЗАГС-ҡа алып барманы, ҡатыны менән кеше араһына ла сыҡманы. Вәсилә тәүге мәлдәрҙә ғәрләнеберәк йөрөһә лә, тора-бара күнекте. Йәй еткәс, колхоздан ике норма

шәкәр сөгөлдөрө участкаһы алып эшләне. Ҡыҙын да ул ошо осорҙа тапты. Сабый атаһына оҡшап аҡ йөҙлө, матур бала ине. Әйтәләр бит: эшләп кем ярағаҡ? Һөйөү, тартылыу тойғоһо булмағас, Вәсиләгә лә наҙ эләкмәне. Ата-әсәһе килеп, алып ҡайтырға маташып ҡараны, ҡыҙҙары ҡуҙғалманы.

– Бер аҙ торам әле. Унан күҙ күрер.

Әммә түҙемлек тә сикһеҙ тойғо түгел. Балаһына ике йәш тулғанда, Вәсиләнең дә түҙемлеге шартлап һынды. Унда ғорурлыҡ, бәҫ тойғоһо уянды. Әйберҙәрен йыйҙы ла, балаһын күтәреп, тыуған яғы – Урал аръяғы районына ҡайтты ла китте.

Дәүрән тағы яңғыҙ. Гөлфиәһе ул арала ике иргә сығып айырылды. Ҡайта ла күршелә әсәһенең өйөндә йәшәй башлай. Тәүге бисәһен көн дә тигәндәй күрә Дәүрән. Ҡайһы саҡ етәкләп алып инергә лә дәрт итеп ҡуя. Тик ғәрләнә: ике иргә барып ҡайтты бит.

Дәрт иткән – мораҙына еткән, тигән кеүек, ул бер эсеп иҫергәнендә Гөлфиәне тағы алып ҡайтты. Тағы ла бергә йәшәргә тотондолар. Тәүҙәрәк йортта һауытһаба шылтырамманы. Икеһе лә нужа күреп алдылар, тәжрибә бар. Түҙергә кәрәк. Ләкин оҙаҡ йәшәй алманылар, бер йылдан тағы ла айырылыштылар. Был осорҙа Дәүрән гел эсергә атлығып торған ир аламаһына әүерелеп бара ине инде.

Шул эскелек арҡаһында тәүҙә милициянан ҡыуылып, унан ҡатыны ла ташлап киткән Мәсәбих тә ауылға ҡайтып, шешә имеүселәр рәтен тултырғайны. Таң атыу менән ҡояш байығансы уларҙың башында бер уй: ҡайҙан эсергә табырға?

Апайҙары иртәгәһен китеп барҙы. Өйҙө йыйыштырып тороу, яғып йылытыу, ашарға бешереү кеүек мәшәҡәттәр хәҙер буйҙаҡ ирҙең үҙенә ҡалды. Билдәле, улар Дәүрәндең иҫенә лә инеп сыҡмай. Өйгә яғыуҙы ул кисен генә иҫенә төшөрә, сөнки унда тороп сыҙарлыҡ әмәл ҡалмай. Ярай әле, газ бар, элекке кеүек утын яғырға булһа, нишләр ине? Өйҙәге сепрәк-сапраҡ, кейем-һалым туҙанға батты. Йыуылмаған иҙәнде Дәүрән бысраҡ итеге менән тапаны.

Ошолай көндәр айҙарға, һуңғылары йылдарға ялғанды. Һирәк-һаяҡ, ҡаны араҡы һаҫығына ғарҡ булған мәлдәрҙә, Дәүрән айнып китә. Мәсәбихтәргә барып мунса инә, өҫ-башын йыуып таҙарына, өйөн дә тәртипкә килтергеләй. Ләкин бындай «тәнәфестәр» оҙаҡҡа һуҙылмай ине: кемдер килеп эшкә саҡыра, эшен тамамлағас, «ярты»һын ҡуя. Тағы ла тормош элекке юлына төшә. Ундай мәлдәрҙә Дәүрән көн иҫәбен юғалта. Әсәһе иҫән саҡта календарь ала ине, хәҙер ул да юҡ. Дәүрән өсөн тормош бер баш төҙәткәндән алып икенсеһенә тиклем генә. Унан, әле нисәнсе йыл, тип һораһалар, моғайын, яуап бирә алмаҫ ине.

Яман төштәгеләй ошолай ғүмер һөрөп ятҡанда, икеме-өсмө туған тейешле Ғәзиз ағаһы килеп инде. Армиянан һуң Себер яҡтарына сығып китеп, кеҫә ҡалынайтып, Өфөлә сауҙа менән шөғөлләнә ул. Йылына бер, ғәҙәттә, йәй айҙарында, Ғәзиз көйәҙ сит ил машинаһында ауылға ҡайтып төшә лә бер аҙна самаһы балыҡ тотоп, ял итеп китә. Ҡатынын алып ҡайтмай Ғәзиз, унығы мәрйә икән, бәлки, үҙе лә теләмәйҙер.

Ишек тупһаһын аша атлау менән Ғәзиз тирә-яғын байҡаны, һаулыҡ һорау юҡ.

– Үҙеңсә, йәшәйем, тиһең инде, – тине ул, ирендәрен бөрөңкөрәп. – Бөтөүгә бараһың бит.

– Бөтһә, кем илар тиһең? – Дәүрәндең хәтере ҡалды. – Нейә берәй «ярты» алып кермәнең? Баш ауыртып тора.

– «Ярты» – магазинда. – Ғәзиз өй эсенә күҙ йүгертеп, уның матур йыйыштырыулы, бөхтә сағын иҫенә төшөрҙө. – Эсһәң, тағы ла баш ауырта инде ул. Как будто белмәйһең.

– Ярай. Аҡыл өйрәтмә, йәме. – Дәүрәндең кәйефе ҡырылды. – Аҡыл өйрәтеүселәр мында һинән башҡа ла етерлек.

– Мин һиңә аҡыл өйрәтергә йыйынмайым да. – Ғәзиз ултырырға иткәйне лә, дивандың бысраҡлығын күреп, тыйылды. – Һин Вәсилә менән торғайның бит

әле. Ҡыҙығыҙ ҙа бар ине. Хәҙер ҡайҙа улар? – тип һүҙҙе ҡапыл икенсе юҫыҡҡа күсерҙе.

– Әбйәлилдәлер. Мин ҡайҙан беләйем. Нейә кәрәк ул һиңә?

– Вәсиләне ҡайтар һин. Ул һиңә дан бисә ине бит. Ҡәҙерен белмәнең.

– Көләһеңме әллә? – Дәүрәндең был уй башына ла инеп сыҡҡаны юҡ ине.

– Көлмәйем. Ошо өйҙә кәкрәйеп үлә алмай ята башлаһаң, үкенерһең дә, һуң булыр. – Ғәзиз бер аҙға тын ҡалды. Күрәһең, яуап көттө. Ләкин Дәүрән һүҙ ҡатманы. – Мин уны эҙләп ҡарайым әле. Тапһам, хәбәр итермен, – ул шаҡ-шоҡ баҫып сығып китте. Дәүрән бер һүҙ әйтергә лә өлгөрә алмай ҡалды.

Бер аҙна самаһы уҙғас, иртә менән ишек төбөндә Мәсәбих күренде. Ҡулында – кеҫә телефоны. Был арала ул айыҡ йөрөй.

– Һине Ғәзиз абзый һорай ине. Хәҙер звонить итергә тейеш. – Мәсәбих Дәүрән ятҡан диван янына килеп терәлде. – Нишләп үҙеңә телефон алмайһың?

Дәүрән яуап ҡайтарманы. Кәйефе лә юҡ, һөйләшкеһе лә килмәй.

Бер нисә минуттан телефон ысынлап та телгә килде. Ҡатын-ҡыҙ тауышы. Таныны Дәүрән: Вәсилә бит.

– Инәйең үлеп киткән икән. Ауыр тупрағы еңел булһын инде, – тине ҡатын, көрһөнгән кеүек итеп. – Ни эш бөтөрөп ятаһың?

Нишләптер Дәүрәндең шаяртҡыһы килде:

– Бөтөрөргә һалып биргән кеше юҡ әле.

Вәсилә бер аҙ өндәшмәй торҙо.

– Ҡыҙың менән мине иҫкә алаһыңмы һуң? – тине ул, һәр бер һүҙҙе ижекләп тигәндәй.

– Алам. – Дәүрәндең тауышы ҡалтыранды. – Ҡыҙымды онотҡан юҡ.

– Үҙе менән һөйләшкең киләме? – Вәсилә һорауын дауам итте. – Бына ул эргәмдә генә тора.

– Бир. – Дәүрәндең ике күҙе лә йәшкә тулыша башланы. Үҙе Мәсәбихкә, һин сығып тор, тип ымланы. Кеше алдында нисек күҙ йәше түкмәк кәрәк. Ирҙәр затынан бит әле ул.

– Һаумыһығыҙ, – тине теге баштан яғымлы бер тауыш тартынып ҡына. – Атай, был һинме? Дәүрәнме?

«Эйе», – тип әйтергә иткәйне, Дәүрәндең ҡапыл тамағына ниҙер килеп тығылды. Ауыҙын асҡайны, өнө сыҡманы. Тыны бөтөп, ниндәйҙер күҙгә күренмәҫ көс ҡаты итеп күкрәген ҡыҫты. Бер аҙҙан тәне тартышты ла, күҙе аҡайып, ҡатып ҡалды. Мәсәбих ишекте асып ҡарағанда, Дәүрән был донъя кешеһе түгел ине.

…Зыяраттағы бер төркөм ир тағы ла бер ауылдашын һуңғы юлға оҙата. Бына ҡәбергә һуңғы көрәк тупраҡ та ырғытылды. Тейешле йолаларҙы үтәп, ирҙәр зыяраттан сыҡҡас, уларҙы шым ғына ситтән күҙәткән ике ҡатын-ҡыҙ, аҡрын ғына атлап, яңы ҡәбер янына килде. Олоһо, сикәләре һәм ике күҙе тирәләй тәрән һырҙар ярғылаған ҡалын кәүҙәлеһе, иренен ҡымтыған. Икенсеһенә, аҡ йөҙлө, йәш йүкә олонолай нескә буйлыһына, егерме йәш тә юҡтыр. Олоһо, моғайын, ошо мәңгелек йорт хужаһы менән бергә үткәргән ғүмерен, бер тапҡыр ҙа һөйөү-яратыу тойғоһо кисереп кинәнмәгәнен уйлап үкенәләр. Хәйер, үкенеп тә ни үҙгәртә алаһың хәҙер? Ә йәше, бәлки, мәрхүмгә бер тапҡыр ҙа «атай!» тип өндәшә, ғөмүмән, ата наҙына, уның барлығына ҡыуанып йәшәй алмауын иҫенә төшөрәләр. Йән тармаһа ла, ҡан тарта тигәндәй, Дәүрәндең ошо фани донъяла ҡалған ҡанын йөрөтөүсе берҙән-бер һәм иң һуңғы зат бит ул. Әсәһенең тойғолары беленмәй, тик ҡыҙҙың ғына ике күҙенән дә субырлап йәш аға…



**Тамара ҒӘНИЕВА**

# «ОФОҠТАРҘЫ АШҠЫМ ҠИЛЕП ҠИТТЕ...»

## *Быуат*

*Быуат!*
*Йәш килен һин, эйе...*
*Ҡүрешәйек!..*
*Оялған булсәле, йый итәгең,*
*«Ҡемдә кемдең эше бар ул?» — тиһең...*
*Өҙә һуҡма...*
*Һин ни...*
*Бигерәкһең!..*

*Быуат!*
*Иҫеңдәме икән:*
*Әҙәм — Һауа*
*Йәннәт баҡсаһының тат-тәғәмен*
*Алыштырғас ләззәт алмаһына,*
*Тәҡдиренә алған ғазап тәме?*

*Быуат!*
*Эйе...*
*Һинең сүрәттәге*
*Ғасырҙар ул булған...*
*Һәм ил-ҡәүем*
*Ҡәйеф-сафа менән ғүмер иткән...*
*Зиһен-хистән күңеле тыйылған.*

---

*Тамара Ғәниева (1951) Көйөргәҙе районының Кинйәбай ауылынан. Салауат педагогия училищеһын, Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Республика гәзит-журналдары редакцияларында, Башҡортостан радиоһында эшләне. Әлеге мәлдә — «Панорама Башкортостана» журналы хеҙмәткәре. Тиҫтәләгән шиғри йыйынтыҡ авторы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән тәбрикләйбеҙ!*

*Тик арҡанла, ана, әйҙә, ғасыр,*
*Хисләнмәһен, уйланмаһын бәндәң!*

*Ашаһын да эсһен,*
*Уйнаҡлаһын,*
*Өҫтөн күрһен тәнен*
*Баҡый йәндән!*

*Тик нишләп, тип*
*Мин һорайым һинән.*
*Байлыҡ бөтмәй ерҙә,*
*Ғүмер бөтә?*
*Ғүмер бөтә...*
*Ерҙән*
*Шағирың да,*
*Мал ҡолоң да*
*Сыр яланғас китә?*

*Усы буп-буш...*
*Табут, эйе, төрлө:*
*Ҡем кәфенле...*
*Йәки зат-зиннәтле...*
*Ә әруахҡа шулар, йә, ҡиммәтме?*
*Шуға мохтажмы ни рух ҡөҙрәте?*

*Эй, Илаһым!*
*Хөкөм итмә, тинең,*
*Уйланырға рөхсәт итһәң ине,*
*Ер өҫтөндә тапҡан хәләл ғәмем*
*Ҡалғандарға хеҙмәт итһә ине.*

*Быуат!*
*Йәш килен һин, эйе...*
*Ә мин иһә...*
*Йола-ғәҙәт ҡоло — бейем генә.*
*Иҙрап барған тәнем —*
*Иҫке күлдәк...*
*Салт яҡтылыҡ яҡлы йәнем генә.*

*Заманам, тим, —*
*Миңә яҙған быуат!*
*Усым сыр яланғас,*
*Ә йәнемдә*
*Йыйған болом кәрәк булырмы бер*
*Раббы ихтыяры — тыумышымдан*
*Инселәнгән ғәзиз милләтемә?*

## ***Ерҙең көсө***

*Һүрәнәйгәс күңелең усаҡтары,*
*Әллә ниндәй мәлде һағынып,*
*Ҡыр ҡаҙҙары осҡан офоҡтарҙан*

*Таң һарҡыла,*
*Баҙлап болоттарҙа,*
*Ирәүәнләй, йәнеңә һарылып.*

*Өҙөлә шул саҡ сабыр теҙгендәрең,*
*Гөлт итә лә дәртең тоҡана.*
*Тау һарҡылған тайҙар туплауына*
*Тағыл да кит йәшлек утрауына!..*
*Бал тәмәйтеп унда моң тама.*

*Ҡыйып баҫһаң үлән ҡыяғына,*
*Үҙәгеңә һеңер ҡот-ырыҫ.*
*«Етмәгәнсе һүнер-һүрелер сағың, —*
*Ана шулай көйләй күкһел сағыл. —*
*Үрһәләнмәсәле, бул тыныс!»*

*Төйәгеңдең ҡайнар һулышынан*
*Эркелгәндә сәме донъяның,*
*Ҡарашыңа иңә япраҡ төҫө,*
*Балтырҙарҙан йүгерә ерҙең көсө*
*Һәм офоҡто кисә хыялың.*

## Ташыуҙар

*Ташҡындарҙың быйыл һис кәре юҡ,*
*Иренеп аҡҡан кеүек,*
*Тып-тыныс.*
*Дәртләндерер, арбар ҡөҙрәт ҡайҙа?..*
*Шул тыйнаҡлыҡ никтер шомландыра,*
*Баҫымсаҡлыҡ никтер ҡурҡыныс.*

*Сөнки беләм:*
*Ипле быуаларҙа*
*Ен-иблистәр ҡора шағараҡ.*
*Ул аҫтыртын ен түйҙары мине*
*Нисә арбап, һаҙға һөйрәкләне,*
*Татлы һөйләп, элде тағараҡ.*

*Торған һыуҙан ҡурҡам уттан былай,*
*Тын ятыуҙа, беләм, мәкер бар,*
*Күҙҙе быуа торған хәйләләр бар,*
*Күтерҙәрҙә арбау, тартыу бар,*
*Торған һыуҙа, беләм, мәкер бар.*

*Ярһыуҙарҙан арыған, талған йәнем,*
*Ял көҫәгән аңым бураны*
*Ана шундай ҡомороҡ ятыуының*
*Нисәмә рәт булды ҡорбаны.*

*Ул күтерҙәр минең йән ғәләмен,*
*Ана шулар минең күңелем ғәмен*
*Үҙенә янау тиеп уйланы.*

*Уй-хисемдең урлап төрлөктәрен,*
*Тишек-тошоҡ кәрен яманы.*

*...Ярҙарыма ҡайтыр ваҡыт етер...*
*Көн итермен ташмай, осонмай.*
*Ләйсәне лә быйыл аҙаштымы?*
*Аң сафланыр ташҡын кисмәй тороп,*
*Йәшәүҙәре ҡыйын бошонмай.*

*...Ташҡын ҡайта...*
*Туҡта!*
*Йән аъарһын!*
*Сайҡатсәле донъя болаһын.*
*...Тау артынан йәйъор таҫма һондо,*
*Ҡешнәп ә рләй бейә бер ҡолондо...*
*Их, ни саҡлым ъәмең,*
*Илаһым.*

## ***Билдәле ул...***

*Һаумы,көнөм!*
*Мин теремен,*
*Бармын!*
*Аңдың иң түрендә,*
*Төптәрәк*
*Сиртеп ҡуя бер уй:*
*«Рәхмәттәнме,*
*Язаъамы яңы көн-бүләк?»*

*Рәхәт сигер өсөн барышыммы,*
*Ғазап сигергәме юъиһә?*
*Яурыныма ҡунъан фәрештәләр*
*Үргә тартмай ҡайсаҡ,*
*Бөгөлдөрә...*
*Ауырая иңем,*
*Ни бөгә?*

*Һаумы, көнөм!*
*Ерҙең йәшәү төрөн*
*Һайламаным.*
*Күндем, буйһондом.*
*Ниндәй ролен башҡарыусы һуң мин*
*Ғүмер итмеш тигән уйындың?*

*Ҡыра алманым, буъай, ҙур ъәмәлдәр —*
*Таң ҡалырлыҡ ъасыр-ъасырҙар.*
*Ҡилмәнеме ҡулдан,*
*Һәләттәнме?*
*Мөъжизәле камил донъялыҡтың*
*Яҙманы шул серен асыуҙар.*

*Һаумы, көнөм!*
*Йәйъор төҫлөкәйем,*

*Йә һөрөмлө,*
*Йәки аҡҡынам!*
*...Иртәгәңде һағынам...*
*Ул — бүҫкәрец...*
*Тик нишләп һуң, ашыға,*
*ашыға,*
*ашыға,*
*Ана шунда икән тартылам?..*

## *Дүндерҙеләр*

*Себештәрҙе көҙ һанарым,*
*Әле рәхәт баҡсала.*
*Һуған түтәлен утайым,*
*Һатып алһаң да була ла...*
*Уны хәләл аҡсаға.*

*Әммә ергә ҡаҙалдиһәм,*
*Тамырым терелгәндәй,*
*Быуындарым яҙылғандай,*
*Илһамым кирелгәндәй.*

*Төндәрен йондоҙ һанайым,*
*Мөрйәгә ҡуна айым.*
*Әллә кем булып ирәйә*
*Мин хөрмәт иткән һайын.*

*Төндәрен сәскәле шәлен*
*Иңгә яба алмағас,*
*Һинән дә яҡын тоғроно*
*Көтөп ала алмағас,*

*Әхирәт булышайыҡ, ти,*
*Бүләгем — көҙгө табын.*
*Шунан артыҡ йомартлыҡты*
*Мин кемдән күрҙем тағын?*

*Эй, рәхәт сигә инем дә...*
*Шуны ла күп күрҙеләр.*
*Йәнәһе, мәхрүм итәләр —*
*Еремдән дүндерҙеләр.*

*Усағым да һүрелеп бара,*
*Быстылар һеңеремде.*
*Өй бурап инһәң ине ул!*
*Аҫаба мин...*
*Ә кем көҫәй,*
*Тар һикемдә шыңшый-шыңшый,*
*Ятып дөмөгөрөмдө?*

## Тыуған як

*Үтә күренмәле саф яҡтылыҡ —*
*Офоҡтарға саҡлым.*
*Манзараңдың камил төҫтәренә*
*Текләнем дә ҡаттым.*

*Наҡаҫ ҡына — наҡыҫ,*
*Шишмә хәтлем,*
*Сорлап аҡҡан була.*
*Күнәк батырлыҡ та ятыуы юҡ,*
*Сүмес кенә тула.*

*Шау сәскәле болон —*
*Сын яһаулы.*
*Сиңерткәләр туйы.*
*Билдәремдән сумғас сәхрәләргә,*
*Күңелдәрем тулды.*

*Йыуаһынан ауыҙ иттениһәм,*
*Еләк ҡылтайғандай.*
*Күкрәгемә илһам ҡаптырайым,*
*Шәмгә ут алғандай.*

*...Анау яҡта ир-ат, егет-еләң,*
*Һайтылдығын сығып,*
*Менгегә тип тайҙы өйрәтәләр,*
*Зыңлап ҡуя ҡороҡ.*

*Офоҡтарҙы ашҡым килеп китте.*
*Элек кискәнемдәй.*
*Шаҡарылдым ҡапыл...*
*Зиһен ҡайтты*
*Шаңғып һиҫкәнеүҙән.*

*Өфө тауҙарының кендегенә*
*Беркетелгәнменме?*
*Бик оҙонға һуҙмай бушата ла*
*Ҡайыра теҙгенемде.*

*Таҫма юлым йәнә тәгәрмәскә*
*Уралырмы икән?*
*Әнтәкләнгән ауылым*
*Тәнтерәкләй...*
*Тора алыр микән?*

## Дауыл

*Күктә монар ине...*
*Сыбыртҡыһын*
*Һелтәне лә берәү —*
*Арбалы,*

*Тракторҙа күкте һөрәме ни,*
*Ҡаш төйөрөп уҫал ҡараны.*

*Тирәктәрҙә ниндәй үсе барҙыр,*
*Ҡайыҙланы ғына.*
*Улары,*
*Ҡылыс сапҡан ыңғай башын юйған*
*Яугир ише,*
*Иңрәп ҡоланы.*

*Ябырылды шунан ҡыйыҡтарға,*
*Ҡомдай ҡойҙо өйҙәр тәҙрәһен.*
*Аҡ-ҡараны күрмәй Бабай, —*
*Ҡыҙған,*
*Йыһандарҙан ишелеп яуа туҙан, —*
*Әҙрәкәләр тоҫҡай йәҙрәһен.*

*Ҡырылышып ята ер өҫтөнөң*
*Бер гонаһһыҙ аҫыл төҫтәре.*
*Алла Бабай иҙрәй мөнбәрендә,*
*Бөтөргәндәй мөһим эштәрен.*

*Ни ғәләмәт булды?*
*Әллә ҡартлас*
*Һыҙлап уяндымы тештәре?*
*Буталдымы әллә төштәре?*
*Ана, бар ҙа һора...*
*...Күк салт аяҙ...*
*Монар сигә офоҡ ситтәрен.*
*Нурҙан ебәк иләй,*
*Ғәйепһеҙҙәй...*
*Ғәмһеҙ,*
*Текә*
*Йыһан эстәре.*

## ***Ил ирҙәренә***

*(Хат)*

*Ил ирҙәре!*
*Ғәләм күҙҙәренә*
*Тура ҡарағыҙсы.*
*Намыҫһыҙ*
*Булғанығыҙ юҡтыр?*
*Күкрәктәге*
*Атығыҙмы йүгән, ҡамытһыҙ?*

*Ил ирҙәре!*
*Түрҙәр мөнбәренә*
*Баҫтырмағыҙ, зинһар, ситтәрҙе.*
*Беҙгә тигән далан —*
*Беҙҙеке ул!*
*Инде кәртәләүһеҙ сиктәрҙе*

*Иманығыҙ,*
*Йәнегеҙ менән ҡурсып,*
*Терәгеҙ ҙә арҡа Уралға,*
*Иңдерегеҙ ғәйрәт.*
*Нык булығыҙ!*
*«Һеҙ кемдәр ул?» тигән һорауға*

*«Беҙ үҙебеҙ — аҫабалар!» тиеп*
*Яуаплағыҙ ҡурҡмай,*
*Тураһын.*
*Килһә килһен, әйҙә, асарбағы*
*(Халҡыбыҙҙың, шөкөр, мул табағы),*
*Баҫҡынсылар нәфсе һуҙмаһын.*

*Ил ирҙәре!*
*Меңәр йылдар буйы*
*Нәҫелебеҙ йыйған рух көсөн*
*Тәләфләргә*
*Хоҡуҡ юҡ ул һеҙҙә.*
*Телебеҙ өсөн,*
*Илебеҙ,*
*Ер өсөн*
*Баш һалырға ғына хаҡығыҙ бар.*
*Тик булығыҙ тере,*
*Аң,*
*Һере.*
*Халҡыбыҙҙың арҡа тамыры —*
*Һеҙ!*
*Затыбыҙҙың затлы һеңере.*

*Ил ирҙәре!*
*Ғәләм күҙҙәренә*
*Тура ҡарағыҙ һеҙ,*
*Оятлы*
*Итә торған ғәмәл —*
*Туҙҙа ла юҡ,*
*Милләттең бит йыһан алдындағы*
*Тәуарихы саф*
*Вә яп-яҡты.*

*Онотмағыҙ:*
*Ирлек һәм егетлек —*
*Идеалы беҙҙең халыҡтың.*
*...Ил инәһе һин, тип танымаһаң,*
*Майҙан тотор баҙнатым юҡ...*
*Шуға*
*Хатҡа яҙам ошо нотоҡто.*



Рәмил
ЙӘНБӘК

# "МИН АШҠЫНДЫМ ГЕЛӘН ИРТӘГӘГӘ..."

***

*Бүҫкәрә бара хистәрем,*
*Өҫтәлмәй яңылары.*
*Шатлыҡтар көҫәй күңелем —*
*Һағышҡа абынамын.*

*Һағыштамын ил эсендә*
*Ихласлыҡ кәмеүенән.*
*Һәр нәмә бит матур була*
*Тәбиғи йәме менән.*

*Яһалма битлек йөҙҙәрҙә,*
*Ихлас һөйләнмәй һүҙҙәр.*
*Сыңлатып һирәк көлгәндәр,*
*Шикле һирпелә күҙҙәр.*

*Нимәлер булды кешегә*
*Башланғас яңы быуат.*
*Хет һыйпа һәр кем башынан,*
*Хет, тим, һәр кемде йыуат.*

*Ахрыһы, өмөт һүрелә,*
*Маҡсаттар томанлана.*

---

*Рәмил Йәнбәк (1952) — Күгәрсен районы Дауыт-Ҡайып ауылынан. БДУ-ны тамамлағас, республика матбуғатында, "Китап" нәшриәтендә эшләй. Тиҫтәгә яҡын шиғри йыйынтыҡтар авторы.*

*Яңырыштар һәр ҡасан да*
*Иҫкесә тамамлана.*

*Әҙрәтеп бәндә күңелен,*
*Томалап зиһендәрҙе,*
*Ил байлығын таланылар —*
*Былар һуң тигенгәме?*

*Күңелдәрҙе туңдырҙылар*
*Ап-асыҡ хаслыҡ менән.*
*Көнө-төнө ҡурҡыталар*
*Сир менән, аслыҡ менән.*

*Шуға бикләнде йөрәктәр,*
*Төштөк шик, хафаларға.*
*Ошо афәттән халыҡты*
*Нисек һуң ҡамаларға?!*
*Тапмайым саралар ҙа...*

## *Икеләтә*

Инсур Артур үлеменә

*Һин ҡотолдоң ҡайғы-һағыштарҙан,*
*Һыҙланыуҙарыңдан ҡотолдоң.*
*Ауыр уйҙарың да юҡҡа сыҡты,*
*Йөрәк иңрәүҙәрең онотолдо.*

*Һин ҡотолдоң йәйге иртәләрҙә*
*Таң ҡалыуҙан былбыл моңона.*
*Һин булмағас, ағымдарын тыйып,*
*Инде Ағиҙелең юҡһына.*

*Шатлыҡ-ҡыуаныстан арындың һин,*
*Ҡанат йәйеп күктә осоуҙан;*
*Ҡотолдоң һин ғашиҡ булыуҙарҙан,*
*Һөйгән йәрең һығып ҡосоуҙан.*

*Һин ҡотолдоң барлыҡ мәшәҡәттән,*
*Көнләшеүҙән, ғәйбәт һүҙенән;*
*Рәнйеү, әрнеүҙәр ҙә йәш сығармаҫ*
*Мәңге йомдоролған күҙеңә.*

*Һин ҡотолдоң...*
*Әммә бар булмышың*
*Күсте төҫлө минең аңыма.*
*Һинең моңһоулыҡты, ихласлығың*
*Икеләтә хәҙер һағынам.*

*Икеләтә хәҙер һағышланам,*
*Хәүефләнәм хәҙер күберәк.*
*Йоҡлығыңды тойоу йөрәгемә*
*Яңы һырҙар булып түгелә.*

*Бурыс тоям хәҙер һинең өсөн —*
*Һин һәм үҙем булып йәшәргә;*
*Икеләтә хәҙер һыҙланырға,*
*Икеләтә хәҙер — йәшнәргә!*

## Тамғалы заман

*Ил башына килер тамғалы ир,*
*Ул тарҡатыр һеҙҙе, тигән Ванга.*
*СССР ярсыҡтары сәсрәп ята,*
*Ҡайҙа ғына күҙең һалма —*
*Шул заманға булып тамға.*

*Ил тарҡатҡан, илен һатҡан мөртәт*
*Инде, батырмын, тип күкрәк кирә.*
*Нәжес еҫе сыҡҡан алтындарын*
*Донъя буйлап сәсә, һибә —*
*Ул да "йондоҙ" үҙенә күрә.*

*Донъя мафияһы менән ҡосаҡлашып,*
*Уңға-һулға һирпеп сөсө балҡыш,*
*Тамғалы ир ситтә байрам итә —*
*Иленән дә көтөп алҡыш.*
*Иҫтәр китер, бынағайыш.*

*Күҙҙәренә һығып йәш сығара:*
*— Ғәйебем юҡ, шундай ил тарҡалғас,*
*Бер ҡултамға менән генә һеҙҙе*
*Илһеҙ итте йүнһеҙ алкаш —*
*Яфа күрҙем мин, замандаш...*

*Капиталдың ҡомһоҙ ҡоҙғондары,*
*Ҡорбан аңдып, урай ҡитғаларҙы.*
*Тамғалайҙар һәр ер, һәр байлыҡты —*
*Күсәренән Ерҙе-шарҙы*
*Ысҡындырмаҡ итәләрме?!*

*Тамғаланған илдәр, инселәнгән*
*Ҡол булаһы ҡәүем, халыҡтар ҙа.*
*Өсөнсөгә донъя яуы бара —*
*Тамаҡларға алтын һарыҡтарҙы,*
*Бүлешергә һуңғы байлыҡтарҙы.*

***

*Ҡыйын икән яҙмыш аймылышы,*
*Кәртә тотҡас йылдар араһы.*
*Мин — үтәһе юлым тамамлайым,*
*Һиңә — бараһы ла бараһы.*

*Күңелгенәм тәүгә яраланмай:*
*Мин түҙермен, — ахры, һуңғы ҡат.*
*Мин яратам һине барыбер ҙә!*
*Ныҡ ихластан икән — һин ярат.*

*Яратышҡан көйө айырылайыҡ,*
*Йәндәр ҡушылыуы тап-таман.*
*Мин керермен ҡышҡы бурандарға,*
*Һин яҙыңда көйө ҡал һаман.*

*Ярты йәнемде мин үткәндәрҙә,*
*Уҙған тормошомда эҙләнем.*
*Киләсәктә көтөп торғаныңды,*
*Яртым икәнеңде белмәнем.*

*Тәҡдир ҡушҡас, әсенеүҙәр менән*
*Ҡосаҡлашып китәм юлымдан.*
*Буйҙан-буйға һағыштарым һәм дә*
*Үкенестәр теҙеп ҡуйылған.*

*Үткәндәр ҙә түгел, киләсәк тә —*
*Осраштырҙы мәле бөгөндөң.*
*Бүләгеме, язаһымы һуң был*
*Етәкләгән яҙмыш-бөгөлдөң?!*

*Ҡыйын икән яҙмыш аймылышы.*

## *Шаҡарма*

*Атайымдан ҡалған донъяларҙың*
*Серей төшкәс кәртә-ҡураһы,*
*Мин — ун йәшлек малай — шаҡарманан*
*Күтәрәһе иттем ҡойманы.*

*Һаман үстә: йәп-йәш ҡайындарҙы*
*Шаҡармаға киҫтем йәлләмәй.*
*Мохтажлыҡтың булмай аяуҙары:*
*Етем малай урам кәртәләй.*

*Минең үҙемде лә, йәш ҡайындай,*
*Тормош төрлөсәгә шаҡарҙы.*
*Моңһоуланып һаман иҫкә алам*
*Ҡойма шаҡармалар саҡтарҙы.*

*Ул саҡта бит күпкә бәхетлерәк,*
*Күпкә өмөтлөрәк булғанмын.*
*Ҡайындарҙай ап-аҡ һәм саф ҡына —*
*Хыял һуттарына тулғанмын.*

*Мин ҡоймаға киҫкән ҡайындарҙың*
*Тиҫтерҙәре хәҙер мөһабәт.*
*Тотош урман булып сәләмләйҙәр:*
*Минән ул саҡ тейгән мәрхәмәт.*

*Инде уларҙың да олондары*
*Элекесә шыма, аҡ түгел.*
*Минең иңдәрҙе лә донъя баҫҡан,*
*Һәм ҡалмаған эстә аҡ күңел.*

*Ҡул арбаһы тартып малай бара:*
*Яурын — арыҡ, йөҙө — һөрөнкө.*
*Арҡаһынан һөйөп үтке килә,*
*Бала саҡҡа килә төрөнгө.*

## Сымылдыҡ

*Таң нурынан мин сымылдыҡ ҡорҙом*
*Икебеҙгә, иркәм.*
*Һине көтөп ашҡыныуҙан ул да*
*Серле балҡып киткән.*

*Серҙәремде аҡ нурҙарға төрҙөм,*
*Хистәремде — алға.*
*Һиңә бер һүҙ, бары бер генә һүҙ*
*Әйтәсәгем ҡалған.*

*Мин йәйғорҙоң бар төҫтәрен*
*Ошо һүҙгә ҡуштым.*
*Һиңә нисек өндәшермен ҡыйып —*
*Юғалтырмын һуштьы.*

*Таң еленә юллар инем серем,*
*Ул таратыр илгә.*
*Һинең менән сымылдыҡта икәү*
*Мәңге ҡалғым килә.*

*Мин сымылдыҡ ҡорҙом таң нурынан —*
*Балҡыш таратамын.*
*Иң осонда төрлө төҫтә яна*
*Бер һүҙ: "Яратамын".*

## *Әсенеү*

*Телгә сыҡмай, йөҙҙә ҡыҙылланмай —*
*Эстән бәрә күңел аһтары.*
*Үҙ-үҙемде, хатта аҡ донъяны*
*Күрә алмаҫ кеүек саҡтарым.*

*Әллә инде бары үкенестәр,*
*Әсенештәр өсөн тыуғанмын.*
*Был тормоштоң ҡара яҡтарына*
*Әйләнә лә ҡайта уйҙарым.*

*Ҡомһоҙҙарҙың, шыма, йылғырҙарҙың*
*Илде баҫҡанына әсенәм.*
*Түрәләрҙең беҙҙе күрәләтә*
*Алдауына яна эскенәм.*

*Ҡарт-ҡоролар — икмәк менән һыуҙа,*
*Кейемдәре — уҙған быуаттан.*
*Ил хаҡына билен бөккәндәрҙе*
*Буш вәғәҙәләр генә йыуата.*

*Телевизорҙың һәр каналында*
*Тәмле-татлы бешә, үсекләп.*
*Аш-һыу әҙерләүҙә уҙышалар —*
*Хаяһыҙлыҡ бит был нисек тә!*

*Үҙе ултырған ағас ботағына*
*Балта саба Рәсәй түрәһе.*
*Намыҫһыҙлыҡ тотош ялмағанда*
*Күрәһе лә беҙгә күрәһе.*

*Шундай саҡта күңел тыныс ҡалып,*
*Йоҡлар йоҡо татлы буламы?*
*Күрһәм икән сағыу балҡыштарҙы,*
*Онотһамсы ала-ҡоланы.*
*Нисек ғәҙелләргә донъяны?..*

## *Өләсәйҙәр, олатайҙар...*

*Мин ҡыуанам йәш быуындар өсөн,*
*Ейәнемә ҡарап ҡыуанам.*
*Йәп-йәш ата-әсәһе бар, тиеп,*
*Донъя тыныс, тиеп йыуанам.*

*Ике өләсәһе бар ейәнемдең,*
*Олатайҙар икәү — ҙур байлыҡ.*
*Шуларҙан гел һөйөләп торор өсөн*
*Был донъяға ҡабат тыуарлыҡ.*

*Олатай ни икәнен белмәй үҫтем,*
*Өләсәйҙәр наҙы яҙманы.*
*Инҡилаптар... Һуғыш... Йәнә аслыҡ —*
*Билдәле бит инде ҡалғаны.*

*Балаларым үҫте олатаһыҙ:*
*Икеһе лә йәшләй вафаттар.*
*Икеһен дә гүргә алып китте*
*Алған яра һуғыш-афәттә.*

*Шуға күрә сикһеҙ ҡыуанам мин,*
*Бөгөнгөгә шуға һоҡланам:*
*Ярай әле, илдә яуҙар ҡупмай,*
*Именлектәр ерҙә һаҡлана.*

*Һаҡланалар шуға өләсәйҙәр,*
*Олатайҙар имен көйөләр.*
*Ейәндәрҙең тулы бәхетенән*
*Күңелемә хистәр өйөлә.*

*Һәр быуын да шулай үҫһен ине —*
*Олатай-өләсәйҙәр наҙында.*
*Ейән-ейәнсәрҙәр әҙәм булыр*
*Улар тәрбиәһе барында.*

## ***Хәлдәр һәйбәт***

*Һине тағы төштә күрҙем, тиһең,*
*Бик борсолма: хәлем һәйбәт ул.*
*Борсоуҙарға һине төштәр һалмай,*
*Һине бошондорған — ғәйбәт ул.*

*Хәстәрлектәр итеп, изге дуҫтар*
*Нәжестәргә әле буярҙар.*
*Улар йәтмәһенән ҡотолоу юҡ:*
*Һәр саҡ һаҡта,*
*Һәр саҡ уяуҙар.*

*Хәүефләнмә берүк, мин улай уҡ*
*Юлдан яҙған әҙәм түгелмен.*
*Әммә һинһеҙ толҡа табалмайым,*
*Һинһеҙ миңә гелән күңелһеҙ.*

*Көн итәмен шуға бирсә ярһып,*
*Бирсә һағыштарға ҡапланып.*
*Шуға, бәлки, һыймай ҡалыптарға,*
*Яҙмыш упҡынына атлайым.*

*Төштәремдә бик йыш күрәм, тиһең,*
*Хәүефләнмә: шөкөр, хәл һәйбәт.*
*Бер-бер хәлдәр булһа минең менән,*
*Алдан килеп етер шул ғәйбәт.*

## Ашҡыныу

*Мин ашҡындым килән иртәгәгә,*
*Бөгөнгөлә бәхет тапмағас;*
*Аҡ томандай, күңел пәрәләрем*
*Ал хыялдар ғына ҡаплағас.*

*Ул томандар хәҙер таралды ла,*
*Ысынбарлыҡ баҫты ҡаялай.*
*Баҡһаң, ғүмер ебе һүтелгән дә —*
*Ҡырған эшем бары аялай.*

*Мин барлыҡтан һис ни үҙгәрмәне,*
*Һаман ҡылындылар гонаһтар.*
*Күп сағында алдаҡ өҫтөн сығып,*
*Байрам итте ҡара ғрурҙар.*

*Ер шарында яуҙар туҡталманы,*
*Байлыҡ шаша, нәфсе ҡотора.*
*Ник тыуғанмын, ниңә йәшәнем, тип*
*Башҡынайым ҡыҫып ултырам.*

*Һуң ниндәйҙер оло маҡсат өсөн*
*Илаһи көс мине бар иткән.*
*Күптәр микән әҙәм араһында*
*Минең кеүек шулай интеккән?*

*Маҡсаттарым, ахры, мираж булған,*
*Бушҡа ғына, ахры, йәшәлгән.*
*Иртәгәне ҡыуып еталманым,*
*Һәм ҡотолоу булмаҫ әжәлдән.*



**Тимер**
**НИӘТШИН**

## *Шәп булдымы?*

*Илдә муллыҡ. Ҡайҙа ғына барма —*
*Аҙыҡ-түлек тулы кибеттәр.*
*Был үҙгәртеп ҡороу беҙҙең өсөн*
*Әллә шәп булдымы, егеттәр?*

*Күңел дә туҡ, сөнки күҙ-ҡолағың*
*Көн-төн йөҙә зәңгәр тулҡында.*
*Йәштәр еңел генә ләззәт таба,*
*Ләззәт эҙләп ҡарттар туҡылдай.*

*Илдә муллыҡ, тик күптәрҙең генә*
*Кеҫәһендә елдәр иҫәләр.*
*Әллә шуға инде, табыш ҡыуып,*
*Себер китә хатта бисәләр.*

*Муллығы ла үҙеңдеке түгел,*
*Илде баҫҡан донъя баҙары.*
*Ҡасан ғына Рәсәй еҢ һыҙғаныр,*
*Ҡасан ғына уңыш ҡаҙаныр?*

*Күңел майын һурһа зәңгәр экран,*
*Ҡорос торба һура ер майын.*
*Ил байлығын уңға-һулға һатып,*
*Нисек йәшәп була йылмайып?*

*Тимер Ниәтшин (Ниәтшин Тимерйән Әбдрәхим улы — 1946) Көйөргәҙе районының Илкәнәй ауылында тыуған. 1994 йылдан БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы. Мәләүез ҡалаһында йәшәй.*

*"Йыуынмаған Рәсәй, һау бул" , — тигән*
*Бөйөк шағир, әрнеп, ҡасандыр.*
*Үҙ асылын эҙләмәгән илдә*
*Үҙ-үҙемдән мин дә ҡасамдыр.*

*Әммә былай йәшәү — оло хурлыҡ,*
*Былай йәшәү — оло хаталыр.*
*Ә үҙгәртеп ҡороу киләсәктә*
*Икенсерәк, буғай, аталыр.*

## Ағиҙел аға ғына

*Ағиҙел ял белмәй аға ғына,*
*Күктә бөркөт ҡанат ҡаға ғына.*
*Йылдар, юлдар, сәмле бәйгеселәй,*
*Кемуҙарҙан алға саба ғына.*

*Үтер юлдар, борма булһалар ҙа,*
*Ағиҙелдән генә айырмаһын.*
*Башҡорт осһон Урал бөркөтөндәй,*
*Ҡанаттарын йылдар ҡайырмаһын.*

*"Ағиҙел" бит — беҙгә бишек йыры,*
*Һылыуҙарҙың нурлы күҙҙәре лә,*
*Сал быуаттар үтеп бөгөнгәсә*
*Йәшәп килгән сәсән һүҙҙәре лә.*

*Һәр бер өҫтәл, китап кәштәләре*
*"Ағиҙел"һеҙ йәтим тойолмаһын.*
*Рухи байлыҡ көҙгө япраҡ түгел,*
*Һалҡын ел иҫә, тип ҡойолмаһын.*

*Заманыбыҙ үтә бысранды шул,*
*"Ағиҙел"һеҙ уны йыуып булмай.*
*"Ағиҙел"һеҙ зиһен томалана,*
*Ысын башҡорт булып тыуып булмай.*

## Гонаһтарҙан һакла

*Минең тәнем — тотош ауыртыуҙа,*
*Һәр күҙәнәк — һыҙлау үҙәге.*
*Дауахана тупһаһынан үткәс,*
*Ошо хәҡиҡәтте һиҙәһең,*
*Һыҙланаһың, әммә түҙәһең.*

*Ниңә генә дөрөҫ йәшәлмәне,*
*Ниңә генә гонаһ ҡылдым мин?*
*Ниңә Хаҡ Тәғәлә юлын бутап,*
*Шайтан ҡушҡан юлға шылдым мин?*

*Шулай һуңлап килә үкенеүҙәр,*
*Һаулыҡ һорап күктән үтенеүҙәр.*
*Нисәнсе ҡат тәүбә итәһең,*
*Табиптарҙан дауа көтәһең...*

*Дауахана ишегенән сыҡһаң,*
*Мут йылмайып тормош ҡул һуҙа.*
*Әрһеҙ шайтан күптән көтөп торған,*
*Уңға түгел, һулға юл һыҙа,*
*Нәфсе ҡанат ҡаға, ҡан ҡыҙа.*

*Ошо мәлдә сама бирсе миңә,*
*Гонаһтарҙан һаҡла, Хоҙайым.*
*Яҙмыш дәфтәремде дөрөҫ уҡып,*
*Үҙ юлымды үҙем һыҙайым.*
*Гонаһтарҙан һаҡла, Хоҙайым.*

## Ҡартлыҡ килә

*Ҡартлыҡ килә — саҡырмаған ҡунаҡ.*
*Килә ҡартлыҡ, тейәп бүләген.*
*Онотмаған һис бер нәмәне лә —*
*Ғүмер буйы йыйған, күрәһең.*

*Бына бишек, шаян бала сағым*
*Күңелемә үтә яҡын шул.*
*Сабып ҡайтып ҡына йылынһаңсы,*
*Сихри нурын һирпкән ялҡын шул.*

*Йылдар аша, серле генә балҡып,*
*Бер йылмая икән күҙҙәрең.*
*Ҡартлығың да ҡапыл ялтлап китер,*
*Бөтә донъя ҡапыл үҙгәрер.*

*Ә быныһы — артҡа тартҡан сылбыр,*
*Хаталарым унда теҙелгән.*
*Һәр ҡулсаһы һыйған яҙмышыма,*
*Хәтеремә үйып тегелгән.*

*Килһен ҡартлыҡ — саҡырмаған ҡунаҡ,*
*Ҡабул итәм биргән бүләген.*
*Ғүмер буйы ҡылған эштәремә*
*Ғәҙел хаҡты килә түләгем.*

*Кешеләргә булдым изгелекле,*
*Мохтаждарға тейҙе ярҙамым.*
*Ауырлыҡтар баҫты, тик һынманым,*
*Шуға бөгөн тыныс ярҙамын.*

## Һиңә

*Аҡ ҡайындың һары япрағына*
*Әйләнде лә ваҡыт ағыштары —*
*Шыбыр-шыбыр килеп ергә яуа,*
*Һиңә оса минең һағыштарым.*

*Моңһоу тәҙрәм аша ҡарап торам*
*Күктә йөҙгән аҡһыл болоттарға.*
*Көҙгө елдәр ниңә йән өрмәй һуң*
*Һинһеҙ шиңеп барған минуттарға?*

*Көҙгө һағыш әрем һуты икән,*
*Белә тороп тәмләп эсәһең һин.*
*Сәстәр менән сәстәр бәйләнеүсен*
*Яҙҙы көткән һымаҡ көтәһең һин.*

## Хужа һәм эт

*Хужа ла бөгөн йүгәнһеҙ,*
*Эте бәйҙән ысҡынған.*
*Күрәһең, хужа тамағы*
*Ниҙер көтөп ҡысынған.*

*Ирҙе тотоу, этте бәйләү*
*Килмәй бисә ҡулынан.*
*Сәскә атҡан ҡәнәфер ҙә*
*Ҡапыл ғына һулыған.*

*Өйҙән өйгә ишек шаҡып,*
*Хужа йөрөй һоранып.*
*Ә урамда эте менән*
*Олой ғиңуар бураны.*

## "Йәтәс" әйтеү

*Таңды сәләмләй әтәстәр,*
*Ҡышҡы таң ата, буғай.*
*Минең алда оҙон юлым*
*Һуҙылып ята, буғай.*

*Бер осо уның — үткәнем,*
*Икенсеһе — киләсәк.*
*Күпме генә был ғүмерем*
*Ошо юлдан еләсәк?*

*Үткәнемә бер әйләнһәм,*
*Тулып ята соҡорҙар.*
*Өнөмдә лә, төшөмдә лә*
*Хәтеремде соҡойҙар.*

*Ат ҡараусының малайы —*
*Йәшәнем шул йүгәнһеҙ.*
*Ғүмерем үтте ҡалала.*
*Киң далаһыҙ, үләнһеҙ.*

*Бөгөн юлым киләсәккә*
*Илтә ерҙә, ауылда.*
*Шуға ҡайсаҡ хәтерләтәм*
*Табан төрткән ҡамылды.*

*Әлдә әле тамыр ҡалған,*
*Тамыр ҡалған еремдә.*
*Ихлас һүҙҙәр ҡоромаған*
*Сатнап кипкән ирендә...*

*Ҡышҡы таңды сәләмләүсе*
*Шағир ҙа әтәс инде.*
*Киләсәкте кемдәр отор —*
*Әйтәйек "йәтәс" инде.*

## *Һаумыһығыҙ, ырыуҙаштар!*

Мәләүез төбәгендә Тамъян, Ҡыпсаҡ,
Юрматы ырыуҙарына арнап стелла ҡуйылды.

*Һаумыһығыҙ, ырыуҙаштар.*
*Һаумыһығыҙ, йәштәр, ҡарттар.*
*Хәлдәрегеҙ арыу, шәпме,*
*Нисек әле һеҙҙең эштәр?*

*Тыуған ерҙең тартыу көсө*
*Арта бара йылдар менән.*
*Беҙҙең яҙмыш бәйләнгән бит*
*Кендектәге ҡылдар менән.*

*Сәстәремә сал ятһа ла,*
*Имсәгеңде һаман имәм.*
*Һинән генә алам тәүфиҡ,*
*Һинән генә алам иман.*

*Ят яҡтарҙың ере ташлы,*
*Тамыр йәйеү үтә ауыр.*
*Ғүмер буйы асфальт тишеп*
*Кибә йөрәк, яна бауыр.*

*Беҙҙең заман — һалҡын заман,*
*Күңел өшөй йылы юҡҡа.*
*Күпме меҫкен ғазаплана*
*Алға барыр юлы юҡҡа.*

*Тамъян, ҡыпсаҡ, юрматыһы*
*Бер туғандай тойһон үҙен.*
*Замандашым, бөгөн беҙгә*
*Кәрәк өмөт, кәрәк түҙем.*

*Ел иҫте, тип тәгәрләргә*
*Ҡамғаҡ түгел минең халҡым.*
*Аҡтамырҙай ерҙә үҫер,*
*Ҡояш булып күктә балҡыр.*

## Яклайык

Рәшит Солтангәрәевҡа

*Һүҙгә батша, милләтенә ялсы,*
*Тормошто ла тәрән белде ул.*
*Зиһендәрҙе туры һүҙе менән,*
*Үткер һүҙе менән телде ул.*

*Мәлде миҙгел һымаҡ һуҙа алды,*
*Һәр һөйләме асыш тойолдо.*
*Чехов, Мопассандай оҫта систе*
*Сюжет сырмалаған төйөндө.*

*Баш етмәҫлек төйөндәрен өҫтәп,*
*Аға ғына ваҡыт, ашыға.*
*Ниңә йә көлдөрөп, йә илатып*
*Рәшит ағай баҫмай ҡаршыға?*

*Беҙҙең быуын көс юғалта, буғай,*
*Заман хуплай ялтыр һүҙҙәрҙе.*
*Әллә кеше һуңғы утыҙ йылда*
*Танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе.*

*Үҙгәрһәк тә, һинең мираҫыңды*
*Ваҡыт туҙанынан яклайыҡ.*
*Киләсәктә кәмһетмәйек тиһәк,*
*Һиндәй исемдәрҙе һаҡлайыҡ.*

## Уҙаман

*Ир ҡайғыһы ил булыр,*
*Ирле илдәр һил булыр.*
*Ил яҙмышын иңгә һалған*
*Арыҫлан да ир булыр.*

*Елдәй еңел йәшәүҙән,*
*Тик табында йәшнәүҙән,*
*Йөрәгеңде бикләп ҡуйып,*
*Ғүмерлеккә бәҫләүҙән*
*Ҡурсып ҡалһа намыҫың —*
*Якты һинең яҙмышың.*

## Ағас бысканда

*Атайымдың ҡылтыр ҡулы менән*
*Минең ярһыу, ҡырыҫ ҡулымда*
*Бысҡы берсә тура юлын яра,*
*Берсә аҡһай ҡартлыҡ юлындай.*

*Аҡһаһа ла, һәр эш — үҙ яйында:*
*Ялтыраны башы букәндең.*
*Атай уйсан ғына һөйләп китте*
*Ағас баштарынан үткәнде:*

*"Аъастар ҙа, улым, бала һымаҡ,*
*Ергә йәшәү өсөн тыуалар.*
*Ҡояш көлһә, күккә ынтылалар,*
*Ямъыр яуһа, япраҡ йыуалар.*

*Ҡолас етмәҫ имән орлоъо ла,*
*Ят тупраҡҡа китһә ел һибеп,*
*Зәъиф кенә булып баш ҡалҡыта,*
*Шаулап үҫә алмай, ерһенеп.*

*Бына был имәндең тамырҙары*
*Тармаҡланъан Иҙел ярында..."*
*Алмашсылар лайыҡ булһын тиһәң,*
*Ҡайъыртыуҙар кәрәк ҡарындан.*

## Отчет йыйылышы

*Ниәттәрҙең изгеләрен алып,*
*Һайлап ҡына кейеп кейемде,*
*Юлъа сыъам Өфө ҡалаһына —*
*Стенаъа эл дә ҡуй инде.*

*Бисә әйтә, бигрәк бөхтәһең, ти,*
*Һине, буъай, ҡыҙҙар көтәлер?*
*Ниндәй ҡыҙҙар?*
*Отчет йыйылышы,*
*Йәберләмә, кәләш, кит әле!*

*Ошо һүҙҙәр сыъа ауыҙымдан,*
*Шул һүҙҙәргә үҙем ышанам.*
*Ҡыҙ-ҡырҡындан һөйөү уъы көтөп,*
*Тороръа мин түгел нишана...*

*Тынып ҡына бөтһә ҡул сабыуҙар,*
*Һүнеп кенә бөтһә маҡтауҙар,*
*Башлана ла китә осрашыуҙар,*
*Аҡса эҙләп кеҫә ҡапшауҙар.*

*Өс-дүрт шаъир бергә йыйылдымы,*
*Онотола фани донъяһы.*
*Шар асыла күңел ҡапҡалары,*
*Ирендәрҙе өтә тын-ярһыу...*

*Шып-шым ъына өйгә ҡайтып инһәң,*
*Таушалъаның күҙгә салына.*
*Ҡул сабыуҙар, маҡтауҙарһыҙ ъына*
*Сираттаъы отчет алына.*



Талха
ҒИНИӘТУЛЛИН

# Баш осонда йондоҙҙар...

КОМЕДИЯ

ҠАТНАШАЛАР:

**Әҡлимә** – *70 йәштәр тирәһендә*
**Камил** – *уның улы, 25 йәштә. Оҙон буйлы, һөйкөмлө*
**Миңнур** – *32 йәштә, ҡыҫҡа буйлы, мыҡты*
**Эльза** – *Камилдың кәләше, 35 йәштә*
**Сәлимә** – *һауынсы, 23 йәштә, сибәр*
**Фәүзиә** – *"Мобильник" ҡушаматлы ауыл ғәйбәтсеһе*
**Милка** – *Әҡлимәнең һыйыры*

## Беренсе бүлек

**Ауыл өйө. Ике тәҙрәһе урамға ҡараған ҙур бүлмә. Стенала Әҡлимә менән иренең йәш саҡта төшкән ҙурайтылған фотоһы эленеп тора. Уң яҡта – сервант, диван, һул яҡта – иҫке телевизор, бүлмә уртаһында – ҙур ғына өҫтәл. Бәләкәйерәк күрше бүлмәлә ағартылған мейес күренә, уның янында – газ плитәһе, мөйөштә – һыуытҡыс.**

**Сәғәт төшкө өстәр тирәһе. Сәскәле халат кейгән Әҡлимә өйҙә яңғыҙы ғына. Ул бүлмәнән бүлмәгә йөрөй, тәҙрә янына килеп, урамға ҡарай. Өҫтәлгә тәрилкәләр ҡуя, үтеп барған машина тауышын ишетеп, тәҙрә төбөнә килә.**

**Әҡлимә.** Улар түгел... *(Стеналағы сәғәткә күҙ һала.)* Сәғәт дүртенсе китте. Юл аҙабы – гүр ғазабы, тип юҡҡа әйтмәгәндәр. Күпме кеше һәләк була, имгәнә. Бөтәһе лә ашыға! Ҡайҙа ашығаларҙыр? Бала саҡтарында, йылғаға батып ҡуймаһындар, йәшен атып ҡуймаһын, тип дер ҡалтырайһың, ҡанаттары үҫеп, ҡала тарафтарына осоп киткәс, тағы ла шомлораҡ. Юҡҡа

*Талха Ғиниәтуллин (Анатолий Генатулин — 1925) Учалы районының Ураҙ ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Өфөлә, Мәскәүҙә байтаҡ китаптары сыҡты. С. Т. Аксаков исемендәге Бөтә Рәсәй әҙәби премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.*

әйтмәгән боронғолар: бала күңеле – далала, әсә күңеле – балала. Эй, Алла, үҙ алдыма һөйләнәмсе, былай аҡылдан да яҙырһың.

**Әҡлимә бәләкәй бүлмәгә инә, ләкин машина тауышын ишетеп, шундуҡ тәҙрә төбөнә килә.**

Улар булманы, ахыры. Эй, Алла, балаҡайҙарымды һаҡлай ғына күр!

**Соланда аяҡ тауыштары ишетелә. Миңнур инә. Эш кейемендә, башында – бейсболка. Ул ишектән инеү менән йырлап ебәрә.**

**Миңнур**.

*Улай итәйем әле,*
*Былай итәйем әле.*
*Апайымдың араҡыһын*
*Эсеп китәйем әле.*

Бәлеш еҫе. Минең апайым дан ашнаҡсы инде ул. Йөҙ грамм һалып бир әле, апай.

**Әҡлимә**. Араҡым юҡ минең. Йөҙ грамм түгел, ярты грамы ла юҡ.

**Миңнур**. Ышандым, ти... Беҙҙең айыҡ дәүләттә шулай буламы ни?! Ҡунаҡтар көтәһең. Кемде көткәнеңде beләм. Закускаң бар, араҡың юҡ...

**Әҡлимә.** Камил эсмәй. Ул шофёр. Һигеҙ йыл колхоз рәйесен йөрөттө.

**Миңнур**. Апай, беҙҙең тау араһындағы ауылдарҙа гаишник түгел, айыу хужа. Эскесе председателде йөрөттө шунда бисә-сәсәләргә. Эсмәй, имеш... Кем ышана?!

**Машина тауышы ишетелә.**
**Әҡлимә тәҙрә янына килә.**

**Әҡлимә**. Юҡ, улар түгел. *(Тынлыҡ.)* Ниңә уны шул тиклем күрә алмайһың? Ул бит һиңә иң яҡын кеше. Беҙ һинең әсәйең менән бик татыу йәшәнек. Хәҙер генә ул...

**Миңнур**. Ниңә яратырға тейеш мин ул ахмаҡты? Минең кәләште урланы...

**Әҡлимә**. Ул һинең кәләшең түгел ине бит.

**Миңнур**. Ул саҡ мин уны үлтерер инем, һине йәлләнем.

**Әҡлимә**. Сәлимә уға үҙе йәбешеп йөрөнө. Тимәк, Камил ҡарата белгән.

**Миңнур.** Яраткас, өйләнергә кәрәк ине. Ә ул ҡалаһына китте лә бер ҡарсыҡҡа бәйләнде. Матур булһа әйтер инем... Ни арты, ни түшө... Уродина!.. Ләкин бай... Һин әйтәһең: йәнәһе, мин ҡарата белмәгәнмен. Мин уға йөрәгемде тәҡдим иттем. Ә ул нимә тине: «Миңнур, һин һәйбәт егет, ләкин буйың бәләкәй. Һинең менән нисек итеп ҡунаҡҡа йөрөрмөн». Ҡунаҡҡа йөрөргә кәрәк уға. Бөтәһенә лә оҙон буйлы, зәңгәр күҙле, һары сәсле кәрәк. Мәүлитбайҙы нисек мыҫҡыл итте ул кәнтәй Гертруда. Мәүлитбай нисек яратты уны! Талантлы егет, рәссам. Уның рәсемен төшөрә торғайны. Ә ул тотто ла Шәрәфкә сыҡты. Сөнки ул оҙон һәм һары сәсле. Блондин. Хәҙер, ана, Мәүлитбайҙың картиналары Өфө музейында эленеп тора, ә Шәрәф эскегә бирелеп, кеше ҡапҡаһы алдында ятып үлде. Апай, һин миңә шуны әйт әле: беҙҙең ҡарасмандар ауылына ҡайҙан килеп юлыҡҡан ул һары сәсләр, кем үҙенең һары орлоғон төшөрөп ҡалдырған?

**Әҡлимә**. Мин ҡайҙан беләйем. Бар, ана, кемдең сәсе һары, шуларҙан һора. Юҡты һөйләйһең! Камилдың сәсе һарылыр шул. Төҫкә сибәр ул. Төпсөк малай булһа ла, матур булып тыуған. Атаһына оҡшаған. Матур йәшәй улар. Кешеләр әйтә бит, улың бәхетле, Өфөлә йәшәй, бай, тиҙәр. Нимә унда баҫып тораһың, ултыр. Диванға түгел, ултырғысҡа. Салбарың бысраҡ.

**Машина тауышы. Әҡлимә тәҙрә**
**төбөнә килә, мейес янына бара.**

Биш тулды, һаман юҡтар. Бына Сәлимә матур, ә ярлы.

**Миңнур** *(ишек төбөндәге ултырғысҡа ултыра)*. Урланған байлыҡ ул.

**Әҡлимә**. Юҡты һөйләмә! Нишләп урланһын, ти. Кемдекен урлағандар?

**Миңнур**. Минекен... Һинекен...

**Әҡлимә**. Әйттең һүҙ, һинең урларлыҡ нимәң бар? Ә минең бар байлығым – бер һыйыр.

**Миңнур.** Һинең аңра башыңа барып етмәй, күрәһең. Совет власы тиҙәккә

батҡас, нимә ҡыйыш ята – бөтәһен дә партия ҡомаҡтары ҡармап алды. Ә теге итәкле крокодилдың атаһы ниндәйҙер секретарь булған. Хәҙер бынығы ике магазин, аптека тота.

**Әҡлимә**. Һөйләйһең инде һин туҙға яҙмағанды. Кит, бәлешем һыуып бөттө...

**Миңнур**. Кемгә бәлеш бешерҙең, апай?

**Әҡлимә**. Һинең өсөн түгел, әлбиттә.

**Миңнур**. Бәлеш – байрам ашы ул. Камилың тыуғас, хәтерләйем, әсәйем ҙур бәлеш бешереп, һиңә килтерҙе. Мине сөннәткә ултыртҡанда ла бабаңы бәлеш менән һыйланылар.

**Әҡлимә**. Эльза бәлеш ярата. Камил шылтыратты: «Әсәй, Эльзаға бәлеш бешереп ҡуй әле»,– ти.

**Миңнур**. Эльзаға?! Ну, Эльза өсөн булғас... *(Көлә.)* Аңлашыла! Бай килендең килеүе һиңә ҙур байрам инде.

**Әҡлимә**. Һинең эшең булмаһын. Ялҡыттың бит. Ҡатының һиңә нисек түҙеп йәшәр инде?!.

**Миңнур**. Ярай, ярай, апай. Был мәсьәләне йөҙ грамһыҙ хәл итеп булмаҫ, моғайын. Бер рюмка һал да, мин киттем...

**Әҡлимә**. Ҡайҙа эскәнһең, шунда ҡойһондар ана...

**Миңнур.** Нишләп бер бөткән алкаш менән һөйләшкәндәй ҡыланаһың, апай? Ниндәй алкаш булайым мин! Беҙҙә бит өмәлә аҡса түләмәйҙәр, һыйлайҙар. Ә кулак Әхмәй араҡыһын ҡыҙғанды, көмөшкә ултыртты. Етмәһә, әсегән аш менән һыйланы. Иртән баш төҙәтергә барһам, кисә эсеп бөттөгөҙ, ти. Алдай, эт!.. Йәлләмәйһең һин мине. *(Пульсын тота.)* Ике йөҙ... Йөрәк шартлап ҡуйыуы бар. Бына ошонда, иҙәнгә ятам да үләм хәҙер. *(Иҙәнгә ята.)*

**Әҡлимә**. Иҫәрләнмә! Ҡунаҡтар килгәндә ошонда үлеп ятырға уйлайһыңмы!? Бар, ана, урамда ят. Унда эскәмйәлә бар. Ят та үл.

**Миңнур**. Бына һиңә апай!.. Әсәйемдең һеңлеһе!.. (*Тора.)* Бай крокодилдың ҡәйнәһе. *(Сығырға бара.)* «Эльза бәлеш ашарға теләй...» Бәлки, тағы берәй нәмә теләйҙер... Эльза!..

**Әҡлимә**. Бар, бар!.. Улар килгәндә бында уралаһы булма!

**Миңнур**. Ниңә, апай? Минең ҡустымды күргем килә.

**Әҡлимә**. Тағы уларҙан көлөргә булдыңмы!? Оятың бармы һинең?! Килеп йөрөмә!..

**Миңнур сыға. Әҡлимә, ҡулдарын тубығына ҡуйып, диванға ултыра.**

Уф, хәлем ҡалманы. Аяҡтарым тотмай. Исмаһам, шылтыратһындар ине: ҡайҙа йөрөйҙәр, ниңә һуңлайҙар?

**Әҡлимә, тәҙрә янына барып, ҡарана. Машина тауышын ишетеп, икенсе тәҙрәгә ҡаплана.**

Һин генә ҡалғайның бында!

**Урамдан тауыш ишетелә: «Әҡлимә, һин өйҙәме?» – Фәүзиә инә.**

**Әҡлимә**. Өйҙә. Ҡайҙа барайым, ти, мин.

**Фәүзиәнең аяғында ҡата. Ул эскәнгә оҡшай.**

**Фәүзиә**. Бәй, бәй, һинең энекәшең нишләп миңә «могильник» ти ул. «Һаумы, могильник!» тисе. Могила беҙҙеңсә ҡәбер була. Мине ерләргә ашыҡмай торһон әле, үҙе төшһөн соҡорона.

**Әҡлимә**. Һин аңламағанһың. "Могильник" тимәгән ул, "мобильник" тигән.

**Фәүзиә**. Уныһы нимә тағы?

**Әҡлимә**. Кеҫә телефоны. Элек, Совет власы осоронда, һине "Аяҡлы телефон" ти торғайнылар бит, ә хәҙер аяҡ кәрәкмәй, һауа аша ғына һөйләшәләр.

**Фәүзиә**. Ахырзаман!.. Әсәйем һөйләй торғайны, кешеләр ҡоштар һымаҡ осоп йөрөр, меңәр саҡрымдан бер-береһен ишетер, тип. Ахырзаман етәлер, моғайын.

**Әҡлимә**. Беҙгә нимә. Йәшәрен йәшәгәнбеҙ. Балалар йәл. Әй, һинең балаларың юҡ инде...

**Фәүзиә ултырғысҡа ултыра.**

**Фәүзиә**. Ҡунаҡ көтәһеңме? Рифаттымы, Камилдымы?

**Әҡлимә**. Камилды, ҡатыны менән.

**Фәүзиә**. Бәхетле ул. Тиҙәктән ҡасып ҡотолдо. *(Пауза.)* Теге лесник Шәмсиҙең ҡатынын хәтерләйһеңме?

**Әҡлимә**. Ауыл осондағымы ни? Мин йәштәрҙе бик белеп бөтмәйем. Нимә булған уға?

**Фәүзиә.** Ирен ҡыуып сығарған. Балаларын өләсәһенә ҡалдырып, Силәбегә сығып киткәйне. Яҡшы эшкә урынлашҡан, милиция ғына ҡыуып йонсота, ти. Кейенгән-яһанған, бармағында, ҡолағында алтын да көмөш икән... Машина алмайынса ауылға ҡайтмайым, тип әйтә. Барлы-юҡлы пенсияға ҡарап ятҡансы, әллә шунда китергә инде.

**Әҡлимә** *(көлә)*. Һин генә етмәгәйнең унда. Ирҙәр һинең есеңдән ҡасып бөтәсәк. Унда йәштәрҙе, һылыуҙарҙы ғына алалар шул.

**Фәүзиә.** Шулай шул. Йәш саҡта һыйыр артынан ҡалмағас ни...

**Әҡлимә тәҙрәнән ҡарай.**

Әҡлимә, йөҙ грамм ғына һалып бир әле. Башым ярылып килә.

**Әҡлимә һыуытҡыстан шешә сығарып, ҡойоп бирә.**

**Әҡлимә**. Мә, эс тә ҡайт!

**Фәүзиә**. Ҡайтам, ҡайтам. *(Эсә.)* Онота яҙғанмын. Бер аяғын ғына ерләнеләр.

**Әҡлимә**. Ниндәй аяҡ һөйләйһең ул?

**Фәүзиә**. Әбделхәйҙең аяғын. Өйөндә янып үлгән. Ныҡ иҫерек булған. Бер аяғын ғына таптылар. Ирҙәр әйтә, әсәһе эргәһенә күмәйек, тиҙәр. Ә Рамаҙан хәҙрәт, юҡ, мосолман дине буйынса ерләргә кәрәк, ти. Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһына бер аяғы булһа ла барһын, ти. Аяғын кәфенлеккә төрөп, ләхеткә һалдылар. Һәйкәл ҡуйырҙар инде.

**Әҡлимә**. Икенсе аяғы ҡайҙа һуң?

**Фәүзиә**. Тапманылар.

**Әҡлимә**. Бәлки, бер аяғы булмағандыр ҙа. Бәлки, протездыр.

**Фәүзиә**. Кем белә инде. *(Тәҙрә янына бара.)* Ҡарале, МышаҒар өҫтөндә ҡапҡара болот. Белоретта боҙ ҡатыш ямғыр яуған, ти. Бер кешене машинаһында йәшен атҡан икән... Рәхмәт, Әҡлимә. Еңел булып ҡалды.

**Фәүзиә сыға.**

**Әҡлимә.** Эй, Алла! Балаларымды һаҡлай күр. Кеше ҡурҡытып йөрөй шунда. Йөрәгем әллә нишләгәндәй булды! *(Дарыу һалып эсә.)* Тиҙҙән алты тула. Балаларымды һаҡлай күр инде, Хоҙайым!

**Тәҙрә янына ултырып доға уҡый.**

Шылтыратһындар ине, исмаһам. Тауҙарҙа телефон тотмай, тиҙәр ине?!. Тауҙарҙа һауа юҡтыр шул...

**Машина туҡтай. Ҡапҡа тауышы ишетелә. Әҡлимә ишеккә табан бара. Камил инә. Ул ҡыйбатлы костюм кейгән, ике ҡулында ла сумка.**

**Камил**. Һаумы, әсәй! Һин нисек бында? Сирләмәйһеңме?

**Әҡлимә**. Һеҙҙең менән ауырыу ғына түгел, әллә нимә эшләрһең... Йөрәгем ҡыҫып-ҡыҫып алды. Үләм икән, тим. Фәүзиә килеп, Белоретта бер машинаны йәшен атҡан, тип ҡотомдо алды. Ҡайҙа йөрөнөгөҙ шулай оҙаҡ? Төштән бирле көтәм бит.

**Камил** *(сумкаларын ҡуя)*. Белоретта тоҡтарландыҡ. Эльзаның унда аптека асҡыһы килә. Асып була ла, ләкин күп кенә аҡса төртөргә кәрәк.

**Әҡлимә**. Улым, ҡыҫылма ундай эшкә. Хәҙер закон ҡаты.

**Камил**. Был бит бизнес, әсәй. Аңлайһыңмы, бизнес! Майламаһаң, тәгәрмәс тә тәгәрләмәй шул.

**Әҡлимә**. Бизнесың менән башымды бутама әле. Бер нәмәһен дә белмәйем. Эльза килен ҡайҙа?

**Камил**. Хәҙер инә.

**Әҡлимә менән Камил сумканан күстәнәстәр ала. Эльза инә.**

**Эльза**. Һаумы, мама! Ой, тынсыу бында! Ниндәй еҫ ул?

**Әҡлимә**. Еҫ ни, була инде. Ауыл бит. Һәр өйҙә һыйыр бар.

**Эльза**. Фу, туалет еҫе килгәндәй...

**Камил.** Елһеҙ көндө шулай була торған. Һул яҡ күршенең айнығаны юҡ, туалетының иҙәне тулған була.

**Әҡлимә**. Беҙҙеке улай түгел, Миңнур таҙартып ҡына тора.

**Камил**. Ул нисек? Өйләнмәнеме?

**Әҡлимә**. Үҙенән һора. Яңыраҡ инеп сыҡты, башты төҙәт, ти. Йөрәгем тибеше ике йөҙгә етте, үләм, ти.

**Камил**. Ҡойоп бирмәнеңме ни?

**Әҡлимә**. Кешесә һораһа, ҡойор инем. Юҡһа, һинең турала теләһә нәмә һөйләй.

**Камил**. Унан була... Ә кешенең йөрәге ауыртҡан саҡта йөҙ грамм инфаркт булыуҙан һаҡлай.

**Әҡлимә.** Мин ҡайҙан беләйем уны. Мин врач түгел бит. Ҡунаҡтар бында саҡта килеп йөрөмә, тинем мин уға.

**Камил**. Юҡка, әсәй. Килһен әйҙә. Уның менән күңеллерәк. Ул бит өлкәнерәк. Насар кеше түгел ул. Бер аҙ сәйерлеге бар-барын...

**Эльза**. Ишетәһегеҙме, күк күкрәй?

**Камил**. Йыраҡта ул. Бәлки, үтеп китер.

**Эльза**. Камил, машинаны ихатаға индер.

**Камил**. Торһон. Кешеләрҙеке ҡапҡа алдында тора.

**Эльза.** Торһон әйҙә. Әгәр алып ҡасһалар, минән машина таптырма.

**Камил сыға.**

**Әҡлимә**. Бәлеш һыуынмаған әле. Йылытып та бирә алам.

**Эльза**. Бәлеш. Яратам! Йылытырға кәрәкмәй. Шул тиклем асыҡтым.

**Әҡлимә**. Хәҙер ашатам. Үҙемдең дә иртәнән бирле тәғәм ҡапҡаным юҡ. *(Өҫтәлгә бәлеш ҡуя.)*

**Камил инә.**

Улым, бәлеште бүл.

**Камил.** Хәҙер. Бәлеш бүлергә тигәндә, мине ҡуш. О, еҫе!.. Бүре башы ашарҙай булдым. Ох, ниндәй закуска! Әсәй, шунда ҡара, сумкала коньяк та бар.

**Әҡлимә**. Һыуыҡтыҫҡа алып ҡуйғайным. *(Шешәне өҫтәлгә ултырта.)*

**Урамда һыйыр мөңрәй.**

Көтөү ҡайта. Ямғыр яумаҫ элек иртә алып ҡайталар. Милка тағы йылға аръяғына ҡасмаһа ярар ине. Көндөҙ эҫелә ашай алмайҙар, кисен үлән эҙләй.

**Камил**. Ҡайтыр, ҡайҙа барыр тиһең. Эльза, һиңә ҡыйырын һалырғамы? Мин бала саҡта ҡыйырын ярата инем. Ә рюмкалар ҡайҙа?

**Әҡлимә**. Тамам башым әйләнде, рюмка ҡуйырға онотҡанмын.

**Камил**. Әсәй, һин беҙҙең менән эсәһеңме?

**Әҡлимә**. Әллә, берәй йотом һалһаң һал.

**Камил**. Корвалол эскәнсе, коньяк эсергә кәрәк. *(Рюмкаларъа ҡоя.)* Нимә өсөн эсәбеҙ?

**Әҡлимә**. Атайың беренсе рюмканы Сталин һаулығы өсөн күтәрә торғайны. Хөрмәт итте уны. Ул ил башында саҡта тәртип булды, эсмәнеләр, эшләнеләр. Мәктәп артындағы сүплектән уның портретын алып ҡайтып, анауында элеп ҡуйҙы. Мин үлгәс тә торһон, ташламағыҙ, тине. Миңнур иҫереп килгәйне, был мыйыҡты алып ташла, тип бәйләнде бит. Ул олатайҙы, өләсәйҙе һөргәнгә ебәргән, ти.

**Камил.** Сталин – ҡәберҙә. Беҙ ҙә совет кешеләре түгел. Әйҙәгеҙ, әсәйҙең һаулығы өсөн.

**Эсәләр. Оҙаҡ ҡына тынлыҡ.**
**Камил тағы ла коньяк ҡоя.**

Икенсе рюмканы ла мин әсәй һаулығы өсөн эсәм.

**Эльза кәйефһеҙләнә.**

**Әҡлимә**. Ҡатыныңдың һаулығы өсөн эс.

**Камил**. Ул йөҙ йыл йәшәйәсәк, әгәр тартыуын ташлаһа.

**Әҡлимә**. Тартмай бит ул.

**Камил**. Бында тартмаҫҡа ҡуштым мин уға. Беренсенән, килешмәй, икенсенән...

**Әҡлимә**. Атайың ғүмерен ҡыҫҡартты шуны тартып. Ой, һуғыш осоронда ҡот осҡос аслыҡ ине. Малайҙар самосад тарта торғайны. Шуны тартһаң, ашағы килмәй, тиҙәр. Ә нимә ашаныҡ!.. Алабутанан икмәк бешерә инек. Бер саҡ бригадир Мулләхмәт ағай беҙҙе баҫыуға ҡар тоторға ебәрҙе. Ул ҡырҡ икенсе йылда һуғыштан аяҡһыҙ ҡайтҡайны. Ҡар көрәй башланыҡ. Аяҡ-ҡулдарыбыҙ тыңламай, ҡарға тәгәрәшеп бөттөк. Баҡһаң, алабутанан аяҡ-ҡул тартыша

икән. Үс иткәндәй, буран сыҡты. Әгәр Мулләхмәт ағай булмаһа, туңып үлер инек. Беҙҙе күрҙе лә илап ебәрҙе. Һуғыш булмаһа, һеҙҙе бындай эшкә ебәрер инемме ни, ти. *(Тәҙрәнән ҡарай.)* Һыйыр ҡайтманымы икән? Юҡ, Рифтең үгеҙе был. Аҙаҡ, бахыр, мине күргән һайын, Әҡлимә, Гитлерҙы һеҙ еңдегеҙ, тип ҡабатлар ине.

**Камил**. Мин батыр әсәйем хөрмәтенә эсәм! Һәр ваҡыт булһын әсәй, һәр ваҡыт булһын бәлеш!..

**Сәкәштереп эсәләр. Оҙон пауза. Алыҫта күк күкрәй.**

**Әҡлимә** *(тәҙрәнән ҡарай)*. Бөтәһенең дә малы ҡайтты. Милка һаман юҡ. Кис төшөү менән ҡайта торғайнысы. Һуңғы ваҡытта мал-тыуар юғала башланы. Ҡырҙа йөрөгән малды тотоп һуйлар ҙа машиналарына тейәп алып китәләр, ти... Ҡапҡаны асып ҡуяйым әле. *(Сыға.)*

**Камил**. Бөтә ғүмере һыйыр елене алдында тубыҡланып, тиҙәккә батып үтте..

**Урамда Әҡлимәнең ҡысҡырғаны ишетелә: «Милка!» «Милка!»**

**Эльза**. Ниңә, бер литр һөт һатып ала алмаймы ни?

**Камил**. Эш һөттә түгел шул...

**Әҡлимә** *(тыштан инә)*. Юҡ, ҡайтманы Милкам.

**Камил**. Әсәй, һин уны һат йә һуйҙырт.

**Әҡлимә**. Ҡуй, улай тимә, балам. Һыйырһыҙ нисек йәшәйем мин?! Унһыҙ етем мин. Ул минең өсөн ҡыҙ ҙа, әхирәт тә...

**Эльза көлә.**

Һеҙгә көлкө. Һеҙ ҡалала, ә мин бында бер үҙем. Һөйләшер кеше лә юҡ. Милка менән рәхәтләнеп серләшәм мин. Милка, тим, беҙҙең ҡартты хәтерләйһеңме? Теле генә юҡ, аңлай. Ҡолағын ҡыбырҙата. Шым ғына мөңрәп ҡуя. Хәтерләй.

**Камил.** Беҙҙең ваҡыт юҡ бит, әсәй. Элекке һымаҡ бесән әҙерләй алмайбыҙ.

**Әҡлимә**. Бесәнде Рәмилдән һатып алам. Бер кәбән етә...

**Камил**. Аҡсаһын үҙебеҙ түләрбеҙ. Ике кәбән ал. Ҡоролоҡ була ҡалһа.

**Әҡлимә**. Милка рәхмәт әйтер.

**Эльза**. Мама твоя юморная.

**Камил.** Эльза, әсәйем алдында беҙҙеңсә һөйләш.

**Эльза**. Бәлки, миңә шым ғына ултырырғалыр?..

**Камил** *(асыулы)*. Башлама!..

**Пауза.**

Әсәй, коньякты алып ҡуйма. Бәлки, Миңнур килеп сығыр.

**Әҡлимә**. Мин уны саҡырманым.

**Камил**. Барыбер килә ул. Беләм мин уны.

**Эльза**. Әгәр ул килһә, мин китәм.

**Камил**. Эльза, улай уңайһыҙ бит... Ул минең ағайым... Ни өсөн күрә алмайһың уны?..

**Эльза**. Ул иҫәр килеп, тағы мыҫҡыл итһенме?

**Камил**. Иҫәр түгел ул. Беҙҙән аҡыллыраҡ. Уның шаяртыуҙарына иғтибар итмә, шул ғына. Һәм, ғөмүмән, мин әсәйгә килгәнмен... бер көн булһа ла тыныс йәшәп буламы, юҡмы?!

**Шаршау.**

## Икенсе бүлек

**Кис. Шул уҡ күренеш. Өҫтәлдә – ашалып бөтмәгән бәлеш, самауыр һәм сынаяҡтар. Камил менән Эльза сәй эсә. Әҡлимә тәҙрә төбөндә тора.**

**Камил.** Әсәй, мин эҙләп киләйем һыйырҙы. Ҡайҙа йөрөгәнен беләм мин уның. Улар Әхмәйҙәрҙең йорто эргәһендәге боролошҡа ҡасып китә көтөүҙән. Ташйылға аша сығып, сабынлыҡҡа баралар. Хәтерләйһеңме, бер нисә мәртәбә шунан алып ҡайттым?

**Әҡлимә**. Кәрәкмәй, йөрөмә. Урамда ҡараңғы инде, ямғыр ҙа яуырға тора.

**Камил.**Улай булғас, бошонма. Йылға аръяғында уға берәү ҙә теймәҫ. Унда кеше йөрөмәгәнен белә ул. Кемдер килә...

**Миңнур инә.
Ул костюм, эшләпә кейгән.**

**Миңнур.** Һаумы, апай! *(Эшләпәһен сисеп, элә. Үтә.)* Здравствуй, бывший колхозник мистер Газимов, владелец аптек и магазинов! Ҡустым бит һин,

яратам мин һине. (*Ҡосаҡлашалар. Миңнур шаярып Эльзаға баш эйә.)*

**Камил**. Эшләпә кейеп йөрөйһөң, ә!?

**Миңнур**. Атайҙан ҡалды. Ул 9 майҙа, клубҡа барғанда ғына кейә торғайны.

**Камил**. Ултыр, ағай. Йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрөп алайыҡ әле. *(Коньяк ҡоя.)* Французлдарҙыҡы, биш йондоҙло.

**Миңнур**. Аңлашыла. Шешәгә Стәрлелә ҡойғандар.

**Бөтәһе лә рюмка тота.**

Мин яратҡан апайым хөрмәтенә күтәрәм.

**Эсәләр. Оҙон пауза.**

**Камил**. Әйҙә, тағы берәүҙе.

**Миңнур**. Икенсеһен мин яратҡан киленемдең бәхете өсөн эсәм. Тик, бына, исемеңде оноттом. Склероз...

**Эльза**. Эльза мин.

**Миңнур**. Кемдәрҙең исеме әле ул?.. Немецтәрҙекеме, еврейҙарҙыҡымы? Фрау Эльза, мадам Эльза?!.

**Эльза**. Атай-әсәйем белеп ҡушҡандыр әле…

**Камил**. Әсәй, самауыр һыуынды.

**Әҡлимә**. Ой, мин ни самауыр тураһында онотоп торам… Милка баштан сыҡмай. Барып саҡырып ҡарайым әле. Ә һеҙ сәй эсегеҙ. *(Сыға.)*

**Камил.** Сәй көтөп торор. *(Шешәне ала.)* Бәй, бушаған икән. Һыуытҡыста араҡы булырға тейеш. *(Һыуытҡыстан шешә ала.)*

**Миңнур**. Ә миңә, бер грамм да юҡ, тине. Был нәмәгә ҡарағанда араҡы һәйбәтерәк. Әйткәндәй, Әҡлимә апайым – ауылда икмәк һәм бәлеш бешерә белгән берҙән-бер кеше. Эльза, һин бәлеш бешерә беләһеңме?

**Эльза**. Ғүмерлек хыялым ул.

**Миңнур**. Ә балыҡ бәлеше? Батшалар ашы ул! Апайым бешерер ине, балығы юҡ. Уны экология ашап бөттө.

**Камил**. Ағай, үсектермә уны. Ул бит ҡаланыҡы, ҙур түрәнең ҡыҙы. Рестарандарҙа ғына ашаған.

**Эльза**. Камил, телеңде тый!

**Камил**. Бөттө, бөттө. Әйҙәгеҙ, эсәйек. Эльза, һиңә ҡойорғамы?

**Эльза.** Кәрәкмәй. Һиңә лә етте.

**Миңнур**. Эльза, Эльза. Башҡортостанда нишләп башҡорт, мосолман исемдәрен ҡушмайҙар һуң ул, ә? Һәр икенсеһе – Венера. Ә ҡайҙан был исем – берәү ҙә белмәй.

**Эльза.** Ниндәйҙер йондоҙ шикелле.

**Миңнур**. Боронғо Римдең мөхәббәт аллаһы. Эскелек һәм фәхишәлектән һәләк булған. Шунан килә лә инде венерик сирҙәр.

**Эльза**. Фу!.. Һеҙҙе тыңлаһаң…

**Миңнур**. Быныһы – ярар. Ирҙәргә ҡушалар – Венер. Бына Учалыла бер танышым бар – Бикмөхәмәтов Венер Марселевич. Тимәк, уның улы Венерович була. Марсель дә аҙым һайын осрай. Быларҙың бөтәһе лә – мәҙәниһеҙлек билдәһе.

**Эльза**. Ә һеҙ үҙегеҙҙе мәҙәниәтле тип иҫәпләйһегеҙме?

**Миңнур**. Ауылда иң мәҙәниәтле кеше – мин. Өфөнән килгән бер журналист мине рухи аристократ тип атаны.

**Эльза**. О-о, шулай уҡмы?!

**Камил**. Эйе, ағайымдың рухы ныҡ. Әйҙә, ағай, мәҙәниәт өсөн.

**Эльза**. Бәлки, етәр, мәҙәниәтле кешеләр!..

**Камил**. Беҙ культурно эсәбеҙ. Әйҙә.

**Эсәләр. Әҡлимә инә.**

**Әҡлимә**. Бер ҡайҙа ла юҡ. Юғалды инде Милкам, шатлығым минең!.. Алып киттеләр инде багажникка һалып. (*Ултырғысҡа ултыра.)*

**Камил**. Тыныслан, әсәй, икенсе һыйыр алырбыҙ.

**Әҡлимә**. Кәрәкмәй миңә икенсе. Ниңә ашамайһығыҙ? Иҫерәһегеҙ бит. Бәлеш бешер, тинегеҙ, бешерһәм, ашамайҙар.

**Миңнур**. Бәлеш – батшалар ашы ул. Һинән башҡа уны берәү ҙә бешерә белмәй. Мин бәлештең ситен, төбөн ашарға яратам.

Һыйыр... Бәлеш... Камил, теге килгәнеңдә мин һиңә нимә тигәйнем?

**Камил**. Онотҡанмын.

**Миңнур.** Чеховтың «Ионыч» тигән хикәйәһен уҡы, тинем. Уҡыныңмы?

**Камил**. Юҡ. Нимә тураһында ул?

**Миңнур**. Бәхет тураһында.

**Камил**. Тормошта бәхет юҡ ул.

Кешегә тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булһа һәм тормоштан ҡәнәғәтлек алһа – еткән. Ә һинең Чеховың нимәне бәхет тип иҫәпләй?

**Миңнур**. Мөхәббәтте!

**Камил**. Ну, beләһеңме, мөхәббәтте шағирҙар уйлап тапҡан. Аҡылдары юҡ уларҙың. Атышалар, аҫылыналар... Сөнки уларҙы бисәләр яратмай.

**Миңнур**. Бәлки, ҡатындар тура килмәгәндер. Мин шулай уйлайым: әгәр һин ысын мөхәббәт менән һөйәһең икән, ул ҡатын-ҡыҙ үҙеңде яратмаған осраҡта ла, һин үҙ мөхәббәтең менән бәхетле.

**Эльза**. Әгәр ул да ратһа?

**Миңнур**. Ул саҡта инде барыһы ла асыҡ. Ләкин ҡатын-ҡыҙ мөхәббәтен көсерле һәм мисәүле атҡа алмаштырырға ярамай, тип уйлайым.

**Камил** (*үпкәләгәндәй*). Мөхәббәт – ул тоҡом дауам итер өсөн енси яҡынлыҡ. Ҡалғаны һүҙ буткаһы ғына. Ә һинең нимәгә ишаралағаныңды аңланым мин...

**Миңнур**. Камил, үпкәләмә. Хөрмәт итәм мин һине.

**Әҡлимә өҫтәлгә самауыр ҡуя.**

**Әҡлимә**. Юҡ-бар менән башығыҙҙы ҡатыраһығыҙ, сәй эсегеҙ. Бына варенье, бал, ҡоймаҡ.

**Миңнур**. Сәй эсһәң, баш эшләп китә, тиҙәр...

**Эльза сәй яһай.**

**Әҡлимә**. Мөхәббәт бар ул. Тик һеҙҙең ҡалағыҙҙа түгел, ауылда. Нисек ятатты мине Мәхмүтем! Нисек яратты! Ҡайһы саҡта тәҙрә алдында төнө буйы «Ғәлиәбаныу»ҙы гармунда уйнар ине. Атайым әйтә, ялҡытты, хәҙер иманын уҡытам мин уның, ти. «Уйнаһын, – ти әсәйем. – өйләнгәс туҡтар әле». Шулай булды ла. Өйләнгәйне, гармунын ташланы. Башта оҡшатмағайным мин уны...

**Миңнур** *(бүлдереп)*. Бляндин булмағанғамы?..

**Әҡлимә**. Ой, Миңнур, телең әсе һинең... Аҙаҡ бик яраттым уны...

**Тәҙрә төбөнә бара, уйланып тора. Башҡалар сәй эсә.**

**Миңнур**. Сәй араҡынан да яҡшыраҡ. Урыҫ әҙәбиәтен уҡырға кәрәк. Уҡымайҙар. Мәктәптә лә, университетта ла насар уҡыталар. Былтыр йәй беҙҙең ауылда Лолита ял иткәйне. Ул Өфөләге ниндәйҙер институтта урыҫ әҙәбиәтен уҡыта. Мин, наҙан бер колхозсы, уға шундай һорауҙар бирә торғайным. Бер нәмә лә белмәй. Үпкәләй ҙә йәш түгә башлай. Һуңынан миңә сәләм дә ҡушманы. Эльза, һин магазинда балыҡ һатаһыңмы?

**Эльза**. Һатам. Беҙҙә балыҡтың төрлөһө бар.

**Миңнур.** Осетрина бармы?

**Эльза**. Булғылай.

**Миңнур**. Иҫкермәйме һуң?

**Эльза**. Һеҙ нимә?.. Беҙ свежий балыҡ һатабыҙ.

**Миңнур**. Һинең белемең ун бер класс та институт. Нефтяной. Мәктәптә әҙәбиәт уҡыныңмы?

**Эльза**. Яратмайым мин ул фәнде.

**Миңнур**. Әгәр ятатҡан булһаң, ҡайһы урыҫ яҙыусыһының ниндәй хикәйәһендә һөрһөй башлаған осетринаны ресторанда һатыуҙарын белер инең.

**Эльза**. Беҙ осетрина тураһында уҡымаңыҡ... Нимә, уларҙың һыуытҡыстары булмағанмы?

**Миңнур**. Йөҙ йыл элек һыуытҡыс та, телевизор ҙа булмаған...

**Эльза**. Ой, мин сериалды ҡарарға оноттом. Был телевизор эшләйме?

**Миңнур**. Бер генә канал күрһәтә. Йырлайҙар ҙа бейейҙәр, ә бында эсәләр ҙә илайҙар.

**Эльза**. Йәл!

**Миңнур**. Илауҙары йәлме?

**Эльза**. Телевизорҙың күрһәтмәүе йәл. Кис буйы нимә эшләрмен икән?!.

**Миңнур**. Ана, «Ионыч»ты уҡы. Теләһәң, килтерәм.

**Камил**. Ағай, ниңә бәйләндең әле һин уға һөрһөгән осетринаң, «Ионыч»ың менән? Һин уҡығанһың икән – молодец! Бәйләнмә кешеләргә китап буткаһы менән. Уларҙың китаптан башҡа ла мәшәҡәте күп, нисек оҡшай, шулай йәшәһендәр, тормошто китапһыҙ ҙа белә улар.

**Миңнур**. Бәлки, һин хаҡлылыр...

Ләкин ерҙә етмеш йыл йәшәп, ете китап та уҡымаған кеше йәл. Хәреф танымаған кешеләрҙе лә беләм мин. Хоҙай кешегә китапты нимә өсөн биргән һуң? Башта Тәүратты, Ҡөрьәнде биргән, башҡаларын…

**Камил**. Китабын биргән дә ул, уҡыр өсөн ваҡытын бирмәгән. Китап ҡайғыһымы… Бына мин ҡалаға барғайным, бер тапҡыр туйғансы йоҡлағаным юҡ… Эт шикелле сабаһың.

**Миңнур**. Һуң, ҡайт ауылға.

**Камил**. Ә бында мин нимә эшләйем? Тиҙәк тибергәме? Юҡ, ул килешкән һиңә килешһен. Һин электрик, телевизор йүнәтәһең, балта тотаһың… Колхоз булһа, бәлки… Юғиһә, бына һинең кеүек «белемле»ләр, тел биҫтәләре колхозды бөтөрҙө.

**Миңнур**. Мин һине аңламайым. Минең колхозға ни зыяным тейгән? Нимә, әллә мин утты һүндерҙемме? Тимер сымдар өҙөлгән саҡта мин бағана баштарынан төшмәнем. Ә колхозды һеҙ председатель менән һатып эстегеҙ!

**Әҡлимә**. Ай, Алла, талаша ла башланылар. Һуғышып та китерһегеҙ әле. Туғандарса һөйләшеп кенә ултырып булмаймы ни һуң?!. Мин һиңә, Миңнур, нимә тинем, ә!? Килеп йөрөмә, тинем. Һинең телең…

**Камил.** Әсәй, һөйләһен. Уның менән күңелле.

**Миңнур.** Ярай, үпкәләмә, Камил. Яратам мин һине!

**Яҡында күк күкрәй.**

**Камил**. Әсәй, шешәне алмай тор.

**Әҡлимә**. Күп һөйләйһегеҙ.

**Камил**. Бәлки, берәйһе килер.

**Әҡлимә**. Кем килһен? Яҡтылары сыға, тип иҫерек Рифат ҡына килмәһә…

**Камил**. Белмәйем. Күңелем һиҙә, кемдер килер һымаҡ.

**Әҡлимә**. Рифат булһа, индермәйем мин уны. И, Милкам ҡайтһа, исмаһам, йөрәгем баҫылыр ине. Хәҙер ямғыр башланыр инде.

**Миңнур көлә. Пауза.**

**Миңнур**. Күптән түгел бер немец философы һәм уның фәлсәфәһе тураһында китап уҡығайным.

**Камил.** Фәлсәфә лә – шул уҡ һүҙ бутҡаһы. Беҙҙең күрше Закиров Сабит шулай ти, ул университетта математиканан уҡыта. Математика менән физиканан башҡа бөтәһе лә криминал... Юҡ, улай түгел... тривиаль ләстит, ти.

**Миңнур.** Нимә һуң ул тривиаль?

**Камил.** Һине, күп уҡығас, беләләр тиһәм.

**Миңнур.** Мин бит профессор түгел, ауыл электригы. Тәк... Бына теге философ әйтә... исеме иҫтән сыҡҡан... склероз!... онотһам, алфавит буйынса эҙләйем мин. А – Альтман, минең менән шундай фамилиялы немец хеҙмәт иткәйне. Б – юҡ, В – юҡ. Г – Гегель, юҡ, улай түгел – Гитлер, фу, башҡа теләһә нәмә керә башланы... Ж-ға – юҡ, И – ике Исаакты беләм. Береһе – инглиз, икенсеһе – урыҫ. К...

**Эльза.** Карл Маркс.

**Миңнур.** Молодец, Эльза. Бәлки, «Капитал» ды уҡығанһыңдыр?

**Эльза.** Атайымдың «Капитал»ы бар ине.

**Камил.** Ну, ярай. Иҫеңә төшһә, әйтерһең. Нимә тигән философың?

**Миңнур.** Былай тигән ул: «Главная категория жизни – это звездное небо надо мной и нравственный закон во мне». Урыҫса быларҙың барыһы ла аңлашыла, ә беҙҙеңсә «нравственный закон» ды нисегерәк аңлатырға икән? Бәлки, имандыр. Эльза, бәлки, һин беләһеңдер?

**Эльза**. Беләм. Закон – это дышло.

**Миңнур.** Кемгә нисектер!.. Бына шул немецтың фәлсәфәһен аңлар өсөн... исемен иҫкә төшөрә алмайым... (*Тороп йөрөй.*) Иҫлә, алйот! Иҫлә! *(Башына туҡылдата.)* Юҡ, теләмәй... Йышыраҡ йондоҙло күккә ҡарарға кәрәк.

**Камил**. Күккә, ана, астрономдар ҡараһын, ағай. Беҙгә нимәгә ул, ерҙә эш муйындан. Һинең кеүек тел биҫтәләренең эше инде ул күккә ҡарау.

**Миңнур**. Хәҙер мин һинең томшоғоңдо емерәм, тумыртҡа!

**Эльза.** Ҡара, ҡара, бик батырайып китте был. Янай етмәһә.

**Камил**. Бала саҡта күп туҡманы ул мине.

**Миңнур**. Сөнки насар уҡының, ел ҡыуып йөрөнөң. Ахмаҡ башыңа йоҙроҡ менән аҡыл төйөргә тырыштым. Апайым килә лә: «Камил тағы «ике» алған. Уның менән шөғөлләң әле», – ти. Килһәм, апайҙың әлеге һыйыры шикелле, һыпыртҡан ҡайҙалыр. Ләкин уны өләсәй бик яратты, йәнен бирергә әҙер ине. Мине өнәп бөтмәне. Ялҡау тип уйлай торғайны: «Китап уҡыуҙан бушамай, эт ялҡауы. Йә аҡылдан яҙаһың, йә һуҡыр ҡалаһың. Утын бөтөп бара, мал аҫты ташланмаған. Хәҙер китаптарыңды утҡа яғам», – тип әрләй. Атайымды һуғыш өйгә ҡайтҡас ҡыуып етте, үпкәһендәге ярсыҡтан мандый алманы. Бөтә хужалыҡ минең елкәлә. Мин өләсәйемә: «Минең бөтәһен дә белгем килә. Һин беләһеңме, өләсәй, беҙ шар өҫтөндә йәшәйбеҙ. Ҡараңғы һәм һалҡын йыһанда өрөлөп йөрөй был шар», – тим. «Миңнур, балам, – ти өләсәй. – Был турала бер кемгә лә әйтмә. Юғиһә районндан аҡ халатлы кешеләр килеп, үҙеңде алып китерҙәр».

**Эльза**. Мин дә аңламайым. Шар өҫтөндә йәшәйбеҙ икән, ниңә ҡолап төшмәйбеҙ һуң?

**Миңнур**. Во дает! Юғары белемле кеше! Беренсенән, ҡолар урын юҡ. Бар тарафта ла күк. Икенсенән, ерҙең тартыу көсө бар. Апай, һин йондоҙҙарға ҡарайһыңмы ул?

**Әҡлимә**. Ҡуй әле! Бер тапҡыр ҙа башымды күтәрмәнем. Ваҡыт юҡ. Былтыр кис урамдан килә инем, йондоҙҙарға ҡарағайным, һыйыр тиҙәгенә баҫып тайып йығылдым. Бөтә ауыл көлдө. Йәнәһе, Әҡлимә күктә нимә барын күрергә теләгән, ә аяҡ аҫтындағын күрмәгән. Шулай булды. Уйланып киткәнмен һәм минаға баҫҡан һалдат һымаҡ булдым.

**Камил**. Ә нимә тураһында уйланың һуң?

**Миңнур**. Һәр кемдең үҙ уйы була. Мейе ҙурлығына ҡарап. Бына августа йондоҙҙар атыла. Ҡара, бәлки, уйланырһың... Кем белә... Һин үпкәләмә миңә, ҡустым, һине яратам мин. Әйҙә, тотайыҡ әле.

**Эльза**. Камил, һиңә етте!

**Камил**. Ниңә?

**Эльза.** Иртән баш төҙәтәсәкһең. Ә һиңә руль тоторға...

**Камил**. Иртәгә китмәйбеҙ бит.

**Эсәләр.**

**Эльза.** Бында килгән саҡта мин һиңә нимә тинем!?.

**Камил** *(вайымһыҙ)*. Һин нимә һөйләйһең?

**Эльза.** Иҫеңә төшөрәм. Ауылда аптека асайыҡ, тинем.

**Камил.** Беренсенән, бында медпунктта аптека бар, икенсенән, ауылда пенсионерҙар ғына ҡалды. Һин уларға корвалол-волокординыңды бушлай бирәһеңме?

**Эльза.** Мин шаяртмайым.

**Камил**. Мин дә... *(Пауза.)* Мин әсәйгә ҡайтҡанмын. Ял итергә, иңде баҫҡан йөктән арынырға... Ә һин таблеткаларың менән йәнгә тейәһең!

**Эльза**. Ниңә минең менән улай һөйләшәһең?! Ана, салбарыңа салат төшөрҙөң... Беләһеңме, был костюм күпме тора! Мам, таҫтамал бир әле.

**Әҡлимә таҫтамал килтерә.**

**Әҡлимә**. Эй, балалар, балалар... Татыу йәшәгеҙ, бер-берегеҙҙе хөрмәт итегеҙ. *(Стеналағы фото янына килә.)* Минең Мәхмүтем бер ваҡытта ла ауыр һүҙ әйтмәне, бер ваҡытта ла һүгенмәне минең алда. Үлем түшәгендә ятҡанда, битемдән һыйпа әле, тип ишараланы... Бер-берегеҙҙе хөрмәт итегеҙ. Камил, ҡатыныңды хөрмәт ит, уға ла ауыр бит. Ә һин, Эльза килен, Камилды хөрмәтлә, ул бит – ир кеше, ғаилә башлығы.

**Камил**. Әсәй, ниндәй ир булайым мин уға. Мин бит уның тән һаҡсыһы, шоферы..

**Эльза**. Заткнись!..

**Камил.** Ярар, бөттө, бөттө!..

**Әҡлимә**. Эй, Аллам, йөрәгемде яралайһығыҙ!..

**Пауза.**

**Миңнур** *(йөрөй)*. Онотҡанмын... Философтың исемен онотҡанмын... Тағы ла алфавит буйынса әйтеп ҡараһам...

Л – белмәйем... М – Маркс булды. Н, Л – юҡ... *(Башына һуғып ала.)* Иҫлә, хайуан! Склероз... Кемдер килә.

**Әҡлимә.** Бәлки, Милка ҡайтҡандыр.

**Миңнур.** Юҡ, был һыйыр түгел, кеше.

**Камил.** Әйттем бит... Ә салатты ашап бөттөк.

**Сәлимә инә. Ул модалы джинсы, асыҡ төҫтәге блузка кейгән. Сәстәре иңенә төшөп тора.**

**Сәлимә**. Ой, ҡунаҡтар барын белмәнем... Әҡлимә апай, һеҙҙән ҡалаға шылтыратып ҡына алайым әле. Әсәйемде дауаханаға һалдылармы, юҡмы икән?

**Әҡлимә**. Ни булды уға?

**Сәлимә**. Баҡсала ҡуңыҙ йыйғайны, башы әйләнеп йығылған. Рәфҡәт ҡалаға алып китте.

**Әҡлимә**. Улай түбән эйелергә ярамаҫ ине. Етмәһә, тынсыу.

**Сәлимә.** Йөрөмә, үҙем йыйырмын, тип әйткәйнем инде. Тыңлаймы ни ул. *(Телефондан һөйләшә.)* Ағай, әсәйем нисек? Әгәр ҡурҡыныс юҡ икән, бер нисә көн һиндә йәшәп торһон. Юғиһә ҡайтыр ҙа тағы ҡуңыҙ йыйырға сығыр. Пока.

**Трубканы һалып, Сәлимә сығырға бара. Яҡында ғына күк күкрәй. Миңнур Сәлимәнең юлына арҡыры төшә, ҡулынан тотоп ала.**

**Миңнур.** Сәлимә, китмәй тор, ултыр әле беҙҙең менән.

**Сәлимә**. Юҡ, юҡ... Уңайһыҙ... Ебәр!..

**Миңнур**. Ебәрмәйем. Ултыр. *(Өҫтәлгә тарта.)* Эс беҙҙең менән.

**Сәлимә**. Һин нимә, мин бит эсмәйем.

**Миңнур Сәлимәне өҫтәл артына ултырта.**

**Миңнур**. Апай, берәй төрлө закусканң юҡмы? Бәлки, һыуытҡыста свежий осетрина барҙыр?

**Әҡлимә**. Һинең өсөн әҙерләп ҡуйғандар, ти... Ана, бәлеш бар. Сәй эсегеҙ.

**Миңнур араҡы ҡоя.**

**Сәлимә**. Миңә ҡойма...

**Миңнур**. Ну...

**Сәлимә**. Ярай, саҡ ҡына...

**Миңнур**. Тултырып ҡоям... Төбөнә тиклем эсәһең. Һин бөгөн эсергә тейеш, сөнки... Ярай... (*Сәлимә менән сәкәштерәләр. Эльза диванъа күсеп ултыра.*)

Мин ауылыбыҙҙың иң гүзәл ҡыҙы өсөн эсәм. Бәлки, бөтә районға берәүҙер әле...

**Сәлимә**. Тапҡан матурҙы... *(Эсә. Сәсәй. Миңнур еңелсә генә уның арҡаһынан ҡаға.)* Нисек эсәһегеҙ был ағыуҙы?

**Миңнур**. Закуска ҡап. Бәлештең иң тәмле ерҙәре ҡалған.

**Эльза.** Камил, мин өйгә шылтыратам. Шылтыратҡан өсөн аҡса ҡалдырырһың. *(Һандар йыя.)* Мама, здравствуй. Как вы там? Завтра же утром выедем... Нет, нет, не хочу. Папе привет. Целую.

**Миңнур араҡы ҡоя. Сәлимә Миңнур менән сәкәштереп, эсеп ебәрә.**

**Миңнур**. О-һо, закуска менән еңел бара ул.

**Сәлимә**. Мин уйлағайным, ул берәй йәш, сибәр ҡыҙға өйләнгәндер, тип. *(Көлә.)* Ә ул – быға...

**Миңнур**. Сәлимә, һин иҫерҙең... Шым!.. Бер һүҙ ҙә әйтмә!..

**Сәлимә** *(торорға маташа)*. Мин китәм.

**Миңнур**. Китмә. Ултыр. Ана, сәй эс... Тик өндәшмә!..

**Эльза** *(дивандан тора)*. Камил, чего она позволяет себе, а?!

**Камил**. Иғтибар итмә.

**Эльза**. Иғтибар итмә, имеш. Һин нимә, мине мыҫҡыл итһендәр өсөн алып килдеңме дояркаларың янына?

**Камил**. Беҙ дояркаларға түгел, әсәйгә килдек.

**Миңнур**. Әсәй ҙә һауынсы бит...

**Әҡлимә** *(тыныс)*. Мин ун биш йәштән колхоз һыйырҙарын һауҙым.

**Сәлимә** *(баҫа)*. Эйе, мин – һауынсы!.. Мин – крәҫтиән!..

**Миңнур**. Сәлимә, һин доярка түгел – дворянка!

**Сәлимә**. Нимә? Ә, эйе... Минең үҙ дворым бар, үҙ йортом бар, үҙ ерем бар...

**Күк күкрәй. Ҡойоп ямғыр яуа.**

**Миңнур**. Ямғыр ҡоя!

**Эльза** *(ашығып)*. Камил, йыйын, беҙ ҡайтабыҙ!

**Камил**. Һин нимә, төнгә ҡаршы... Ямғыр яуа.

**Эльза**. Әйттем бит: ҡайтабыҙ! Һәм иҫеңдә тот: был һаҫыҡ ауылыңа башҡаса аяғымды баҫмаясаҡмын.

**Сәлимә**. Һин үҙең һаҫыҡ!

**Миңнур**. Сәлимә, шым!

**Сәлимә**. Мин китәм.

**Миңнур**. Китмә. Ултыр, тик өндәшмә.

**Эльза**. Киткең килмәһә, ҡал дояркаң менән. Ләкин миңә юлды онот!

**Ҡабаланып плащын кейә, сумкаһын алып, атылып сыға.**

**Камил** *(өҫтәл артынан тора)*. Эльза, көтөп тор! Һин нисек китмәксе булаһың, машинаны насар йөрөтәһең бит.

**Сыға. Тыштан ярһып һөйләшкән тауыштар ишетелә. Камил кире инә, костюмын кейә.**

**Әҡлимә**. Улым, төнгә ҡарай юлға сыҡмағыҙ! Мине йәлләгеҙ, исмаһам!

**Камил.** Һин уға әйт... Ялҡытты! Суҡынып ҡына китһен бөтәһе лә!.. Әйҙә, мине йәшен атһын!.. Әсәй, мин һиңә шылтыратырмын.

**Сыға. Әҡлимә хәлһеҙләнеп ултырғысҡа ултыра, доға уҡый.**

**Миңнур**. Апай, ҡайғырма. Камил һигеҙ йыл буйы председателдә йөрөттө, бер ни ҙә булманы. Бисәһен нисек булһа ла алып барып еткерер. Минең атайым Волганан алып Кенигсбергҡа тиклем түше менән шыуышҡан. Кенигсберг... Атайымдың Кенигсбергты алған өсөн миҙалы бар... Кенигсберг... Шунда философтың ҡәбере! Иҫләнем, иҫләнем!..

Камил, көтөп тор. Мин иҫләнем!

**Сыға, бер аҙҙан кире инә.**

Апай, ул мине ҡыуып ебәрҙе.

**Әҡлимә**. Ҡыуһа, кит!..

**Миңнур**. Эх, апай, ул ҡустылар ағайға әйтмәй торған һүҙ менән ҡыуҙы.

**Әҡлимә**. Ә мин, һыйырҙы эҙләп килтер, тип әйткәнме тип торам...

**Сәлимә көлә.**

Эй, Аллам, ҡасан мине интектереүҙән туҡтайһығыҙ һеҙ! Йә, нимә килеп сыҡты инде!? Улым килен менән ҡунаҡҡа килде... Мин һиңә, Миңнур килмә, тинем бит... Килде лә үҙенең хилософияһын тылҡый башланы. *(Сәлимәгә.)* Һиңә бында нимә ҡалған инде. Матурмы, насармы, унда ни эшең бар!? Матурлыҡты ҡаҙанға һалып булмай ул. Татыу, бай йәшәйҙәр. *(Миңнурға.)* Һинең сәсең ағарып бөтөп бара бит инде, һаман өйләнмәй йөрөйһөң. Әҙәм көлкөһө!..

**Миңнур**. Апай, ни өсөн өйләнмәгәнемде һин белмәйһең. Әгәр һөйгәнеңдең һиңә сыҡҡыһы килмәһә, нимә эшләргә һуң?

**Әҡлимә**. Тимәк, яратмағанһың, димселәр ебәрмәгәнһең.

**Сәлимә**. Әҡлимә апай, ул йондоҙҙарға ҡараған!

**Миңнур**. Нисек инде яратманым!? Бик ныҡ яраттым... һәм яратам! Һин Камил менән осраша башлағас, тәҙрә төбөгөҙгә барып илай торғайным. *(Илай.)*

Миңә кейәүгә сыҡ, тигәс, нимә тине ул: «Буйың бәләкәй, һинең менән нисек ҡунаҡҡа йөрөйөм», –тине.

**Сәлимә**. Юҡ, мин улай тимәнем, Әҡлимә апай. Үҙе уйлап сығара быны.

**Миңнур Сәлимәне ҡултыҡлап Әҡлимәнең ҡаршыһына килә.**

**Миңнур**. Апай, бына һинең алдыңда...

**Әҡлимә атылып тышҡа сыға. Миңнур Сәлимәгә һоҡланып ҡарай, ҡайҙалыр гармун тауышы, йәштәрҙең йырлағаны ишетелеп ҡала.**

**Әҡлимәнең тауышы**: Милка, Милка! Ҡайттыңмы, йөрәккәйем!

**Һыйыр мөңрәй.**

**Шаршау.**

**Салауат ӘБҮЗӘР тәржемәһе.**

# ЗИННӘТЛЕ КҮҢЕЛ

*( Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның "Йәй ҡыҙы" исемле шиғырҙар йыйынтығын уҡығас)*

***Тәнзилә Дәүләтбирҙина – ижадының еләкле осорона аяҡ баҫҡан талантлы ҡәләм эйәһе. "Йәй ҡыҙы" исемле шиғырҙар йыйынтығы – Тәнзиләнең бишенсе китабы, һәм ул тематик-концептуаль яҡтан да, сәнғәти-стилистик яҫылыҡтан да шағирә ижады тураһында фекер йөрөтөргә бай ерлек тыуҙыра. Иң тәүҙә китаптың үҙенә тартып торған ҡайын еләкле йәй күренешен һүрәтләгән тышлығы, уның зауыҡлы эшләнеше тураһында әйтеп китеү кәрәктер. Май сүлмәге тышынан билдәле, тигәндәй, йыйынтыҡтың башынан ахырынаса әҙәби яҡтан камил, тәрән йөкмәткеле әҫәрҙәр тупланыуын күрәһең.***

Ватанына, тыуған төйәгенә, туған халҡына, әсә теленә булған мөхәббәт, ғорурлыҡ хистәрен һыйҙырған шиғырҙар менән асылып китә йыйынтыҡ. Томас Стенз Элиот һүҙҙәре менән әйтһәк, шағирҙың иң ҙур бурысы – ул туған теле алдындағы бурыс[1]. Бөрйән районында, илаһи саф башҡорт төйәгендә елбер елдәр менән серләшеп үҫкән ҡыҙҙың шиғри теле иҫ киткес бай. Ватан төшөнсәһе, милли ғорурлыҡ орлоҡтары ла уның өсөн тәбиғи һәм рухи оазис булған Бөрйән яҡтарынан башлана.

*Йор һүҙеңә хайран ҡалырлыҡ бит!*
*Аҡылыңа иҫең китерлек.*
*Ғәзиз халҡым!*
*Рухи мираҫҡайың*
*Сикһеҙ быуындарға етерлек*! –

ти шағирә "Үлемһеҙ халҡыма" шиғырында. "Башҡортостан – оло ауыл", "Башҡорт теле", "Бөрйәнем", "Ауылыма" кеүек теҙмәләрҙә лә автор, ғәҙәти патриотизм, Ватанға мәҙхиә йырлау кеүек тапалған һуҡмаҡтан бармайынса, уҡыусының күңелен ҡуҙғатырлыҡ шағиранә ихласлыҡ юлына баҫа. Башҡорт моңо, ҡурай моңо, атай моңо – уның өсөн иң ҡиммәтле төшөнсәләр. *("Башҡортомдоң әйтеп аңлатҡыһыҙ Моңло йырҙарынан ҡанат үҫә".)*

Күп әҫәрҙәрҙә урын алған **ел** образы *("заман еле", "елбер елдәр", "елдәр моңо", "һиллек еле")* тексҡа милли колорит өҫтәп кенә ҡалмай, ә башҡорт милләтенә хас рухи ирек, илаһи ҡөҙрәт төшөнсәләрен эсенә алған символик образ дәрәжәһенә үҫә.

"Кеше – кешелек донъяһына милләт вәкиле булып килеп инә", – ти Н. Бердяев[2]. Тәнзилә шағирә лә шиғриәттә

---

[1] *Томас Стенз Элиот. Назначение поэзии. Перевод с англ. – Киев, 1997. – ЗАО "Совершенство", М., 1997.– С.186.*

[2] *Н. Бердяев. //Судьба России. Опыты по психологии войны и национальности. – М.: Мысль, 1990. – С. 12.*

үҙен иң тәүҙә үҙ милләтенең лайыҡлы вәкиле итеп тоя:

*…Моңло, наҙлы, йомшаҡ*
*башҡорт теле*
*Нурға сорнай һәр бер һүҙемде.*
*Башҡа телгә башым ауып китһә,*
*Мин юғалтыр инем үҙемде.*
*(“Башҡорт теле”)*

Ысынында, бындай шиғри юлдар илаһи моңға, нурға сорналған кеүек тәьҫир итә. Ә ҡайҙан килә һуң ул ошо ҡәҙәрле ихлас һоҡланыу, һөйөү хисе? Әлбиттә, бала саҡтан. Тәнзилә тыуған йортоноң һүнмәҫ усағы, бөгөнгәсә үҙен иркәләп-наҙлап торған атай-әсәй йылыһы менән бәхетле. Шәхестең ныҡлы тамырҙары, үҙ-үҙенә ышанысы, рухи ҡөҙрәте, теләһә ниндәй ауырлыҡты еңә алыу һәләте лә шуға барып тоташа торғандыр.

Тәнзилә Дәүләтбирҙина ижадының көсө лә нәҡ бына шул сафлыҡта, ихласлыҡта. Бәхетле кеше бер ваҡытта ла ваҡсыл, хөсөтлө булмай.

Уның шиғырҙарында күҙгә бәрелеп торған шундай үҙенсәлек бар. Ул – беҙҙең халыҡта бик үк йыш осрамай торған ата менән ҡыҙыҡай араһындағы ғәжәйеп йылы һәм наҙлы мөнәсәбәт.

*“Ҡолонсағым!” тигән тауыш*
*Ҡолағымда яңғырай.*
*Атайымдың ошо һүҙе*
*Миңә шифа ямғырҙай.*

Ана шулай Тәнзилә Дәүләтбирҙина ижадында ғәжәйеп йылы тойғоло, хәстәрлекле атай образы пәйҙә була.

*Олоғайған көнөмдә лә*
*Иркәмен бәпәй һымаҡ.*
*Тик хәҙер атайым наҙы*
*Буй етмәҫ тәтәй һымаҡ.*

“Атайыма”, “Атайымдың йырлауы”, “Изгелек” шиғырҙарында моңло, тәрән күңелле, изгелекле, игелекле атай образы эстетик идеал дәрәжәһенә күтәрелә һәм ул шағирҙың илаһи таяныу нөктәһен, шәхес булараҡ рухи умыртҡа бағанаһын хасил итә. Ҡәләм эйәһе берсә атаһының моңло йырына, саф, тылсымлы күңеленә ихлас һоҡланһа, берсә инде олоғайған, балаларын ике аяҡлы итәм тип өс аяҡҡа ҡалған атаһын ҡыҙғана һәм уның алдында бөтмәҫ бурысын таный:

*Изгелектең ҡәҙерен белмәҫ булһам,*
*Тораташтай бына ҡатайым.*
*Ике аяҡлы итәм тиеп беҙҙе,*
*Өс аяҡҡа ҡалды атайым.*

Атаһы менән бесән сабыуҙар, әсәһе менән еләк йыйыуҙар матур иҫтәлек булып шағирә күңеленә һеңгән. Әсәгә мәҙхиә йырлаған “Әсәйемә”, “Әсәй”, “Таяныс”, “Фатиха”, “Әсә ҡәҙере”, “Әсәйем шәле” кеүек шиғырҙар әлеге йыйынтыҡтың иң сыуаҡ, иң йылы биттәрен тәшкил итә. “Әсә” һүҙе тураһында шундай тормошсан, йомаҡтарҙағыса хикмәтле һәм теүәл итеп кем генә әйтә алыр ине икән?

*Көсләп әйттереп тә булмай,*
*Көсләп тағып та булмай.*
*Ул һүҙҙе юғалтһаң, ҡабат*
*Илап табып та булмай. ( “Әсә”)*

Ысынында ла шулай бит! Г.А. Гринцерҙың бындай фекере бар: “Задача поэтов не в том, чтобы сказать то, что никто другой не говорил, но сказать так, как никто другой не может выразиться”[3]. Тәнзилә Дәүләтбирҙина ижадында ла бындай табыштар байтаҡ.

Хәҡиҡәтте яңыса күрә белеү, халыҡсан тел-биҙәкләү сараларына үҙ метафораларын өҫтәү шиғырҙарҙы үтемле һәм тәьҫирле итә. *“Балам минең – бәғер итем, Һыңар ҡулым, уң битем”*, *“Балам минең – йөрәк ялым. Изге, яҡты хыялым”* ти, әсә исеменә лайыҡ

---
[3]*Гринцер Г.А. Указ. Соч. – С. 168-169.*

булыуы менән сикһеҙ ғорур шағирә “Әҙерлек” шиғырында.

Сабыйҙарының киләсәге өсөн уй-хафа менән тулы *“Һеҙҙең ғүмерҙәрҙе йәшәп булмай, Һеҙҙең өсөн яуап биреп булмай”* кеүек юлдар йәшәү хәҡиҡәтенә, тормош фәлсәфәһенә алып сыға. Сабыйҙарын тормош бәхете итеп, әсә мөхәббәтен үҙенсәлекле бер тәрәнлектә, ғәжәйеп йәшәйеш динамикаһында, үҙенсәлекле психологизмда биргән “Яңы кеше”, “Балаларыма” шиғырҙары уҡыусыға ныҡ тәьҫир итә. Сабыйҙар әсәнең төн йоҡоһон ҡалдырһа ла, борсоуҙары менән ыҙалаһа ла, улар әсә өсөн “йөрәк ялы” икән. Кешелек, илаһиәт алдында *“Бала ҡарау – ҙур сауап”* икәненә лә баҫым яһай автор. Әсә кешенең күңел ҡатламдарын тәрәнтен асҡан, уй-хыялдарын һыйҙырған был шиғырҙар Әсә образын тағын да бейеккәрәк күтәрә. Автор ижадында йәнә бер эстетик идеал үҙенең бөтөн барлығы менән күҙ алдына баҫа.

Шағирә ғаилә именлеге, балалар бәхете хаҡында ла етди уйлана. “Бала хәсрәте”, “Ғаиләләге ғауға” шиғырҙары – быға уңышлы миҫал.

*Ғаиләләге ғауға / Оҡшаш яуға*
*Иҫән ҡалған унан / Бик һирәк.*
*Болартыусы / Аяҡ баҫалмаҫлыҡ,*
*Ҡыҫылмаҫлыҡ / Һәйбәт бик кәрәк.*

Ана шундай ҡыйыу, сая, тормош закондарын яҡшы белгән, үҙ-үҙенә һәм башҡаларға талапсан, үҙ бәхете өсөн көрәшергә һәләтле шәхес булып күҙ алдына килә лирик герой. Йәшәйеш аҡылын, ҙур тормош тәжрибәһен, ғибрәтле һөҙөмтәләрҙе үҙ эсенә алған “Иремә” шиғыры ла көслө яңғырай, һәм ул күп ғаиләләргә тормош кодексы булырлыҡ.

Әҙәбиәттә шәхес концепцияһы лирик геройҙың, һүрәтләнгән образдарҙың граждандлыҡ позицияһы, донъяға ҡарашы, зауығы, фәлсәфәһе, эске хисынтылыштары, тормош һәм йәшәйеш маҡсаты кеүек төшөнсәләрҙе үҙ эсенә ала. Авторҙың эстетик идеалы, тормошто, кешеләрҙе баһалау бизмәне лә әҫәрҙән-әҫәргә тулы ҡанлылана, күп ҡырлы була бара. Тәнзилә Дәүләтбирҙина ижадында ла шулай. Лирик герой үҙ төйәген, туған телен, ата йортон, үҙ ғаиләһен өҙөлөп яратыусы бала, әсә, ҡыҙ-ҡатын булараҡ ҡына түгел, үҙ заманының лайыҡлы вәкиле, ер киләсәге өсөн яуап йөкләгән Кеше, фәлсәфәсе, ысын мәғәнәһендә ҡәләм әһеле булып күҙ алдына килә.

Глобаль проблемаларҙы үҙ эсенә алған “Ер йөрәге” шиғырында нефте, газы һурҙыртылған ер кипкән емеш менән сағыштырыла. “Ер бауыры” тигәнендә автор ҡаны бөткән ерҙең һәләкәтен киҫәтә, заман ахыры менән янаған күренеш “ер бауырын суҡыған” “нефть һурыусы ғифриттәр” ҡиәфәтен ала. Кешенең тәбиғәткә ҡылған ахмаҡлығы хаҡында автор “Сарсау” шиғырында ла етди иҫкәртә:

*Ҡылдай ҡалды йылғыр йылғалары,*
*Күлгә төшһәң, күлдәк сыланмаҫ.*
*Ҡарыныңдан сыҡҡан кешеңдән бит…*
*Үгәй бала шулай ҡыланмаҫ!*

Кешенең тәбиғәт менән йыртҡыстарса мөнәсәбәте, әҙәм балаһының ер ҡуйынына һорамай кереүе, кипкән йылғалар, ағыуланған һауа – былар барыһы ла тыуымдың аҙайыуына, үлемдең артыуына килтерә, тигән һығымта яһай автор.

Тәнзилә Дәүләтбирҙина ижадындағы экология мәсьәләләре, тағын да глобалләшеп, рухи экология проблемаһына барып тоташа. Ни өсөн кеше элек тыныс, ышаныслы тормошта йәшәй ине, ә бөгөн аҙым һайын стресс, депрессия кисерә? Заман кешеһенең рухи ҡиблаһы, теләк-ынтылыштары,

самаһыҙ ашҡыныуҙары ҡайҙа алып бара һуң? Бына был хаҡта тәрән уйландыра, фәлсәфи нәтижәләр яһарға этәрә торған "Хафалар", "Ашҡыныу" шиғырҙары ла ғибрәтле. "Аҡса", "Аҡса көсө" кеүек шиғырҙарҙа заман кешеһе һәм аҡса мөнәсәбәте алғы нәүбәткә сыға:

*Аҡса – әрһеҙ,*
*Вата-емерә*
*Кеше рухын, күңелен.*
*Хәҙер иҫбат итеп ҡара*
*Аҡса бәхет түгелен.*

Автор ижадында шәхес концепцияһы ана шулай ерлекле һәм ҡыйыу фекерҙәр эҙенән бара. Бер яҡта кешенең ҡомһоҙлоғо, нәфсеһе, замандың сиктән тыш ҙур ихтыяждары, рухи ҡиммәттәр юғалыу, аҡсаға табыныу торһа, ҡаршы яҡта ғүмерҙең сикле икәнен аңлау, Тәңре көсөнә ышаныу, рух, иман ныҡлығы тора. Шағирә кеше идеалын әҙәм балаһының тәбиғәт менән берҙәмлегендә, күңел сафлығында, ихласлыҡта күҙаллай:

*Мин бәхетле – ғорур тәбиғәттең*
*Бар булмышы менән берҙәм саҡта.*
*Әй, Хоҙайым!*
*Таҙа күңелемде*
*Саф тота күр инде, керҙән һаҡла.*

Шағирә шәхесе ғорур, үткер, ихлас һүҙле, төҙ фекерле булып күҙ алдына баҫа.

*Инәлеп тә, һорап һәр шиғырҙы*
*Күк шаршауы аша тартып алам.*
*Һәр бер һүҙем минең – йөрәк ҡаны,*
*Һәр шиғырым минең – аҡтыҡ балам.*

Был юлдар заманыбыҙҙың билдәле шиғриәт белгесе Николай Шошанниҙың "Поэзия формулаһы тураһында" тигән хеҙмәтендәге: "Выкладывайся в каждом стихотворении так, как будто этот стих – последний в твоей жизни!"[4] – тигән шартына ауаздаш бит! Ижади шәхес өсөн шиғыр *"ҡырағай хистәргә аҡыл тамғаһы һалыусы",* кешегә һөйөү серен асып, уны ҡартайыуҙан һаҡлап ҡалыусы ла. *"Мейеләрҙе ойотоп", "йөрәкте сәнсеп", "интегеп"* тыуған йыр шағирә өсөн бик ҡәҙерле. Сөнки һәр шиғыр хәҡиҡәтте эҙләй, ысынбарлыҡтың эске мәғәнәһенә, серҙәренә төшөнөргә, ошоно кешеләргә еткерергә ынтыла. Юҡҡа ғына шағирҙарҙы "күктәге көстәрҙең сәркәтиптәре" тип атамайҙар.

Шағирә ижади дуҫлыҡ, туғанлыҡ, берҙәмлек яғында. "...Туғанымды тапҡан кеүек булам, шағир ҡулдарынан китап алһам", – тип яҙа ул "Илһамланыу" шиғырында.

*Тиңдәш ҡәләмдәштәр!*
*Бер-беребеҙгә*
*Яу булмайыҡ, таяу булайыҡ.*
*Ерҙәш инек, инде серҙәш булып*
*Бер-беребеҙҙән ялҡын алайыҡ.*

*("Ҡәләмдәштәргә")*

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ижад донъяһы әле лә булһа көнләшеүҙәрҙән, хөсөтлөктәрҙән арына алмай. Ижадсы үҙенең талант көсөнөң сикһеҙлеген тойһа, әлбиттә, бер кемдән дә көнләшмәҫ ине. "Хөсөтлөк – талант бөткән ерҙән башлана", – тигән фекер йәшәй. Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның шиғри хазинаһында ла донъялағы, ижадтағы был йәмһеҙ күренештәр, тормоштағы ғәҙелһеҙлектәр тураһында йәне әрнеп яҙған "Көнсөл", "Беҙҙең тормош", "Толстой әкиәте" кеүек шиғырҙар байтаҡ. Дөрөҫ, ниндәй генә көслө, яҡты ижад та яманлыҡты урап уҙа алмай. Ләкин талантлы ҡәләмдәр шиғриәтте яуызлыҡ тантанаһынан, хәйлә-мәкерҙең, ғәҙелһеҙлектең өҫтөнлөгөнән һаҡлаһындар ине. Мостай Кәрим дә бер ваҡыт:

[4] *Николай Шошанни. О формуле поэзии // shoshanni@bigmir.net*

*Шағирәләр! Сеңләмәгеҙ инде, зинһар!*
*Өҫтәмәгеҙ был донъяға йәнә аһ-зар,* –
тип яҙҙы.

Яҡшылыҡтың, яҡтылыҡтың, ғәҙеллектең тантанаһы барҙа, ергә, кешеләргә ҡарата һөйөү, мөхәббәт хистәре яралғанда шиғриәт тә яҡтырып китә.

*Бер һүҙ етә – бөрөләнеп,*
*Сәскә атып китергә;*
*Һөрөнтө күңел баҫыуын*
*Аҫыл баҡса итергә.*

“Йәй ҡыҙы” исемле күркәм йыйынтыҡ, әлбиттә, мөхәббәт шиғырҙарынан башҡа фәҡир тойолор ине. Шағирә күңеле һәр саҡ тоғро мөхәббәткә, теләктәшлеккә, фекерҙәштәргә мохтаж. Ләкин унең иң ҙур мөхәббәте, күңеленең иң ихлас һәм ҡайнар хистәре ғәзиз халҡына, балаларына, ҡәҙерле ата-әсәһенә йүнәлтелгән. Был – шағирәнең бәхете, уның яҙмышы.

***

Ижад кешеһе һәр ваҡыт эҙләнә, үҙенең уй-фекерҙәре, рухи табыштары өсөн һыйҙырышлыраҡ формаларға ынтыла. Әлеге йыйынтыҡта авторҙың ике поэмаһы урын алған. “Тирмә” – ғәжәйеп көслө сәйәси-әхлаҡи поэма. “Чем дальше развивается цивилизация, тем острее встают проблемы традиции и будущего”, – тип билдәләй Б.Ф. Егоров[5]. Әллә ни ҙур булмаған теҙмәгә автор башҡорт халҡының уҙғанын һәм бөгөнгөһөн, рухи эволюцияһын, традицияларын һыйҙыра алған. Милләттең күркәм ғөрөф-ғәҙәттәрен, шул уҡ ваҡытта әхлаҡи фажиғәһен үҙ эсенә алған һабантуй күренеше көслө динамикала һүрәтләнә. Шағирә күңелендә һабантуйҙағы ғәҙел көрәш һәм тормоштағы хәйләялған йөҙгә-йөҙ бәрелешә. Быныһы – бер мөһим проблема. Икенсеһе – быуаттар мираҫы булған тирмәлә ҡымыҙ, ҡорот, талҡан, айран, буҙа кеүек милли ризыҡтар янында “әрһеҙ хәмер” үҙ урынын алған. Һабантуй ахырында, тирмәләр һүтелгәндә, Кеше тарафтары икегә бүленә: айныҡҡа һәм иҫереккә. Һәм ошонда иҫерек ирҙән яфа күргән меҫкен ҡатын һәм ағас төбөндәге һыра эсеп йөҙө һарғайған, тәмәкеләй тәне ҡыҙышҡан ҡыҙ образы ялтырап китә. Быныһы – замандың, халыҡтың әхлаҡи йөҙө хаҡында етди борсолоу.

Хәҙер һабантуйҙарҙа ғына йыйылып һүтелә торған ТИРМӘ поэмала мөһим символик образ функцияһын йөкләй. Тирмә – гонаһһыҙға ҡыйырһытылған, таланған олатай-өләсәйҙәрҙең әсе яҙмышына шаһит ҡомартҡы ғына түгел, ә ҙур тарихы, мәҙәниәте булған бөгөнгө башҡорт илен символлаштыра. Лирик сигенеш яһап, автор мөғәллим олатаһының Себергә һөрөлөүе, уның һандыҡтағы китаптары ишек алдына сығарылып, эргәһенә бишек һалып вәхшиҙәрсә яндырылыуы, олатаһы менән өләсәһе ҡауышҡан аҡ тирмә тарихы, аслыҡта уның кейеҙен бер тоҡ онға һатып ебәреү, туңып үлмәҫ өсөн (ҙур гонаһ булһа ла) өләсәйҙең өй башындағы тирмәһен тураҡлап яғыу, тирмәнең бер өлөшөн изге ҡомартҡы итеп ҡалдырыу, икенсе талау ваҡытында уныһын да тартып алып, бригадирҙың эйәренә һалып йөрөтөү факттары бермә-бер күҙ алдынан уҙа.

*Изгелекте емерттерҙе*
*Совет дәүләте шулай.*
*Үткәне булмаған халыҡ*
*Ҡол итеү өсөн ҡулай.*

Ана шулай автор халыҡтың үткәне һәм киләсәге хаҡында етди уйлана. И. Хейзингтың бындай фекере бар:

---

[5]*Б.Ф. Егоров. Категория времени в русской поэзии XIX века. // Ритм, пространство и время в литературе и искусстве. — Л: Наука, 1974.*

“Здоровый дух не боится брать с собой в дорогу весомый груз ценностей прошлого”[6]. Рухи ҡиммәттәрен һаҡлап ҡалған халыҡ ҡына киләсәктә үҙ йөҙөн, үҙ телен, Ватанын һаҡлап ҡаласаҡ, тигән фекерҙе үҫтерә автор.

*Бер туралъан тирмәләрҙе*
*Ҡороп булмаҫ яңынан...*
*Әммә:“Тирмә ҡорор ерҙәр –*
*Башҡортто̇ко!” – тип йәштәрҙең*
*Һеңдерәйек аңына.*

Поэманың композицияһы ла бер-береһен алыштырып тороусы ваҡиғалар динамикаһына, камил хронотопҡа нигеҙләнгән. Ваҡыт – пространство берҙәмлеге менән хәрәкәтсән эш итеү әҫәрҙең эске ритмын һәм бөтөнлөгөн тәшкил итә. Строфаларҙың традицион ҡалыптарға ғына ҡоролмайынса, төрлө үлсәмдә һәм ритмда булыуы ла поэма жанры өсөн отошло. “Одна из важнейших закономерностей художественных композиций – соединение порядка с разнообразием”, – тип билдәләй В. Хализев[7] үҙенең “Әҙәбиәт теорияһы”тигән хеҙмәтендә.

Китапта урын алған “Янғын” поэмаһы шулай уҡ һуғыш утын, әсирлек ғазабын кискән, һуғыштан һуң халыҡ хужалығын тергеҙеү йылдарында колхоз рәйесе йөгөн тартҡан Рәхимдең кисерештәренә нигеҙләнгән. Эске тәрән психологизм поэманың умыртҡа бағанаһын тәшкил итә. В. Хализевтың: “Художник слова должен научиться видеть действительность глазами жанра”[8] – тигән һүҙҙәре әлеге әҫәрҙә тағын бер ҡат дәлилләнә. Автор поэма жанрына күпме йөкмәтергә һәм нисек йөкмәтергә икәнен яҡшы белә. Был юлы ла поэманың композицияһында хронотоп хәл иткес ролде уйнай. Ошо юл менән автор ябай һөйләп сығыуҙан, монотонлыҡтан ҡаса, лирик геройҙың характер ныҡлығын, унының тетрәнеүҙәрен, күңел ғазаптарын ваҡиғалы күренештәрҙә һүрәтләй. Поэма немецтарға әсир төшөп ғүмере буйы нахаҡҡа ҡыйырһытылған, келәттәрҙә бурһып янған ашлыҡ өсөн ғәйепләнеп эшенән ҡыуылған Рәхимдең яҙмышын кәүҙәләндереү менән генә сикләнмәй. Ул – бөгөнгө көндә иген сәселмәй әрәм булып ятҡан баҫыу-ҡырҙар, ташландыҡ фермалар, араҡы эсеүгә һабышҡан халыҡ фажиғәһен алғы нәүбәткә сығара, заманыбыҙҙың иң киҫкен проблемаһын ҡуҙғата.

Әлбиттә, шиғриәт шуның өсөн дә шиғриәт инде. Ул уҡыусыны һоҡландырырға ла, һөйөү тулҡындарында тирбәтергә лә, тетрәндерергә лә, уйландырырға ла тейеш. Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның “Йәй ҡыҙы” китабы нәҡ шундай. Бының өсөн Тәңре биргән талант, ҡыйыу характер, зиннәтле күңел кәрәк.

**Ләйсән ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА,**
**филология фәндәре кандидаты.**

[6]*И. Хейзинг. Homo ludess. В тени завтрашнего дня. — С. 257.*
[7]*В. Хализев. Теория литературы.— М.: Высшая школа, 2002 — С. 320.*
[8]*В. Хализев. Теория литературы. — М.: Высшая школа, 2002 — С. 360.*

## Ғабдулла Туҡайҙың тыуыуына 125 йыл

Абдулхаҡ
ИГЕБАЕВ

### Шағир һәм әжәл

*Йырлай-йырлай үлермен мин үлгәндә лә,*
*Өндәшмәй ҡалмам ғазраилды күргәндә лә...*

*Ғабдулла Туҡай*

*Ап-аҡ булған йөҙө шағирҙың,*
*Диңгеҙ һымаҡ тәрән һағышы,*
*Тәне ҡыҙыу, усаҡ ҡуҙындай,*
*Ҡыл өҫтөндә тора яҙмышы.*

*Ниҙер ҡыҫа төҫлө күкрәген,*
*Һыҙланып ул ауыр тын ала,*
*Әллә инде һулар һауаһы*
*Ҡалманымы яҡты донъяла?*

*Ул ут-йәшен ине дошманға,*
*Йәне көйөк күрҙе дуҫтарын.*
*Тормош күгөн айҡап осһон тип,*
*Үргә сөйҙө халыҡ шоңҡарын!*

*Шағир бүләк итте халҡына*
*Ижад баҡсаһының емешен,*
*Бағышланы Тыуған иленә*
*Йөрәгенең һәр бер тибешен.*

*Ә һин, әжәл, тешең ыржайтып,*
*Ниңә килдең Туҡай янына?*
*Йомарланып, ҡара йыландай,*
*Ыу сәсәһең уның ҡанына?*

*Ана, шағир ниндәй йәш әле,*
*Сәстәренә сал да төшмәгән.*
*Ғүмер һуҡмағының үлсәме*
*Өс тиҫтәгә лә бит етмәгән.*

*Бик йәшәйһе килә Туҡайҙың,*
*Йәшәүҙән ул һис тә туймаған,*

*Ҡырлайына ҡайтып йырларға*
*Йәш күңеле моңға һыуһаған.*

*Ә һин, әжәл, тешең ыржайтып,*
*Ниңә килдең Туҡай янына?*
*Йомарланып, ҡара йыландай,*
*Ыу сәсәһең уның ҡанына?*

*Болот ҡаплаһа ла ябырылып,*
*Нурын һүндералмай салт Айҙың.*
*Шуның һымаҡ, әжәл, мәңге һин*
*Йәнен алалмаҫһың Туҡайҙың!*

*Дөрөҫ, уны йәп-йәш көйөнсә*
*Аямайса һалдың ҡәбергә,*
*Ләкин Туҡай һис бер ваҡыт та*
*Буйһонманы һинең әмергә!*

*Яуыз әжәл, һиңә үс итеп,*
*Шағир йәне күсте шиғырға,*
*Мөмкин түгел Туҡай моңдарын*
*Ләхеттәргә бикләп ҡуйырға.*

*Бөтә ергә үтеп ингәндәй*
*Асман ҡояшының нурҙары,*
*Һәр йөрәккә асыҡ юл таба*
*Туҡайҙың да гүзәл йырҙары.*

*Татар, башҡорт уға "остаз" ти,*
*Урыҫ әйтә: "Туҡай туғаным".*
*Һөйөп телгә ала шағирҙы*
*Хеҙмәт халҡы барлыҡ донъяның!*

*Яуыз әжәл, һиңә үс итеп,*
*Шағир Туҡай йәшәй бөгөн дә,*
*Ярһыу тулҡындарҙы ярып, ул*
*Карап булып йөҙә Иҙелдә!*

*Ғорур баҫып уҙған сағында*
*Иркен урамынан Өфөнөң,*
*Бик мөләйем генә йылмая*
*Уҡып шағир үҙенең исемен.*

*Һәйкәл булып ҡалҡа был исем,*
*Һарай булып балҡый Ҡазанда.*
*Ашҡындырып дәррәү хеҙмәткә,*
*Йыр-моң булып яңғырай яланда.*

*Йылдар аша күкрәп, был исем*
*Яҡты киләсәккә юл ала.*
*Үлем көсһөҙ Туҡай ҡаршында,*
*Ул мәңгелек кеше донъяла!*

---

# ШИҒРИӘТ ПӘЙҒӘМБӘРЕ

Туҡай! Был һүҙҙе ишетеү менән күңелдә ниндәйҙер илаһилыҡ, шәүҡәтлелек, рух нуры барлыҡҡа килә. „Һинең шиғырың яҡты ҡояш кеүек“ тигәйне ул Пушкин шиғырҙары тураһында. Лермонтов поэзия күгендә Байрон юғарылығын яулау маҡсатын ҡуя. Туҡай уның ошо һүҙҙәрен „эләктереп“ ала. Һуңға табан уның фәлсәфәүи-шиғри фекер йөрөтөү офоҡтары даирәһендә Пушкин, Лермонтов, Туҡай өс йондоҙ булып ҡабына. Ҡояш, Йондоҙ, Ер йөрәген халыҡ йөрәге менән бәйләү оҫталығына ирешә Туҡай!

Яҡтылыҡ юғарынан төшә. Ул яҡтылыҡ эсендә мөбәрәк тәсбих төймәләреләй теҙелеп киткән бәхет бар, имеш. Күктә, юғарыла ни генә булмаҫ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ күк бит ул. Шиғриәт гәүһәрҙәрен күк тәхетенән, ғәрше-көрсиҙән, уның аръяғынан да эҙләй Туҡай. Ер менән Күк йөрәге мөхәббәт сылбыры менән тоташ икәнлекте тоя ул. Уның бөйөк, шөһрәтле талантын аңлап, әллә тәбиғәт үҙе бүләк иткән уға серле-сихри шиғриәт көсөн, әллә ҡайнар хис-тойғоһо, аң-аҡылы, йөрәк ярһыуы менән үҙе бәреп кергән шиғриәт гәүһәре тулы тәбиғәт донъяһына? Ул бит күңелен йыраҡ-йыраҡ тарих төпкөлөнә сәйәхәт иттерә. Йыраҡ ата-бабаларыбыҙҙың поэтик фекерләү тамырын эҙләй. Тамыры ниндәй – кәүҙәһе шундай. Кәүҙәһенә ҡарап ботаҡ ебәрә ағас. Ныҡ ботаҡ шаулап япраҡ яра. Поэзиябыҙҙың тамыры – ер йөрәгендә. Кәүҙәһе – халҡыбыҙ күңелендә. Ботаҡтары шаулап япраҡ ярған. Шул япраҡтар һанынса хәҙерге шағирҙарыбыҙ. Әммә Туҡай поэзияның алтын бағанаһы булып ҡала килә.

Боронғо ҡыпсаҡ далаларында иҫкән сабах еле (таңғы йомшаҡ, латиф ел) төрки ҡәүемдәр өсөн уртаҡ символик образ булып хеҙмәт итә. Кеше ҡайғыһын, хәсрәтен, йөрәк серен сабах еленә һөйләй. Көслө, мәрхәмәтле, шәфҡәтле, шул уҡ ваҡытта уҫал, ярһыу була был ел. Бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап ҡалыу өсөн һуд ҡәүемен үҙ шәфҡәтле ҡанаты аҫтына алһа, һад ҡәүемен фажиғә һаҙлығына батыра. Улы Йосоп юғалыу ҡайғыһынан Яҡуп пәйғәмбәрҙең күҙҙәре һуҡырая. Йөрәк яраһын сабах еленә һөйләй Яҡуп пәйғәмбәр:

*Акрын искел, сабах йиле, нә утәрсән,*
*Хакыйкать Йосыфымнан ис дотар сән;*
*Җәрәхәтем уңалдырмага сән йитәрсән,*
*Син искәли шат-хөррәм улдым имди.*

Сабах еле, рухи бер шифа-шәфҡәтлелек булып, Яҡуп пәйғәмбәрҙең ҡуйынына һарыла, уның ҡайғылы йөҙөн иркәләй, сәстәренән һыйпай. Көндәрҙән бер көндө гонаһһыҙ пәйғәмбәр рухы менән ел рухы бергә ҡушылғас, Яҡуптың күҙҙәре асыла. Ел Яҡупҡа улы Йософтоң донъяла барлығы, кешелекле, кеселекле, ҡаһарман йөрәкле, ғәҙел, намыҫлы, шәфҡәтле, мөрәүәтле булыуы тураһындағы хәбәрҙе алып килә. Шулай итеп, Ҡол Ғәлиҙең „Ҡиссаи Йософ“ поэмаһында (Болғар осоро, XIII быуат) сабах еле аҫыл һүҙ-һүрәткә, изге кеше сифатына әүерелә.

Дәрдмәндтә ел – ил ҡорбанын һөрә. Таҡташта ел фәрештәне был гонаһлы илдән китергә өндәй. Туҡайҙың "Көҙгө елдәр"ендә ел бөтә ил фажиғәһе өсөн әрнеп илай:

*Көҙгө төн. Мин йоҡлай алмайым. Өй түрендә ел илай.*
*Ел иламай, аҡ үлемдең ҡурҡыуынан ил илай.*

Бында ел образы – аҡлыҡ менән ҡаралыҡ араһында. Яҡтылыҡтың юғарынан төшөүен аңлатыу өсөн йондоҙҙар ҙа телгә алына. Төн ҡараңғы. Бәхет тә ҡараңғы. Әммә йондоҙҙар яҡтыраҡ яна. Ошо идеяны аңлатыу өсөн, эпиграф рәүешендә, рус теленән ике юл шиғыр ҙа килтерә: "Яҡтыраҡ йондоҙ яналыр, төн ҡара булған һайын; Яныма Тәңрем төшә, бәхетем ҡара булған һайын". Ил менән бергә балалар ҙа, наҙлы нескә билдәр ҙә, шәфҡәтле инәбеҙ – мәрхәмәтле Ер үҙе лә илай. Йән алырға ҡыҙғаныуҙан Ғазраил да илай. Ибраһим вә Исмәғил пәйғәмбәрҙәр илай. Шағир, шулай итеп, ел образына бәйле рәүештә, ил, Ер шары фажиғәһен генә түгел, бөтә донъя, ғаләм афәтен хәбәр итә. Шиғыр шул һүҙ менән тамамлана ла: "Ел хәбәр ул: ас үлемдең ҡурҡыуынан ил илай". Шағирҙың руссанан ирекле тәржемә ителгән "Царь – голод, яҡут аслыҡ падишаһ" тигән әҫәре лә аслыҡтан илаған ел образы менән ауаздаштыр ул. Бында ла шундай эпиграф: "Донъяла бер падишаһ бар, ул падишаһ ғәйәт шәфҡәтһеҙҙер, уның исеме лә аслыҡтыр". Был әҫәр академик Бахтан тәржемә ителгән. Туҡайҙа уның шундай маузуғтары яҡтыртыла: "Берләшмәк, эште бүлмәк, алмашмаҡ, тауар", "Тауарҙың ҡиммәте", "Аҡсалар", "Һорау – һоратыу, сығарыу – конкуренция". Шиғырында ла, иҡтисади мәсьәләләргә бағышланған фәнни-публицистик хеҙмәтендә лә хаяттың ҡара дауылы донъяны фажиғәгә алып барыусы рухи һәм матди аслыҡ булараҡ ҡарала Туҡайҙа. "Көҙгө елдәр"ҙә лә, "Аслыҡ падишаһ"та ла ғәҙелһеҙлек-ҡаралыҡ ике синыф вәкилен (байҙар, ярлылар) ике бизмәнгә һалып үлсәп тасуирлана. "Көҙгө елдәр"ҙә: "Куйһа бында ҡарттар төшкән тешен алтын менән, бер телем икмәк, тип унда наҙлы нескә бил илай". "Аслыҡ падишаһ"та: "Берәүҙәр ҡара тирҙәргә батып эшләйҙәр, берәүҙәр бер нәмә лә эшләмәйҙәр; берәүҙәр асығалар, һәр төрлө ауырыуҙарҙан себен шикелле ҡаталар (үләләр); икенселәре бейек-бейек һарайҙарҙа ғына тороп, алтын-көмөш һауыттарҙа ғына ашайҙар; бәғзеләр хәсрәтләнәләр һәм зәхмәт сигәләр; бәғзеләр ҡыуаналар, шатланалар". Туҡайҙың хис-тойғолар ташҡынын ҡайнатҡан был ҡара дауыл бөгөн дә күптәрҙең күңел донъяһын яралай түгелме?

Сәнғәтле телмәрҙә аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, йәнле картина тыуҙырыу, образлылыҡҡа ирешеү маҡсаты ҡуйыла. Образлылыҡ (һүҙ-һүрәт), идеялылыҡ (мәғәнә), эмоционаллек (хис-тойғо) әҫәр туҡымаһында бер йомғаҡ булып кәрәҙләнергә тейеш. Шуларҙың береһе генә етешмәһен, поэтик кәрәҙ кителә. Бал ҡорто кәрәҙе кеүек нағышланмай әҫәр. Ҡол Ғәлиҙә ел – образ. Мәғәнәһе йәки идеяһы – кешелеклелек. Эмоционаллелеге йәки хис-тойғо белдереүе – йөрәккә тәьҫир итеү. Туҡайҙа ел – образ. Идеяһы – рухи, матди байлыҡ-ярлылыҡты сағылдырыу. Эмоционаллелеге – тәьҫир көсө.

Яҙыусының һүҙ сәнғәте оҫтаһы булыуын иҫбат итеү өсөн һүрәтләү- тасуирлау саралары, нигеҙҙә, өс төрлө яҫылыҡта ҡарала: халыҡ үҙе ижад иткән (традицион), үҙгәртелгән (трансформацияланған), әҙип үҙе уйлап тапҡан (индивидуаль) образдар менән оҫта, етди, мәғәнәле эш итеү.

Туҡай Байрон, Пушкин, Лермонтовтар поэзияһы менән рухлана. Көнсығыш әҙәбиәтенән шиғри аҙыҡ ала. Әммә төрки телле халыҡтар шағирҙары һуңынан Туҡайҙың үҙенән өйрәнәләр. Был нәҡ ҡояштың ерҙәге һыуҙарҙы парландырапарландыра алып, уны үҙенә кире шифалы ямғыр итеп, бүләк сифатында ҡайтарып биргәне кеүек. Ҡырыҫ еле менән көрәшә-көрәшә Тянь-Шань тауҙары ҡуйынында йәшәгән ҡырғыҙҙар араһында ла, Ҡаҙағстан далаларында ла, Үзбәкстандың эҫе ҡояш нурҙарында ла – Туҡай моңо яңғырай. Күңелендәге шиғри моңон былбыл итеп осорҙо ул шул яҡтарға. Ваҡыт-ваҡыт уртаҡ традицион һүҙ-һүрәт (образ) менән эш итһә лә, уларға үҙ күңел гәүһәрен, үҙ моңон, үҙ стиль

ялҡынын, эстетик ҡайнарлығын һала белде. Ғалимдар теле менән әйтһәк, трансформациялап, яңыртып ҡулланды. Алтын да – традицион образ. Уның менән боронғо ата-бабаларыбыҙ "Сабыр төбө – һары алтын" тигән мәҡәл ижад иткән. Ҡол Ғәли шуның нигеҙендә бөтөн бер строфа төҙөй:

*Сабыр берлә эшләгел ошбу эши,*
*Сабыр берлә эшләнер эшләр башы;*
*Морадына тиз йитәр сабырлы кеше,*
*Бу эш эчрә күрекле сабыр кылгыл имди.*

Йософтоң Зөләйхаға әйткән һүҙҙәре был.

Иҫә елдәр, аға һыуҙар, үтә ваҡыт, иҫкелек еңелә, яңылыҡ еңә бара. Бөтә ғаләм хәрәкәттә. Үҙгәрә. Яңыра. Камиллаша. Тел дә шулай. Уға йән, ҡан, илаһилыҡ биреп тороусы поэтик биҙәктәр ҙә шулай. Сәнғәтле телмәрҙә уны ҡәләм оҫталары үҙгәртә. Әҫәр туҡымаһында һүҙҙәр ҙә, заман тулҡынына йотолоп, көтөлмәгән яғы менән әйләнә. "Сабыр төбө – һары алтын" тигәнде Туҡай бына нисек үҙгәртә: "Сабырлыҡ төбө – һары алтын, тигән булалар. "Шура" идараһының 75-шәр тин генә баһа биреп, "Баҫмаған шиғырҙар мәжмүғаһы" вә "Тиле ярышы" кеүек сүптәр таратыуына милләт сабыр итһә лә, сабыр төбөнән һары алтын түгел, һары бәрәңге лә сыҡмай әле" ("Фәлсәфә һүҙҙәр").

Әҫәрҙең идея-эстәлегенә, ул сағылдырған осорға, үҙенең эстетик идеалына яраҡлаштырып үҙгәрткән, үҙе лә яңыларын ижад иткән мәҡәл- әйтемдәр күп Туҡай әҫәрҙәре туҡымаһында. Мәҡәләләргә яҡын торған фразеологик тәғбирҙәр ҙә бихисап. Уларҙы ғалимдар "ҡатып ҡалған" тел берәмектәре тип иҫәпләй. Трай тибеү, һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырыу, ең һалындырыу кеүектәре, ысынлап та, "ҡатып ҡалғандар". Ләкин донъяла ҡатып ҡалған бер генә есем, күренеш тә юҡ. Фразеологик тәғбирҙәр ҙә шулай. Үҙгәрә. Яңыртыла. Нәфис һүҙ сәнғәте оҫталары уларҙың яңынан-яңыларын ижад итә. Р.Бикмөхәммәт "Поэзиябыҙҙың һулымаҫ сәскәләре" исемле хеҙмәтендә (Ҡазан, 1960) егерменсе быуат башында, йәки милли әҙәби тел ойошҡан-формалашҡан осорҙа, фразеологияны иң ныҡ эшкәртеүсе итеп Туҡайҙы күрһәткәйне. Ул ысындан да шулай. "Өҙөлгән өмөт" исемле шиғырында ғына ла 30-ҙан артыҡ фразеологик тәғбир бар. Шуларҙың дүртеһе – халыҡтыҡы йәки традицион (күҙ ҡарашы, йәш ваҡыт үтеү, ғүмер яртыһы етеү, тулған ай), өсәһө – үҙгәртелгән йәки трансформацияланған (күҙ тегеп бағыу, дәрт менән ҡәләм һыҙыу, кеше ғүмере һүнеү), 24-е – Туҡайҙың үҙе ижад иткән йәки индивидуаль фразеологик тәғбирҙәр.

Үҙгәртеү әҫәрҙең эстәлегенә, ул сағылдырған тарихи шарттарға бәйле. Әйтәйек, күп ырыу, ҡәүем, ҡәбилә, халыҡ нигеҙендә, утлы-дауыллы ҡаршылыҡтарҙы еңә-еңә, шөкөр, егерменсе быуат башында милләт ойошоп ала. Әгәр шулай булмаһа, Туҡай был шиғырында **милли ағас** тигән фразеология ижад итмәҫ ине: „Күпме моңланһам ҡунып **милли ағастар** өҫтөнә. Барыһы ҡороған, бер генә юҡ данлыһы, япраҡлыһы“. Милләттең тамыры йыраҡ-йыраҡ быуаттар төпкөлөндә икәнлекте аңлай Туҡай. Был тамырҙы ҡырмыҫҡа ояһы урынына туҙҙырырға күпме генә тырышмаһындар, кәүсәһенә ҡанлы балта менән күпме генә сапмаһындар, бөтөнләй үк имгәтә алманылар барыбер, яраһын уңалта-уңалта, яңынан-яңы ботаҡтар ебәреп, яңынан-яңы япраҡтар ярҙы. Тик ул япраҡтар Туҡай заманында бик зәғиф инеләр әле.

**Әйбер төҫө үҙгәреү, тормош күге, мөхәббәт саҡтыһы, мөхәббәт саҡтыһы осмау, моңло саз уйнау, моңло саз менән айырылышыу, күңел ҡошо, донъя ситлегенән тарһынып осоу, йыһанға шат яратыу, раббының ят яратыуы, милли ағастар өҫтөнә ҡуныл моңланыу, моң ҡороу, моңдоң йәнлеһе булмау, алтын яр булмау, һалҡын йәр булмау, әсәһенең йылмаймай вафат**

**булыуы, йыһандың ғаиләгә ят кеше килтереүе, иң ахыры кәррә үбеү, мөхәббәт һаҡсыһы, бар күңелдәрҙән йылы булыу, йомшаҡ ҡәбер ташы, күҙ йәшенең иң әсе һәм татлыһының ҡәбер ташына тамыуы** кеүек фразеологик әйтемдәрҙең барыһы тәрән фәнни анализ яһауҙы талап итә. Туҡай ижад иткән был индивидуаль фразеологияларҙы ҡайһы яҡтан ғына ҡарама (яһалышы, төҙөлөшө, составы, мәғәнәһе, эмоционаллеге, экспрессивлығы, образлылыҡ ҡеүәте), ошо өлкәлә эшләгән теләһә ниндәй ғалимды һоҡландыра ала. „Ҡатып ҡалмағанлыҡ"ты телдең ғәжәп бай, уның ынйы-гәүһәрҙәргә ифрат мул булыуын фразеологик тәғбирҙәр аша ғына ла иҫбат итә Туҡай.

Егерменсе быуат башында, шул осорҙағы тарихи шарттарға бәйле рәүештә, яңы ҡанлы көрәштәрҙә еңә-еңә, әҙәби телдең ҡанаты шаҡтай киңәйеп китә, контаминацияланған йәки йыйынҡы фразеологик әйтемдәр барлыҡҡа килә. Туҡайҙағы **күҙ йәшенең иң әсе һәм татлыһының ҡәбер ташына тамыуы** тигән ҡатлаулы һүҙ теҙмәһе дүрт фраза нигеҙендә контаминацияланған: **күҙ йәше + әсе күҙ йәше + татлы күҙ йәше + күҙ йәшенең ҡәбер ташына тамыуы.** Контаминацияланған фразеологияларҙың матур үрнәген поэзияла – Ғ. Туҡай, прозала Ғ. Ибраһимов күрһәтте. Ғ. Ибраһимовта: дәртле **күҙҙәрҙең тамырҙағы ҡанды ихтыярһыҙ ҡуҙғатыуы, көрәш утының ялҡындары эсендә иҫке тормош сүптәре янып емерелә барыуы, мөхәббәт тулҡындарынан иҫергән башты ҡайҙа ҡуйырға белмәү һ.б.**

Болон – сәскәһеҙ, тел биҙәкһеҙ булмай. Тел биҙәктәренә лә бай телебеҙ. Уның матур үрнәктәре беренсе мәшһүр-классик әҫәребеҙ „Ҡиссаи Йософ"та (XIII быуат) ла бар. Зөләйханың керпек осонда эленеп торған гәүһәр йәш – юҡҡа-барға илаған йәш түгел ул. Мөхәббәт кеүек ҡайнар хис-тойғоларҙан йөрәктә гәүһәр булып сәйләнләнеп сыҡҡан гәүһәр йәш бит ул. Кешене йөрәкле эпитеты менән бәйләү элек-электән килә. Риүәйәт ҡаһарманы Алыпты эпитет сифатында файҙаланып, уны Йософтоң тәбиғи көсөн күрһәтеү йәһәтенән ҡуллана Ҡол Ғәли: **алып йөрәкле** Йософ. Шәфҡәтле, мөрәүәтле, ғиффәтле кеүек логик эпитеттар Йософтоң кешелеклелек сифаттарын асыҡлай. Тимәк, традицион эпитеттарҙы мәғәнә, стилистик, һүҙ-һүрәтлелек, эмоционаллелек, экспрессивлыҡ маҡсаттарҙа үҙгәртеү-трансформациялау поэзиябыҙҙың шишмә башы булған „Ҡиссаи Йософ"тан уҡ килә. Был шул ваҡытта ғына түгел, уға саҡлы быуат-быуаттар элек үк, бик боронғо ҡәүем ата-бабаларыбыҙҙың сәнғәтле телмәргә, образлы фекер йөрөтөүгә оҫта булыуҙары тураһында һөйләй.

"Ҡиссаи Йософ"тағы гәүһәр йәш Туҡайҙа ла бар. Туҡайҙа уның стилистик-экспрессив ҡанаты тағы ла киңерәк. Сөнки ул мөхәббәт тойғолары, интим хистәр менән генә сикләнмәй, уның иҫке мәғәнәһе, һүҙ-һүрәтлелек нигеҙе, эмоционаллелек тәбиғәте шағир йәшәгән осор, ундағы сәйәси-ижтимағи, тормош-көнкүреш хәлдәре менән генә лә түгел, шағирҙың эстетик идеалында даими булып торған гонаһһыҙ донъя, Тәңре хөкөмө менән дә бәйле.

*Кичерелсәче, Тәңрем, бәгърем, әти, әни.*
*Дәү әнием, апайларым, бабай, әби;*
*Хозурында* ***гәүһәр яшем*** *түгеп телим,*
*Кабул әйлә, Тәңрем, әле мин бик „нәни".*

Туҡайҙың күп кенә һүҙ биҙәгестәре ҡатын-ҡыҙҙарҙы мөхәббәт күленә манып алған дәрәжәлә матурлай: **ожмах** ҡуйын, **мәрмәр** муйын, **зөбәржәт** күҙ, **тәмле** һүҙ, **татлы** һүҙ, **кәүсәр** ирен, **нескә** бил, **сулпан** ҡыҙ һ.б. Шуның менән бергә Туҡай иҫке ҡарашлы, мөнәфиҡ, алама заттарҙың иҫке донъяһын, рухи халәтен кире хис-тойғо уята торған эпитеттар менән дә сифатлай: **көмбә** баш, **һоро** ҡорт, **себен йән, сүмес** баш, **иләк** ауыҙ, **таш** йөрәк һ.б.

Ниндәй генә жанр булмаһын (поэзия, проза, публицистика), бер үк туған тел хазинаһындағы һүҙ гәүһәрҙәре менән ижад ителә. Шулай ҙа һәр жанрҙың үҙенсәлеге, эске тәбиғәте, серле хосусиәте бар. Был хосусиәтлек тел-стиль илаһиәтенә лә ҡағыла. Повесть һәм романдарҙа, мәҫәлән, урыны-урыны менән тасуирламалар, хикәйәләгегә ҡарағанда, шаҡтай киң була. Шиғырҙа аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, йәнле картина тыуҙырыу, хис- тойғо көсәйтеүгә айырыуса ҙур иғтибар ителә. Матур әҙәбиәт стиле менән публицистик стиль араһында етди айырма ла бар. Беренсеһендә һүрәтләү- тасуирлау саралары, төрлө поэтик биҙәктәр мул булыусан. Унда ҡәләм оҫтаһының хыял-фантазияһына тулы ирек бирелә. Әҙәби әҫәрҙең эстетик зауыҡ тәрбиәләү сифатын образлы, нәфис, сәнғәтле телдән айырып ҡарап булмай. Публицистик стилдә фекерҙәрҙең логик яҡтан дөрөҫлөгөнә иғтибар итергә тырышыла. Унда һүрәтләү саралары ҡулланыу сикләнә. Ләкин быға ысын, ихлас дөрөҫлөк итеп ҡарамаҫҡа кәрәктер. Әҙәби әҫәрҙә публицистикаға хас күренештәр булған кеүек, хәбәрнамәләр өсөн сәнғәтле һөйләм һис тә ят түгел. Уның шулай икәнлегенә Ғ. Туҡайҙың хәбәрнамәләре лә миҫал була ала. „Мөбәрәк тәсбих өҙөлдө“ – шуның бер гүзәл үрнәге. Ул Л. Н. Толстой мәрхүм булғас яҙыла. Туҡай был үлемде бик ауыр кисерә. Ул кисереште тасуирлау өсөн шиғыр үлсәүенең генә тар булыуын әйтә: „Ушбуны яздырды нәрсәне вөжданымның көчләве. Мәсьәлә бик зур, сыйдырмый тар шигырьләр үлчәве“.

Был үҙе үк яҙыусы-художниктың жанрҙы ваҡиға һәм күренештәргә бәйле рәүештә һайлай белеүен раҫлай. Хәбәрнамә өслүбендә яҙылһа ла, ул барыбер ҡайнар хис-тойғо, йөрәк һыҡраныуы, күңел тетрәнеүе, шиғри тел, эске кисерештәр дауылы менән ижад ителгән. Толстойҙың үлеме бөтә Рәсәйгә килгән афәт булараҡ һүрәтләнә. Шуға күрә һүҙ Рәсәй ҡояшынан башлана. Әле Толстой иҫән. Инде ноябрь айы килһә лә, Рәсәй ҡояшы бүтән йылдарҙағыса нурын кәметмәй, донъя йөҙөнә сырайын һытып, һалҡынлыҡ бирергә ашыҡмай. Рәсәйҙең ағыр һыуҙары боҙланмай, үҙәк өҙгөс елдәр ҙә иҫмәй, ҡибла яҡтың ҡояштары ла китмәй, бер ҙур һәләкәт буласағын алдан һиҙгән януарҙар кеүек, тәбиғәт тәрән бер хәүеф һәм дәһшәт эсендә. Ни өсөн? Толстой йәнәптәре түшәктә. Был ауыр ҡайғыны ана шулай бөтә Рәсәй тәбиғәтенә бәйле рәүештә яһалған метафора аша һүрәтләй. Толстой вафат булғас: ҡояш та йөҙөн һыта, һыуҙар ҙа боҙлана, әсе елдәр ҙә иҫә, ҡоштар ҙа йылы яҡҡа оса.

Билдәле, "тәбиғәт кисерештәре" – кешеләр кисереше. Әгәр Туҡай уны тура мәғәнәһендә яҙһа, был тиклем тәьҫирле булмаҫ ине. "Рәсәй ҡояшы" тип әйтеү үҙе үк хис-тойғо уята. "Рәсәй кешеләре" тиһәк, экспрессивлыҡ кәмей. Бында шағир күсермәлелек йәки метафораның шундай ҡатлаулы төрө менән эш итә. Метафора бында һүҙ-һүрәт тә яһай, мәғәнәне лә көсәйтә, хис-тойғоно ла арттыра.

Сағыштырыуҙар тулҡынында киң ҡолас һалып, бик оҫта, һоҡланғыс өлгөр йөҙә белде Туҡай. Сағыштырыуҙы ғалимдар "киң ҡоласлы категория" тип йөрөтә. Уның киңлеге шунда: ул ҡулланылмаған бер генә фән дә юҡ. Шул үҙенсәлеге буйынса хәҙер ул философия фәнендә сағылыш (отражение), һиҙемләү (ощущение), танып-белеү (познание) категориялары менән бер рәттә өйрәнелә. Телселәр уның ниндәй лексик-грамматик саралар, ҡатлаулы синтаксик төҙөлмәләр менән яһалыуына иғтибар итә. Әҙәбиәтселәрҙе уның образлылыҡ, идеялылыҡ, эмоционаллек хосусиәте, эстетик сифаты, һүрәтләү-тасуирлау сараһы булыу үҙенсәлеге ҡыҙыҡһындыра: **тимерәү гөлө, кәкүк сәскәһе, тауыҡ еме үләне, күркә үләне, баҡа үләне, ахмаҡсафа гөлө, хәтфә гөлө, туҡранбаш, үгәй инә япрағы, сөскөрөк үләне, фәрештә уты (үләне), йөрәк япраҡ, һеңге япраҡ, йомортҡа япраҡ, ҡосаҡ япраҡ, ирен сәскә, күк сәскә, башаҡ сәскә, һепертке сәскә, ҡалпаҡ сәскә, кәзә һаҡалы, ҡаҙ тәпәйе, ҡыҙыл**

**төймәлекәй, ҡаҙ сәсе, суҫҡа дегәнәге, аш ҡаҙаны, айыу ҡолағы, эт эсәге, ҡуҙғалаҡ** һ.б. үлән, сәскә, гөлдәр сағыштырыу юлы менән яһалған. Фразеологик әйтем, мәҡәл-әйтем, һынландырыу, эпитет, метафора һ.б. сағыштырыу нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Боронғолар: "Сағыштырыу – танып-белеүҙең инәһе", – тигәндәр икән, алман халҡының йәки немецтарҙың уға үҙ ҡарашы бар: "Һәр сағыштырыу аҡһай", – тиҙәр улар. Французлар иһә һәр сағыштырыуҙың дәлилләү була алмауы тураһында фекер йөрөтә. Сағыштырыуҙың барлыҡ сифаттары беҙҙең эраға тиклем үк йәшәгән грек ғалимы Аристотель тарафынан ныҡлап өйрәнелеүе уның барлыҡ телдәр диңгеҙендә, ысынлап та, алтын балыҡтай йөҙөп йөрөүе тураһында һөйләй. Туҡайҙың сағыштырыу менән еңел, өлгөр эш итеүен мин йылына бер генә мәртәбә күренеп киткән Өлкәр йондоҙо менән сағыштырыр инем.

Йәнә шул үҙенсәлекте лә әйтергә мөмкиндер: Ғ. Туҡайҙың һүрәтләү-тасуирлау саралары бер-береһе менән дә, төрлө лексик мәғәнәле (исем, сифат, һан, рәүеш, алмаш, ҡылым) һүҙҙәр менән дә эске органик мөнәсәбәткә керәләр. Ул мөнәсәбәтлелектә һүҙ-һүрәтлелек тә, мәғәнә лә, хис-тойғо ла бар. Улар, нисектер, бер-береһе менән сылбыр түңәрәктәреләй бәйләнә. Поэтика сылбыры тип атарға мөмкиндер. Туҡай үҙе ятраҡан мөбәрәк тәсбих төймәләре тиергә була. "Мужик йоҡоһо" исемле шиғырында былай ти шағир: "Һинең өй балсыҡтай, Бөкөрәйгән ҡарсыҡтай". Бәләкәй өйҙө тауыҡ кетәгенә оҡшатыу әүәл-әүәлдән килә. Шулай ҙа бөкөрәйгән ҡарсыҡ – образлыраҡ. Шул осорҙағы бөтә ярлылыҡты күҙ алдына килтереп баҫтыра бит ул. Әлеге "Көҙгө елдәр"ҙәге ел бармаҡ менән төртһәң ауырға торған бөкөрө ҡарсыҡтай өй өсөн дә әрнеп илай бит ул. "Аслыҡ падишаһ"тағы хәйерселек тә шуның менән бәйләнгән. Бына эштән сығарылған ярлы ҡыҙы. Ул сатта бағанаға һөйәлгән. Уның бөтә ҡайғыһы, йөрәк тетрәнеүе, күңел яраһы һары япраҡҡа әүерелгән йөҙөндә сағыла: "Һөйәлгәнһең сатта бағанаға. Япраҡ төҫлө һары йөҙҙәрең". Япраҡ көҙөн һарғая. "Көҙгө елдәр"ҙәге ел ҡыҙҙың был ауыр яҙмышы өсөн дә илай. Аслыҡтан себендәй ҡатҡан ир, бөкөрәйгән ҡарсыҡтай балсыҡ өй, һары япраҡтай йөҙ – барыһы ла яралы йөрәкле, ауыр яҙмышлы, ҡараңғы көнлө ил фажиғәһе. Ҡол Ғәлиҙәге гәүһәр йәш – мөхәббәткә бәйле образ. Туҡайҙағы япраҡ төҫлө һары йөҙ – бөтә ил афәтен сағылдырып тороусы образ. Сағыштырыу өсөн алынған өс әйбер-предмет (себен, өй, япраҡ) стилистик яҡтан ана ниндәй киң ҡанатлы Туҡайҙа.

Бөтә тәбиғәттең үҙендә лә, уның ҡосағында йәшәгән кешеләр күңелендә лә, юғарыла телгә алынған гөл, сәскә, үләндәрҙә лә – күпме серлелек, сихрилылыҡ. Ҡарбуз эсендәге бәләкәй генә ҡара орлоҡта ла ҙур тарихи ваҡиғаны сағыштырып күрһәтеү хосусиәте йәшеренгән икән. "Карбуз – Пуришкевич вә әтбағының (эйәрсендәренең) башы. Эсе тулы ҡара орлоҡ". Халыҡта быңдай сағыштырыу юҡ. Кем ул Пуришкевич? Дәүләт Думаһында иң уң ҡанаттағы депутат, монархист. Ҡыҫҡа ғына сағыштырыу. Ләкин бик серле. Эсендә ҙур мәғәнә. Азатлыҡҡа теше-тырнағы менән ҡаршы торған монархист реакция йылдарында, елкәһенә заман бүрәнәһе төшөүҙән ҡурҡып, ҡыҙыллана башлай, хөкүмәтте халыҡҡа хөрриәт бирмәүҙә ғәйепләй. Ҡарбуздың эсе ҡып-ҡыҙыл булһа ла, ул ҡыҙыллыҡ ҡап-ҡара орлоҡ менән кәрәҙләнгән бит. Ҡара орлоҡ – ҡара уй ул. Ил ҡаралығын йәшерергә маташыусы мөнәфиҡ уй. Ә быңа ҡауын – гөлләмә башы. Уның орлоғонда башҡа хикмәт тә бар икән: "Ҡауын – был емеш татар гөлләмәһенең башы. Бының орлоғон ярған кеше тамуҡта янасаҡ, һәр һикһән йыл, буғай". Был һуңғы миҫал Туҡайҙың "Хәҙер ерәк-емеш ваҡыты" исемле әҫәренән алынды. Унда йәнә **бәрәңге**, **сөгөлдөр, ҡабаҡ, кәбеҫтә, бойҙай, һоло, арпа, торма, һарымһаҡ, миләш, муйыл, борсаҡ, ер еләге, ҡурай еләге, һуған, шалҡан** кеүек еләк-емештәр сағыштырыу объекты итеп алына. Улар эсендә сағыштырыу

өсөн ғәжәп ҡыҙыҡ зәррә, күҙәнәк, төрткө бар икән. Уларҙы бөркөт күҙле, һандуғас ҡолаҡлы Туҡай тиҙ таба ала. Ана ниндәй сағыштырыуҙағы стилистик хосусиәттең танып-белеү менән бәйләнеше. Әҫәр аҙағында ул зәррә, күҙәнәк, төрткөләрҙәге хәрәкәтте, йәнлелекте аңлауҙың ауырлығын Туҡай үҙе лә йәшермәй. Шалҡан тураһында яҙғанда ул былай ти: "Шалҡан – ҡыҙҙар күкрәге. Ауыл егеттәренең күн бейәләй кеүек ҡаты ҡулдарына шулай тойола, ти. Йомшағыраҡ ҡуллы кеше помидор тиер ине. Ләкин ауыл Ғәйнетдине менән бәхәс итеп буламы ни? Ул: "Икмәктер, ҡояштыр, шулай булмаһа, иманым кафыр итһен!" – ти ҙә ауыҙыңды ҡаплай. "Ҡыҙыл йә ҡара ҡарағатты, бүтән исем табыуҙан "ғажиз" булғанлығымдан, ашай торған мәрйен тип кенә атайым.

Барлыҡ еләк-емештең хәлен сорт белеп бөтөрә. Уны мин түгел, башына елпеш күтәреп: "Малина! Малина! Хорош! Малина! Бикторый! Бикторый!" – тип ҡысҡырыусы мөтәхассыйс (белгес – С.П.) Ҡазан татары ла белә алмаҫ".

Бына ни өсөн, немецтар әйткәнсә, һәр сағыштырыу аҡһай, французлар әйткәнсә, һәр сағыштырыу дәлилләү була алмай икән. Беҙҙең әҫәрҙәрҙәге "аҡһаған" сағыштырыуҙарҙы йыя башлаһаң, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ғәрипләнеп аҡһаған һалдаттар һанынса ғына түгел.

"Ғашиҡ уты" исемле әҫәрендә Туҡай әллә ниндәй, әллә ҡайҙағы әйбер-предметтарҙың эске һәм тышҡы сифаттарын өйрәнеп сағыштырыу яһай: **мәскәүский дуға кеүек кәкре ҡаш, Сембер заводтарында етешкән сөм-ҡара аттар ҡойроғолай оҙон сәс, ҡытайский сынаяҡ төҫлө ҙур күҙҙәр, галанский мейес кеүек йөҙҙәр, Бохара ҡауындарынан да йомро баштар, Яйыҡ, Оренбург яғынан килгән ҡуй майы менән генә майланған сәс, Ағиҙел ҡамыштары араһына ҡасып себен аулаған баҡалар төҫлө, Шәм шәриф мәҙрәсәләре мөйөшөнә ҡоролған шаршауҙар кеүек киң аҡлы ситса күлдәк, Мәккәи Мөкәррәмә вә Мәҙинәи Мөнәүвәрә дөйәләре ауыҙындағы зәғәфурандар кеүек сәйнәгән һағыҙҙарың, Сәет-Ваттал Ғазиҙың кирелгән йәйәһе кеүек ауыҙ йырып көлөү** һ.б.

Ошо урында әлеге Өлкәр йондоҙҙо йәнә иҫкә алаһы килә. Ул башҡа йондоҙҙарҙағы хәл-әхүәлдәрҙе тикшереп оса, имеш. Әллә Туҡайҙың күҙе шул Өлкәр йондоҙ үҙеме? Барлыҡ геометрик есемдәрҙең йөрәгенә нур булып керәме? Шулай икән. Туҡайҙы йәнле һәм йәнһеҙ есемдәр табибы тип атарға ла мөмкин бит. „Туҡай – һүҙ пәйғәмбәре“ тип әйтеү дөрөҫ булмаҫмы?

А. И. Ефимов "О языке художественных произведений" тигән хеҙмәтендә рус телендә синтаксик бөтөндәрҙә белдерелгән ҡатлаулы сағыштырыуҙарҙың 3 төрөн күрһәтә. Бармы былар беҙҙә? Ең һыҙғанып, тирләп-бешеп, шуларҙы эҙләргә керештем. Нәҡ рус телендә булған 3 ҡатлаулы сағыштырыу теҙелмәһен Туҡайҙан таптым. Шатлыҡтың сиге юҡ. Мин, гүйә, рус телендәге синтаксик бөтөндәрҙә белдерелә торған сағыштырыуҙың төрки телдәрҙә булғанлыҡ яңылығын ғына асманым, әлеге Өлкәр йондоҙоноң үҙен тотоп алыу бәхетенә ирештем.

Туҡта! Улай ғына ла түгел был. Күңелем менән сал тарихҡа сәйәхәт яһайым. Ҡыпсаҡ далаларында йөрөйөм. Әлеге сабах еле менән кәңәшләшәм. Сабах еле ҡолаҡҡа бер хәбәр әйтә. Ислам дине ҡабул ителгәс, төрки телдәргә ғәрәп һүҙҙәре тулҡын-тулҡын булып ағыла. Шунан төрки телдәр „ярлылыҡ“та ғәйепләнә башлай. Иң бай тел – ғәрәп теле, йәнәһе. Төрки телдәрҙә фәнни хеҙмәт тә, әҙәби әҫәрҙәр ҙә яҙып булмай, имеш. Ысын менән ялғанлыҡты Хоҙай айыра. Хаҡлыҡ өҫкә сыға. Хаҡлыҡҡа хөкөм юҡ. Ун беренсе быуат ғалимы Мәхмүт Ҡашғари хәҡиҡәтте иҫбатлай торған Алла илсеһеме әллә? Исем менән ҡылымдарҙы йыйып, уларҙы мәғәнәле киҫәктәргә йәки морфемаларға бүлеп, төрки телдәрҙең бик йыраҡ тамырлы бай тел икәнлеген, морфологик яҡтан ныҡ ҡатмарлыланыуын, ғәрәп теленән бер ҙә кәм булмауын иҫбатлай.

Шуларҙы уйлап, йәнә ең һыҙғанып тигәндәй, синтаксик **бөтөндәрҙә** белдерелгән ҡатлаулы сағыштырыу формаларының яңынан-яңы төрҙәрен эҙләргә тотондом. Эҙләнә торғас, Туҡайҙан йәнә дүртте таптым, тимәк, етәү икән улар. Бына ниндәйҙәр: **тәңгәл сағыштырыу, кире сағыштырыу, ҡапма-ҡаршы сағыштырыу, ситләтеп сағыштырыу, нәтижәле сағыштырыу, йәйенке сағыштырыу, ҡатлаулы сағыштырыу.** Улар бик күп урынды ала. Шуға күрә миҫалдар килтереп тормайбыҙ.

Туҡайҙың тел диңгеҙенә сумам әле. Бер арҡыры, бер буй йөҙөп, төбөнә үк төшәм, һүҙ гәүһәре сүпләйем. Был диңгеҙ бик киң дә, тәрән дә, шифалы ла. Унда сумып сыҡһаң, үҙеңдә ожмахтағы Кәүсәр күлендә ҡойонғандай хозурлыҡ тояһың.

Ҡояшҡа ҡарап бөтә донъя халҡы ҙур илаһилыҡ, ләззәт, изге хис-тойғо кисергәндәй, Туҡайҙың бөйөк талантына иман рухы менән табынабыҙ. Шағир-пәйғәмбәр заңына әйтелгән  алтын һүҙҙәр күктәге яҡты йондоҙҙар һанынса: „Донъяла бик аҙ булыр ысын шағир Ғабдуллалай. Ул – ҡараңғы төндә яҡтыртҡан матур, аҡ тулған ай“, – ти Шәйехзада Бабич. Туҡайҙың донъяла иң-иң атаҡлы шағир булған Байрон ҡояшында ҡыҙыныуы хаҡында юғарыла әйтелгәйне инде. Был ҡояш донъяһына йөрәкһенеүсе ҡәләм оҫталары ла бихисап, „Туҡай остаз“ тигән шиғырында бына нимә ти Нәҡи Исәнбәт:

*Ҙур шағирҙар донъяһына күҙҙе һалынды тура,*
*Унда ожмах төҫлө татлы көн күреүҙәр ялтырай.*
*Мин дә  инмәксе буламын шул ижад баҡсаһына,*
*Гомерың, Байрондарың йөҙгән шиғыр донъяһына.*

Бай, матур, гүзәл тәбиғәтле Башҡортостан еребндә Туҡай исеме йөрөткән ауылдар шаҡтай. Туҡаевтар, Туҡаевалар күплеге лә – Хоҙайға шөкөр! Боронғо ҡыпсаҡ далаларында иҫкән сабах еле Өфө ҡалаһына Туҡайҙың үҙен дә алып килде. Мәжит Ғафури менән осрашыуҙарына халыҡ та, Аллаһы Тәғәлә үҙе лә шаһит. Башҡорт ерен, уның  киң күңелле халҡын, зәңгәр яҡуттай гүзәл тәбиғәтен ныҡ яратты Туҡай. Башҡорт халҡы күңелендә ул үҙе лә аң-аҡыл, хис-тойғо гәүһәре булып йәшәй. Бына нимә ти был хаҡта Мостай Кәрим: „Башҡорт халҡына килгәндә, башҡорт халҡы Туҡай алдында муйынынан бурыслы. Ул башҡорт мөғәллимдәренең, мәғрифәтселәренең беренсеһе һәм иң күренеклеһе булды. Башҡорт әҙәбиәтенә остазлыҡ итеүселәрҙең иң атаҡлыһы һәм иң яҡыны булды. Үҙемә ҡалғанда, шуны әйтәһем килә: инде бына нисә йылдар Туҡайға һоҡланып туя алмайым“.

Үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, уйғыр, әзербайжан, төркмән һ.б. халыҡтарҙың шағирҙары поэтикаһында Туҡай ғибәрәһе менән оҡшашлыҡтар ҙа юҡ түгел. Ул Мостай Кәримдә лә бар. Туҡайҙа: „Аҡ күмәс менән ашарлыҡ саф һауа“; М. Кәримдә: „Ҡымыҙ кеүек тәмле һауа“.

Туҡай бөйөклөгөн сағыштырыуҙар аша асыҡлау ғәҙәте лә бар. Сабит Моҡанов һүҙҙәренә иғтибар итәйек: „...Рәсәй империяһындағы һәр халыҡтың үҙ Туҡайы бар ине. Был – ҡаҙаҡ Абай, ҡырғыҙ Тоҡтоғул,  үзбәк Фурҡат, тажиҡ Айни һ.б. Әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында быларҙың береһе лә Туҡай кеүек ҙур халыҡ-ара популярлыҡҡа ирешә алманы. Туҡай иһә бик ҡыҫҡа ғүмере заманында уҡ ул  саҡтағы  Рәсәйҙә дан-шөһрәт  ҡаҙанды“. Турсун Ҡаһари һүҙе:“Ғабдулла Туҡайҙы уйғыр халҡы үҙ шағиры тип таный. Мин уның бер  китабын Шәрҡи Төркөстандың Гөлжа ҡалаһында йәшәгәндә уйғыр теленә тәржемә ҡылдым“. Ғәфур Ғөләм: „Ғабдулла Туҡайҙы татар халҡының бөйөк шағиры, һөйөклө улы тип әйтеү генә етмәй. Туҡай – күп кенә башҡа төрки халыҡтар араһында ла киң танылған, яратып уҡыла торған ҙур әҙип“.

Туҡайҙың оҫта журналист, публицист булыуы хаҡында әйтелде инде. Ә бит ул

„ғалим“ атамаһы ла алған шәхес бит: „Габдулла Тукай был страстным публицистом и лириком, журналистом и ученым“ (Сергей Михалков). Егерменсе быуат башында Ҡазанда мәктәптәрҙә туған телде уҡытыу өсөн дәреслек яҙыу конкурсы иғлан ителә. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, Тукай дәреслеге беренсе бүләккә лайыҡ була. Академик Вахтың иҡтисад фәндәре буйынса яҙған хеҙмәтен татарсаға тәржемә итеүе лә таң-хайран ҡалдыра. Боронғо кельт халҡы баҡсаһындағы ҡапҡаның был һәм теге донъя серҙәрен бәйләгәнеләй, Тукайҙың аң-аҡыл, хис-тойғо асылы, йөрәк ялҡыны, күңел күбәләге ике ғәләм илаһиәтенә шәфәғәтле сәйәхәт итеп торған бит. Философия, экономия, физика, педагогика, психология фәндәре буйынса тәрән мәғлүмәт үҙ йөрәге китабында булған. Ниндәй генә фекер йөрөтмәйек, Тукай – бөтөн донъя даирәһендә иң шәрәфле шағир. Шағир – философ. Шағир – физик. Шағир – педагог. Шағир – психолог. Шиғриәт пәйғәмбәре. Тукайҙа – Байрон йәне. Ике милләттең илаһ ҡапҡаһынан осҡан ике изге сәмреғош рухы бергә килеп ҡушылғандай, Аллаһы Тәғәлә ике шағирҙың эстетик идеалын бер итеп иманлаштыра. Уның шулай икәнлеген Ер йөҙөндәге төрлө милләт халҡының Тукай бөйөклөгө хаҡында әйткән алтын фекере лә раҫлап тора. Мостай Кәрим әйткәнсә, башҡорт халҡының Тукайға булған кешелеклелек мөхәббәте айырыуса ҙур.

Әлеге кельт халҡы баҡсаһының ҡапҡаһы ғына түгел, ағасы ла тарихи сер һаҡлай икән. Был серлелек бик йыраҡ замандар заңы менән бәйле. Ул һаман дауам итә әле. Образлылыҡ, идея, эмоция өсөн Тукай һайлаған әйбер-есем-предметтар сере лә шулай. Башҡорт шағиры Салауат Әбүзәр Тукай шүрәлеһе тураһында яңы шиғыр яҙа. Шунан ике строфа:

*Эй, Шүрәле, Тукай шүрәлеһе,*
*Меҫкен хәлдә ҡалъан Шүрәле!*
*Беҙҙең хәл дә бик үк шәптән түгел,*
*Хәлебеҙҙе, туъан, күр әле.*

*Нәҫелебеҙ һинең нәҫел һымаҡ,*
*Үтә ышаныусан – тиле беҙ.*
*Һәм бер мәлде аъас ярыъына*
*Килеп керҙе ъәзиз телебеҙ.*

Тукайҙың «Шүрәле» әҫәре инглиз теленә лә тәржемә ителгән. Мәктәптә өйрәнелә. Ғәзиз телдең ағас ярығына килеп кереүе – милләт фажиғәһе. Күп милләттәр трагедияһы. Донъя, йәшәйеш, тормош тураһында Тукайса етди, тәрән, борослап уйланыу был. Тукайса, бер ғибәрә менән күп мәғәнә аңлатыу.

Тукай – 125 йәштә. Быйыл – Тукай йылы. Тукайҙың донъя даирәһендәге бөйөклөгөн мин һүҙ сәнғәте оҫтаһы булыуы яғынан асыҡларға тырыштым. Әгәр ғаләмдә Байон иң талантлы, иң ҡөҙрәтле, иң ғәййәр шағир булып иҫәпләнә икән, был уның һүҙ бәлзәмендәге гәүһәр орлоғон таба белеү оҫталығы менән бәйле. Тукайҙыҡы ла шулай. Бына ни өсөн мин Тукайҙы Байрондың шиғри күгенә килтереп баҫтырам. Һәр илаһилыҡтың сәбәбе бар. Сәбәпһеҙ ҡояш та ҡыҙҙырмай, айбарлы егеттең сибәр ҡыҙ артынан сапҡанылай, Ер ҙә секундына утыҙ саҡрым тиҙлек менән елдермәй. Йәшәү тәме – нәфис һүҙ сәнғәтенең рухи йәме. Халыҡҡа рухи тәм бирә алған Тукай – бәхетле!

**Суфиян ПОВАРИСОВ,**
**филология фәндәре докторы,**
**профессор, яҙыусы.**

# ТУҠАЙ ҺӘМ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

Үткән йыл бөтә төрки донъяһы Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы ТӨРКСОЙ тарафынан иғлан ителгән Әхмәтзәки Вәлиди йылын үткәрҙе. Былдай күләмле сара ойошманың тарихында тәү тапҡыр тормошҡа ашырылды. Быйыл иһә мәшһүр шағир Ғабдулла Туҡай йылы бара. Туҡай йылының иғлан ителеүе миңә ун йылдан ашыу элек “Ватандаш” журналында уҡыған мәғлүмәттәрҙе иҫемә төшөрҙө. 2000 йылдың март һанында Басир Мәһәҙиевтың “Ғабдулла Туҡайға туғандаш” исемле материалы “Ватандаш“ почтаһынан рубрикаһында баҫылып сыҡҡайны. Уны яңынан табып уҡып сыҡтым.

Бында Б. Мәһәҙиев 1947 йылда “Октябрь” (хәҙерге “Ағиҙел”) журналында атаҡлы педагог һәм ғалим Закир Шакировтың Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдә – башҡорт, уның атаһы Зиннәтулла ғәйнә башҡорто ырыуынан икәнен яҙыуын хәтерләй.

Бында ул шулай уҡ былтыр Өфө ҡалаһында йәшәүсе Гөлзифа Канафина инәйҙән яҙып алған ҡыҙыҡлы мәғлүмәтте килтерә. Гөлзифа инәй уға шуларҙы һөйләгән: “Беҙҙең фамилия Ҡәнәфиә ҡарттан килә. Хәҙерге Иглин районындағы Түбәнге Ләмәҙ ауылы кешеһе була. Беҙҙең туғандар һаман да шунда йәшәй. Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдә ана шул Ҡәнәфиә ҡарттар нәҫеленән. Беҙҙең Канафиндар Туҡайҙың туғаны булып сыға. Ана минең улым Наил Канафин... Ғабдулла Туҡайға бик оҡшаш төҫө менән. Хөкүмәтебеҙҙәге Миҙхәт Шакиров миңә атаһы яғынан да, әсәһе яғынан да туған. Атаһы ла, әсәһе лә беҙҙең яҡтың төп башҡорттары...”.

Басир Мәһәҙиевтың мәғлүмәте буйынса “Октябрь” журналындағы мәҡәләне эҙләй башланым. Телгә алынған мәҡәлә 1946 йылда Туҡайҙың юбилейы уңайы менән сығарылған, берләштерелгән 3-4-се һандарҙа табылды. Уның авторы Афзал Ҡудаш булып сыҡты. Был махсус номерҙа Туҡайҙың тормошон, ижадын, башҡорт теле һәм фольклоры менән бәйләнешен асҡан тикшеренеүҙәр һәм уға бағышланған башҡорт шиғырҙары бар. Бында шулай уҡ Закир Шакировтың Туҡай менән Ҡазанда осрашыуы хаҡында иҫтәлеге лә бирелгән. Әммә Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе һәм олатаһы Зиннәтулла хаҡындағы “Ғабдулла Туҡай биографияһындағы яңы моменттар исемле” мәҡәлә А.Ҡудаш тарафынан яҙылған ине. Был материалда Закир Шакиров ҡатнашлығындағы 1929 йылдың йәйендә Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте тарафынан Арғаяш кантонында тел һәм фольклор өйрәнеү экспедицияһының отчетына ла һылтанма эшләнгән. Ул отчет 1930 йылда “Белем” журналының 2-се һанында донъя күргән. Бында тәү тапҡыр Ғабдулла Туҡайҙың башҡорт тамырҙары булыуы телгә алына.




“Белем” журналы (1930, №2). Был журналда тәү тапҡыр Туҡайҙың әсәһе һәм олатаһы тураһында мәғлүмәт баҫыла.



52 Belem № 2

in təvlə Byre avьlьnda qorolqan. Bьnan hunьraq Qara bulaq' Tylək, Kylmək avьldarьnda vulьs idaralarь tөđөlgən.

Bьl tirələge başqorttar jer turahьnda yđ ara dav ьşa başlajđar, ьruqđar arahьnda qarqьş ььqaralar. Xөkymət tyrələre, zavьt xuҙalarь ulardь qotortop,— falan ьruq ьlijerđeŋ tөp xuҙahь, tөp asabahь, fələndər bьnan huŋ kilgəndər,— ulardьn kyp jergə ejə bulьrqa xaqtarь juq, tip, yslətep yđ—ara nizaqlaştьrьp, ьutlaştьrьp, aqtьqьnda juq nəmə bərəbərenə həttьrə bulqandar.

Өlkənerək ьruqdar yđđarenə straşinalar qujьp, ajьrьm vulьstar idaralare qorolqan.

Hunьraq qalqan vulьstar: Qara bulaq. Kylmək, Tylək avьldarьnda bulqan. Bьl vulьstarđa şul təbək tarixь өsөn qimmətle arxiftər bulha la, bөđ nej tiklem tьrьşьp eđlahək tə tapa almanьq. Byre vulьsь idarahь, 14nse jьlda janqan,bөtə arxif şunda bөtkən tejđər.

Bьl təbəktən boronqь zamandarđa jəştər qilem alьv өsөn xəđerge Tatarstandaqь Qorsa, Məckərə, Matəskə, Qьşqar, Usa өjəze Kəjnə, (Soltanaj mədrəsələrenə) barqandar. Şul mədrəsələrđə jađьlqan qul jađma kitaptar kyp osoranalar. Ulardьn kyberəge mantiq həm farsьj telendə jađьlqan kitaptar.

Hunьraq vaqьttarđa qьna bik əđ genə keşelər Qazan, Trujskiqa barqьlaqandar. Bьl təbəkteŋ yđenə, başqa jaqtarđaqь kevek өlkən məderəsələr bulmaqan. Osulь çədit, osulь qədim talaştarь vaqьtьnda, bьl təbək bөtөnnəj Qazan gubimahanan bьqьp qajtqan osulь qədimse, mantiqsь Qьşqarьj mullarь tə'hirendə bulqandar. Qaranqьlьq, ikkelek ojahь Miđejək avьlь, ul vaqьttarđa bьl tirəgə yđenen aqavь tə'hiren bik nьq jəjgən. Barь hunьraq, Qəşir, Harь, Şaqaj avьldarьnda osulь, çədit həm zimstьva məktəptəre asьlqan.

Bьl tirələ jөregən, zamanьndaqь ataqlь qurajsьlar, jьrsьlardь belevselər kyrenməj, tik Alabotь avьlьnda berəvđeŋ bəjettər, jьrđar tərtip itkənen həjlənelər, ləkin naqlap əlyselər bulmanь.

Tatar şaqire Q. Tuqajđьŋ əsəhe, Məmdydəneŋ atahь Zinnətulla menən hər vaqьt şiqьrđar, xattar jađьşьp torqan Xəkim isemle berəv bulqan. Zinnətulla şaqir bulqan. Ul jəş saqьnda uq Qəşir avьlьnda balalar uqьtьvsь bulьp, tөp Qəjnə ile (Qazamaqtь avьlь.) başqorto.

* * *

Bьl təbəktəge xalьqtarđьŋ həjləşev ajьrmalьqtarьna, atamalarđaqь başqalьqtarqa kilgəndə, bьnda ike jerle başqort, ber tatar şivəhe osoraj.

Bьl təbəktəge başqort şivələre, ədəbi başqort telenən, bigerək tə qьvaqan şivəhenən marfalagik jaqtan đur başqalьqtar kyrenməj. Kyplek jalqavđarь (lar—lər, dar—dər, tar—tər, đar—đər) tojoq (падежн. оконч.) və başqa quşьmtalar qьvaqan şivəhe menən ber tөrle. Həjləşev ajьrmalarь tik өndər, atamalar, ləqəttarđa kyrenə.

1. Ƀ—ڽ şivəhe. Bьl şivəneŋ tөp xөsysejəte qьvaqan şivəhendəge ədəbi başqort telenen tuqtarь janьravьqlь, tartьnqь đ—ɜ bulqan qьđ, jeđnə, əđnə Qьƅ, jeƅnə, əƅnə, kөƅ (kөđ) kevek.) Əgər ike hudьnqь өndər arahьna kilhə qьđьl, bađьv, jađə, yđem, ađьş, təđerə kevek bulьp yđgərməj kilələr.

1929 йылғы тел һәм фольклор отчетының “Белем” журналында баҫылған бите. Бында Туҡайҙың әсәһе һәм олатаһы хаҡында яҙылған.

Был мәсьәләгә асыҡлыҡ килтергән Ҡудаштың мәҡәләһенә мөрәжәғәт итәйек:

“Уҡыусылар массаһына билдәле булғанынса, Ғ. Туҡай үҙенең поэтик автобиографияһы – “Иҫемдә ҡалғандар”ҙың башында атаһы һәм олатаһы тураһында ҡайһы бер мәғлүмәттәр яҙа һәм шуның буйынса беҙ шағирҙың атаһы яғынан өс быуынға һуҙылған шәжәрәһен беләбеҙ. “Минең атайым Мөхәмәтғариф, – тип яҙа Туҡай, – Ҡушлауыс ҡәрйәһендә Мөхәмәтғалим исемле мулланың улы булып, 14-15 йәштәрендә Ҡышҡар мәҙрәсәһенә китеп, унда, хәтме көтөп (уҡып бөтөрөп) ҡылырға ғәҙәттә нисә сәнә (йыл) кәрәк булһа, шул тиклем тороп, ҡарт атаһы тере ваҡытта уҡ ауылыбыҙ Ҡушлауысҡа ҡайтып, мулла булмыштыр. Мулла булғас та өйләндеке бер йәмәғәте илә бер нисә генә йыл торғас, йәмәғәте вафат булып, бер ир һәм бер ҡыҙ балаһы ҡалмыштыр. Бынан һуң атам, икенсе тапҡыр өйләнеүе улараҡ, Өсиле ҡәрйәһе Зиннәтулла хәҙрәттең Мәмдүдә исемле ҡыҙын (минең әсәмде) алмыштыр. Әсәйем илә бер йыл ярым тиклем торғас, беренсе бала буларак мин донъяға килгәнмен”.

“Иҫемдә ҡалғандар”ҙа Ғ. Туҡай үҙенең әсәһенең Мәмдүдә, бабаһының Зиннәтулла исемле булыуы һәм уның Өсиле ауылында күп балалы бер мулла икәнлеге тураһында ла әйтә. Ысынлап та, Туҡайҙың был бабаһында йәшәгән йылдары – шағирҙың балалыҡ осоронда иң ауыр, иң ҡыҙғаныс тормошта




1946 йылда Туҡайға бағышланған “Октябрь” (хәҙерге “Ағиҙел”) журналының 3-4-се һандары. Был һанда А. Ҡудаштың “Ғабдулла Туҡай биографияһында яңы моменттар” исемле мәҡәләһе донъя күрә.



Ilde — өjrәnev

1929 nsь jьldьŋ jәjendә „Başqortostandь-өjrәnev jәmƣejәte tarafьnan Arƣajaş kantunьnda tel hәm falklura вajqavđarь jahav өsәn jeвәrelgәn әtrәtteŋ qьъqasa xisaвь.

„Başqortostandь өjrәnev jәmƣәjәte" uđƣan 1929 nsь jьl, ijjyl ajьnda Arƣajaş kantunьnda jәşәgәn Başqort hәm Tatarđarđьn hejlәşevđәrendәge ajьrmьqtarđь, fәqәt—atamalarđa вulƣan вaşqalьqtarđь өjrәnev hәm ƣөmymәn falklura, xalьq әdәвejәtenә qaraƣan matirialdarđь tikşerep jьjnav өsөn ike keşenәn genә ƣьвarat (Zakir Şakirьf hәm Barьj Almitьf) keskәj genә вer әtrәt teđөp jeвәrgәjne.

Әtrәt Arƣajaşqa вarƣas, kantundь jaqьndan вelә torƣan undaqь iptaştar menәn вergә taqь la, вьl turala kәŋәşep ytelde. Undaqь iptaştar әtrәtkә fajđalь kәŋәştәr. Eşlәgәn vaqta kilep tьvƣan tөrlө şarttar, xәldәrgә qarap marşauttь вer ađ ydgәrtergә lә tura kilgәlәne. Aldan әjtep qujarƣa kәrәkki, вeđđeŋ eşeвeđ вik taran вajqav, tikşerev, tөpsөvđәrđәn вigerәk, kyđәtevđәr qapşavđar, kilәsәktәge өlkәnerәk tikşerenevđәrgә huqmaq halьvđan ƣьвarat вuldь. Xalqtaqь matirialdarđьn kyplege вajlьqь, вeđ tikşerә torƣan noqtanan (tel hәm falklura jaqьnan) вьqa saqlьm вьl kantundьŋ hisвer өjrәnelmәve, oşondaj tәnвihte jaharqa tejeş taptьra. Bajqav eştәren alьp вarьv өsөn kәrәkle әjвerđәrđeŋ jeteşheđlege hәm vaqьttьŋ sikle вulьvь la ihәpkә alьnьrƣa tejeşle.

Әtrәt 1 nse ijjyldәn 15nse avƣusqa tiklem вarlьqь aj jarьm samahь eşlәne. Eş matiriađarь, jьjnaƣan matiraldarđь tәrtipkә kilterev, eşlәnev өђtөndә. Ular eşlәnep вөtkәndәn huŋ iƣlan itelerđәr.

Әtrәtteŋ eş tөвәge: 1— kantundьŋ tөnjaq koнвatьş jaqьnan qara Bulaq vulьsьnan tyвәndәge avьldar: 1) Bulat; 2) Tidәş; 3) Hatlьq; 4) Ƣәlekәj; 5) Alaвuqadь; 6) Kirвәste; 7) Kylmәk; 8) Qunaqвaj; 9) Soltanaj; 10) Biktimer; 11) Julđaş; 12) Manatav: 13) Serek kylmәk (Şьƣaj); 14) Qara Bulaq avьldarь II— arƣajaş vulьsьnan вьna oşolar: 15) Ajaђqol; 16) Nәzir; 17) Bәzekәj; 18) Hatlьq; 19) Jaŋь Hyвel; 20) Iђke Hyвel; 21) Etвajsete. III nse Qonşaq vulьsunьŋ kөnвatьş jaqьnan вьna oşo avьldar) 22) Jaŋь Isвaj; 23) Harь; 24) Saвaqtь; 25) Әmin; 26) Syвel; 27) Arьjkva—Qolomвәt; 28) Qәnzәlәr; 29) Tәgeş; IV Bөrө vulьsьnьŋ kөnвatьş jaqьnan: 30) Xәlit; 31) Qoвaqьş; 32) Bajazit, 33) Ƣәşir; 34) Qomƣol; 35) Bөrө; 36) Tylәk; 37) Iltende; 38) Mansur.

Bьl kantunda jәşәj torƣan Başqorttar ьrьv—đat jaqььan sьвar, tөrlө вulьvđarь menәn ajьrьm вer mөhim urьn ala. Beđđeŋ alƣan mәƣlymәteвeđgә qaraƣanda, unda вarlьqь 16—17 (вөtә kantun tikşerelgәs вәlki artьqьraqta вulьr) xәtlem Başqort ьrьvđarьnьŋ kiђәktәre вar. Beđ eşlәgәn tөвәktәge Başqorttar tuqьđ ьrьvđan tora.

1929 йылдың йәйендә Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте тарафынан Арғаяш кантонында тел һәм фольклорҙы байҡауҙар яһау өсөн ебәрелгән отрядтың ҡыҫҡаса хисабы.

үткәргән йылдары. Зиннәтулла ғаиләһендәге ярлылыҡты хәтерләп, Туҡай һуңынан: “Был ғаилә эсендәге ярлылыҡ шул дәрәжәгә еткән булырға кәрәк ки, мин хәҙер ҙә булһа бабайҙың күрше байыраҡ ауылдарҙан икмәк һыныҡтары теләнеп алып ҡайтҡанын иҫемдә тотам”, – тип яҙҙы.

Туҡайҙың ата-әсәһе, бабалары тураһында юғарыла килтерелгән мәғлүмәттәрҙән башҡа материалдар юҡ тип әйтерлек. Шағирҙың тормошон һәм ижадын өйрәнеүсе-тикшереүсе әҙәбиәт тарихсылары, тәнҡитселәр ҙә, шулай уҡ уның тураһында иҫтәлек яҙыусылар ҙа, Туҡайҙың балалыҡ йылдарын яҡтыртҡанда, күп ваҡытта шағирҙың үҙе яҙып ҡалдырған шул юғарыла әйтелгән "Иҫемдә ҡалғандар” тигән поэтик автобиографияһына таяна. Ләкин һуңғы йылдарҙағы ҡайһы бер эҙләнеүҙәр, тикшеренеүҙәр Ғ. Туҡай биографияһына өҫтәлә һәм бөйөк шағирҙың тормош юлын байытыуға ярҙам итә торған айырым моменттарҙы килтереп сығарҙы.

Ғабдулла Туҡайҙың әсәһенең тулы исеме Бибимәмдүдә һәм уның атаһы (шағирҙың бабаһы) Зиннәтулла Ҡазан губернаһы кешеһе түгел һәм ул Өсиләлә тыумаған. Уның тыуған урыны – элекке Пермь губернаһы Оса өйәҙе, Ғәйнә иле, Ҡожамаҡты ауылы. Милләте яғынан Зиннәтулла башҡорт. Ул йәш сағында Ҡауам ауылында (илендә) уҡыған һәм шунан һуң хәҙерге Силәбе

> Tatar şaƣire Ƣ. Tuqajđьŋ əsəhe, Məmdydəneŋ atahь Zinnətulla menən hər vaqьt şiƣьrđar, xattar jađьşьp torƣan Xəkim isemle ʙerəv ʙulƣan. Zinnə-tulla şaƣir ʙulƣan. Ul jəş saƣьnda uq Ƣəşir avьlьnda ʙalalar uqьtьvsь ʙulьp, təp Ƣəjnə ile (Qazamaqtь avьl.) ʙaşqorto.

*1929 йылғы экспедиция отчетынан Тукай тураһында яҙылған өлөш.*

өлкәһе Ҡоншаҡ районы (руссаһы Аширово) ауылында балалар уҡытҡан. Йәш сағында Зиннәтулла шиғырҙар яҙыу менән шөғөлләнгән һәм балалар уҡытҡан йылдарында күршеләге Тәхәллим исемле башҡорт ауылындағы Хәким хәлфә менән шиғырҙар яҙышып торған. “Ғ. Тукайҙың әсәһе Мәмдүдәнең атаһы Зиннәтулла менән бер ваҡыт шиғырҙар, хаттар яҙышып торған берәү булған. Зиннәтулла шағир булған. Ул йәш сағында уҡ Ғәшир ауылында балалар уҡытыусыһы булып, төп Ғәйнә иле Ҡожамаҡты башҡорто” (“Белем” журналы, 1930 йыл, № 2, 52-се бит. Доцент Закир Шакиров мәҡәләһенән).

Зиннәтулланың тыуған иле, шиғырҙар яҙыуы һәм милләте яғынан башҡорт булыуы тураһында әлегә тиклем бер ерҙә лә баҫылмаған икенсе материал тағы ла асығыраҡ һөйләй. Ошо юлдарҙы яҙыусыға (А. Ҡудаш – **Ә. С.**) 1940 йылда Ғ. Тукайҙың апаһы Сажидә Зиннәтуллина менән хат аша элемтә тотоу мөмкинлеге тыуҙы.

Тукайҙың “Иҫемдә ҡалғандар”ҙа Сажидәне саф күңелдән, ҙур мөхәббәт менән “ап-аҡ саф бер фәрештә” тип атауы уҡыусыларға билдәле. Бына шағирҙың күңелендә фәрештә рәүешендә бик нык ҡалған Сажидә апай Зиннәтуллина үҙенең 1940 йылдың 5 июнендә яҙған хатында түбәндәгеләрҙе әйтә: “Минең атайым башҡорт. Ҡожамаҡты тигән илдән сығып, Ҡауам илендә уҡыған. Ике егет булғандар. Береһе үлгән. Уныһы Щадрин өйәҙенеке. Шунан һуң атайым уҡып сығып, Ҡушлауысҡа күскән. Атайым тағы Ҡушлауыстан Өсилегә күскән. Унан Өсилегә ҡайтҡан ваҡытта Мәмдүдә апай ике йәштәге бала булған. Үҫеп етеп, Ҡушлауысҡа кейәүгә сыҡҡан. Шунда Ғабдулла тыуып, еҙнәй вафат булып, Мәмдүдә апай Өсилегә ҡайтҡан. Шунан һуң бер аҙҙан Сасна тигән ауылға кейәүгә барған. Унда күп тора алмаған, вафат булған, атайым күрмәй ҡалған; ара алыҫ булған. Тиҙ генә хәбәр килеп етә алмаған, ауырыуы ла тиҙ булған. Атайым барһа, Мәмдүдә апай вафат булған. Өс көн ҡайғы йорто булған. Атайым һушһыҙланып торған. Был арала Ғабдулланы алып ҡайтып керҙе. Беҙҙең йортта тағы мәтам. Атайым Мәмдүдә апайҙы һағынып, илай-илай ошо шиғырҙарҙы әйтә ине:

*Мәүлүдедер (тыуған ере) Ҡушлауыста, мәүте (үлгән ере) Саснала.*
*Дәүре мәшхәрҙә гинәйәт әйләһен хаҡ зөлжәләл (Үлгәс Алла ярҙам итһен).*
*Исеме Бибимәмдүдәлер гаҡлы ирде гаян (асыҡ аҡыллы ине).*
*Тыңлар ине гишҡи илә вәгәз, мәсаил вә мәган (яуап һәм әһәмиәт менән).*
*Һүҙләгәндә күҙҙән йәштәремеҙ ула хун (була ҡан).*
*Уйлаганда хәсрәтенән аҡылыма килә женун (аҡылдан яҙам, мәжнүнләнәм).*
*Ни сәбәптер, әй, Хоҙай, ризыгы аҙ, гүмре тамам.*
*Аҡты йәшем, ни ҡылайым, әмере хәй илә янам (Алла әмере менән йоҡоһоҙланам).*

Инде атайымдың ата-әсәһенән, туғандарынан бер үҙе айырылып тороуына моңланып үҙенә әйткән шиғырҙарын яҙам:

*Фәкирем Зиннәтулла булды намым (исемем).*
*Уса иле ине яә-мәкамым (торған урыным).*
*Тыуған илем Ҡожамаҡты ҡәрйәһелер,*
*Пермь табығы (губернаһы), Уса мозафалыр (өйәҙе).*
*Зәнелбәшәр ине нам атамыҙ,*
*Әмирхан ибне Әмирҙер бабамыҙ.*
*Моҡасат дары ғәрбәттә моһажир (яҙмыш буйынса үҙ иленән айырылған)*
*Мөжәнәт бәйтельәжзәндә мосафир (тереклегем яза йортондағы юлсы кеүек).*
*Йәшем һәфте ду сал (етмеш ике) бәлки зияда (күберәк).*
*Сөьәхаззымдан (өлөшөм яман) һәм бәхетем сейах (ара).*

Тимәк, Зиннәтулланың үҙе тураһындағы был шиғырынан беҙ Ғ. Туҡайҙың әсә яғынан биш быуынға һуҙылған шәжәрәһен билдәләй алабыҙ. Зиннәтулланың атаһы Зәйнелбәшәр, уның атаһы Әмирхан, уның атаһы Әмир.

Юғарыла күсерелгән хатта тағы ла өҫтәмә әһәмиәтле моменттар бар. Туҡайҙың әсәһе Мәмдүдә, үҙенең атаһы кеүек үк, йырҙар сығарырға, шиғырҙар әйтергә оҫта, йәғни унда ла бер ни тиклем поэтик талант булған булырға тейеш. Сажидә апайҙың яҙыуына ҡарағанда, ире үлгәс, Мәмдүдә Туҡайҙы Ҡушлауыста ҡалдырып, башта Өсилегә, атаһы йортона, ҡайтҡан һәм сит ауылда тороп ҡалған балаһы – кескәй генә Туҡай тураһында һағынып йырҙар йырлаған, шиғырҙар әйткән. Был турала Сажидә апайҙың хатында беҙ түбәндәгеләрҙе уҡыйбыҙ:

“Мәмдүдә апайҙың, еҙнәй вафат булғас, Ғабдулланы Ҡушлауыста ҡалдырып ҡайтҡас йырлаған йырҙарын хәтерләйем.

*Өй турында баҡсала бер һандуғас һайрай.*
*Ниңә һайрай был һандуғас ҡағынып?*
*Шуны һайрай:*
*Минең илағанымды белеп – баламды һағынып.*
*Ниңә һайрай был һандуғас, һайрай үҫеп еткәнде,*
*Шуны һайрай:*
*Мине күреп, баламдан айырылып киткәнде.*
*Ниңә һайрай был һандуғас кис менән?*
*Шуны һайрай:*
*Күрҙе бәнем ике күҙҙе йәш менән,*
*Ниңә һайрай был һандуғас һыҙланып,*
*Шуны һайрай:*
*Минең илағанды күреп, баламды ҡыҙғанып”.*

Сажидә апайҙың хатында, юғарыла күсерелгән юлдарҙың аҙағында, Мәмдүдәнең үлеү датаһы тураһында ла әйтелгән: “Мәмдүдә апайҙың тыуған йылын тәғәйен белә алмайым. Вафат булғанын уйлап, тура килә – 1890 йылда, ғинуарҙың 18 көнөндә”.

Һис шикһеҙ, Сажидә апайҙың хатында килтерелгән фактар (Зиннәтулланың шағир булыуы һәм уның Ҡожамаҡты башҡорто икәнлеге), улар күп йылдар үтеү менән һуңында хәтерҙән яҙылһалар ҙа, халыҡ шағиры Ғ. Туҡайҙың биографияһын тулыландырыу һәм байытыуға ярҙам итәсәктәр. Киләсәктә Туҡайҙың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеүселәр был моменттарға, әлбиттә, әһәмиәт бирерҙәр”.

А.Ҡудаштың был мәҡәләһе Ғабдулла Туҡайҙың ижадына башҡа күҙлектән дә ҡарарға кәрәк икәнде күрһәтә. Билдәле булыуынса, башланғыс кластарҙан уҡ беҙ уның шиғырҙарын, автобиографияһын өйрәнәбеҙ. Тик унда юғарыла килтерелгән мәҡәләнең мәғлүмәттәре ҡулланылмай. Әҙәбиәт тарихында ла был моменттар сағылырға тейештер. Мәҫәлән, Өфөгә килеүе, Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафури менән осрашыуы, башҡорт фольклоры, халыҡ йырҙары менән ҡыҙыҡһыныуы, уларҙы яҙып алыуы билдәле. Ғ.Туҡайҙың ижады буйынса 1917 йылға тиклем үк танылған башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлиди "Туҡайҙың "Шүрәле"гә ҡарата тикшеренеү" исемле мәҡәлә яҙа. Ә Японияла Силәбе башҡорттарынан мәшһүр ижтимағи эшмәкәр Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев етәкселегендә ҡоролған тәүге мосолман нәшриәте "Матбағаи Исламиә"лә Туҡайҙың шиғырҙары баҫылыуы ла – мөһим ваҡиға. 1911 йылда Ғ. Туҡай тарафынан баҫтырылған "Халыҡ әҙәбиәте" әҫәренең йоғонтоһо аҫтында Әхмәтзәки Вәлиди "Йырҙарыбыҙ хаҡында"исемле төрки шиғыр ҡоролошо буйынса тикшеренеү яһай. Бында килтерелгән фекерҙәр буйынса, XX быуат аҙағында мәшһүр тюркологтар махсус монографиялар ҙа баҫтырҙы. Бында Вәлиди татар теленең төрки телдәр төркөмөнөң береһе булыуына иғтибарҙы йәлеп итә. Ҡайһы ваҡытта быны бөгөнгө ғалимдар онотоп ебәрә. Икенсенән, әҙәбиәт тарихынан билдәле булыуынса, XX быуат башында ижад иткән ҡайһы бер башҡорт уҡымышлылары үҙ телдәрендә материал баҫтырырға теләгән ваҡыттарында нәшерҙәрҙең ҡаршылыҡтарына осрауҙары ла мәғлүм. Шулай уҡ Вәлидиҙең тарих китабының исеме үҙгәртелеп баҫылған. Былар барыһы ла тарихта аныҡ яҡтыртылырға тейеш. Татар милли буржуазияһының татарлыҡ фекере башҡорт яҙыусыларына, халҡына эшләгән йоғонтоһо күҙлегенән ҡайһы бер моменттарҙы, шулай уҡ Ғабдулла Туҡайҙың ижадын, тормошон баһаларға мөмкин.

Башҡорт әҙәбиәте тарихында революцияға тиклемге әҙиптәрҙең эшмәкәрлеге һис шикһеҙ башҡорт совет әҙәбиәте концепцияһына, тәүге Башҡортостан яҙыусылар съезының әҙәбиәт тарихын баһалауына ла бәйле.

Юғарыла килтерелгән мәғлүмәттәр бик мөһим. Сөнки ҡайһы бер ваҡыт етди архив йә яҙыулы мәғлүмәт булмағанда, бәғзе бер яҙыусы йә шағирҙың уртаҡ ителеүен беләбеҙ. Закир Шакиров һәм Афзал Ҡудаштың мәҡәләләре, улар килтергән мәғлүмәттәрҙе уҡығандан һуң, шул уҡ критерийҙарҙан сығып, Туҡайҙың да бындай шағирҙар рәтенә инергә хаҡы бар, тип әйтеп була. Был йүнәлештәге тикшеренеүҙәр тағы яңы асыштар, тарихи сығанаҡтар килтерәсәге шөбһәһеҙ.

**Әхәт СӘЛИХОВ.**

## ТАЛАНТ – ТӘҮӘККӘЛЛЕК УЛ

*(Азат Абдуллинға — 80 йәш)*

«Ситтә йөрөгән тарығыр, тыуған илен һағыныр»,— ти башҡорт мәҡәле. Ысынлап та, ниндәй генә сәбәп менән ҡырҙа көн күрмә, аҙ ғына ваҡыт үттеме, ғәзиз йәнтөйәгең исҡә төшә башлай. Әгәр ҙә шул мәлдә берәй таныш осраһа!.. Ниндәйҙер сәләм алһаң йә һөйөнөслө хәбәр ишетһәң?

Факультетыбыҙҙан былтыр йәйге ялдарын Америка Ҡушма Штаттарында эшләп үткәргән бер төркөм башҡорт һәм рус студенттары ҡала урамдарына йәбештерелгән афишаларҙы күреп шаҡ ҡата. «Азат Абдуллиндың «Раббым баҡсаһы» пьесаһы буйынса тамаша» тип уҡығас, эй ҡыуандыҡ, Башҡортостан өсөн ғорурлыҡтан хатта күҙгә йәш тығылды», — тип әҫәрләнеп һөйләне улар ҡайтҡас.

Яҙмыш ҡушыуы буйынса сит ярҙарҙа һоҡланғыс талантын балҡытҡан балет бейеүсеһе Рудольф Нуриевты художестволы һынландырыу драматургҡа ҡыйын да булмағандыр төҫлө. Ни генә тимә, Азат Абдуллин үҙе лә бына дүрт тиҫтә йылдан ашыу тыуған яҡтарынан шаҡтай алыҫта — Мәскәү ҡалаһында йәшәй. 1949—1953 йылдарҙа белем алған Башҡорт дәүләт педагогия институты (хәҙерге БДУ) дипломы менән М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институты аспирантураһына ебәрелә, уны тамамлап, бер килке беҙҙең университетта уҡытҡас, баш ҡалала бөтөнләйгә төпләнә.

Ҡыҙыҡ, Азат Абдуллиндың «Онотма мине, Ҡояш!» исемле тәүге романтик драмаһының да төп геройы — үҙ теләге буйынса һөйөклө Мәскәүенән сит ергә—Көньяҡ Башҡортостан хужалыҡтарын яңыса, ғилми нигеҙгә ҡорорға ебәрелгән талантлы рус шағиры Сергей Чекмарев бит.

Тыуып үҫкән, йәне ереккән еренән теләпме, теләмәйме айырылған һәр кем башҡа мөхиткә барып юлыға. Тәүге мәлдәрҙә ят бауыр хәлендә ҡалған кеше характер ныҡлығы, ҡараштарының тотороҡлолоғо, маҡсатлы фиҙакәр хеҙмәте менән генә юғалып ҡалмай, үҙ асылын раҫлай ала. Азат Абдуллиндың очерктары һәм повестары, драмалары ла тап шундай көслө ихтыярлы, тәүәккәл,

ныҡышмал заттарға юлландырыла. Уның «Йылҡы көтөүсеһе», «Яңғырап торған ялан», «Аҡтан-аҡ һөт», «Ҡыҙыл ысыҡ» һәм башҡа әҫәрҙәрендә публицистик сәм һәм документаль теүәллек менән замандаштар — оло шәхестәр, ғәҙәти хеҙмәт эйәләре һүрәтләнә.

Ә инде «Ун өсөнсө председатель» — «Һуңғы уҙаман» дилогияһының театраль яҙмышы, уйлауымса, үҙе айырым романда хикәйәләнерлек драма ул. СССР-ҙың һәм 35 илдең йөҙҙәрсә сәхнәһендә уйналған был драмала осорҙоң үтә актуаль мәсьәләре — ер кешеһе һәм власть, дәүләт сәйәсәте һәм ябай граждан араһындағы ҡырҡыу мөнәсәбәттәр сағылыш таба. Ил тарихында ундай хәлдең булғаны юҡ: спектаклдән һуң СССР һәм РСФСР Юғары судтары, Юстиция министрлыҡтары махсус кәңәшмәләр үткәрә, ҡаты бәхәстәр һөҙөмтәһендә конституцион закондарға ғәмәли үҙгәрештәр индерелә. Совет заманы тарихҡа күсеп, колхоздар тарҡалһа ла, әҫәр күтәргән проблемалар хәл ителгән, тип әйтергә ярамай. Мәғлүм ки, ер кешеләре яҙмышы һаман асыҡланмаған: һаман ҡатмарлы һәм көсөргәнешле эҙләнеүҙәр, хөкүмәт һәм дәүләт сәйәсәтенең туҡтауһыҙ реформалары ауыл хужалығының көрсөктән сығыуына булышлыҡ итмәй. Сәғәҙиев кеүек аҡыллы, инициативалы эшмәкәрҙәргә хәҙер юлдар шар асыҡ тик, ҡыҙғаныс ҡаршы, уларҙың күп түгел икәнлеге лә күренә. Табыш ала белеүселәр — хәтһеҙ, әммә үҙ тармағы, хеҙмәттәштәре өсөн яуаплылыҡ тойоусылар, милләте, халҡы, иле-йорто өсөн янып-көйөүсе рухлы уҙамандар һирәк. Ҡайһы ғына өлкәлә булмаһын, дөйөм эште ойоштора һәм етәкләй белеү ҙә — ҙур һәләт бит. «Беҙҙә талантты отош һәм уңыш менән үлсәргә өйрәнелгән, — ти киң танылған публицист, драматург һәм прозаик, „Почет билдәһе" ордены кавалеры Азат Абдуллин, — ә кешенең талант һәм выждан кеүек сифаттары — һәр саҡ рухи ирек һәм ҡыйыулыҡ ул». Ошо һынамышты шәхсән үҙенә ҡарата ла йүнәлтергә мөмкин.

Телефон-адрес йә библиографик белешмәләрҙең ҡайһыһын ғына ҡулға алһаң да, Башҡортостан яҙыусылары исемлеге Азат Абдуллиндан башлана. Осраҡлы хәлме, түгелме, мәгәр ҡыйыу һәм тәрән философик ҡарашлы әҙип ҡәләме милли мәҙәниәтебеҙҙе киң даирәләрҙә лә танытырлыҡ көс-ҡеүәте барлығын раҫлай.

Азат Абдуллин — ижадта ирекле һәм ҡыйыу, тос фекерле әҙип. Ҡотло булһын уның шөһрәтле юбилейы!

**Зәйтүнә ШӘРИПОВА,**
**БДУ профессоры.**



**Тамара СӘЙФУЛЛИНА**

## *Моңло ҡурай*

*Алыҫ сәфәрҙәрҙән елеп ҡайтам*
*Ишетергә ҡурай моңдарын.*
*«Азамат»ты йәнә бер тыңлаһам,*
*Таралырҙар моңһоу уйҙарым.*

*Әллә ерҙән, әллә инде күктән*
*Илаһи моң, һағыш ағыла.*
*Әсир итеп Йыһан киңлектәрен,*
*Йөрәк-зиһендәргә ағыла.*

*Дәртләндереп, сихрез илһам биреп,*
*Алға әйҙәй ҡурай йыр булып.*
*Ябай ғына ете тажлы ҡурай –*
*Башҡортостаныбыҙ символы.*

## *Яҡтылыҡ йырсыһы*

Зәйнәб Биишева иҫтәлегенә

*Илап тыуһаң да һин, йырлап үҫтең,*
*Йырлап йәшәнең һин ғүмергә.*
*Тормош юлдарыңды барлағанда*
*Моңһоу бер ҡыл сыңлай күңелдә.*

---

*Тамара Сәйфуллина Мәсетле районының Ләмәҙтамаҡ ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай, Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы Президиумы аппаратында эшләй, Өфөләге 2-се педагогия колледжында уҡыта. БР-ҙың мәғариф отличнигы.*

*Ғүмер буйы янып йәшәнең һин,*
*Әйҙәнең гел беҙҙе яҡшыға.*
*Ут-ялҡындар үтеп,*
*Даръя кисеп,*
*Гел үрләнең алға, яҡтыға.*

*Һин ултыртҡан миләш шаулап үҫә,*
*Емештәре ҡышҡа бирешмәҫ.*
*Йырҙарыңды һинең йырлаусылар*
*Яуызлыҡтар менән килешмәҫ.*

*Халҡың менән гелән бергә булдың,*
*Ҡарап барҙың халҡың күҙенә.*
*Бар ижадың – изге мираҫ беҙгә,*
*Оло һәйкәл бөгөн – үҙеңә.*

## Беҙҙең атай

*Беҙҙең атай изге йәнле булған,*
*Тыуған илен өҙөлөп яратҡан.*
*Һыҙҙырып та баян ул уйнаһа,*
*Ғәм-халыҡты үҙенә ҡаратҡан.*

*Беҙҙең атай нескә хисле булған,*
*Тыуған ерем тиеп көйгән ул.*
*Ауылдағы сибәр – әсәйемде*
*Донъяһынан артыҡ һөйгән ул.*

*Яу ҡырында атай башын һалған,*
*Күрмәгән ул тыуыр ҡыҙын да.*
*Атайыбыҙ әммә һәр саҡ иҫтә,*
*Йөрәгебеҙ генә ҡырында.*

*Беҙ атайһыҙ үҫтек ике бала,*
*Ә тиҫтерҙәр ине атайлы.*
*Бәлки, бер саҡ ҡайтыр әле, тиеп*
*Беҙ атайҙы көтөп ҡартайҙыҡ.*

## Һин икән

*Хушлашмай тор, йәнем,*
*Хушлашмай тор...*
*Нурлы йөҙөң күреп туйманым.*
*Йондоҙҙарҙы һанап төн үткәрҙек,*
*Төндөң үткәнен дә тойманым.*

*Хушлашмай тор, йәнем,*
*Хушлашмай тор!*
*Күҙҙәреңдән нурҙар йыяйым.*
*Ғашиҡтар бит сәғәт һанамайҙар,*
*Таңдар атҡансы бер торайым.*

*Күрсе, йондоҙҙар ҙа күҙ ҡыҫалар,*
*Уларҙың да йәне бар микән?*
*Йондоҙ булып яҡтырт юлдарымды,*
*Минең өсөн йондоҙ – һин икән.*

## *Эй, Хоҙайым...*

*Һин һаман да шундай сибәр, тиһең,*
*Сибәрлектәр инде самалы.*
*Үҙ мәлдәре етеп, өҙөлөп төшһә,*
*Кире элеп булмай алманы.*

*Сабырлыҡтар ғына бирсе, Хоҙай,*
*Сабыр ҡанаттарын һындырма.*
*Яңғыҙлыҡтан ауыр мәлдәрем юҡ,*
*Яңғыҙымды ғына ҡалдырма.*

*Эй, Хоҙайым!*
*Бирсе бәхет ҡошо:*
*Бәхет ҡошом урап осмаһын.*
*Һөймәгәндәр генә һөйкәлмәһен,*
*Һөймәгәндәр генә ҡосмаһын!*

---

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА**

## *Иман булһа, ил йәшәр*

*Ярып ярҙы яҙғы йылға,*
*Йәйелде бар яланға.*
*Ярҙан сыҡҡан күләүектәр*
*Кибеп осто һауаға.*

*Динен тотҡан бабаларым,*
*Милләт булып ил тотҡан.*
*Диндән яҙмаһын балалар –*
*Шулар тиеп ут йотам.*

## *Тура һүҙ*

*Аҡыллының һүҙе киҫкен тура*
*Әсе хәҡиҡәттән тыуғанға.*
*Ә ялағайҙыҡы балдай татлы,*
*Иблис юлын көн-төн ҡыуғанға.*

## *Өҙөлмәһен фатихалар*

*Күҙ нурҙарым менән нағышланым,*
*Изге теләк – шәлем беҙгә.*
*Күңелеңдә ташһа һағыштарың,*
*Иңеңә һал – әсәң бүләге.*

*Сит-ят яҡта һағыш әсе, беләм.*
*Һаҡлар һине доға – теләгем.*

*Төштәремә инһәң, хәйер бирәм, –*
*Һағыштарың һиҙә йөрәгем.*

*Шәл иҫкерер, биҙәк уңыр бер саҡ,*
*Һин үҙеңсә шәлдәр бәйләрһең.*
*Тормош шулай ҡабатлана һәр саҡ,*
*Әсәң хәлкәйҙәрен шәйләрһең.*

*Йәшлек һағыштары икенсерәк,*
*Алда әле барса өлөштәр.*
*Ҡартлыҡ кисереше башҡасараҡ, –*
*Берәм-берәм һүнә өмөттәр.*

*Ҡыҙҙарыңа шәлдәр бәйлә, ҡыҙым,*
*Һал биҙәген изге нағыштан.*
*Өҙөлмәһен ара доғаларҙан,*
*Фатихалар дауа һағыштан.*

*Ҡыҙҙарыңа шәлдәр бәйлә, ҡыҙым.*

**Мәләүез ҡалаһы.**

---

**Гөлсөм ВӘЛИУЛЛИНА**

## Балама һүҙем

*Бәхет башы – намыҫ, балам,*
*Намыҫыңдан айырмаһын.*
*Талпынып осор сағыңда*
*Ҡанаттарың ҡайырмаһын.*

*Һис йәлләмә хеҙмәтеңде,*
*Эшләгәндән кеше үлмәй.*
*Әсә рәхмәтен алмаһа,*
*Кеше һис тә рәхәт күрмәй.*

*Кешеләргә ипле бул һин,*
*Булһын алсаҡ, нурлы йөҙөң.*
*Атҡан уҡтай ҡаҙалмаһын*
*Йөҙгә бәреп әйткән һүҙең.*

## Ни булды?

*Был ни гәжәп, был ни хикмәт,*
*Был донъяға ни булды?*
*Ут күршеләр хәл белешмәй,*
*Ата танымай улды.*

*Был донъяға ниҙәр булды?*
*Ғәйбәт менән ил тулды.*
*Алдыҡ менән күҙ быуылды,*
*Томан ҡаплаған юлды.*

**Дәүләкән районы, Мерәҫ ауылы.**

---

**Хажи ӘХМӘТЙӘНОВ**

## *Байлыҡ*

*Бала саҡтан хыялландым:*
*Байып булмаҫмы икән?*
*Аҡса тултырған ҡапсыҡҡа*
*Абынмаҫмынмы икән?*

*Ғүмер үтте һиҙелмәйсә,*
*Тәки байып булманы.*
*Аҡсаһы тулы ҡапсыҡҡа*
*Мин, фәҡир, юлыҡманым...*

*Нужа тағы баҫты, тиеп*
*Ултырғанда моңайып,*
*Оло ҡыҙым улы менән*
*Килеп инде йылмайып.*

*Ҡотлайбыҙ, ти, байрам менән,*
*Иҫәнлек һиңә, һаулыҡ,*
*Оҙаҡ йәшә ҡыуандырып,*
*Һин үҙең беҙгә байлыҡ!*

*Шунда ғына иҫкә төштө:*
*Минең тыуған көн икән.*
*Ах, хәйерһеҙ, һин килмәһәң,*
*Белмәй ҡалаһым икән...*

*Ул да булмай, ҡыҙҙарымдың*
*Күренде уртансыһы.*
*Ул йылы һүҙ, ул бүләктәр –*
*Алтындай һәр ҡайһыһы.*

*Шылтырата кесе ҡыҙым,*
*Йыраҡ шул арабыҙ, ти,*
*Улым менән икәүләшеп*
*Доғала ҡалабыҙ, ти.*

*Ҡыҙҙарым һәм ейәндәрем –*
*Минең байлыҡ мул икән,*
*Хыялдағы теге байлыҡ –*
*Эҙләйһе юҡ – шул икән!*

**Бәләбәй ҡалаһы.**

Лео
ЯКОВЛЕВ

# Тормошо тураһында
# Ғүмәр Хәйәм үҙе һөйләгән бәйән

*Эңер ята зәғфран ҡыуағына,*
*Күҙен йомор-йоммаҫ раузалар*
*Йәрем менән*
Хәйәм тураһында
*Моң-һағышлы бер йыр һуҙалар.*
**Сергей ЕСЕНИН.**

## *Инеш һүҙ*

*Әҙәбиәт белгесе Юрий Тынянов үҙенең тарихи романист икәнен «Документ аҙағына етһә, мин башлайым» тигән һүҙҙәрендә сағылдыра.*

*Әгәр ҙә ул Ғүмәр Хәйәмдең (1048 – 1131) тәржемәи хәлен яҙыу маҡсатын ҡуйһа, уның заманындағы документтарҙы – хат, ҡулъяҙма, көндәлектәрҙе һис таба алмаҫ ине. Тик Хәйәмде белгән кешеләрҙең өс ҡыҫҡа ғына хәбәре һаҡланған. Береһе – тарихсы әл-Байһаҡының шағир менән осрашыу иҫтәлеге, икенсеһе – ваҡыты һәм урыны күрһәтелмәгән, уның ҡыҫҡаса тормош юлын сағылдырған әҫәр.*

*Хәйәмде тағы урта быуаттарҙың һигеҙ мосолман тарихсыһы иҫкә ала. Мәҫәлән, уның вафатынан 40 йыл үткәс нәшерләнгән «Зыялылар тарихы» тигән хеҙмәт авторы Ямалетдин әл-Ҡифти. Әммә ул замандағы тарихсылар ваҡиғаларҙың урынын һәм ваҡытын төрлөсә сағылдыра, ә был – шағирҙың һәм ғалимдың тормош юлына яҙыусыларға үтә алмаҫлыҡ кәртә. Ундай ауырлыҡтарға тәү тапҡыр юлыҡһам да, шул һаран мәғлүмәткә һәм робағиҙарға таянып, хәл-ваҡиғаларҙың барған урынын таба алдым.*

*Ғ. Хәйәмдең 950 йыллығына журнал вариантындағы «Был яуыз күктән өҫтөн булһам» тип аталған биографияһын баҫтырғайным («Калейдоскоп» журналы, Нью-Йорк, 1998, № 5), ә шулай ҙа уның тормош юлын, был бөйөк суфый шағиры һәм фекер эйәһе дәүерендәге ваҡиғаларҙы киңерәк сағылдырған әйбер эҙләүҙе дауам иттем.*

*Автор үҙ геройы исеменән хикәйәләй. Быңдай ысул әҙәбиәт барлыҡҡа килгәндән билдәле. Әммә тарихи шәхестәр ҙә ҡатнашҡан әҫәрҙәр бик һирәк. Уҙған быуатта, мәҫәлән, ундай шәп әҫәрҙәрҙе Леонид Гроссман, Натан Эйдельман һ.б. яҙҙы. Мин дә шул ысулды ҡулландым.*

*Таң. Бокал.*
*Бер телем икмәк.*
*Өҫтәлдә – һутлы йөҙөм.*
*Алға-артҡа ҡарамайса,*
*барған бер дәрүиш инем.*
*Булған-бөткән.*
*Иртәгәне*
*һис бер кем бел(ә)алмаған.*
*Ожмахы ла, тамуғы ла*
*бары үҙемдә, тинем.*

*Бәлки, бәғзе берәүҙәргә Хәйәм кисергән ябай кеше тормошо оҡшап та етмәҫ. Әммә ул ике донъяла – ерҙә һәм күктә йәшәгән суфый ине. Башта Хәйәм үҙенең «донъяға ҡарашы һәм айыҡлыҡ ғилеме» тәьҫире буйынса «Каландарийы» юлына, аҙаҡтан ғүмеренең һуңғы 20 йылында суфыйҙарҙың «хвадйаһан» мәктәбенә ҡушыла. Суфыйҙарҙың «нәҡшәбәндиә» тәрраҡ туғанлығы көслө тәрриҡәт һанала, һәм ул хәҙер ҙә эшмәкәрлеген дауам итә.*

*Хәйәм үҙенең суфыйлыҡ ҡарашын ғүмеренең күп осоронда йәшерергә мәжбүр булғанын онотороға ярамай, ә был мистик йүнәлеш исламда тик 1105 йылдан һуң ғына асыҡтан-асыҡ баш ала. Шунан һуң ғына ул үҙенең «Йәшәүҙең дөйөмлөгө» рисәләһендә тәү тапҡыр суфыйлыҡтың төп принциптарын аса.*

*Суфыйлыҡ әҙәбиәте оҫтаһы Хәйәм робағыйҙарында фекерен ситләтеп, томалап әйтә, һүҙҙәре тура йә икенсе мәғәнә бирә. Хәйәмде уҡыған кеше үҙенең суфыйлыҡ аңына ярашлы көршәксене – Хоҙай, Тәңре тип; тулы туҫтаҡты йәки көршәкте – кеше ғүмеренең үлсәме, символы тип; роза сәскәһен – гүзәллектең кәүҙәләнеше, ләззәти хискә бирелеү тип; шарап эсеү урынын – әҙәм кәүҙәһе тип, кеше йәненең башҡа инкарнациялар буйлап гиҙеү алдынан, ваҡытлыса, бер нисә мәл араһында ерҙәге йәшәү урыны тип аңларға кәрәктер. Хәйәмде ситләтелгән килеш, һүҙҙәренең мәғәнәһен үҙгәртеп уҡыу – суфыйлыҡ Йыһандың гүзәл үҙәндәренә юл асыҡ тигән һүҙ. Ул ерҙәге тормошонда шул үҙәндәрҙә – параллель донъяла – сәйәхәт итә. Ул әле лә шунда, мәңгелек донъяла.*

## Фатиха[1]

Мәрхәмәтле һәм рәхимле Аллаһ исеменән!

Аллаһ бөйөктән-бөйөк. Донъяны Төҙөүсегә, Ерҙең һәм ваҡыттың Хакимына, донъялағы бөтә йән эйәһенә туҡлыҡ Биреүсегә, һәр төрлө серҙе һәм шикһеҙҙе Белеүсегә, Тиңдәшһеҙгә, ярҙамсыһыҙ һәм кәңәшсеһеҙ Эш итеүсегә, Берҙән-Бергә, Ҡөҙрәтлегә һәм берәүҙең дә ярҙамына мохтаж булмаусыға беҙҙең рәхмәтебеҙ һәм маҡтау Уға. Уның бөтә пәйғәмбәрҙәренә Әҙәмдән алып ғәрәптәргә һәм Ерҙәге бөтә халыҡтарға үҙе һайлаған Мөхәммәтте ебәргән рәсүленә беҙ баш эйәбеҙ. Уларҙың барыһына ла, шулай уҡ Мөхәммәттең бөтә нәҫеленә, дуҫтарына һәм ярҙамсыларына Аллаһ ризалығын бирһен!

Үҙ быуаты вә бөтөн дәүерҙәр аҡыл эйәһе, тикшеренеүселәр падишаһы вә ғалимдар башлығы Нишапур шәһәренән Абул Фәтих Ғүмәр ибн-Ибраһим Әл-Хәйәм шулай ти. Аллаһ миһырбанлы булһын үҙенә.

Тамуҡтан ҡотолорға һәм мәңгелек бәхеткә ирешергә теләүселәргә һәр төрлө фәндәрҙе өйрәнеп, аңлап, улар ярҙамында хаҡиҡәтте дәлилләү кәрәк. Мин, һәр нәмәне тойғо, аң, фекер ярҙамы менән аңлай алырмын, тип уйлай инем. Һәм алгебра, геометрия, фәлсәфә мәсьәләләре менән шөғөлләнгән саҡта быға инандым. Йәшем еткәс, геометрия фәненән ябайыраҡ булып күренгән тормош фәнен ныҡлап өйрәнә башлағас, Аристотелдең «Икенсе аналитика»һының ҡеүәтенә бик шикләндем. Баҡтиһәң, тормош ваҡиғаларын, хатта үҙ тормошоң ваҡиғаларын да бер рәткә теҙеп булмай, сөнки уларҙың сәбәптәре һанһыҙ, ә эҙемтәләре ҡапма-ҡаршылыҡлы, һәм аҡыл, көслө логикаға таянһа ла, төп асылына бер ҡасан да төшөнә алмаҫ.

Мөхәммәт пәйғәмбәр, с. ғ. с. – Аллаһ уға ризалығын бирһен һәм сәләмләһен, заманында белем эҙләп алыҫ Ҡытайға ла сәйәхәткә сығырға мөмкин, тигән. Мин үҙ тормошомдо яҡшы беләм, ул миңә яҡын тип уйлаһам да, ундай уйым, белемем серле Ҡытайҙан да алыҫ булып сыҡты. Шуға күрә мин тормош юлымдағы бөтә хәл-ваҡиғаларҙы логикаға ярашлы итеп түгел, ә ваҡыт ағымына ҡарап, донъяға килеүемдән бөгөнгә тиклемге осорҙо зарурлығына һәм законлығына ҡарамайынса, эҙ һалып, теҙеп сығырға булдым.

Берәй ун, йөҙ йә мең йылдан кемдер, бәлки, ентекләберәк эҙләнергә теләр. Шул эҙҙәр киләсәктәге эҙләнеүселәргә барып етһен өсөн, мин һүҙҙе, һөйләмде ҡулландым. Аллаһ Тәғәлә лә улар ярҙамында пәйғәмбәргә, с. ғ. с., өндәшкән. Шуға ла ғәрәптәр «Китап – һинең тормошоңда иң яҡшы кәңәшсе» ти.

Беҙ тәүҙә яҙмышымдың асылына мөрәжәғәт итәйек.

## Нишапур[2]

Күптән, бик күптән, беҙҙең ҡоторонған заманда 60 йәшкә етеремә бик шикләнә инем. Ул турала шиғыр ҙа яҙҙым, шикелле. Ул шиғырҙы оноттом инде, ә юҡҡа шикләнгәнмен: хәҙер 506 йыл[3], миңә 65 йәш һәм мин бала сағым үткән Нишапур урамдарын һәм тирә-яғын һаман ҡыҙырам, күп тапҡыр тура булмаған тормош юлыма әйләнеп ҡайтам.

Нишапурҙың ҡайһы бер ерендә булмаһам да, һәр ҡайҙа – үткән заман күренеше, күптәнге тормош һүрәттәре. Күҙ алдымдан ҡасандыр бында йәшәгән кешеләр һыны тыныс ҡына бер-бер артлы үтә. Ерҙә үткәргән тәүге йылдарымдағы юлдаштарымдың мөләйем бала йөҙҙәрен күрәм, улар артынан тормош елдәре үҫмер сағымдың һәр ваҡыттағыса ашығып йөрөүсе замандаштарымды алып китте. Ҡайҙа? Һуңынан ҡыйыуһыҙ, ышанысһыҙ, киләсәккә өмөттәре өҙөлгән минең йәштәге урта быуын кешеләрен һәм үҙем улар менән осрашып гәпләшкәнде иҫкә төшөрәм. Улар ҡайҙа хәҙер? Ҡайҙа киттеләр, ниңә улар бында түгел? Бәлки, мин беҙҙең туған шәһәребеҙ Нишапурға мәңгелеккә ҡайтҡанмындыр, нишләп улар минең менән түгел?

Бына мин хәҙер яңғыҙ, бер үҙем донъяның мәңгелек күркәмлеге менән һоҡланам: Хөрәсән үҙәне, йөҙөм баҡсалары, сәскәләр, көмөштәй ялтыраған япраҡлы зәйтүн урманы, ҡыуаҡтары... Был үҙәнде төньяҡ һәм көнсығыш елдәрҙән һаҡлаусы Мағаз тауҙарын күрәм.

Кешеләргә зәңгәр аҫыл таш һәм ергә меңәрләгән һуғарыу каналдары аша һыу биргән йүнһеҙ Йәбәруд йылғаһы үҙәндең иң төпкөл мөйөшөнә лә йәшәү сығанағы еткерә.

Мин киләсәкте белдереүсе һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәм:

*«Инжир вә зәйтүн ағастары*
*Һәм имен ҡала менән ант итәм!»*[4]

Нишапурҙың затлы һәм матур йорттарына ҡарап, былар оҙаҡҡа сыҙармы, әгәр Аллаһ кешеләрҙең әҙәпһеҙлеге өсөн ваҡытлыса үҙенең вәғәҙәһен сикләп хәүефлектәргә юл асһа, ниҙәр булыр икән, тип уйлайым. Үҙ ғүмеремдә ҡасандыр матур, ныҡлы һарайҙарҙы, ҡәлғәләрҙе күп күрҙем, ә хәҙер кешеләр, ел, ваҡыт арҡаһында улар емерек хәлдә.

Мәрхәмәте һәм шәфҡәте сикһеҙ булған Аллаһтан Нишапурҙы һәм унда йәшәгән нәҫелдәрҙең гонаһтарын ярлыҡауын үтенәм. Тыуған ҡаламдың мәңге йәшәүен теләйем!

Ә хәҙер мин донъяға килгәнгә тиклемге ваҡиғалар хаҡында һөйләмәксемен.

Атайым Ибраһим ибн Мөхәммәт дүртенсе йә бишенсе быуындағы Нишапур ине, әсәйем Мәрйәм, майандже ырыуынан, Әстрабад янындағы ауылдан. Атайым сатыр тегеү оҫтаһы ине. Һорауҙар буйынса текте, баҙарҙа ла уның тауарын тиҙ һатып алдылар. Уҡый-яҙа белде, бик шәп хәтерле, Ҡөрьәнде, бик күп хәҙистәрҙе[5] яттан белде, һәм кешеләр йыш ҡына унан кәңәш һорап килде. Ишеге һәр кемгә асыҡ булды. Пәйғәмбәр исемен йөрөткәс, уның кеүек ҡунаҡсыл булырға, исеменә тап төшөрмәҫкә тырышты. Һәм маҡсатына ирешә: уның ҡунаҡсыллығы хаҡында хәбәр тирә-яҡҡа таралды.

Әммә Ибраһим пәйғәмбәр менән оҡшашлығы быны менән бөтмәй. Атайҙың да оҙаҡ балалары булмай, һәм был хәл ғаиләлә йыш ҡына бәхәскә килтерҙе – кем ғәйепле. Атай әсәйҙе генә ярата һәм башҡа ҡатындары булманы. Шулай ҙа, Мәрйәм ананың өгөтөнә бирелеп, атай йәриә ҡатын менән була. Ул был мәсьәләлә аҙашы һымаҡ булырмын тип өмөтләнә. Пәйғәмбәрҙең улы Исмәғил йәриәһе Хәжәрҙән тыуа бит. Әммә атайҙың өмөтө өҙөлә: хеҙмәтсе ҡатын ауырға ҡала алмай. Шулай итеп, кем ғәйепле икәне асыҡлана.

«Һиңә Ибраһимдың хөрмәтле ҡунаҡтары тураһында хикәйәт килеп еттеме? Уға килеп ингәс, улар: «Сәләм!» – тинеләр. Ул: «Сәләм! Таныш түгел кешеләр!» – тине. Һәм ул ғаиләһе янына сыҡты, һимеҙ быҙау ите алып инде. Уларға итте яҡын ҡуйҙы: «Ашамаҫһығыҙмы?» – тине. Һәм ул уларҙан ҡурҡыу тойҙо. Тегеләр: «Ҡурҡма һин!» – тине һәм белем эйәһе егет тураһында һөйөнсөләне»[6].

Һәм уның ышанысы аҡланды.

Бер көн, уның ҡунаҡсыллығын ишетеп, йортона ике ил гиҙеүсе суфый килеп инә. Улар, пәйғәмбәр Ибраһимдың ҡунаҡтарынан айырмалы буларaҡ, аҡ кейемдә түгел, ә алама кейенгәйне һәм алдарындағы ризыҡты бик йылдам ашап бөтә. Һимеҙ итле былауҙан, тәмле сәйҙән һуң улар хужаның тормошо тураһында һораша башлай. Өйҙә балалар булмауының сәбәбе менән дә ҡыҙыҡһыналар. Ибраһим йәшермәй бөтәһен дә һөйләп бирә, хатта Мәрйәмдең шыйыҡса хаҡындағы фекерен дә әйтә.

– Бисәләр иҫәр, – ти суфыйҙарҙың береһе, – әммә һинең ҡатын тураһында улай тип әйтеп булмай, һәм, әгәр уның фекере дөрөҫ булһа, мин һиңә ярҙам итә алам.

Һәм ул Ибраһимға Ҡытайҙа ишеткән дарыу хаҡында әйтә.

Атайым миңә ошо хикәйәһен һөйләгәндә бәләкәй инем, шуға һәр төрлө үләндән һәм емештән торған эсемлектең ҡурамы хәтерҙә ҡалмаған.

Аллаһтың ярҙамына ышанған атайым ул эсемлекте әҙерләп ҡулланды. Мәрйәм быға көлөп ҡараны, үҙе лә белмәй Изге Китаптағыса әйтте:

«Балаға уҙмаҫ ҡарсыҡ бит мин!» Ә атай уға яуаплаған:«Шулай тип әйтте һинең Раббың, Ул, ысынлап та, хикмәтле һәм белдекле!»[7]

Һәм бына мөғжизә – Мәрйәм ауырға ҡалды ла малай тапты – Абул Фәтих

Ғүмәр, ә ул аҡыл эйәһе булдымы – унылын әйтә алмайым. Ә мөғжизә дауам итте: Мәрйәм ысынлап та «әбей булғас» Ибраһимға ҡыҙ, минән 10 йәшкә кесе булған һеңлемде табып бирҙе. Уға Аллаһ илсеһенең, с.ғ.с., яратҡан ҡатындарының береһе хөрмәтенә Ғәйшә тип исем бирҙеләр – ул исем «тормош», «тереклек» тигәнде аңлата.

Заманалар, ауыр хеҙмәт, тағы бала тыуыуына өмөтләнеү – былар бөтәһе лә атайымды йонсотто, шуға ул Ғәйшәнең йөҙөн күреү бәхетенә ирешеп вафат булды, иртә вафат булды. Ул миңә лайыҡлы тормош дәресен генә түгел, үрнәкле үлем дәресен дә бирҙе: уның был донъянан китеүенә нисек тыныс һәм аҡыллы итеп әҙерләнеүе ғүмерем буйы иҫемдә ҡалыр. Ул тик ғаиләһен ярлылыҡта ҡалдырыуына борсолдо, сөнки һуңғы йылдарҙа элекке кеүек эшләй алманы.

Һуңғы һөйләшеүебеҙҙә атай әйтте:

– Балаларымдан, һинән һәм Ғәйшәнән башҡа минән ни ҡалыр? Мин эшләгән сатырҙарҙы ваҡыт һәм ел туҙҙырыр, һәм уларҙы теккән оҫтаның ҡушаматын – «Хәйәм»де кем иҫкә алыр?

– Мин, һинең ҡушаматыңды бөтә донъя белер һәм хөрмәт итер, тип уйлайым һәм быының өсөн бөтә тырышлығымды һаласаҡмын, – тип яуап бирҙем уға, ә үҙем маҡтаныуымдан ҡурҡа төштөм, сөнки әйткәнем – атайыма биргән вәғәҙәм түгел, Аллаһҡа өндәшкән үтенес кенә булырға тейеш ине.

Әммә Аллаһ бөтәһен дә белә һәм, минең артабанғы яҙмышым буйынса, ул атайыма биргән вәғәҙәмде дөрөҫләп эргәмдә торған. Тормош юлымда Ул мине күп тапҡыр һынаны.

...Ете йәшемдән мәҙрәсәлә уҡый башланым һәм тиҙҙән Ҡөрьәнде яттан белдем. Мөғәлимдәрҙең береһе шәйех Мөхәмәҙи Мансур алгебраға һәләтемде асты. Ҡайһы берҙә ул минең менән әңгәмәләшә, үҙ фәненең асылын киңерәк аңлата ине, ә мин ул нәмәләрҙе күптән белгән кеүекмен, тик әһәмиәт итмәнем. Фәлсәфәүи мәсьәләләр миңә күберәк фәһем бирҙе.

Бергә уҡыған тәрбиәһеҙ, тупаҫ, көнсөл шәкерттәр менән мөнәсәбәт ҡатмарлы ине. Тиҙҙән Хәсән исемле өлкән синыф шәкерте менән дуҫлаштыҡ, хатта ҡулыбыҙҙы ҡырҡып ҡанды ҡуштыҡ һәм ағалы-ҡустылы булдыҡ. Хәсән ҡыйыу егеттәрҙән һаналды һәм миңә мәҙрәсәлә, урамда ла ҡурҡыныс янаманы.

Минән бер йәшкә кесе Әбдразаҡ менән дә шулай туғанлаштыҡ. Ул үҙе тәҡдим итте. Мин ағайлы һәм ҡустылы булыу тураһында хыяллана инем, шуға күрә баш тартманым. Был осраҡлы ғына тип иҫәпләнгән ваҡиғаларҙың һуңынан тормошомда әһәмиәте артты.

Уҡыуым уңышлы барҙы, һәр фәнгә лә өлгөрҙөм, тик атайымдың вафаты Нишапурҙағы уҡыуымды тамамларға мөмкинлек бирмәне. Атай булмағас, беҙ фәҡирләндек. Әсәйем тегеп бөтөлмәгән аласыҡтарҙы, туҡымаларҙы, эш ҡоралдарын һатты. Ғәйшә әле бәләкәй булғанға, әсәйем мине тауар менән баҙарҙа ҡалдырып ҡайтып китә ине.

Мин тиҙ үҫтем, кейемем бәләкәйләнде, туҙҙы, әммә егет булырға тырыштым. Бер мәл баҙарҙа шау-шыу күтәрелә: беҙҙең ҡалаға хаҡан Ибраһим Тамғас хан килеүе хаҡында хәбәр таралды. Нишапур ул замандарҙа Айн ад-Дауыл нигеҙләгән төрки династияһының ерҙәре сигендә урынлашҡан ине. Ә хаҡан Ибраһим, күрәһең, сәлйүктәр үтеп инмәгәйе тип, биләмәләрен байҡап сыҡҡандыр.

Хаҡандың һәм һаҡсыларының юлы мин һатыу иткән ерҙән уҙҙы. Ул үтеп барышлай ҡамсыһы менән миңә күрһәтте лә йомшаҡ ҡына ниҙер әйтте. Ике һаҡсыһы йәһәт кенә аттан һикереп төшөп, минең эргәгә килеп, бер ни ҙә әйтмәй ҡултығымдан тотоп, хаҡандың ҡара айғыры алдына килтереп баҫтырҙы.

– Һин кем, сибәр үҫмер? Ҡайҙан һин, атайың кем?

– Атайым ике йыл элек миңә ун йәштә үлде, ә хәҙер әсәйем һәм һеңлем менән торабыҙ,– тинем.

– Берәй нәмәгә өйрәнәһеңме? – тип хаҡан һорауын дауамланы.

– Ҡөрьәнде ятлайым, – тинем.

Был алдашыу булманы, сөнки атайым иҫән саҡта уҡ бөтөн Ҡөрьәнде ятлағайным.

Хаҡан һаҡсыларына төштән һуң мине һәм әсәйемде резиденцияһына килтерергә ҡушты. Бер һаҡсы алама ғына тауарҙарымды алып ҡайтырға ярҙамлашырға һәм мине әсәйем менән хаҡанға оҙатырға ҡалды.

Мине һаҡ аҫтында күргәс, әсәйем ҡурҡыуға төштө. Һаҡсы хәлде аңлатһа ла, тиҙ генә тынысланманы. Бер аҙҙан беҙ хаҡан эргәһенә барҙыҡ.

– Һинең малайыңды үҙемә ул итеп алам һәм яҡшы тәрбиә бирәм, ә һин борсолма, – тине ул әсәйемә.

Шунан ул ярандарына әсәйемә аҡса бирергә, ә миңә яңы кейем табырға ҡушты. Бер нисә көндән тәү тапҡыр Нишапурҙан сит яҡтарға сығып киттем.

Минең быға тиклем атҡа ултырғаным булманы. Шуға хаҡан бер ғәскәри ҡарамағында каруан менән дөйәлә барырға ҡушты. Бер нисә йылдан һуң атта елдереп йөрөргә өйрәндем, әммә был күркәм хайуан менән берҙәмлек тапманым. Эйәрҙә һәр ваҡыт үҙемде уңайһыҙ тойҙом. Ә дөйә күңел талабыма тап килде. Ул тормошома тынғы бирҙе һәм уй-фекерҙәремде борсолоуҙан һаҡлай кеүек. Оҙаҡҡа һуҙылған ил гиҙеүҙәр ваҡытында дөйә өҫтөндә иҫәпһеҙ-һанһыҙ робағиҙар, ғибрәтле хикәйәләр башҡа килә ине, һәм һуңынан уларҙың бөтәһен дә үҙ урынына ҡуйып, логик тәртипкә һалып яҙып барҙым.

Аҡһаҡалдар йә мөғәллимдәр ҡушыуы буйынса түгел, бары тик үҙ иркем менән Ғәзни шәһәренән күренекле Абул Хәсән китабын өйрәнеп, Юнайзия юлына баҫтым һәм кеше йәшәмәгән далалар, сүллектәр аша дөйәлә сәйәхәт иткәндә Аллаһҡа яҡынлашыуҙың иң юғары баҫҡыстарына күтәрелдем.

Әммә быларҙың барыһына ла һуңынан ирештем, ә ул мәлде беҙҙең хәрби каруан Джабаруда ағымынан юғары барып, Мағаз тауҙарын урап үткәндә, һуңғы тапҡыр (ул ваҡытта, шулай булыуы ихтимал, тип уйланым) бала сағым үткән ҡалаға ҡараным да Мерв яғына йүнәлдем.

20 көн юлда үткәргәс, күҙ алдыбыҙға мөһабәт Бохара күренде. Ошо күренеш өсөн кисергән һәр төрлө мохтажлыҡтарға ла, хәүефтәргә лә түҙҙек.

Был мөғжизәне күреү өсөн Аму-Даръяһын кискән саҡта бата яҙҙыҡ. Бохарала падишаһ һарайында тәү тапҡыр булдым. Мин Нишапурҙан сығып киткәс бер нисә көндән һуң, әсәйем һәм һеңлем Әстрабад эргәһендәге туғандарыбыҙ йәшәгән ауылға күскән икән. Ул турала бер нисә йылдан һуң ғына белдем.

*Бәхет бит ул –*
*азатлыҡты*
*барһынан өҫтөн ҡуйыу,*
*Иртә-кисен*
*ҡояшыңа*
*изге доғалар ҡылыу,*
*Татый-татый*
*был донъяның*
*әсеһен һәм сөсөһөн,*
*Һыу менән түгел,*
*шараптан*
*һыуһыныңды ҡандырыу.*

# Сәмәрҡәнд

Бохарала ай самаһы булдым. Ҡала буйлап йөрөнөм, мөһабәт ҡәлғә, Исмаил Самани кәшәнәһе һәм башҡа камил йорттар, зәңгәр һәм йәшел көмбәҙҙәр, алтын абрикос өлгөргән матур баҡсалар менән һоҡландым. Ә Мулйән һыуы тулҡындарының аҡрын ғына шылтырауы күләгәле алма баҡсаларында кемдеңдер шыбырҙауына оҡшай ине. Шунда мин ошо күркәм баҡсаларҙа шәүләһе мәңгегә ҡалған бөйөк Абу Абдулланың[8] киң таралған йырын иҫкә төшөрҙөм. Минеңсә, ашыҡмай ғына мәңгелек ҡала буйлап йөрөү оҙаҡ йылдар буйы мәҙрәсәлә уҡығанға ҡарағанда күңелемә күп нәмә бирҙе.

Әммә бөтәһе лә бындай фекер менән килешмәне. Хаҡан Ибраһим, көнө буйы эшһеҙ ҡала буйлап йөрөүемде белгәс, мәктәпкә ҡайтырға бойорҙо. Ул мәктәп Бохарала түгел, ә Сәмәрҡәндтә, һәм ул Ибраһим батшалығында иң яҡшыларҙан һанала. Унда аҡһөйәктәр, юғары түрәләр, ғәскәр башлыҡтары балалары тулы пансионда йәшәп уҡый. Хаҡан мине шул даирәгә индерергә ниәтләнде.

Бохараға ҡарағанда Сәмәрҡәнд ябайыраҡ булып сыҡты, әммә мин унда әле күренмәгән көс барлығын, киләсәге өмөтлө икәнен һиҙҙем. Ә мәктәп Нишапур мәҙрәсәһенән дә алама ине. Уҡыусылар кемдең атаһы байыраҡ, мөһимерәк икәнен асыҡлайҙар. Күп уҡытыусыларҙың иғтибары ла шул мәсьәләне хәл итеүгә йүнәлтелгән. Миңә берәү ҙә иғтибар итмәне, һәм был мине шатландырҙы, сөнки мәктәптә күп ҡулъяҙмалар тупланған ине. Шуларҙы уҡырға миңә берәү ҙә ҡамасауламаны. Унда тәү тапҡыр Бохара ғалиме Абу Ғәли рисәләләренең (трактат) береһен уҡыным һәм уның менән осраша алмауыма бик үкендем. Әммә был ғалимдар падишаһы менән минең мөнәсәбәттәр тарихы бик әһәмиәтле икәнен һуңғараҡ һөйләрмен.

Ул ваҡытта мин бөтәһен дә уҡып барҙым, ә нисек барыһы ла минең башта билдәле бер тәртиптә урынлашыуына үҙем аптырайым. Тиҙҙән минең ғилемлек юғары кимәлгә етте, һәм үҙҙәрен «ғалим» тип атаған мөғәллимдәрҙең ахмаҡлығы асыҡлана барҙы. Уларҙың хәҡиҡәтте алдашыу менән алыштырғанына тамам ышандым. Улар араһында көнләшеү хөкөм һөрҙө, һәм Мөхәммәт пәйғәмбәр, с.ғ.с., көнләшеү – ялҡын утынды яндырған кеүек изгелекте юҡ итер, тигәне дөрөҫләнде. Тағы ул, Ҡиәмәт көнөнә тиклем бер йыл эсендә тамуҡҡа ингән алты кешенең береһе көнсөл ғалим булыр, тигән. Сәмәрҡәнд мәктәбендә тоғролоҡ һәр ваҡытта ла еңә алмауына ышандым, сөнки аҙ белемле көнсөлдәр өйөрө тик үҙҙәренең маҡсатында намыҫты аҙыраҡ аңлағандарҙы хәйерселеккә ҡалдырҙы.

Мин кеше хәтерендә һаҡланмаһын өсөн ҡәбәхәт уҡытыусыларҙың исемен әйтмәйем. Тик берәүһе өсөн иҫкәрмә яһайым – математика уҡытыусыһы Абу Сәғәҙи әл-Ғанили, минең кеүек, ул да Хөрәсәндән, Герат ҡалаһынан. Ул баҫалҡы ине, һаран, шашынған коллегаларынан ситләште, тормош ҡағиҙәһе – «Аҙына түҙһәң, яуызлыҡ янамаҫ». Уның фәндә өлгәшеүе булманы тиерлек, шулай ҙа ул конус нисек барлыҡҡа килеүен аңлатыуы менән ғорурлана ине: «Тура мөйөшлө өсмөйөштө тура мөйөштәренең ике яғының береһен урынында ҡалдырып, икенсеһен әйләндереп баштағы хәленә кире ҡайтарғанда конус барлыҡҡа килә».

Ошо аныҡлау Аполлонкусты,[9] асыҡлай, ти Абу Сәғәҙи. Уның «асыҡлауы» Евклидтыҡы икәнен ул белмәй йә онотҡан. Былар бөтәһе лә – ябай әйберҙәр. Абу Сәғәҙи Абу Мөхәммәт әл-Лайсанан белем ала, һуңынан – Хорезмдағы Абу Насырҙән. Уның ҡулында бер нисә боронғо һәм яңы математик рисәләләр бар ине – шуларҙы миңә уҡырға бирҙе.

Ғөмүмән, 15 йәшемә етәрәк миңә уҡытыусылар кәрәкмәй, ә фәндә камиллашыу өсөн китаптар ғына еткәнен аңланым. Хатта шул ваҡытҡа үҙемдең тәүге математик рисәләмде яҙа башланым.

Шым ғына мөйөштә китап, ҡулъяҙмалар уҡығанымда яуыздар иғтибар итмәне, әммә ҡулымда ҡағыҙ-ҡәләм күргәс, мыҫҡыллы көлөү ишетә башланым. Ҡулъяҙмаларым юғала башланы, эргәмдә шау-гөр килеп уйын ойошторалар һәм эшләү мөмкинлегем юғалды. Тик миндә тәбиғи баҫалҡылыҡ булғанға үҙемде ҡулда тота алдым. Әммә минең түҙемлек сигенә яҡынлашты, һәм мәктәптән, Сәмәрҡәндтән дә ҡасыу яғын уйлай башланым, сөнки, минеңсә, Ибраһим хаҡан мине онотто. Ләкин, тиҙҙән белеүемсә, яңылышҡанмын.

Ҡасыу мәсьәләһен ныҡлап уйлаған мәлдә, Сәмәрҡәндкә Абу Таһир ҡайтты. Минән ун йәшкә оло был йәш кеше күп ваҡытын Бохарала хаҡанға хеҙмәт итеп үткәргән, яҡшы белем алған. Сәмәрҡәндтә ҡазый урыны бушағас, бындағы боҙоҡлоҡтар хаҡында күп хәбәрҙәр алған хаҡан, тәртип урынлаштырыу өсөн, юғары вәкәләтлек менән Абу Таһирҙы ебәрә. Шулай уҡ уға мәктәптәге минең уҡыу барышы менән танышырға фарман бирелгән.

Абу Таһир абруйлы кейемдә[10] килде һәм икенсе көндә үк мәктәптә булды. Хәлем бик мөшкөл ине, шулай ҙа ул миңә мөләйем мөнәсәбәттә ҡалды. Уҡыусылар мине «сибәр хәйерсе» йәки «хәйерсе Йосоп»[11] тип бышылдаштылар. Абу Таһир уҡыуым тураһында бик ентекләп һорашты. Беҙ фарсы йә ғәрәп телдәрендә һөйләштек. Ярты сәғәт аралашыуҙан һуң минең артабан бында булыуымдың файҙаһыҙ икәнен ул аңланы һәм мәктәп етәксеһенә, уҡытыусыларға хаҡан ихтыяры менән мине уларҙан алыуын иғлан итте. Мин әйберҙәремде юл ҡапсығына һалырға ашыҡтым. Улар араһында иң әһәмиәтлеһе – ғәрәп телендә яҙылған «алгебра» һәм «ҡалмукабала» – «өҫтәмәләр» һәм «ҡапма-ҡаршылыҡтар» буйынса трактаттың мәҡәләләре.

Минең тормош мөғжизәләй үҙгәрҙе. Абу Таһир һарайынан миңә яҡты бүлмә бирҙеләр. Был ҙур булмаған һарай гүзәл емеш баҡсаһының төпкөлөндә урынлашҡан. Баҡсала быуындар алмашына иғтибар иттем: күккә ашҡан өрөк ағастары янында өлгөрөп еткән, ботаҡтары емештәрҙән эйешкән һылыуҙар һәм улар араһында әле генә ерҙән күтәрелеп килгән, өлкәндәр урын биреүҙәрен көткән үҫентеләр. Ҡартайған, олпатлы ағастарға ҡарап уларҙың йәп-йәш елдән эйелгән, бөгөлгән саҡтары күҙ алдыма килеп баҫты. Ә хәҙер ундай елдән тик япраҡтары ғына һелкенә. Бер нисә көндән, иртән тороп ҡояшҡа табан атлағанда ошо тылсымлы баҡсала мин тәү тапҡыр Юғарғы Йезиданың[12] иң ҡәҙерле серенә ҡағылған кеүек инем.

Тормош фәлсәфәһен уңышлы үҙләштереүгә ҡарағанда, минең ғилми пландар шәптән түгел ине. Вайымһыҙ көнитмеш, көндәлек режимдың булмауы, билдәле ваҡытта ҡулға ҡәләм-ҡағыҙ алмау кире йоғонто яһаны, һәм мин Абу Таһир йортонда ваҡытымды ялҡаулыҡта, кәйеф-сафала уҙғарҙым.

Яйһыҙ Сәмәрҡәндтең баш ҡазыйы Абу Таһир меңләгән мәшәҡәт араһында бик һирәк булған буш ваҡытын файҙаланып, көләмһерәп мине күҙәтә, аҙ ғына үҙе, йә дуҫтары алдында әңгәмәләшә ине. Уның ғилемлеге фикх[13] сигенән киңерәк. Ул ике донъя фәлсәфәһен[14] яҡшы белде, математика мәсьәләләрен дә белә ине һәм бер тапҡыр алгебра проблемаларын аҡрын ғына ҡуҙғалтҡас, мин үҙемдең мәҡәләләремә ҡайтырға ашыҡтым. Тиҙ генә әле асылмаған юл ҡапсығынан ҡағыҙҙарымды алып уҡырға керештем, һәм онотола яҙған төҙөк формулалар, геометрик теоремалар теҙелешеп аңыма ҡайтты. Абу Таһир менән әңгәмә, күрәһең, минең фәнгә ҡайтыуыма сәбәпселер. Был Абу Абдулланың Мөлйән еле тураһындағы йыры падишаһ Насыр ибн Әхмәт Саманидтың ашығыс рәүештә Гераттан Бохараға ҡайтыуына сәбәп булған кеүек ине.

Әммә үҙемә күпме ваҡыт бирелгәнен белмәнем. Ҡунаҡсыл Абу Таһир йортонда, уның яҡындары һәм дуҫтары менән күпме – ай, йыл бергә йәшәргә яҙғандыр

– унының билдәһеҙ. Ентекләп байҡаһам, алгебра буйынса хәл итәһе мәсьәләләр бер нисә йылға һуҙыла, ә башҡарылған эш ҙур булмаған рисәләгә етәсәк, ә ул үҙе миңә, 16 йәшлек үҫмергә, ярайһы уҡ абруй бирәсәк, һәм мин тәүҙә уны тамамларға тырыштым, һуңынан – киңерәк әҫәргә тотонорға.

Мәктәптә мин күргән кәмһетеүҙәр күңелемдә тәрән яра ҡалдырҙы, һәм мин, тәүге рисәләмдә маҡтансыҡ, шөһрәт һөйөүсән, фәнгә яраҡһыҙ кешеләр хаҡында әйтеп үтеү урынлы, тип иҫәпләнем.

Ҡулъяҙма өҫтөндә эшләгәндә Абу Таһирҙың һәр ваҡыт иғтибарында һәм хәстәрлегендә булдым. Ул һәм уның йортонда йыйылғандар минең эш барышы менән ҡыҙыҡһынды. Улар араһында күренекле математик Әбүлхәсән ал-Анбири ҙа бар ине. Уның кәңәштәре эшемдә ныҡ ярҙамлашты, әйтемдәре әхлаҡи үҫеүемә файҙалы булды. Уның ошо аҡыллы һүҙҙәре хәтеремдә мәңге һаҡланды:

«Хатта изге ниәт менән хәбәр йөрөткән ошаҡсы алама тәьҫир ҡалдырыр».

«Берәй яуызлыҡ ҡылырға уйлаһаң, ашыҡма», «Дөрөҫлөктө һөйләһәң, дошманың да түҙер, ә ялған үҙенде үҙеңдән ситләтер».

Шулай тине ал-Анбири. Абу Таһир йортона килеүселәрҙән бер ул ғына аҡыл эйәһе булманы. Мин рисәләмдә уларҙың рухи ярҙамының әһәмиәтен дә күрһәттем.

«Әгәр ҙә Абу Таһирҙың, Аллаһ үҙен мәңге ҡурсалаһын, юғары дәрәжәһе һәм уның янындағыларҙың изгелеге булмаһа, был изгелек мәңге һаҡланһын, мин бында яҙылғандарҙан бик алыҫта булыр инем, сөнки бөтә иғтибарым, көсөм, рухым, фекерем дошмандарыма ҡаршы йүнәлтелер ине». Ул хеҙмәтемдә, әгәр ҙә миңә ваҡыт бирһәләр һәм ниәттәрем уңышлы барһа, эште дауам итәсәгем тураһында ла яҙҙым.

Абу Таһир тәүге рисәләм менән бик ҡәнәғәт ҡалды. Һәм шунда уҡ күсереп яҙыусыларға бирҙе. Шунан күсермәләр төрлө китапханаларға тапшырылды, ә мин эште дауам итеү өсөн ваҡыт һәм кәрәкле шарттар алдым. Миндә фәнни хеҙмәткә йүнәлтелгән аҡыл булғас, тирә-яғымдағы һәр төрлө күренештәрҙе өйрәнеп һығымта яһай инем һәм йыш ҡына кешене, беренсе нәүбәттә үҙемде, тикшерҙем. Мин шуға иғтибар иттем: йыш ҡына мине мөхәббәт мәсьәләләре борсой ине. Улар юҡҡа сыҡты, иҫемә төшмәй башланы, сөнки уй-фекерҙәрем, рухи көсөм тик Хәҡиҡәтте эҙләүгә төбәлде. Ғилми эҙләнеүҙән хатта бәләкәй генә уңыш та мине ныҡ һөкләндырҙы, һәм унан енси хискә ҡарағанда ла юғары ләззәт кисерҙем. Былар буйынса мин һығымта яһаным: Хәҡиҡәткә яҡынлашыу иң ҙур баһаға лайыҡ, ә Хәҡиҡәткә булған һөйөү тойғоһо – һөйөүҙең иң юғары формаһы. Бындай асышты мин башҡалар менән бүлешергә ашыҡманым. Ниндәйҙер бер тойғо миңә, һәр кем ундай һығымтаға үҙе килергә тейеш, тип әйткән һымаҡ. Ул ғына ла түгел, мин был асышымды тамамлағас, ул һүҙҙәрҙе ҡайһы берҙә Нишапурҙа, мәҙрәсәлә йә баҙарҙа килеп сыҡҡан каландарҙан[15] ишеткән кеүекмен. Улар йыш ҡына минең менән гәпләшә ине, ләкин ул саҡта ишеткәнде ҡабул итергә әҙер түгел инем. Күрәһең, уларҙы аңлау өсөн ниндәйҙер кимәлдә тормош тәжрибәһе кәрәктер – быға мин һуңынан ышандым.

Хаҡан Ибраһим мине тағы оноттомо йә Абу Таһир минең турала уға өндәштеме, Аллаһ үҙен мәңге һаҡлаһын, нисек булһа ла, мин алгебраға арналған эшемде артабан да тынлыҡта, именлектә дауам итеү мөмкинлеген алдым.

Шуға күрә шатлығым баштан ашты, һәм мин рисәләмдә изгелек күрһәтеүсемә маҡтау һүҙҙәрен яҙҙым: «Бөйөк Аллаһ мине бәхет менән бүләкләне һәм мин ошо рисәләмде ғали йәнәптәре, беҙҙең данлыҡлы һәм уғата әфәндебеҙгә, ҡазыйҙар ҡазыйы имам Абу Таһирға бағышлайым. Аллаһ уның дәрәжәһен күтәреүҙе дауам итһен. Көнсөлдәрҙең һәм дошмандарҙың тырышыуҙарын юҡҡа сығарһын. Мин

һәр яҡтан камил кешене күреүҙән өмөтөмдө өҙгәйнем. Шул саҡ минең алдыма фәндә лә, изгелек ҡылыуҙа ла һиҙгер беҙҙең әфәндебеҙ Абу Таһир килеп баҫты. Уның эргәһендә булыу күңелемде күтәрҙе, үәхи ҡылды, данымды арттырҙы, ниәттәремде нығытты, рисәләмдең мөһимлегенә ышандырҙы. Уның резиденцияһында йәшәү һөҙөмтәһендә мин яҙмыштың кирелектәре менән юғалтҡандарҙы табып, уңышлыҡтар тураһында ҡыҫҡаса яҙыуҙы кәрәк тип иҫәпләнем».

Яҙмышымдың кирелектәре хаҡында уйланғанда Аллаһтың ҡатнашлығын һиҙҙем, сөнки уның ризалығы менән генә тормош юлым ҡырҡа үҙгәреүе мөмкин ине, һәм шуға ла Уны рисәләмдә иҫкә алыуҙа кәрәк таптым: «Мин Бөйөк Аллаһ ташлаған ярҙам арҡанына тотондом, сөнки Ул башлаған тикшеренеүҙәремдең аҙағына етергә һәм етерлек ғүмер бүләк итһә, алдағы хеҙмәттәремде үтәргә мөмкинлек алам. Мин Уның ныҡлы ярҙамына таянам, сөнки Ул доғаларҙың үтәлеүенә хужа һәм Уға ғына һәр осраҡта өндәшергә кәрәк».

Изгелекле Абу Таһир менән бергә үткәргән көндәр аҙағына яҡынлашты: Сәмәрҡәндтә яҙылған икенсе рисәләмдең күсермәләрен ҡулыма алғас, һәм 17 йәшемде билдәләгәс, ҡалаға батшалыҡтың көнсығыш сиктәренән Бохараға ҡайтышлай хаҡан Ибраһим етәкләгән хәрби каруан килеп инде.

Икенсе көндә үк хаким яҡлаусымдан минең турала һорашҡан һәм уңыштарым хаҡында тулы яуап алған. Хаҡан минең уҡыуым тамамланды тип иҫәпләне һәм юл сығырға әҙерләнергә ҡушты. Бер аҙнанан ҡуҙғалдыҡ.

Бохараға тиклем юлды дөйәлә түгел, эйәрҙә барырға тура килде. Аллаға шөкөр, Абу Таһир фәнни хеҙмәткә һәм һыбай йөрөргә өйрәтергә ваҡыт таба ине. Беҙ уның менән Зарафшан яры буйлап атта күп сәфәр ҡылдыҡ. Был сәфәрҙәр күңелемә тыныслыҡ һәм ышаныс килтерҙе, һәм мин уларҙы мәңге онотмам. Бына тағы Зарафшан буйлап ерән дүнәндә сабам, ә күңелемдә тынғы юҡ, сөнки мине алда ни көткәнен белмәйем. Бөтәһе лә Аллаһ ҡулында. Ул барыһын күрә, белә.

Ике көндән күркәм Бохараға килеп еттек. Хаҡан кешеләре беҙҙе ҡыуанып сәләмләне. Уларҙың был ҡыуанысы ихласмы – уныһын белмәйем.

## Бохара

Хаҡан улы Шәмселмөлөктөң һарайынан миңә уртаса күләмле, баҡсаға сығыу ишеге айырым булған бүлмә бирҙеләр. Принц күп ваҡытын һунарҙа йә күңел асыуҙарҙа үткәрҙе, ә мин яңғыҙ ҡалыуыма шат инем. Һарайҙағы ҙур ғына китапханала мәшһүр аҡыл эйәһе, заманаларҙың бөйөк философы ибн Синаның (Аллаһ уға ризалығын бирһен) күп рисәләләре һаҡланды, һәм мин, мөмкинлектән файҙаланып, уларҙы ныҡлап даими өйрәндем. Шунан бирле мин уның инабатлы, ышаныслы ҡоло һәм Хәҡиҡәткә тайпылмайса барыусы шәкерте.

Ҡышҡы елдәр, һалҡындар башланғас, ханзада Шәмселмөлөк ҡалала һәм һарайында йышыраҡ була башланы. Уға күңелһеҙ саҡта минең менән әңгәмәләште һәм күңеле күтәрелә ине. Шуға күрә ҡайһы берҙә төшкө йә киске ашҡа саҡырҙы. Принц үткер аҡыллы кеше булды, әммә даими белем алманы. Ул аҙмаҙ күп нәмәне белде. Ҡайһы берҙә фаразлауы шул тиклем яңыса һәм үҙенсәлекле ине, һәм мин уның менән күберәк әңгәмәләшергә тырыштым. Уның менән аралашып ҡөҙрәтле Аллаһтың бөйөклөк һәм аҡыллылыҡ орлоҡтарын бүлеүҙә ғәҙеллек күрһәтеүенә тағы бер тапҡыр инандым, әммә Әҙәм балаларының барыһы ла Уның бүләген ҡабул итергә әҙер түгел.

Мин һөйләгәндәрҙе ханзада етди, һоҡланып тыңланы һәм батша һыйына килгән ҡунаҡтарҙың да тауышланмайынса тыңлауҙарын талап итте. Ул бигерәк тә Әбүғәлисинаның (Абу Али ибн Сина) фәлсәфәүи әҫәрҙәрен яратты. Мин уларҙы аңлайышлы итеп, ҡыҫҡартып, ябайлаштырып бәйән ҡылдым.

Ул замандарҙа Бохарала Абу Ғәлиҙе белгән, күргән кешеләр әле иҫән ине. Уларҙың һөйләгәндәренең барыһын да тикшерә алманым, әммә ул ғалимдар падишаһы хаҡындағы ҡайһы бер хәбәрҙәр ысынбарлыҡ менән тап килде. Мәҫәлән, йоҡоно баҫыр өсөн йә арығандан һуң ул, ғәҙәттәгенсә, бер кәсә шарап эскән, бер ҡасан да тормош ләззәтенән үҙен сикләмәгән. Шул хаҡта ханзадаға һөйләгәс, ул ҡыҙыҡһынып тыңланы ла, хәйләкәр генә күҙен ҡыҫып:

– Ә һин үҙең уның һымаҡ шарап көсөн һынап ҡарарға теләмәйһеңме?– тине.

– Ислам шарап эсеүҙе тыя, – тип яуапланым, – ә инде тәҡдир миңә ундай һынау ҡуйған икән – үтәрмен.

Быға Шәмселмөлөк көлөп:

– Был – тәҡдир. Аллаһ ихтыяры менән атайым һине осратты һәм минең йортома һыйындырҙы, ә миндә һәр саҡ шарап бар!

– Ниндәйҙер шикле һәм ваҡытлы ғына ләззәт өсөн гонаһлы булырғамы ни?

– Уныһын, тәмләп ҡарағас, үҙең хәл итерһең, ә хәҙер һин, Ҡөрьәнде яттан белгән кеше булараҡ, әйт әле: унда Аллаһ шарап тураһында ни әйтә?

Мин уйға баттым, сөнки быға тиклем минең тарафтан ундай мәсьәлә ҡуйылманы. Изге Яҙманың бөтөн тексын иҫемә төшөрөп:

– «Ул кешеләргә файҙалы, әммә гонаһы файҙаһынан күберәк»[16], тағы «Ни һөйләгәнегеҙҙе аңламайынса, иҫерек килеш доға ҡылмағыҙ»[17] – был һүҙҙәр икенсе һәм дүртенсе сүрәнән.

– Тағы берәй нәмәне иҫеңә төшөр, Ҡөрьән белгесе! – Тынманы тәҡсир.

Тағы тәрән уйға сумдым: күҙ алдымда Аллаһ биргән йәннәт[18] күренде:

«Тәҡүәләргә үәғәҙә ителгән ожмахтың күренеше: унда боҙолмаҫ һыу йылғалары, тәмдәре һис үҙгәрмәҫ һөт йылғалары, эсеүселәргә татлы шарап йылғалары, балауыҙҙан таҙартылған бал йылғалары, һәр төрлө емеш-еләктәр һәм Раббыларҙан ярлыҡау».

– Ә һиңә Ҡөрьәндә «майсәрә» һүҙе осраныммы?

– Эйе, ул «Аллаһ биргән рәхәтлек» тигәнде аңлата.

– Ә хәҙер уны үҙ телеңдә әйт.

– «Шарап рөхсәт» – тип тәржемәләнем был һүҙҙе фарсы телендә.

– Бына, күрәһең бит, – тине ханзада. – Аллаһ тәүҙә шарапты гонаһлы ти, ә һуңынан шул гонаһтың асылын аңлата. Әле намаҙға тиклем ваҡыт етерлек, беҙ шөһрәтле Фәнәрүз[19] эсемлегенән бер гәлсәр кәсә эсергә өлгөрәбеҙ.

Һәм ул матур, үтә күренмәле, ялтырап торған һауыттарға ҡыҙыл яҡут төҫөндәге шыйыҡсаны ҡойҙо. Уның әскелтем тәме миңә оҡшаманы, ә һуңынан тәнемә йылы йүгергәнен, йөрәгемә рәхәтлек тулҡыны бәрелгәнен һиҙҙем. Хатта батша һарайындағы йыһаздың ҡупшылығы, зиннәтле, күркәм баҡса тағы ла гүзәлерәк булып күренде. Әңгәмә йәнләнә төштө, тауыштар сағыуыраҡ яңғыраны һәм минең тағы ла бер кәсә эскем килде, әммә хужа ризалашманы.

– Биш кәсә шарап эскән кешенең эске донъяһы, изгелеге, яуызлығы, күңелдәге барлыҡ сере асыла, тиҙәр. Нимәгә беҙгә, бигерәк тә миңә, ошо ерҙең киләсәктәге падишаһына, кемгәлер эс серемде асырға. Әйҙә, серле нәмә сер булып ҡалһын, ә шарапты беҙҙең дуҫлыҡ ныҒынған тиклем генә эсәйек.

Былдай аҡыллы тәфсиргә ҡаршы бер ни ҙә әйтмәнем, ә ханзада, һүҙен һәм мәжлесте тамамлап:

– Һин Хәҡиҡәт юлынан барып фәлсәфәүи мәсьәләләрҙе өйрәнгәндә зиһенеңде йәнләндерергә, күңел төшөнөклөгөн, өмөтһеҙлегеңдө баҫырға, кәйефеңде күтәрергә теләһәң – бөтәһен дә бер кәсә шарап хәл итә, артығы – зыян, һәм һиндә һәр саҡ ошо мөғжизәле эсемлек булырға тейеш, тине.

Шунан ул иң тоғро хеҙмәтселәренең береһен саҡырҙы, ә уныһы миңә

ентекләп магтар[20] урамының кемеһенән үҙемә оҡшаған шарапты һайларға мөмкинлеген аңлатты. Мин һуҙмаңламай шарап әҙләп киттем.

Шарап оҫтаһы минең кемлегемде оҙаҡ һорашты ла, ғалим икәнемде белгәс, тынысланды. Бохараның күп ғалимдары, хатта бөйөк Абу Али ҙә зороастрийҙар кварталына шул уҡ йомош менән килә, тине. Тауарын һатыуҙан алда Иранда нисек шарап әсетә башлауҙары тураһында риүәйәт һөйләне.

Мине тәү нәүбәттә тыйылғанды боҙоу ҡурҡытты, әммә тәҡдиргә, һәр ерҙә Аллаһ һаҡлауына ышандым. Әгәр ҙә Ул шарап тәмен белеүемде теләмәһә, мин белмәҫ тә инем, тип уйланым.

Тиҙҙән заманалар үҙгәрҙе. Миңә 19 йәш тулғайны. Көтмәгәндә хаҡан Ибраһим вафат булды, һәм Шәмселмөлөк тәхеткә ултырҙы. Тәҡсирҙең юғары вазифаһы һәм ил өсөн яуаплылыҡ күтәрелһә лә, дуҫтарына, бигерәк тә миңә ҡарата мөнәсәбәте үҙгәрмәне, хатта Бохарала булғанда минән айырылманы, тәхет залында эргәһенә ултырта ине.

Ил туҡтауһыҙ һуғыш алып барҙы: көнсығыштан – далалағы күсмә халыҡтар, көньяҡ-көнбайыштан сәлйөк солтаны Арп Арыҫлан ғәскәре һөжүм итә. Әгәр ҙә Арп Арыҫлан Ғәрәбстанды һәм Румды[21] яулап алыу өсөн ҙур һуғыштар алып бармаһа, Шәмселмөлөк дәүләте күптән йәшәүҙән туҡтар ине. Әлегә уны Аллаһ һаҡланы, ә йәш хаҡан, атаһы һымаҡ, ваҡытын походтарҙа үткәрергә мәжбүр.

Яңы хаҡанға яҡын булыуымды белеп юллап йөрөүселәр, үтенеүселәр миңә килә башланы, һәм батша һарайындағы, эргәһендәгеләрҙең түбәнселеген, мәкерлеген үҙ тәжрибәмдә күрҙем. Ундайҙар менән аралашмаҫ өсөн Шәмселмөлөктән йәй айҙарын Йәйһун (был ҙур йылғаны бында Аму тиҙәр) буйындағы бер утарҙа үткәрергә рөхсәт һораным. Унда тәҡсир хеҙмәтселәре хәрби аттарҙы үрсетәләр һәм меңгегә өйрәтәләр ине һәм ундағы уңайлы ҙур йортта йәшәргә мөмкин.

Был аулаҡ урын миңә бик кәрәк ине, сөнки Бохара китапханаһында Әл-Лайсаның (Аллаһтың ризалығы һәм тыныслығы уға булһын) миңә билдәһеҙ рисәләһен таптым, һәм, уның менән танышып, үҙемдең алгебраик әҫәремә өҫтәмәләр индерергә булдым.

Асыҡ тәҙрә эргәһендә эштән ял иткәндә сабышып йөрөгән ярым ҡырағай аттарҙы һәм улар өҫтөндәге һыбайлыны нисек тә булһа ташларға маташыуҙарын күҙәттем, ә уйҙарым – ғалимдарҙа. Шөһрәтле ибн Синаны (Аллаһ ризалығы һәм тыныслығы уға) белгәндәр әйтеүенсә, математиканы ул һанға һуҡмаған, һәм шуның өсөн миңә ҡайһы берҙә яманһыу булып китә. Был, күрәһең, дөрөҫтөр, сөнки Бохарала мин уҡып сыҡҡан уның утыҙ рисәләһенән береһе лә математиканан булманы. Ул тағы, кем логиканың нескәлектәрен татып ҡараған, математикаға фекерен сарыф итмәҫ, тигән. Быны менән мин риза түгел, сөнки мин дә «логиканың нескәлектәрен татып» ҡараным! Ә шулай ҙа белемемә таянып ҡатмарлы математик мәсьәләләрҙе систем һәм ысын ләззәт таптым.

Алгебраик рисәләгә өҫтәмәләр тамамланырға яҡынлашҡанда тәҙрәләге сабышҡан аттарға йышыраҡ һәм оҙағыраҡ ҡараған бер мәлдә һыбайлылар араһында нескә һәм зифа буйлы йәш һынды шәйләнем. Ул мине ҡыҙыҡһындырҙы һәм ҡулъяҙмам аҙағына нөктә төртөп, иртүк сабышыу юлы яғына атланым.

Яҡындан ярым ҡырағай атта йәш ҡыҙҙы, дөрөҫө – ҡыҙыҡайҙы күрҙем һәм эргәмдән сабып үткәндә уның миңә төбәлгән ҡыҫынҡы күҙ ҡарашын һиҙҙем. Тиҙҙән минең эргәлә бер һыбайлы атынан төшөп, айылын нығытырға кереште. Мин унан серле һыбайлы хаҡында һораным.

– Ул – хан ҡыҙы Төркән, хаҡаныбыҙ Шәмселмөлөктөң ағаһы Хызыр хандың ҡыҙы!

Бохараға тәүге килеүемдә мәрхүм хаҡан Ибраһим һарайында күргән 8 йәшлек ҡыҙ, уның үҫмерҙәр кеүек серле йылмайыуы иҫемә төштө.

Бер нисә көндән иртәнге сәғәттәрҙә Остазымдың[22] күңел торошо хаҡында рисәләһен уҡып ултырғанда артымда еңел атлаған аяҡ тауышын ишеттем дә әйләнеп ҡараһам, хан ҡыҙы Төркән тора. 15 йәшлек төрки ҡыҙ айҙай бик сибәр, янып торған ҡара күҙле, үҫеп еткән ҡыҙ-ҡатын һымаҡ күренә. Алдан шуны әйтәйем: мин оҙон ғүмер кисерҙем, күп ҡатындар күҙен күрҙем, әммә быға тиклем минең өсөн донъялағы иң матур күҙ – хан ҡыҙы, һуңынан ханбикә Төркән күҙе.

Ә ул көнө беҙ бер аҙ өндәшмәй бер-беребеҙҙе күҙәттек. Шунан Төркән һүҙ башланы:

– Миңә бер үҙемә бында күңелһеҙ, Ғөмәржан. Минең менән атта йөрөп килеүеңде һорарға килгәйнем.

– Мин атта насар йөрөйөм. Беренсе боролошта уҡ мине юғалтырһың, – тип ҡаршылаштым.

– Ҡурҡма, беҙ һиңә йыуаш ат табырбыҙ. Тағы шуны онотма: һиңә ҡушырға хаҡлы булған үтенеп һорай!

Ысынлап та, минең алда һылыу ҡыҙ ғына түгел, ә хаҡимә, хан ҡыҙы, һәм ул шуны иҫемә төшөрҙө.

– Тыңлайым һәм буйһонам, – тип әйтергә генә ҡалды миңә.

Беҙҙең сәфәр көн һайын ҡабатланды, һәм беҙ һәр саҡ утарҙан алыҫҡараҡ барҙыҡ. Бер тапҡыр юлыбыҙға йылға ҡолағы тура килде: тауҙарҙа ҡар һәм боҙ ирей башланы, һәм Аму-Дарья ташты. Төркән тәҡдиме менән ҡолаҡты кисеп сығырға булдыҡ, әммә ҡаршы яҡтағы яр тайғаҡ булды, һәм Төркән атынан һыуға йығылып төштө. Мин тиҙ генә ярға сығып, еләнемде үләнгә ташланым да уға һыуҙан сығырға ярҙамлаштым. Шунан уның атын теҙгененән тотоп ярға сығарырға маташтым, әммә аты мине тыңламаны. Төркән үҙенсәрәк итеп һыҙғырғас ҡына ярға сыҡты.

Ҡараһам – Төркән сисенеп, кейемен гөлйемеш ҡыуаҡтарына киптерергә элгән дә минең еләнемдә яланғас ята. Мин аптырап ҡалдым, ә ул тыныс ҡына:

– Кил, яныма ят,– тине.

Мин ҡатып ҡалған кеүек баҫып торғас, һораны:

– «Саҡырғанға яуапла»[23] тигән күрһәтмәне белмәйһеңме ни?

– Беҙ ярамағанды эшләйбеҙ, – тинем, һис шикһеҙ булыр хәлгә ышанмайынса.

– Ниңә ярамағанды? Һин тәҡдиргә ышанмайһыңмы ни? Әгәр ҙә Аллаһ донъялағы һәр нәмә менән идара итә икән, тимәк, Ул беҙҙең йәнебеҙ һәм тәнебеҙ менән дә идара итә, һәм, әгәр ҙә пәйғәмбәр, һәр кемдең яҙмышы маңлайына яҙылған[24], ти икән, моғайын, һәр фәрйәгә[25] ниндәй ирҙең исеме яҙылған, тик шуға ғына ул асылыр. Мин унда һинең исемең яҙылғанын күптән уҡыным – бына шул тәҡдир!

– Динде яманлама! – тип кенә әйтә алдым, ә ниндәйҙер ҡаршы тора алмаҫлыҡ көс уға яҡынлаштырҙы.

Тәжрибәм булмағас, ҡыҙ булдымы, әллә ул әйткән исемлектә кемдер минән алда булдымы – уныһын аңламаным, әммә кипкән кейемен кейгәндә һәм яйлап ҡына ҡайтып барғанда ул шат, нимәгәлер йылмая ине.

Бүлмәмә ингәс, серле кувшиндан бер кәсә шарап һалып эстем. Нисектер бөтәһе лә үҙ урынына ҡайтҡан һымаҡ, борсолоу таралды, тағы шарап эсәһе килде һәм тағы... Төркән. Тәүге теләк еңелерәк һәм йәнә бер кәсә төшөрөп, тыныс ҡына йоҡоға талдым.

Беҙ артабан да шул уҡ урында, тыныс тоба ярындағы үләнлектә осраша инек. Минең бүлмәлә ул бүтән булманы, мин дә уға барманым: өй буш торҙо тиерлек, һәм соландар аша беҙҙең йөрөшөүҙе хеҙмәтселәр иғтибарға алырҙар ине. Шуға күрә беҙ «Тәҡдир урынында» осраштыҡ.

Ул урынды беҙ генә һайламағанбыҙ. Бер тапҡыр ирер ял итеп ятҡанда әрәмәлек яғынан кемдеңдер ҡарашын һиҙҙем. Әйләнеп ҡараһам – аҡ-һары һыҙатлы юлбарыҫ башын күрҙем. Туран батшаһы[26] кешеләр уның биләмәһендә ни эшләүен белергә килгән. Төркән дә ул яҡҡа ҡараны, ә мин уға боҫорға, тынырға ишараланым. Юлбарыҫ тағы беҙгә бер аҙ ҡарап торҙо ла иһәнләне, яланды һәм

тауышһыҙ ғына күҙҙән юғалды. Күрәһең, ул туҡ булғандыр: йәй буйы көтөүе менән һыулауға килгән йәйрәндәр уға еңел табыш.

Төркәндең ҡурҡмағанына иғтибар иттем – был мөһабәт тәндә ҡыйыу йән йәшәй! Ә мин ҡурҡтым, бигерәк тә йәрем өсөн. Тағы шул: күңелемдә ҡырағай йыртҡыстың миңә төбәп ҡарауын еңеүемә ғорур инем. Юлбарыҫ минең ҡарашымды, беҙҙән ситкә китеүгә бойороҡ, тип уйлағандыр. Мин, әлбиттә, Сөләймән ибн Дауыт әфәнденең (икеһенә лә Аллаһтың ризалығы һәм тыныслығы булһын) көсөн үҙемә япһарманым, әммә алдағы тормошомда йыртҡыстарға һәм хатта һауа торошона ла тәьҫир итеү осраҡтарым булғыланы.[27]

Ул көндәр минең уй-хыялдарым тик Төркән тураһында ғына булды, шуға күрә уҡый алманым. Әммә миңә юғарынан шиғырҙар төштө. Һөйгән йәрем хаҡындағы һүҙҙәрҙән ихтыярымдан башҡа, үҙенән-үҙе йыр сыға башланы, тик миңә шиғырҙың оҙон төрө оҡшаманы. Мин тәүҙә, уй, зауыҡ һәм һағышымды әйтер өсөн мәснәүи[28] ҙә етер, тип уйлағайным, ә бына бик шәп Хөрәсән шағиры Әбусәйет Майхананың[29] дүрт юллыҡ шиғырҙары менән танышҡас, шул төр минең күңелгә яраны.

Был яҙмаларымды шиғырҙар йыйынтығына әйләндермәйем. Шиғырҙар – балалар кеүек, шағирҙан айырылып, үҙ тормошо менән йәшәй бирә (вафат та булалар). Тик бына ике тәүге робағиҙарымды, мөхәббәт емештәрен, бында бирәм:

*Сылтыраусы һыу буйында*
*шарап, раузалар менән*
*Кинәнес таптым, табамын*
*ай йөҙлө йәрем менән.*
*Йәшәнем, йәшәйәсәкмен –*
*әле тын алам икән.*
*Йөрәгемде өтөп алған*
*һөйөп-һөйөлөү менән.*

Бына тағы:

*Гөл-сәскәнең таждарында*
*таң ысығы –*
*иҫ китер!*
*Йәшел болон,*
*һөйгән йәрең*
*шарапһыҙ ҙа иҫертер.*
*Кисәгеңде,*
*Иртәгәңде*
*нимә быға тиң итер?*
*Бөгөнөңә ҡыуана бел –*
*әлеге мәл тиҙ үтер.*

Был шиғырҙарым ғүмерем буйы минең иң бәхетле сағымды, һөйгәнемдең тәүге мөхәббәтен, уның ҡабатланмаҫ һәм тиҙ үтеп китеүсән матурлығын хәтерләтә. Мин уларҙы иҫкә төшөрһәм, күҙ алдыма йылға ташҡаны, тирә-яҡтан гөлйемеш ҡыуаҡлыҡтары менән ҡапланған тыныс тоба ярындағы йәшел туғай һәм минең өсөн генә асылған яланғас гүзәллек килә. Минең күңелем шул ожмахҡа ашҡына ла ваҡыттың кире ҡабатланмаҫына һәм юғалтыуҙарҙың ҡотолоғоһоҙ булыуына көйөнөп кире ҡайта.

Ул бәхетле көндәрҙә миңә йондоҙҙар килде. Төркән менән осрашҡандан һуң яңғыҙым аулаҡ ишек алдында шарап эсеп, ғәрешкә ҡарап ултырғанда, йондоҙҙарҙың төҙөлөшөндә һәм хәрәкәтендә билдәле бер тәртип барлығын аңланым.

Остазымдың уҡырға алған хеҙмәттәрендә астрономик ҡоралдар һәм күк есемдәре хаҡындағы рисәләһе бар ине, һәм мөхәббәтем һүрелә биргәс, күңелемә азатлыҡ ҡайтҡас, уларҙы иғтибар менән уҡырға ниәтләндем.

Минең күңелемдә тағы Төркән менән ҡылған йәшерен ғәмәлдең эҙемтәһе ҡурҡытты. Күрәһең, атайымдан миңә үтә күренмәле орлоҡ күскәндер. Ул ҡәһәрле тип иҫәпләнгән бала тыуҙырыуға һәләтһеҙлек минең өсөн ыңғай һөҙөмтә бирҙе, һәм Аллаһҡа бының өсөн рәхмәтлемен, сөнки был зәғифлек ике кеше ғүмерен ҡотҡарҙы – мине һәм дә хан ҡыҙы Төркәнде, әгәр ҙә ул йәйләүҙән буйында булып ҡайтһа, эш харап ине.

Тормошомдағы әһәмиәтле йәй тамамланды. Иртәнсәк һайын йәшел үлән аҡ бәҫ менән ҡапланғас, беҙ Бохараға ҡайттыҡ. Унда Төркән менән бик һирәк, йәшерен һәм ҡыҫҡа ваҡытҡа осраштыҡ. Ул мәлдәр төш һымаҡ.

Ваҡытымды күберәк фәнгә бирҙем. Остазым вафатынан астрономия йылдам үҫешкән икән. Йондоҙҙарҙы өйрәнеп, астрологияға ла иғтибарым йүнәлде. Уны фән тип иҫәпләмәйем, сөнки фән, минең уйымса,– билдәһеҙлеккә асылған юл, Хәҡиҡәтте мәңгелек эҙләү, хәрәкәт, ә астрология – ҡатып ҡалған ҡағиҙәләр йыйылмаһы, һәм яҡшы хәтерле кеше ул ҡағиҙәләрҙе еңел генә үҙләштерер, әгәр ҙә ул тәьҫирләндереүсе, тауышлы, ҡуҡырайған, эре ҡиәфәтле булһа, ҙур матди килем алыр.

Мин танылған, ғилемле кеше булғас, бәғзе бер һай белемле түрәләр шул эш менән мөрәжәғәт итә ине. Ҡайһы берҙә һораған кеше алдында астрология буйынса эҙләнеү алып барған саҡта ул әҙәмдең киләсәген ап-асыҡ һиҙә башлайым. Уға үҙемдең һиҙенеүҙе әйтәм, һәм әйткәнем күп осраҡта раҫлана, минең шәп астролог даным тарала. Ә бындай шөһрәт миңә оҡшамай, йыш ҡына күрәҙәселектән баш тартам – быны кешеләр яратмай.

Мин үҙемдең тормош юлым хаҡында яҙам. Янымда – башҡалар тормошо һәм ил тормошо. Нимә әһәмиәтле: ил тормошо йә унда көн иткән кешеләр тормошомо? Мин йәшәгән ил яҙмышы минең яҙмышты йыш ҡына көтмәгәндә ҡырҡа үҙгәртә ине. Был юлы ла шулай булды: Бохараның тигеҙ тормошон солтан Арп Арыҫлан, Румға һуғыш менән барып, Византия императорын әсир итеп, Шәмселмөлөк биләмәһендә Мавераннахрҙа[30] үҙенең фарманын урынлаштырырға килә икән, тигән хәбәр боҙҙо. Хаҡан быны Сәмәрҡәндтә ишетә һәм ул Бохараға ҡайтып еткәнсә солтан ғәскәре Аму аша сыға. Шәмселмөлөк уға ҡаршы йүнәлә. Ике ғәскәр Бохаранан көнбайышта бер көнлөк юлда алыша, һәм сәлйөктәр еңеп сыға, әммә ҡаһарман һуғышсы һәм бөйөк ғәскәр башлығы һәләк була. Ғәскәрҙе 17 йәшлек Әбүлфәтих Ялалетдин етәкләй һәм Бохарала Малик шаһ исеме менән тәхеткә ултыра, ә Шәмселмөлөк үҙен уның вассалы тип таный.

Тантанаға сәлйөктәр империяһындағы солтандан һуң иң абруйлы кеше, ҡөҙрәтле вәзир Низамалмөлөк килде. Ул диуанды[31] йыйып, урындағы юғары ҡатлам кешеләрен, ғалимдарҙы саҡырҙы һәм яңы төҙөлгән туғандаш илдәр берлеген маҡтаны. Туғанлыҡты нығытыу өсөн Шәмселмөлөк сәлйөктәр солтаны ҡыҙы Рәһманы кәләш итә, ә Малик хан Шәмселмөлөктөң ҡыҙ туғаны Төркәнде ала.

Мин йыйындан бик бойоғоп ҡайттым, сөнки аяуһыҙ дәүләт сәйәсәте мөхәббәтемде мәңгелеккә тартып алды, һәм, һөйгәнемдең гүзәл тәнен, серле ҡарашын башҡаса күрә алмам, тип уйлағайным. Мине тәрән ҡайғы һәм айырылышыу хисе борсоно, ә яҙмыш миңә тағы ла ауыр кисереш, киҫкен боролош әҙерләне.

Боролош вәзир Низамалмөлөктөң мине шәхси ҡабул итеүенән башланды. Ул мине ваҡытлы резиденцияһына саҡырҙы. Вәзир Аллаһтың көнбайыш ерҙәрендә сәйәхәт иткән сағында кофе эсергә әүәҫләнгән. Миңә лә тәҡдим итте – тәмен аңламаным, ә шарап һәм сәй миңә ныҡыраҡ оҡшай ине.

Вәзир минең турала һорашты һәм мәҙрәсәлә бергә уҡыған, минең менән туғанлашҡан Әбдразаҡтың атаһының ҡустыһы булыуын әйтте.

– Мин һинең ғалим икәнлегеңде Әбдразаҡтың һөйләүе буйынса ла beləm.

Унының туғаны булғас, тимәк, беҙҙең ҙур ғаиләнең ағзаһы булдың. Беҙҙең һәр беребеҙ һәр быуында һиңә яҡлау, ҡурсалау күрһәтер. Әйт, һин ни теләр инең?!

Мин уйлап тормайынса:

– Етеш тормош кисереп, бөтә көстө Хәҡиҡәтте эҙләүгә йүнәлтеп, даими рента булыуын теләр инем,– тип яуапланым.

Вәзир ризалашты.

– Минең фекеремде тыңла: падишаһыбыҙ бик йәш һәм киң ғилемле. Ул Ватанын нығытырға, фәнде, сәнғәтте үстерергә теләй. Баш ҡалала донъялағы иң ҙур обсерватория төҙөп, күк есемдәрен күҙәтергә һәм календарҙы аныҡларға, йәғни ваҡытты үҙгәртергә ниәтләнә. Шуның өсөн һин, бәлки, башҡалар менән аралашмай ижад итеүеңдә 10 – 20 йылға кисектереп торорһоң. Әлбиттә, ҡайҙа булһаң да, рента менән тәьмин ителерһең. Мин бында бер аҙна булам. Шуға тиклем һин ризалығыңды белдер.

Ике көндән мин Малик шаһтың төп фалсыһы булырға ризалығымды белдерҙем. Мин быға тиклем асыҡлай алманым – ризалығым нигеҙендә нимә ята ине: фәнни эҙләнеүҙәргә юл асылыуымы, әллә Төркәнгә яҡынырaҡ булыу теләгеме?

Беҙҙең каруан 20 йыл элек мине Нишапурҙан Бохараға алып килгән каруанға ҡарағанда өс-дүрт тапҡыр оҙон ине. Каруан башында һәм аҙағында ғәскәр барҙы. Иң алда Малик шаһ һәм Төркән свитаһы, унан һуң ярҙамсылары менән бөйөк вәзир, шулар араһында дөйә өҫтөндә мин. Каруанда барған дөйә менән идара кәрәкмәй, үҙ ыңғайына бара бирә, һәм минең уй-фекерҙәрем иркле ине, теләһә ҡайһы мәсьәләне һәр яҡлап ҡарарға мөмкин.

Түңгә менгәс, алтын Бохараға әйләнеп ҡараным. Бында кире килеп булмаҫ, тип уйламаным. Әммә кире килергә насип булһа ла, мин бәхетемде бында таба алмам.

Бер нисә көндән каруан минең Нишапурҙа туҡталды. Бохара кеүек ҡупшы булмаһа ла, ул минең тыуған ерем ине, һәм йөрәгем унда кәмселектәр тапманы. Мәсеттә әсәйем һәм һеңлем Мазендеранан[32] ҡайтып ошонда тороуҙарын, йорттары ҡайҙа урынлашыуын белдем. Мәрхүм Ибраһим хаҡан бүләгенә һатып алынған был йорт күркәм, киң ине. Уны күреп, нисек Низамалмөлөк рентаһына бында тыныс ҡына йәшәр һәм эшләр инем, тип күҙ алдыма килтерҙем һәм уның эшенә тәғәйенләүемә үкендем. Әммә баш тартыуға юл юҡ.

Әсәйем ныҡ ҡартайған, күҙе лә насар күрә икән. Һеңлем ҙурайған, артыҡ матур ҙа түгел, әммә ир-аттар иғтибар итерлек. Улар икеһе лә миңә һарылды, ҡулымды оҙаҡ һыйпанылар. Ғәйшә бер нисә тапҡыр:

– Һин ниндәй сибәр! Ниндәй сибәр! – тип һоҡланыуын белдерҙе.

Минең күңел күтәрелде. Күптән ундай һүҙҙәрҙе ишетмәгәйнем. Былай тип Төркәндең күҙҙәре генә әйтә ине.

Икенсе көн таң менән Нишапурҙан көнбайышҡа, Исфаханға, юл тоттоҡ, Каруан тигеҙ үҙән буйлап алға бара, ә артта, Мағаз тауҙары итәгендә, йәшеллеккә күмелгән шәһрәтле шәһәр ҡалды.

***Аңлатмалар:***

*[1]Фатиха – бында «китапты башлаусы бүлек» мәғәнәһендә.*

*[2]Ғүмәр Хәйәм мемуарҙарының текстын, ваҡытына һәм мәғәнәһенә ҡарап, бүлектәргә И. Евса айырҙы.*

*[3]Мосолман йыл иҫәбе буйынса.*

*[4]Ҡөрьән, 95-се сүрә, 1-се һәм 3-сө аяттар.*

*[5]Хәҙис – Мөхәммәт пәйғәмбәр (с. ғ. с.) әйтеп ҡалдырған хикмәттәр.*

*[6]Ҡөрьән, 51-се сүрә, 24 – 28-се аяттар.*

*[7]Ҡөрьән, 51-се сүрә, 29 – 30-сы аяттар.*

*[8]Хәйәм Абу Абдулла Рудакиҙың алтын Бохара һәм Мөлйән баҡсалары тураһындағы билдәле шиғырын күҙ уңында тота.*

*[9]Аполлоний Пергский (б. э. тиклем – 260 – 170 й.) – Боронғо Греция математигы.*

*[10]«Абруйлы кейем» тип Хәйәм традиция буйынса хаҡан бүләк иткән кейемде атай.*

*[11]Йосоп – Библиялағы Матур Иосиф прототибы булған пәйғәмбәр.*
*[12]Йезид – яратыусы, Хоҙай.*
*[14]Фикх – ислам хоҡуғы.*
*[13]Ике донъя фәлсәфәһе – мосолман һәм Көнбайыш; был урында – антик философия.*
*[14]Ҡаландарҙар – ил гиҙеп йөрөүсе суфый философтары. Һуңынан «Ҡаландарийә» туғанлығына берләшә.*
*[15]Ҡөрьәндең 2-се сүрәһе. Хәйәм 216-сы аяттың баштағы редакцияһын һөйләй.*
*[16]Ҡөрьәндең 4-се сүрәһе.*
*[17]Йәннәт – ожмах баҡсаһы.*
*[18]Ҡөрьәндең 47-се сүрәһе.*
*[19]Фәнәрүз – Сәмәрҡәнд эргәһендәге юғары сифатлы шарап әсеткән ауыл.*
*[20]Магтар – зороастрийҙар, Ирандағы исламға тиклемге дин тотоусылар.*
*[21]Рум – Византия.*
*[22]Остазым тип (Хәйәм) Әбүғәлисинаны атай.*
*[23]Мөхәммәт пәйғәмбәр хәҙистәренән.*
*[24]Хәҙис.*
*[25]Фәриә – ҡыҙ-ҡатындың енси урыны, ғәрәпсәнән – «тишек».*
*[26]Туран – Копет-даг тауҙарының төньяғындағы төбәк.*
*[27]Риүәйәт буйынса, Аллаһ ҡоштарҙы, кейектәрҙе һәм ел-дауылды тәрән аҡыллы Сөләймән падишаһ ҡарамағына биргән.*
*[28]Мәснәүи – ике юллыҡ шиғыр.*
*[29]Әбүсәйет Майхана – суфыйҙарҙың бөйөк остаздарының береһе, шәйх.*
*[30]Мавераннахр – Аму-Дарья менән Һыр-Дарья араһындағы ер.*
*[31]Диуан – йыйылыш, бында – дәүләт шураһы.*
*[32]Мазендеран – Ирандағы өлкә, Каспийҙың Әстрабад ҡалаһы урынлашҡан көньяҡ-көнсығыш яр буйы.*

## Тәржемәсенән кәлимә

Көнсығыш һәм Көнбайыш илдәрендә зыялылар һәм ябай кешеләр ҙә үҙенсәлекле аҡыл эйәһе Ғүмәр Хәйәм һәм уның ижады менән ҡыҙыҡһына, өйрәнә, яттан белә.

Башҡорттар араһында ла унынсы быуатҡа тиклем Көнсығыш илдәренә барыусылар йыш осраған. Бигерәк тә ибн Фаҙландан һуң ислам киңерәк һәм тәрәнерәк таралғас, сәйәхәтселәр, сауҙагәрҙәр, хажға барыусылар йә бәхет эҙләп төрки, фарсы, ғәрәп илдәренә сығып китеүселәр, мажараға, авантюраға бирелеүселәр уның робағиҙарын ишеткән, уҡыған, яттан һөйләп, башҡаларҙа ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Суфыйсылыҡ беҙҙең яҡтарҙа ла таралған.

Беҙ, хәҙерге башҡорттар, уны шағир тип белә инек. Баҡтиһәң, ул беренсе нәүбәттә ғалим-математик икән: тарихты, астрономияны, философияны яҡшы белгән, календарь ҙа төҙөгән. Хәйер, боронғо һәм урта быуат ғалимдарына һәр яҡтан ғилемле булыу хас нәмә.

Урыҫтарҙа уның бер нисә робағийы бер быуат элек кенә (1891 йылда) «Вестник Европы» журналында тәү тапҡыр баҫыла, ә айырым китап булып, совет идеологияһына яраҡлаштырып, мөнйәлеп, 1986 йылда ғына сыға, һәм ул ысын Ғүмәр Хәйәмдән алыҫ ине. Брокгауз һәм Ефрон энциклопедик һүҙлеге, исемен бер аҙ үҙгәртеп, ике шәхес– береһе ғалим, икенсеһе шағир тураһында ялған мәғлүмәт бирә. Икеһе лә бер үк кеше – шағир һәм ғалим Ғүмәр Хәйәм икәнен һүҙлекте әҙерләүсе урыҫтар белмәгән, ә беҙҙең көндәрҙә (90-сы йылдарҙа) сыҡҡан хаталы баҫма, әлбиттә, төҙәтелмәгән.

Минең ҡайһы бер таныштарым, бигерәк тә шағирҙар, Ғ. Хәйәм шиғырҙарын ике телдә лә яттан белә, үҙҙәре лә тәржемәләй. Күптәр Рәми Ғарипов тәржемәһен ярата. Шағир Фәнил Күзбәковҡа рәхмәт, «Ағиҙел» уҡыусыларына мәшһүр Хәйәмдең робағиҙары, бүтән шиғри юлдар нәҡ уның тәржемәһендә тәҡдим ителде.

Лео Яковлевтың повесы (Омар Хаям. «Сад истин», Москва, 2009) Ғ. Хәйәмде беҙгә икенсе яҡтан аса – беҙҙең күбебеҙ уның үҫмер, йәш сағын белмәй инек. Был әҫәр мәшһүр шәхесте тулыраҡ күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Әммә

автор, хәҙерге урыҫ әҙәбиәтенә, кинофильмдарға ярашлы, беҙҙең әхлаҡҡа һыймағандарҙы ла ҡыҫтыра. Повестың ундай әшәке урындарын мөмкин тиклем ҡыҫҡартырға тырыштыҡ.

Ғ. Хәйәм менән минең тормош араһындағы ваҡыт аралығы мең йыл самаһы булһа ла, ҡайһы бер донъяуи, дини, фәлсәфәүи мәсьәләләргә беҙҙең ҡараш тап килә, тигән һығымта яһарға баҙнат иттем дә әлеге тәржемәгә тотондом. Ҡараштар тап килгәнгә Фәнил Күзбәковтың Ғүмәр Хәйәмгә арналған шиғыры менән бәйәнде тамамлайым.

**Дамир КҮСКИЛДИН,**
**тарихсы.**

## *МӘҢГЕЛЕК САПҠЫНЫ*

(Ғүмәр Хәйәм ижадын бер ҡатлы
аңлаған уҡыусыларға яуабым)

*Данлай шарап, ҡатын-ҡыҙҙы,*
*Кәйеф-сафа ҡороуҙы.*
*Бар тип белмәй муллаларҙы,*
*Дин-шиғриәт, тыйыуҙы...*

*Яңылышаһың, уҡыусым,*
*Бер ҡатлы һинең уйың.*
*Ғүмәр Хәйәм*
*мәңгелектең*
*Үлсәгән иңен-буйын.*
*Был үлсәүҙәр, шикләнеүҙәр,*
*Өҙгөләнеүҙәр менән,*
*Йәшәүҙәргә, гүзәл затҡа*
*Янып һөйөүҙәр менән,*
*Ике йөҙлө бәндәләргә*
*Сәнсеп нәфрәт һөңгөһөн, –*
*Данлай ул рух азатлығын,*
*Кешеләрҙең тиңлеген.*

*Уның уйҙарына һыйған*
*Осһоҙ-ҡырыйһыҙ йыһан.*
*Шул йыһанда, мәңгелектә*
*Мәлдәрҙән кәрәҙ ҡойған.*

*Ул кәрәҙҙә*
*мәңгелектең*
*Балҡып һүнгән мәлдәре,*
*Әҙәми зат ғазаптары,*
*Күбәләктәй йәндәре.*

*Мәңгелектең*
*ҡабатланмаҫ*
*Мәл икәнен белгән ул.*
*Шуға мәлдән мәңгелеккә*
*Сапҡын булып елгән ул!*

## *2011 — Башҡортостанда милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы*

# БАШҠОРТ ЯҘМЫШЫ ЙӘКИ ПАРАЛЛЕЛЬ ҺУҒЫШТАР

Параллель һуғыштар буламы? Был төшөнсә бер кем тарафынан да телгә алынғаны юҡ. Ғөмүмән, уны һүҙлектәрҙә лә осратып булмай. Шулай ҙа параллель һуғыштың асылын аңлатып ҡарайыҡ. Һуғыштар, ғәҙәттә, өҫтөнлөк алыу өсөн алып барыла, ә бер өҫтөнлөк тә көрәшһеҙ бирелмәй. Минеңсә, параллель һуғыштың маҡсаты – айырым дәүләт эсендә теге йәки был милләттең һанын ҡырҡа кәметеү иҫәбенә этностың сәйәси мөмкинлеген юҡ итеүҙән ғибәрәт.

Тарих төпкөлөнә ҡараш ташлауҙың кәрәге юҡ, сөнки параллель һуғыштар үрнәге Рәсәйҙә лә етерлек. Һәр доминат милләт үҙ етәксеһен тыуҙырып, уны гений итеп күрергә ынтыла. Параллель һуғыш ойоштороусыларҙың иң сағыу өлгөһө – Петр I, сөнки дыуамал батша табыш өсөн генә һуғышмаған, дан да эҙләгән. Шуныһын да әйтеү мотлаҡ: Петр батша донъяға һуңлабыраҡ килгән. Сөнки был дәүерҙә Ебәк юлы менән Бөйөк дала сәйәси-иҡтисади әһәмиәтен юғалта. Инде диңгеҙ юлдарын ҡулға төшөрөү беренсе урынға сығып, яңы державалар: Бөйөк Британия, Испания, Португалия, Германия, Франция барлыҡҡа килә. Европа илбаҫарҙарының иң ҙур маҡсаты – Һиндостанға диңгеҙ юлын асыу.

Ләкин был юлды эҙләүселәр Ер шарының икенсе яртыһына – Американа барып сыға. Алтын, затлы таштар, ынйылар, башҡа ҡиммәтле тауарҙар Европаға ботлап түгел, тонналап ағыла башлай. Талап алынған байлыҡ был ҡитға илдәрен иҫ китерлек кимәлгә күтәрә. Европа колонизаторҙары Америка менән генә сикләнеп ҡалмай, Африка, Көньяҡ-Көнсығыш Азия, Австралияны ла яулай.

Бына ошо мәлдә, донъя державалар тарафынан бүленеп бөткән осорҙа, Петр I Европаға аяҡ баҫа. Тап ошонда буласаҡ императорҙа Рәсәйҙе лә диңгеҙ державаһына әүрелдереү маҡсаты уяна.

Эйе, Петр батша үҙенең ҡарашын Аттила ҡалдырған иң бөйөк ҡомартҡы – Бөйөк далаға йүнәлтә, сөнки Урта Азия һәм Себерҙең ҡайһы бер өлөштәре әле бер дәүләт тарафынан да яулап алынмаған. Шулай ҙа Петр I диңгеҙ юлдарын кемдәрҙер ҡулынан тартып алыу өсөн барлыҡ дәртен, ресурстарын файҙалана. Бына шулай кемдәргәлер ҡапҡан һалырға яҫҡынған батша үҙе үк Рәсәйҙе ҡоролған ҡапҡанға яҡынлаштыра. Тап шул осорҙан Рәсәй Көнбайыш Европаның ярым колонияһына әүерелә башлай. Петр көстө ҡайҙан ала һуң? Рәсәй киңлектәрендә сәнәғәт, ҡала халҡы юҡ нисбәтендә, ә крепостной крәҫтиәндән күпте өмөт итеү урынһыҙ. Һөҙөмтәлә батша һаҡалдарға тиклем һалым һалып ҡарай, хатта сиркәүҙәрҙе талауға барып етә. Әммә был ғына етмәй, һәм Петрға башҡорт иленән дә килемлерәк төбәк юҡ кеүек тойола башлай. Башҡорттар үҙ теләктәре менән «рәсәйләшергә» риза булған бит. Бына нисек башҡорт иле үҙ ирке менән

ҡоллоҡтан да ҡатыраҡ, баҫҡындан да рәхимһеҙерәк шарттарға ҡуйыла. Бындай шартты беренсе булып Петр ҡуя, Бөйөк дала ҡағиҙәләрен боҙа.

Аңлау һәм аңлатыу ҡыйын ул дәүерҙе. Урыҫ крепостнойҙарының хәлен ҡолдар хәле менән дә сағыштырып булмай, ҡолдар ҙа туйғансы туҡлана алған. Шулай итеп, күп быуаттар ирәүәнлектә йәшәгән башҡорттар урыҫ крәҫтиәненән дә мөшкөләрәк хәлгә төшөрөлә. Хәйер, Европала ла тыныс түгел, сөнки Аттила көнсығыштан килгән, ҡитға халҡының ҡотон алған. Тимәк, төрки халыҡтар Европа өсөн хәүефле. Бына шулай, фәҡәт европалылар башҡортҡа бармаҡ төртөп күрһәтә. Башҡорт ғәҙәте үҙенсәлекле: ул "юҡ" тип әйтергә күнекмәгән. Бына ошо ғәҙәт халҡыбыҙҙың ҙур бәләһенә әйләнә лә инде. Йомарт башҡорт илен рәхимһеҙ талау башлана. Ә талау бер төрлө генә булмай, мәҫәлән, башҡорт ерҙәре иҫ китерлек масштабта тартып алына. Әлеге Ырымбур өлкәһе – тотошлай аҫабалар төйәге, шулай уҡ Силәбе, Свердловск, Курган өлкәләре лә – башҡорттоҡо, Пермь, Һамар, Һарытау тарафтарында ла халҡыбыҙҙың өлөшө бар.

Талап алғанды нығытып ҡуйыу – башҡорт ерҙәрендә заводтар төҙөү сәйәсәте. Эйе, яңы сәнәғәткә нигеҙ һалыу өсөн ул ваҡытта, башҡорт ерҙәренән дә уңайлыраҡ төбәк, башҡорт атынан да ҡулай транспорт булмай. Башҡорттарҙы һуҡыр тингә эшләткәндәр. Тау һәм ер аҫты байлыҡтары, хатта йылғалар ҙа батша милкенә әүерелгән. Иҫ китерлек хәл: урмандағы еләктәр ҙә, хатта аслыҡ йылдарҙа үлемдән ҡотҡара торған һарына ла – батшаныҡы. Тоҙ ҙа – император милке, унан файҙаланған өсөн һалым түләргә кәрәк. Илек тоҙо – үҙе бер тарих.

Тоҙ кәсебе башҡорт ерендә ҡала – Стәрлетамаҡҡа нигеҙ һалыныуға сәбәп була. Урыҫлашҡан татар кәсепсеһе Тетюшев батшабикә Екатерина янына барып, Ашҡаҙар йылғаһы тамағында тоҙ пристане төҙөүгә хоҡуҡ юллап ала. Эйе, Петр I үҙ батшалығын сәйер вариҫтарға ҡалдыра. Аҡһаҡ Тимер вариҫтары ғалим, астроном булып китһә, Петрҙыҡылар иһә уйнашсылыҡҡа бирелә. Көнбайыш Европаның титуллы барон ҡыҙҙары Рәсәй титуллыларына кейәүгә сыҡҡан. Екатерина II-се лә – шулар араһынан. Эйе, ир баш була алмай икән, ҡатын муйындан башҡа әүерелә.

Рәсәй тәхетен ҡатын-ҡыҙ биләгән мәл Көнбайыш йоғонтоһон байтаҡҡа көсәйтеп, хәрби сығымдарҙан башҡалары ла өҫтәлә. Эйе, батша ҡатын кеше генә түгел, уның тирәһендәгеләр ҙә Европаны уҙҙырып кейенергә, йәшәргә теләгән. Һарайҙың да Көнбайыштағы туташ-ханымдарҙыҡынан шәберәк булыуы мотлаҡ. Ошолай фекер йөрөткәндә, күн итек кейергә өйрәнгән башҡорттар ҙа, урыҫ кеүек, сабата кейергә тейеш килеп сыға. Ә бит кейҙергәндәр. Шулай итеп, Рәсәй – Көнбайыштың ярым колонияһына әйләнә, ә Башҡорт иле икеләтә колониаль ҡыҫымға дусар ителә. Америкала ла, Африкала ла бындай ҡот осҡос талау булмаған, тип әйтергә батырсылыҡ итәм. Шул рәүешле Көнбайыш Европа төрки халыҡтарҙан үс ҡайтарған, ә Романовтар нәҫелен улар ялсы итеп файҙаланған.

Урта быуаттарҙағы Тәре походтары уңышһыҙлыҡҡа дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, Петр I заманында Көньяҡ Урал өҫтөндә тәре күләгәһе өҫтөнлөккә өлгәште. Әлбиттә, башҡортҡа бер генә дәүләт тә исламдан башҡа динде көсләп таға, башҡортто суҡындыра алмаған. Ә бына Көнбайыштағы өҙлөкһөҙ булып торған һуғыштарҙа ҡатнашыуҙан ата-бабаларыбыҙ баш тарта алмаған. Наполеон яуына ҡаршы тороу өсөн, мәҫәлән, башҡорттарҙан 28 атлы полк ойошторолған. Күкрәгенә тәре таҡмаған башҡорт яугирҙары батыр һуғышҡан, батша тәхетенә тоғролоҡто һаҡлаған. Ошо йәһәттән "төпкәрәк"тә төшөргә мөмкин.

Башҡорттар Петр I яулап алыу һуғыштарында ла тоғролоҡ күрһәткән, оҫта алышҡан. Ә ни өсөн батшалар уларға ҡарата ихтирам күрһәтмәгән һуң? Әйтәйек, Алдар Исәнгилдин Петрҙың иң батыр яугиры һаналған, тиһәк, яңылышмабыҙ. Ә ни өсөн батырға хөрмәт булмаған? Ә бит был игелекһеҙлек батшаларҙың әхлаҡи йөҙөн күрһәтеп тора.

Полтава янындағы һуғышта Запорожье казактары швед короле Карл XII яғында һуғышып та, артабан рус батшаһы тарафынан бер ниндәй язаға тарттырылмаған. Бындай миҫалдар аҙ түгел. Алтын Урҙа вариҫтары араһында православие динен ҡабул итергә әҙер торғандар ҙа аҙ булмаған. Суҡыныу ғына түгел, батша мәнфәғәте өсөн башкиҫәргә әүерелеүселәрҙе лә тарих бихисап белә. Алтын Урҙа көтөүселәре – нуғайҙар үҙ һөнәрен ташламаны, башҡаларға көтөүсе булып киттеләр. Татар хандарының даны һүрелеп, Мәскәүҙә усаҡ тоҡанғайны, нуғайҙар үҙ урҙаһын ташлап, Мәскәү йылыһына ынтылды. Эйе, улар Алдар кеүек күренекле шәхес тыуҙыра алманы. Ә бына Рәсәй тәхете өсөн Урусов йәки Тевкелев кеүек ҡәбәхәттәрҙе тиҙ арала табып бирҙеләр. Ундайҙарҙы батша хөкүмәте параллель һуғыштарҙа оҫта файҙаланды. Тевкелев ҡырған башҡорттар исән ҡалһа, бер миллиондан артыҡ үрсем бирер ине.

XVIII быуат башында батша кешеләре башҡорт ерҙәрендә заводтар төҙөргә тотона. Кәсепсе Молодов 1714 йылда Көнгөр баҡыр иретеү заводын ҡаҙна аҡсаһына һалдыра. 1773 – 1775 йылдарҙағы ихтилал алдынан башҡорт ерҙәрендә 27 баҡыр, 26 суйын, ҡорос, дүрт ҡатнаш (баҡыр, ҡорос) иретеү заводтары эшләй. Демидовтар, Масловтар, Осокиндар, Лугиндар, Твердышев, Мясников, Губин, Рычков – Көньяҡ Уралда завод хужалары. Дөрөҫ, заводчиктар башҡорттар араһынан да сыҡҡан. Мәҫәлән, Исмәғил һәм Мөхәмәтрәхим Тасимовтар, Туҡтамыш Ишбулатов. Исмәғил Тасимов – хатта Рәсәйҙә беренсе булып юғары техник уҡыу йорто астырыуға өлгәшкән шәхес. Батша хөкүмәте сәйәси эшмәкәрлекте эҙмә-эҙлекле алып барһа, Көнбайыштан килгән кәңәштәргә аҙыраҡ ҡолаҡ һалһа… Эйе, Көньяҡ Урал Германияның Рурын уҙҙыра алыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уҙҙыра алманы, сөнки урыҫ сәнәғәтселәре табылған килемдәрен әлеге Европа илдәрендә туҙҙырырға яратты. Урыҫ капиталы ла Көнбайыш тормошон юғары кимәлгә күтәреп, Көньяҡ Уралды урта быуатҡа этәрҙе. Башҡорт ерҙәренә ябырылған бөлгөнлөктәр яңынан-яңы ихтилалдар тоҡаныуға килтерҙе. Ошондай үҙенсәлекле ысул менән Рәсәйҙе "түбәләү" Европаның иң яратҡан һөнәренә әйләнде. Беренсе бөтә донъя һуғышы бик ғибрәтле хәлде асыҡланы: Көнбайыш даирәләре Рәсәй батшаһын ҡан ҡойошҡа әйҙәне, ә империя, бар көсөн һуғышҡа исраф иткәндән һуң, тубыҡтары ҡалтырап, тиңһеҙ сыуалышҡа дусар ителде. Параллель һуғыш та батшаға табыш килтермәне – фәҡирҙән ни алаһың инде? Билгеле, бындай һуғыштар ике яҡ мәнфәғәте менән генә сикләнмәй, ғәҙәттә, өсөнсө яҡ та була. 1914 – 1918 йылдарҙағы һуғышта өс яҡ та отолған хәлдә ине. Һуғышты Европа Рәсәй ҡатнашлығынан тыш тамамланы, ә Советтар Рәсәйе Германия менән солох төҙөп, кәмһетелде. Башҡорттар иһә тағы ла нығыраҡ бөлгөнлөккә төшөрөлдө, баш күтәрерлек хәле ҡалманы.

Отолған тағы бер яҡ бар: Романовтар тоҡомо сәйәси сәхнәнән һепереп түгелде. Был династияның тиҫтәнән артыҡ быуынының башҡорт ерҙәрен таларға әмер биреп ятҡанын ҡайһы берәүҙәр беләме икән? Шуныһы иғтибарға лайыҡ: Романовтарҙың һуңғы быуыны башҡорт ерендә юҡ ителде. Аллаға шөкөр, был гонаһлы эштә башҡорттоң ҡатнашлығы булманы. Кем белә, бәлки, Рәсәйҙең

һуңғы батшаһы Николай II аҙаҡҡы минуттарында ошо турала уйлап та өлгөргәндер.

Шулай итеп, Рәсәй батшаһыҙ көндәргә тарый, йәғни батшалыҡты баш-баштаҡлыҡ алмаштыра. Мәшхәр мәл: ҡорал тотҡан һәр зат үҙен ҡаһарман итеп тоя. Аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа талантлы, ғәйрәтле хәрби етәкселәрҙе күпләп таба. Эйе, герман менән һуғышырға һәләтһеҙҙәр үҙ граждандары менән иҫ китерлек оҫталыҡ күрһәтеп алыша. Ҡыҙыл партизан Блюхер рейдын Суворовтың Альп тауҙары аша героик походы менән сағыштырыусылар табылды. Эйе, "бөйөк" ихтилал Петроградта тоҡанды, ә башҡорт ерҙәрен утҡа һалды.

Ни өсөн аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа башҡорт ерҙәренә ябырылды һуң? Сөнки Мәскәүҙә йәки Петроградта талап тамаҡ туйҙырыу мөмкин түгел ине. Ҡыҙыл командирҙар М. Фрунзе, В. Чапаев, Д. Гай, К. Блюхер, аҡтарҙың башлыҡтарынан атаман А. Дутов, А. Колчак, аҡ казактар, әсир чехтар, Пенза, Смоленск асарбаҡтары – барыһы ла башҡорт ерҙәренә ашыға. Талауҙар, үлтереүҙәр, көсләүҙәр – үлектәрҙе иҫәпләүсе лә юҡ. Блюхерсыларҙың һәм Гай яугирҙарының ҡылғанына, моғайын, фашистар ҙа көнләшә алыр ине. Тау башҡорттары – малсы, ә малды ергә күмеп йәшереп булмай. Блюхер үткән юлдағы башҡорт ауылдары бөтөнләй мөлкәтһеҙ ҡалды.

Граждандар һуғышының ҡыҙған мәлендә башҡорт халҡын яҡлау өсөн Зәки Вәлиди етәкселегендә башҡорт ғәскәре ойошторола. Колчак та үҙ көсөн башҡорт иҫәбенә арттырырға самалай, сөнки башҡорт – оҫта һуғышсы. Был турала Көнбайышта ла ишетеп ҡалалар. Һөҙөмтәлә Колчакка ҡәтғи күрһәтмә бирелә: "Башҡорттарға ҡорал бирмәҫкә!" Ғәжәп бит, әсирлектәге чехтарҙы ҡоралландырыу мотлаҡ, ә башҡорт, әйҙә, ҡоралһыҙ һуғышһын. Аҡ чехтар Колчакты яҡлай алманы. Ә бер вагон алтындың кеҫәләренә һыймаған өлөшөн Байкал күленә батырҙылар. Әгәр был байлыҡты башҡорттар ҡарауыллаһа? Юҡ шул, Рәсәй киңлектәре намыҫ һаҡлағандар өсөн түгел.

"Азатлыҡ" өсөн көрәшеүсе большевизм Рәсәй төбәктәренә урта быуаттағы ҡағиҙәләрҙе урынлаштырғас, башҡорт ерҙәренә лә ғазаплы көндәр килде. Был мәсьәләгә айырым туҡталыу мотлаҡ, сөнки марксизм – Көнбайыш Европала үҫтерелгән емеш. Ниңәлер ул Парижға ла, Женева менән Лондонға ла кәрәкмәй, ә бына Рәсәйгә бүләк итеп бирелә. Эйе, "емеш" Рәсәйгә ышаныслы ҡулдар аша еткерелә.

Әйтергә кәрәк, ике башлы ҡош – ғәриплек билдәһе. Совет власы унан ваз кисте, ә Рәсәй ғәҙәтенән ваз кисә алманы. Большевиктар юлбашсыһы В. Лениндың иғтибары күберәк осраҡта Көнбайышҡа төбәлде. Эйе, уның аҡылы менән Финляндияға тулы азатлыҡ бирелде, ә башҡорттар өсөн тар ғына автономия юллап алыу ҙа иҫ китерлек ҡаршылыҡтарға юлыҡты. Хәйер, Владимир Ильичтың хәлен аңлау ҡыйын түгел: Рәсәй ҙур, ә талау өсөн урындар самалы. Етмәһә, күптәрҙе урта быуаттарҙағыса эшләтергә мөмкин. Башҡортостандың маңлайына яҙылған: Рәсәйҙе туйҙырыусы, һуңғы аҙығын биреп тороусы, бигерәк тә болалы мәлдәрҙә.

Ябай башҡорт – мал ҡараусы милли азатлыҡ өсөн көрәштә етәксе булырға һәләтле лә түгелдер. Һәр этнос үҙ етәксеһен үҙенсә тыуҙыра, ә башҡорт халҡы бер ҡасан да юлбашсыға мохтаж булманы. Бына ни өсөн батша хөкүмәте һәр саҡ көрәште башҡорт етәкселәренә ҡаршы йүнәлтте, сөнки ябай халыҡты теләһә ҡайҙа әйҙәргә мөмкин. Совет власы ла был ғәҙәтте һә тигәнсе үҙләштереп алды.

Юҡ, Романовтар кеүек етәкселәрҙе ситләтеп йәки һөргөнгә ҡыуып түгел. Ленинизм ҡыҫҡараҡ юлды һайланы, террорға мөрәжәғәт итте. Ә бына Зәки Вәлиди Ленин менән Сталиндың пландарын күрәҙәләү һәләтенә эйә булды, шуға күрә ул И. Сталин ҡармағына эләкмәне, фән өлкәһендә булһа ла үҙ юлын тапты.

Граждандар һуғышының иң ҙур һөҙөмтәһе – аслыҡ. Ә аслыҡ, һис шикһеҙ, таланыуға дусар ителгән этностың ҡырҡа кәмеүенә килтерә. Аслыҡтың бер нисә төрө бар, беренсеһе – тәбиғәт тарафынан тыуҙырылғаны. Ә икенсеһе – килмешәктәр, йәғни көс ҡулланып талаусы хакимдар һәм башҡа этностар килтергәне. Өсөнсө типтағыһы ла бар – резонанс аслығы. Ике төр аслыҡ бер осорҙа килһә, ҡот осҡос әҙемтә бирә. 1921 йылда башҡорт еренә бына ошондай аслыҡ ябырылды. Большевиктар дусар иткән аслыҡҡа ҡаты ҡоролоҡ та өҫтәлеп, резонанс аслығы килде. Башҡорт балалары күпләп үлде, ауылдар һүнде.

Көньяҡ Урал тарафы борон-борондан күпселеге ҡорал тотоп, усал ниәт менән килгән килмешәкһеҙ йәшәмәне. Башҡортта һәр төрки этносының ҡаны бар, тип әйтһәк тә, хата булмаç. Тәүге урыҫ килмешәктәренә күҙ һалайыҡ. Петр заманына тиклем улар ҡорал тотоп килмәгән әле. Башта ҡоллоҡтан ҡасып килеүселәр булған – христиандар йәки староверҙар. Улар меҫкен ҡиәфәтендә килгән, ә ҡунаҡсыл башҡорт уларға һыйыныу урыны биргән. Ысынбарлыҡта староверҙар үҙенсәлекле заттар булып сыҡҡан. Кешелек психологияһы үтә сәйер һәм ғәжәйеп, староверҙарҙың башҡорттарға үпкәләргә бер ҙә урыны юҡ. Билдәле булыуынса, патриарх Никон уларҙы ҡыҫымға алған, рәнйеткән. Ә рәнйегәндәр, башҡорт еренә килгәс, быны ҡонон кемдәндер ҡайтарырға теләгән. Никонға үпкәләп, башҡорттар менән дә аралашып йәшәргә теләмәгәндәр: имеш, дин ҡанундары ҡушмай. Бына ошо үҙенсәлек, тора-бара, тиҫкәрелеккә әүерелгән. Эйе, старовер сүмесенән һыу эсеү башҡа дин кешеләре өсөн мөмкин булмаған. Әгәр старовер ҡойоһонан кемдер һыу алһа, ҡойо күмелеп, яңыһы ҡаҙылған. Бергә ризыҡланыу бөтөнләй тыйылған. Тимәк, старовер, дингә һылтанып, башҡаларҙан кәртәләнеп йәшәргә ынтылған.

Әйтергә кәрәк, урыҫ ҡапҡаһының да үҙ сере бар. Бейек ҡапҡа һәм ҡойма аша эске донъя күренмәгән. Ә бында бер ниндәй ҙә сер юҡ, йәшерә белеү – юлбаҫар тормошоноң беренсе ҡағиҙәһе. Ысынлап та, старовер утарҙары оло юлдарға яҡын урынлашып, ошо юлдарҙан йөрөгән башҡорттар даими таланған, үлтерештәр ҙә аҙ булмаған. Бына, мәҫәлән, Һәләүек башҡорттары Стәрлетамаҡ баҙарынан ҡайтышлай Торатау биленә күтәрелгән. Был урын талау өсөн бигерәк тә уңайлы булған. Ә ҡаланан көньяҡҡа ҡайтыусылар Ҡанлы йылғаны сығып тауға күтәрелгәндә таланған. Көнбайышҡа ҡайтыусылар өсөн дә ҡурҡыныслы урын булған, быныһы – Усылы менән Рязановка ауылдары араһындағы урманлы үҙән. Был тирәлә лә бер нисә хәүефле утар урынлашҡан. Бына шулай башҡорт үҙен талатыр өсөн "ҡунаҡтар" тапҡан, ә урыҫтар башҡорт ерендә партизан хәрәкәтен башлаған. Батша хөкүмәте иһә талаусыларға ҡаршы ҡыл да ҡыбырҙатмаған, киреһенсә, башҡортто уғрылыҡта ғәйепләү көсәйгән.

Стәрлетамаҡта ла ауыл халҡын талау оҫта үҙләштерелгән. Ҡала ситендә килмешәктәр Сайгановка биҫтәһен төҙөп алған. Әлеге урыҫ ҡапҡаһы үҙ ролендә. НЭП йылдарында әсәйемдең бер туған ағаһы Зәйнулла Латипов Сәлих ауылынан Стәрлетамаҡ баҙарына бесән һатырға килгән. Һатып алыусы тиҙ табылған, хаҡ һөйләшелгән. Бесәнде Сайгановкаға алып барып бушатыу мотлаҡ. Зәйнулла бабай бер ҡатлы кеше булмаған, алдан бер иптәшен иҫкәртеп

ҡуйған. Бабайҙың ауылдашы арттан күҙәтеп барған, бесәндең ҡайһы ҡапҡаға индерелгәнен күргән. Ә Зәйнулла бабай кире сыҡмаған, ат-санаһы ла күренмәгән. Бабайҙың дуҫы күп урындарға барып, тауыш ҡуптарып ҡараған, ләкин, батша ваҡытындағы кеүек, башҡортто яҡлаусы булмаған. Сайгановка халҡы кеше талауҙы беренсе һөнәр итеп үҙләштергән. Урланған малдың тиреһен эшкәртеү, тун тегеү ҙә булған, һуйылған мал итен дә һатҡандар – шундай кәсеп менән йәшәгәндәр.

Килмешәктәрҙең башҡорт еренә күпләп килеүе баҡыр иретеү заводтарының йылдам эшләгән йылдарҙа була. Пашков кеүек заводсы йылына йөҙәр мең һум килем алған. Бер генә ҡоллоҡ державаһында ла бындай „уңыш“ты төштәрендә лә күрә алмағандар. Был турала байтаҡ китаптар яҙылған, тик шуныһы үкенесле: Көньяҡ Уралдағы ҡоллоҡ системаһы менән маҡтаныусылар күп. В. А. Пашковтың Богоявленск биләмәһе (хәҙер – Красноусольск) 1895 йылда ғына 40279 һум саф килем биргән. Бында ҙурыраҡ иҫәпләнгән быяла заводынығы юҡ әле. Тимәк, биләмәнең килеме йөҙ мең һум самаһы. Ә биләмәнән файҙаланған өсөн Пашковтар ни бары 400 һумлап ҡына түләгән. Ә ул ерҙәр урыҫ байына 150 йыл самаһы даими килем биреп торған. Тимәк, һәр йыл өсөн дүрт һумдан артыҡ түләнмәгән. Ҡырҡ мең процент самаһы килем мөмкинме? Пашков, беләһегеҙ килһә, үҙенең биләмәһенә бөтөнләй килеп тә урамаған, эш барышын да белмәгән. Биләмәгә ҡәбәхәтлектең сиген белмәгән немецтар идара иткән. Ниндәйҙер инглиз белгесе лә рәхимһеҙлеге менән урындағы халыҡтың теңкәһенә тейгән.

Пашковҡа кемдәр хеҙмәт иткән? Әлбиттә, иң элек – приказчик. Унан ҡала иң юғары дәрәжәле эшмәкәр – мастер. Һуңғыһының йыллыҡ эш хаҡы 30 – 36 һум тәшкил итеп, унан түбәнерәктәргә йылына 18 – 24, ә ябай урыҫ эшсеһенә 15 һум түләнгән. Башҡорттарҙы иһә бушҡа эшләткәндәр. Бына шулай, бер генә быуатта ла, бер генә илдә лә бындай хурлыҡҡа төшөү күҙәтелмәй. Рәсәйҙең ояттһыҙлығы – Европа бүләге. Рәсәй феодализмы – Европа өсөн Ҡытай стенаһынан да ышаныслыраҡ ныҒытма. Пашковтың Верхотор баҡыр иретеү заводы барлығы 1,7 миллион бот саф баҡыр биргән, башҡа заводтар ҙа был йәһәттән әллә ни артта ҡалмаған. 150 йыллап дәүер эсендә был тиклем баҡырҙы хатта тотош ҡитғалар ҙа бирә алмаған. Ә ҡайҙа киткән бындай байлыҡ, килем? Әлбиттә, Көнбайыш Европаға аҡҡан. Урыҫтың бөйөктәре лә, аҡылға һайыраҡтары ла шул тарафтарҙа типтерергә яратҡан. Көньяҡ Уралдың тәбиғи байлыҡтары Швейцариянықынан бер ҙә кәм түгел, ә үҙе хәйерселектән сыға алмаған. Ә бына әлеге Швейцария ауылы һыйыр һөтөнән сыр яһап ҡына бына тигән курорт-ҡала төҙөй алған, сөнки бында ял итергә һәр йыл ҡалын кеҫәле урыҫ алпауыттары килгән.

Демидовтар, Твердышевтар, Мясниковтар, Пашковтар һәм кәрт оҫтаһы Дурасов кеүектәр – башҡорт өсөн килмешәклек символы, батша хөкүмәте өсөн – ғорурлыҡ билдәһе. Көньяҡ Урал мөлкәтен Көнбайышта туҙҙырыусылар менән ғорурланыуҙы аңлау мөмкин түгел. Ысынбарлыҡта Көнбайыш ошоноң менән Рәсәй империяһын артҡа һөйрәгән. Артабан тамам бөлгөнлөккә төшкән ил большевиктар ҡулына эләгеп, ул дәүерҙә баҡыр иретеү һөнәре бөтөнләй онотолоп тора. Баҡыр иретеүсе урыҫ эшселәре лә ябай ауыл халҡына әүерелә. Ә килмешәктәр ағымы туҡталмай. Эйе, большевиктар ҙа бик тиҙ арала Романовтар юлына баҫты. Кронштадтта матростар күтәрелеше тураһында күптәр белә. Тельняшкалыларҙың күптәрен аттырҙылар, байтағы Финляндияға ҡасып ҡотолдо. Ә иҫән ҡалғандарын ҡайҙа ҡуйырға? Балтик диңгеҙе тирәһендә урын

былай ҙа тар. Фетнәселәрҙе Башҡортостанға, әлеге Ишембай районына килтерҙеләр. Военмор тип аталған утар әле лә бар. Шуныһын да әйтеү мотлаҡ: элеккe диңгеҙселәр ат урламаны, башҡорттар менән татыу көн итеп, тейешле ярҙам да алдылар.

Ә шулай ҙа большевиктарға баш ватыр ваҡыт килде: Мәскәү, Ленинград халҡының тамағын нисек туйҙырырға? Ашамлыҡ йүнәтеү өсөн кулактар табылды, мөлкәттәре тартып алынды. Эйе, „ҡан эскестәр“ҙең барыһын да Себергә ҡыуманылар. Ишембай районының Әптек ауылына, мәҫәлән, уларҙы ғаиләләре менән килтерҙеләр. Әптектең һәм тағы бер нисә ауылдың иң уңдырышлы ерҙәре тартып алынып, был ерҙә һөрөлгәндәр өсөн лагерь барлыҡҡа килде. Бына шулай, татар-монгол хакимдары Һәләүектә биләмә ҡора алманы, нуғайҙар ҙа баҙнат итмәне, батша хөкүмәте лә бында урыҫ ауылы төҙөтмәне. Ә Сталин уйлап та торманы, урындағы халыҡтың ергә хоҡуғы юҡлығын һә тигәнсе иҫбатланы. Тик кулактар эште үҙҙәренсә башҡарып, бар ауыр эште урындағы халыҡ – башҡорттарға ауҙарҙы. Ә ойошторолған совхозда кулактарға "йылы урындар" етерлек булды. Һуғыш башланғас, лагерға Волга буйы немецтарын ҡыуалап килтерҙеләр. Һуғыш тамамланғас иһә, әсирлектә йөрөгән совет һалдаттары өсөн төрмә төҙөлдө. Икенсе төрмә лә бар ине – ҡатын-ҡыҙҙар өсөн. Хәҙер генә Әптектә төрмәләр юҡ, Сталин иҫтәлеге булып ҙур ҡасаба ҡалды.

Ниндәй генә дәүер булмаһын, Рәсәй хөкүмәте Башҡортостанды бәләкәй провинция итеп кенә күрергә тырышты, урындағы халыҡтың ихтыяждарына иғтибар бирелмәне. Ә СССР-ҙың көнбайыш өлөшөндә Совет хөкүмәте тантаналы марштар уйнатып, бөйөк төҙөлөштәр башланы, күп көс, матди мөмкинлектәр шунда түгелде. Днепрогэс, Запорожсталь, Харьковтағы трактор, авиация заводтары, Донбасс...

Ошо юлдар авторы, был турала үҙ фекерле булараҡ, күп йылдар үҙенсә уйлағандарҙы эҙләне һәм... тапты. Батша дәүеренең генерал-майоры, ғалим А.А. Свечин 1937 йылда уҡ былай тигән: "Ҡыҙыл Армия оборона мәсьәләһенә бөтөнләй әһәмиәт бирмәй, һөжүм итеү тактикаһын ғына күҙ уңында тота. Оборона өсөн әһәмиәтле предприятиелар Урал төбәгендә генә төҙөлөргә тейеш ине. Авиация һәм танкылар ҡулланыу Ленинградты, хатта Мәскәүҙе хәүефле хәлдә ҡалдырасаҡ". Ғалимды беренсе тапҡыр 1930 йылда ҡулға алып, урман киҫергә ебәрәләр. 1938 йылда ул икенсе тапҡыр ҡулға алына һәм атырға хөкөм ителә.

Әйтергә кәрәк, Бөйөк Ватан һуғышы алдынан да төп көстәр дөрөҫ урынлаштырылмай. Быныһы ла Сталин аҡылы менән эшләнгән. Стратегик йәһәттән төп көстәр Днепр – Двина һыҙығында булырға тейеш ине. Бына ни өсөн Гитлер һөжүменең тәүге айҙарында уҡ өс миллиондан ашыу совет һалдаты әсирлеккә эләгә. Сталин күҙ алдына килтереп өлгөрмәгән хәлдәр ҙә булған. Мәҫәлән, Башҡортостанда нефть тапҡандар. „Ҡара алтын“ды сығарыу өсөн төбәккә байтаҡ килмешәк килеп тулған. Һәр береһенә урындағы халыҡтыҡынан яҡшыраҡ йәшәү шарттары булдырылған. Ә башҡорттарға, бигерәк тә нефть сыҡҡан урындарҙа йәшәгәндәргә, көн итеү ҡырҡа ауырлашҡан. Нефтселәргә йәшәү шарттары булдырыу уларға йөкмәтелгән. Күпләп төҙөлөш материалдары кәрәк икән – ул эш ауыл халҡына ҡушылған. Урман киҫеү, һал ағыҙыу – ауыл халҡының эше, ә был хәүефле эш өсөн хеҙмәт хаҡы түләп тормағандар. Аңлатам. Имеш, колхоздар үҙ теләге менән нефтселәргә ярҙам ҡулын һуҙа. Һәр кем белә: колхозға ла „үҙ теләге менән“ ингәндәр ҙә баһа. Ярар, башҡорттар – бушҡа эшләп

өйрәнгән халыҡ. Нефть сығарыла, тимәк, Өфөнән Ишембайға тиклем тимер юл төҙөү мотлаҡ. Әлеге лә баяғы иң популяр транспорт – башҡорт аты һәм бушҡа эшләүсе башҡорт халҡы.

Нефть ташыу төҙөлгән тимер юл, һуғыш башланғас, иң кәрәкле, ҡиммәтле байлыҡҡа әүерелә, сөнки Стәрлетамаҡҡа ғына өс завод һәм бер нисә ваҡ предприятие күсерелеп килтерелә. Моторҙар яғыулығы Башҡортостандан даими рәүештә фронтҡа китеп торған.

Одесса ҡалаһынан станоктар эшләү заводының эшселәре һәм белгестәре лә ашығыс рәүештә килеп етә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: барыһы ла тип әйтерлек „Одесса милләтле“ халыҡ булып сыға.

– Одессанан килгән йәш эшсе минең менән яҡшы мөнәсәбәттә булырға тырышып, үҙенә яҡынайтты, – тип һөйләне миңә дуҫ булып йөрөгән Шәрипов. – Үҙе баҙарға йөрөргә тартына икән. Минән тауыҡ ите һатып алып килеүемде һораны. Тауыҡ ите – беҙҙең милли аҙығыбыҙ, беҙгә шунһыҙ булмай, – ти торғайны.

Эйе, Шәрипов аҙна һайын баҙарға барып, тауыҡ ите ташый торған булған. Йәшәгән урындарына ла күҙ һалған. Ҡышҡы һалҡындарҙа тегеләрҙең береһе лә бәҙрәфкә тышҡа сығып йөрөмәй икән. Бар „нужа“ны өйҙә, иҙән уртаһындағы биҙрәлә, атҡаралар. Өйҙәрендә түҙеп булмаҫлыҡ ауыр еҫ, ә үҙҙәренең күңеле шат, имеш.

Һуғыш башланғас Башҡортостанға Одессанан ғына килмәнеләр, республика күптәр өсөн йылы төйәк булды. Кеше күп булғас, ашамлыҡҡа, кейем-һалымға хаҡтар фантастик кимәлгә артты. Бушҡа эшләгән башҡорттарҙа иһә аҡса бөтөнләй юҡ, шуға күрә астан үлеүселәр ҙә аҙ булманы. Минеңсә, үрҙә телгә алынғандар – параллель һуғыштың бер кәүҙәләнеше.

Күп йылдар үткәс, Стәрлетамаҡта һөт комбинатын ҡороп йөрөгәндә коллективҡа яңы партком секретары килтереп ҡуйҙылар. Бәлтерәп бөткән ҡарт, фамилияһы – Тонконогий, Одесса милләтенән ине үҙе. Партком секретарына күп һөйләргә кәрәк, ә был әҙәм һүҙ башлаһа, ауыҙынан һеләгәйе аға ла сыға. Бер көн шулай партия йыйылышы бик һуң тамамланды,  ә өйгә ҡайтырға транспорт юҡ. Туҡталышҡа тиклем дә бер саҡрымды йәйәүләп үтергә кәрәк. Тонконогий, беләгемә йәбешеп, туҡталышҡа ҡәҙәр етәкләп алып барыуымды һорай. Етәкләргә тура килде. Түҙмәйенсә:

– Аяғыңда баҫып тора ла алмайһың, ә яуаплы эшкә тотонғанһың. Ниңә өйҙә генә пенсия ашап ятмайһың? – тим тегеңә.

– Мин көн һайын ярты тауыҡ ашайым. Ә пенсияға көн дә тауыҡ ите ашап булмай, – тип яуаплай был.

Валлаһи, был Шәрипов һөйләгән әҙәм булғандыр. Бик оҙаҡ Ленин исемендәге заводта көнкүреш буйынса директор урынбаҫары булып та эшләне. Һуғыш тамамланғас та одессалар килгән яҡтарына ҡайтып китмәне, Стәрлетамаҡта тороп ҡалдылар. Шулай, башҡорт ере, татлы бал һылап ҡуйған кеүек, күптәрҙе йәлеп итте.

Онотолмаҫ йылдар хәтеремдә, барыһы ла күҙ алдымда. Ауыл ҡатындары ғына түгел, балалыҡтан сыҡмағандар ҙа сатлама һыуыҡта, ас ҡарын, алама кейем, тишек сабата менән эшкә ҡыуылды. Ә Одессанан килгән ғаиләләр туҡ ҡарындары, бына тигән кейемдәре менән бәҙрәфкә лә сығырға ҡурҡып ултырҙы. Ауыл халҡы күпте өмөт итмәне, иҫән булыуына шатланды.

Ә әлегеләр үҙҙәрен награда исемлектәрендә эҙләне. Халыҡтар дуҫлығы – изге

эш тәһә. Бына шундай ул беҙҙә тормош: килмешәктәр өсөн барыһы ла эшләнде.

Бөйөк Ватан һуғышынан файҙаланып, Иосиф Сталин үҙенең байтаҡ „ҡара эш“-ен тормошҡа ашырып өлгөрҙө. Еңеү килде, ә унын тәмен кемдәр татыны һуң? Минең атайым, штрафник булараҡ, йөҙ тапҡыр үлем хәлендә ҡалған, ә нисектер Австрияның баш ҡалаһы Венаға саҡлы барып еткән. Фашистарҙың төп төйәге Берлин яулап алынғас та, Вена тирәһендә һуғыштар барған әле. Атайым был тамуҡтан иҫән ҡайтты-ҡайтыуын. Әммә минең шатлығым бер көнлөк кенә булды, сөнки: „Һинең атайың ҡайтты“, – тип әйткән малай миңә нәфрәт менән ҡараны. Һуғыштың тәүге йылында уҡ һәләк булғандарҙың балаларының хәлен яҡшы аңлайым, етемлек татлы түгел.

Уҙған һуғышта ҡырым татарҙары ла, чечендар ҙа батырҙарса һуғышты, күптәре яу ҡырында ятып ҡалды. Ә ни өсөн уларҙың балаларын тыуған төйәктәренән һөрҙөләр? Был малайҙарҙың ҡайғы-хәсрәтен кем аңлар?

Бөйөк Еңеү – халыҡ ҡаҙанышы, ә еңеү емешенең татлы тәмен барыһына ла тойорға яҙманы. Бөйөк Ватан һуғышы Башҡортостандың һәләтлеләр төйәге икәнлеген асыҡланы. Нефть, дәртле һәм әрһеҙ халыҡ – ошо факторҙар еңергә ярҙам итте. Маҡтанырлыҡ миҫалдар күп. Һуғыштан һуң ҡалаға ҙур химия килде. Әлеге лә баяғы урамдар килмешәктәр менән тулды. Дөрөҫ, араларында яҡты йондоҙ кеүек балҡығандары ла бар ине. Бына синтетик каучук заводының директоры Николай Еременконың эшмәкәрлеге тураһында китап яҙырға мөмкин. Әҙәм әшәкеләре лә аҙ булманы. Берәһенең фамилияһы әле лә хәтеремдә: Шухман. Уны, Баҡынан килгән, тинеләр. Эшселәргә „раб“ тип өндәшә, имеш. Ул саҡта мин тәжрибә заводының Н-2 цехында эшләй инем. Аппарат, торбаларға яҙыу эшен миңә йөкмәтеп ҡуйғайнылар. Күрәһең, хәреф-цифрҙарым матур сыҡҡандыр. Насостар залында торбаларға яҙып йөрөгәндә, берәү килеп иҫәнләште:

– Ну, здравствуй, раб.

– Пошел ты!.. – тип урыҫтың иң яман һүгенеүен һоғондорҙом тегеңә. – Повторить?

Ә ул күҙәгә миңә ҡарағанда ҡалынраҡ, сусҡа кеүек һимеҙ. Шухман миңә аҡайып ҡараны ла сығып китте. Мин уны башҡа күрмәнем. Күрәһең, ул был һүҙҙе минән генә ишетмәгәндер, ҡаланан да сығып һыҙҙы һәм бик тиҙ онотолдо. Беҙҙең халыҡ ундайҙарҙы тиҙ онота.

Әйтергә кәрәк, килмешәклеккә төплө аналитик ҡараш ташлаусы булманы, сөнки уларҙы ҡайҙа ебәрергә икәнлеген Мәскәүҙә хәл иттеләр. Батша ваҡытындағы кеүек, килмешәктәргә йәшәү күпкә еңелерәк булды. Бынытһы ла – Мәскәү этлеге. „Эш ни менән тамамланды һуң?“ Рәсәй Федерацияһының тәүге президенты Борис Ельциндың: „Суверенитетты ни саҡлы йота алаһығыҙ, шул тиклем алығыҙ“, – тигән йомартлығы башҡорт өсөн буш һүҙ булып сыҡты. Үҙе эшләгән, төҙөгән, һаҡлағанға хужа булыу өсөн башҡорттоң аҡсаһы булманы, сөнки ул һәр саҡ бушҡа эшләне. Килмешәктәр – параллель һуғыштарҙың иң әүҙемдәре, уларҙың ҡоралы – мин-минлек, ә ҡыҫымға алынған этностың ҡоралы – түҙемлек. Эйе, нисәмә быуын башҡорт ғүмере тетрәнеүҙәр менән үтте. Ә шулай ҙа беҙ – еңеүселәр, әгәр Нуриев үҙенсә һөйләмәһә, Өфөләге Салауат Юлаев һәйкәле лә, Өфөнөң яҡты урамдары ла булмаҫ ине. Килмешәктәр иһә һәр саҡ булған, Хоҙай беҙгә уларҙы йүнлерәген ебәрһен инде.

Килмешәктәрҙең дә тәртибе бөтөнләй икенсе булған, улар тора-бара үҙҙәрен

башҡорт итеп һанаған. Пассионар башҡорт килмешәкте ихтирам менән ҡабул иткән. Ә бына Алтын Урҙа дәүерендә башҡорттар үҙҙәренең пассионарлыҡ сифатын юғалта башлаған. Рәсәйләшеү дәүере килгәс, башҡорт пассионарлығы һүнеү юлына баҫа. Башҡортостан еренә ағылған славян һ.б. Иҙел буйы халыҡтары һәр саҡ артыу юлында була. Етмәһә, башҡорттоң Урта Азия аша ҡан аралашыу юлы ла өҙөлә. Петр I заманынан башлап Рәсәйҙәге һәм башҡорт ерҙәрендәге этник көнкүрешкә етди иғтибар бирелә башлай. Башҡортостанда башҡа халыҡтар артҡан һайын, башҡорттоң пассионар мөмкинлеге лә шул тиклем кәмей. Ни өсөн? Башҡорт ихтилалдары һәр саҡ халыҡтың иң әүҙем, иң белемле өлөшөн алып китә торған. Романовтар һәр саҡ башҡорт етәкселәрен юҡ итеү юлында була, хатта батшаға тоғро хеҙмәт иткән башҡорттар ҙа рәхимһеҙлеккә дусар ителә. Көнбайыш шарты үтәлгән, башҡорт халҡын кәметеү күҙ уңында тотолған. Тимәк, территориаль агрессия этник агрессия менән көсәйтелә. Агрессияның яңы төрө лә табыла – тел йәһәтенән. Башҡорт теле бөтөнләй һанға һуғылмай, башҡорт ғөрөф-ғәҙәтенә ихтирам бөтә.

Ни өсөн Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыуға айырым иғтибар бирелә? Ә иҫәп-хисап ярҙамында этносҡа ҡаршы көрәшеп буламы? Һис шикһеҙ була, булды, артабан да буласаҡ. Романовтар, мәҫәлән, Ҡатау башҡорттарына ҡаршы геноцид сәйәсәте үткәрә, һөҙөмтәлә улар ҡырҡа кәмей. Ә бына көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарға ҡаршы икенсерәк сәйәсәт ҡулланыла. Бынһы – татар факторы, сөнки урыҫ хөкүмәтенә татар менән эш итеү һәр саҡ еңелерәк булған. Иҫкә төшөрәйек: Ҡазанды алған Иван Грозный ғәскәренең байтаҡ өлөшө татарҙарҙан торған. Башҡорттарҙың төньяҡ-көнбайышта йәшәгәндәрен совет дәүерендә татар иҫәбенә индерә башланылар. Ни тиһәң дә, был эште башҡарыу ҡыйын түгел, сөнки хәҙерге татар теле ҡасандыр башҡорт теленең көнбайыш диалекты булған. Эйе, татарҙар үҙҙәрен болғар вариҫтарына индерә, ә боронғо болғар теле әлеге сыуаш теленә яҡын да баһа. Ҡыпсаҡ теленең дә ҡатнашлығы аҙ түгел. Ғөмүмән, ниндәйҙер төбәктә йәшәгән халыҡтың һөйләш теле асылда этностың кем икәнлеген билдәләй алмай. Күптәр был факторҙы иҫәпкә алмаҫҡа тырыша. Ә бит Америкалағы инглиз телендә һөйләшкәндәрҙең барыһын да инглиз тип әйтеп булмай.

Һығымта яһау ҡыйын түгел. Байтаҡ даирәләр өсөн Башҡортостанда титуллы милләттең аҙ һанлылығына төртөп күрһәтеү көслө ҡоралға әүерелде. Уны „уңышлы“ ҡулланып, был даирәләр Петр I менән Екатерина II-не, һис шикһеҙ, Рәсәйҙе бөйөк яһаусы итеп күрһәтергә маташа. Ә бит башҡорт халҡын сикһеҙ талау булмаһа, Көньяҡ Урал көнкүреше мәсхәрәләнмәһә, Рәсәй бөйөгөрәк тә, көслөрәк тә булыр ине. Һис шикһеҙ. Ә был вариант Көнбайыш өсөн һәр саҡ яраҡһыҙ булды. Көнбайыш шарттары һәр саҡ үтәлде, бөгөн дә үтәлеү юлында.

**Ишғәли НУРҒӘЛИЕВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

**Лао ШЭ**

# АЙ УРАҒЫ

## хикәйә

**1**

**...** Күк көмбәҙендә, мәңгелек тарафта, эленеп торған Ай урағы тағы күҙемә салынды. Һалҡын һәм битараф ул есемгә ғүмеремдә нисәмә тапҡырҙар бағыуымдыр — иҫәбе-хисабы юҡ. Баҡҡан һайын төрлө уйҙарға сумыра мине уның алтынһыу нурҙары. Әңерҙә йоҡомһорап барған гөл бөбәктәрен аса-яба иҫкән һил ел һымаҡ, әлеге һүрән яҡтылыҡ күңел төпкөлөндәге хәтер яҡтылыҡтарын һаҡ ҡына сайпылтып ҡуя. Гелән шулай...

**2**

Тәүге тапҡыр күҙемә салынғанда, Ай урағы, гүйә, боҙҙай һалҡын ине. Күңелемде ауыр тойғолар солғап алған яманһыу сағым, күҙ йәштәрем аша нескә генә алтын ептәрҙе күреп хайран ҡалдым. Миңә ете генә йәш, өҫтөмдә әсәйем теккән ҡыҙыл һырма көпө, башымда ваҡ сәскәле ҡарағусҡыл зәңгәр башлыҡ — яҡшы хәтерләйем. Ишек яңағына һөйәлеп, оҙаҡ ҡарап торҙом Ай урағына. Бәләкәй генә бүлмәбеҙ тәмәке, дарыу еҫе менән тулған, әсәйем һығылып илай, атайым сирләп ята. Тупһала бер үҙем генә баҫып торам, ике күҙем Ай урағында; мине уйлап биреүсе лә юҡ, ашарға әҙерләүсе, саҡырыусы ла юҡ.

Аңлайым: өйгә ҡайғы килгән — атайымды сир түшәккә йыҡҡан... Аңлаған һайын, үҙемдең яңғыҙлығымды, хәсрәтемде, һыуыҡты һәм аслыҡты тәрәнерәк тоям. Ай урағы болот артына йәшеренгәнсе шулай баҫып торҙом. Ҡапыл үҙемдең япа-яңғыҙ ҡалыуымды аңғарҙым, илап ебәрҙем, әммә минең һыңҡылдауымды әсәйемдең ҡысҡырып үкһегәне баҫып китте: атайым вафат булған, уның битен аҡ сепрәк менән ябып ҡуйғандар. Шул аҡ сепрәкте һыпырып ташлап, атайымды тағы бер ҡат күргем килде, әммә

*Лао Шэ — мәшһүр ҡытай яҙыусыһы, уның әҫәрҙәре XX быуат әҙәбиәтенең алтын фондына ингән. Уның «Ай урағы» тигән хикәйәһен «Ағиҙел» уҡыусыларына тәҡдим иткәндә, ҡытай әҙиптәренең үҙенсәлекле хикәйәләү манераһы, моңһоу, ысынбарлыҡҡа тоғро стиле, тормошсан, тәрән фәлсәфәһе беҙҙең уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйланыҡ.*

ҡыйманым. Боролор ҙа әмәл юҡ, атайым тотош бүлмәне алып ята. Әсәйем аҡ күлдәк кейеп алды: аҡ төҫ беҙҙә — матәм төҫө; миңә лә ҡыҙыл көпөм өҫтөнән еңе типсенмәгән аҡ халат кейҙерҙеләр — ең осонан һәлберәп торған аҡ еп-тәрҙе өҙөп ырғытып тороуым ныҡ иҫтә ҡалған. Барыһы ла ҡый-сый килешә, илаш-һыҡташ тынмай, әммә был маҙаның һис тә кәрәге юҡ кеүек. Мәшәҡәт күп түгел ине: атайымды дүрт таҡтанан эшләнгән табутҡа һалырға ла алып китергә.

Биш-алты кеше табутты күтәреп барҙы, әсәйем менән мин, илап, улар артынан эйәрҙек. Ағас йәшниктә ятҡан атайымдың йөҙөн асып ҡарамауыма һаман үкенәм. Ҡала стенаһы артындағы зыяратты яҡшы хәтерләйем, әммә хәҙер унда атайымдың ҡәберен табыуы ҡыйын. Тупраҡҡа төшкән ямғыр күҙе кеүек... урынын самалап ҡына тоҫмаллайым.

**3**

Ай урағын тағы күреп ҡалдым: беҙ һаман матәм халәтендә әле. Өшәнес бер мәл ине, әсәйем мине зыяратҡа эйәртеп алып барҙы. Ҡулына әҙ-мәҙ генә ҡағыҙ төрөп тотоп алғайны. Әсәйем мине иркәләп кенә йөрөттө, арыһам, күтәреп атланы, ҡала ҡапҡаһын үтешләй ҡыҙҙырылған каштан һатып алып һыйланы. Көн һыуыҡ, каштандар йылы ғына; ашарға ла ҡыҙғанып торам, сөнки улар туңған ҡулдарымды имшетә. Атлап күпме барғанбыҙҙыр, әйтә алмайым, иҫ киткес оҙаҡ булып иҫтә ҡалған. Атайымды ерләгәндә был юл улай уҡ алыҫ күренмәгәйне — бәлки, ул саҡта кеше күмәк булғанға ара оҙонлоғо һиҙелмәгәндер, ә бөгөн әсәйем менән икәү генәбеҙ. Ул шып-шым атлай, минең дә һөйләшкем килмәй, тирә-яҡта ла тауыш-тын юҡ.

Көндәр ҡыҫҡарғайны. Атайымдың ҡәберен иҫләйем: саҡ ҡына беленгән тупраҡ өйөмө, ә алыҫта — бейек һары ҡалҡыулыҡтар, ҡояш шулар артына байып юғала. Әсәйем мине ҡәбер алдына ултыртып ҡуйҙы ла, гүйә, донъяһын онотто, башын тотоп иланы ла иланы. Мин теге каштандар менән уйнаған булдым. Шунан әсәйем баяғы ҡағыҙҙарҙы яндырҙы, ҡурылып янған киҫәктәр һауаға күтәрелде лә, өйөрөлөп, кире ергә төштө; тымыҡ, әммә әсе һыуыҡ ел иҫте. Әсәйем тағы илап алды. Минең дә атайым иҫемә төштө, ләкин уны иҫләп түгел, әсәйемде ҡыҙғанып илай башланым. «Әсәй, илама, әсәй...» — тип ҡулынан тартҡыланым. Ул уның һайын ярһыбыраҡ иларға тотондо, мине ныҡ итеп күкрәгенә ҡыҫты. Ҡояш байыны, тирә-йүндә беҙҙән башҡа бер кем юҡ. Әсәйем ҡурҡа төштө, күрәһең, — мине етәкләп китергә уҡталды, үҙе һаман күҙ йәшенә төйөлөп һыҡтаны. Әҙерәк барғас, боролоп ҡараны, мин дә зыярат яғына күҙ һалдым: атайымдың ҡәберен бихисап кескәй балсыҡ өйөмдәре араһынан танып алырлыҡ түгел инде... Әсәйем уфтанып ҡуйҙы. Беҙ ҡала ҡапҡаһына табан һәүетемсә атлап киттек, барып еттек тигәндә, мин Ай урағын шәйләп ҡалдым. Шомло ҡараңғылыҡҡа ул ғына үҙенең һалҡын яҡтылығын түгә. Арығанымды тойоп, әсәйем мине ҡулына алды. Нисек барып еткәнбеҙҙер ҡалаға — иҫләмәйем, томһа күк йөҙөндә ялтыраған Ай урағы иһә бөгөнгөләй күҙ алдында.

**4**

Һигеҙ йәшемдә мин ломбардҡа ваҡ-төйәк әйбер алып барып һалғылай инем. Әсәйем был йомошто миңә һуңғы сиктә генә ҡуша, тәғәм ризыҡ ҡалмағанда. Бер мәл ломбардҡа көҙгө алып киттем: унһыҙ көн итеп була лаһа. Яҙ еткәйне, шуға йылы кейем-һалымды тапшырғайныҡ инде. Көҙгө менән бик һаҡ булырға кәрәклеген беләм дә, ашығып атлайым, сөнки

ломбард иртә ябыла. Мин уның ҙур ҡыҙыл ҡапҡаларынан, ауыр ишектәренән ҡурҡыңҡырай торғайным. Яҡыная башлау менән йөрәгем күкрәк ситлегенән ырғып сығырҙай булып тибергә тотона. Текә тупһанан менергә көс табам барыбер. «Бына, үтескә алығыҙ»,— тип көҙгөмдө яҫы шүрлеккә һалдым. Ләкин алманылар, икенсе берәй нәмә килтер, тинеләр. Көҙгөнө түшемә ҡыҫып, йүгереп ҡайтып киттем. Әсәйем илап ебәрҙе — өйҙә күҙгә эләгерлек әйбер ҡалмағайны.

Бүлмәбеҙҙә әүәл байтаҡ йыһаз бар һымаҡ ине, бөгөн килеп һыйыр мөгөҙөнә элер ярты сепрәк тә юҡ. «Әсәй, хәҙер нимә ашарбыҙ икән инде?» — тим.

Ул миңә донъябыҙҙағы берҙән-бер затлы әйберҙе — сәсенә ҡаҙаған көмөш биҙәүесен тотторҙо. Бығаса ла бер нисә тапҡыр сәсенән һурып алып, усына һалып ҡарар ҙа кире ҡаҙап ҡуйыр ине, һатырға баҙнаты етмәй торҙо. Өләсәйемдең туй бүләге шул. Был юлы әсәйем ошо биҙәүесте ломбардҡа алып барырға ҡушты. Мин тағы шунда йүгерҙем, ләкин теге ҡурҡыныс ҡыҙыл ҡапҡалар бикле ине инде. Көмөш сәс ҡыҫтырғысты усыма йомоп, күтәрмәгә ултырҙым. Ҡысҡырып иларға оялам; сараһыҙҙан күккә баҡтым һәм шым ғына битем буйлап аҡҡан күҙ йәштәрем аша тағы ла Ай урағын күрҙем. Оҙаҡ шулай ултырҙым, ахырҙа әсәйем мине эҙләп килде, башымдан һыйпап тынысландырырға тырышты. Уның ҡулдары шундай йылы ине, хатта бер арыйға тамаҡ ҡайғыһы ла онотолдо. «Әсәй, әйҙә ҡайтайыҡ,— тинем буҫлыҡҡан тауыш менән,—иртәгә мин бында тағы киләм!» Әсәйем өндәшмәне. Әҙерәк барғас, тағы һүҙ ҡаттым: «Әсәй, Ай урағын күр әле, ул хас та атайым үлгән саҡтағы кеүек. Ниңә гелән шулай ҡырын эленеп тора икән?» Әсәйем яуап бирмәне, үҙенең мине етәкләгән ҡулы ҡалтырап ҡуйҙы.

**5**

Көндәр буйы кешегә кер йыуа торғайны әсәйем. Бик ярҙамлашҡым килә лә, көсөм самалы шул. Төнгә тиклем уны көтөп ултырыуҙан башҡа сарам юҡ. Бәғзе төндә Ай урағы күктең түбәһенә күтәрелгәнсе йоҡламай көтәм, ә ул һаман һыйыр тиреһе һымаҡ ҡатып бөткән һаҫыҡ ойоҡбаштарҙы йыуа, уларҙы приказчиктар ебәрә. Шул ерәнгес нәмәләрҙе йыуғандан һуң әсәйемдең тамағына аш бармай тора. Ә мин уның янында иптәш булып ултырам һәм әлеге лә баяғы Ай урағын күҙәтәм; ҡайҙандыр ярғанат осоп килеп сыға, көмөш нурҙарҙа эленеп тора ла ҡапыл ҡараңғылыҡҡа сумып юҡ була. Әсәйемде йәлләп эсем нығыраҡ өҙөлгән һайын, Ай урағы мине үҙенә нығыраҡ тарта; уға ҡараһам, күңелем бушап ҡалғандай була. Йәй көнө ул бигерәк тә матур, әйтерһең дә, боҙҙан хасил булған — һалҡынса бер еләҫлек килә унан. Айҙан ергә һуҙылып төшкән үтә күренмәле күләгәләр юғалып торған мәл айырыуса ныҡ оҡшай: йондоҙҙар сағыуыраҡ балҡый, сәскәләр хуш еҫтәрен дәртлерәк бөркә кеүек шул мәлдә. Күрше йорттоң баҡсаһы тулы сәскә була торғайны, акацияларының аҡ сәскәләре беҙҙең яҡҡа ҡойола башлаһа, ябалаҡлап ҡар яуа тиерһең.

6

Көнө-төнө кер йыуыуҙан әсәйемдең ҡулдары ҡатып-ҡорошоп бөттө. Ҡайһы ваҡыт унан арҡамды тырнатып алам, әммә йыш маҙаламайым, үлә яҙып арығанын күреп торам даһа. Һаҫыҡ ойоҡбаштар уның хәлен ала, уҡшыта. Ҡапыл ғына кер ышҡыуҙан туҡтап, уйланып торғолай әсәйем; белһәң ине, тим, ниҙәр икән уның башҡайында?

**7**

Әсәйем миңә яңы атай тапты. Уға «атай» тип өндәшеүемде, киреләнмәүемде үтенде. Әммә бит мин был кешенең бүтән икәнен, үҙ атайымдың ҡәберҙә ятҡанын беләм. Яңы атай хаҡында һөйләгәндә, әсәйем күҙемә тура ҡарамай. Күҙ йәштәрен эскә йотоп: «Һине асҡа үлтерә алмайым»,— ти. Эйе, яңы атайҙы ул минең хаҡымда ҡайғыртып тапҡан. Ул саҡта мин күп нәмәне аңламай ҙа инем. Бар ҡурҡҡаным — аслыҡ, бар теләгем — унан ҡотолоу.

Беҙ тар бүлмәбеҙҙән күсенгәндә, күктә теге Ай урағы эленеп тора ине. Был юлы ул уғата сағыу һәм ҡырыҫ күренде; мин үҙемдең тыуған тупһамды ташлап китәм. Әсәйем туй носилкаһына менеп ултырҙы. Алдан барабан ҡағып, һорнай уйнап бер нисә музыкант бара. Ниндәйҙер бер ир мине етәкләп алған, носилка артынан атлайбыҙ. Айҙың ҡырыҫ нурҙары һалҡын елдә дерелдәп торған кеүек. Урамда әҙәм заты юҡ, берәҙәк эттәр генә, абаулап, музыканттарҙы ҡамарға итә. Әллә әсәйемде зыяратҡа алып китеп баралармы? Мине етәкләгән ир аяуһыҙ шәп атлай, аяҡтарым саҡ өлгөрә. Илағым килә, ә йәшем сыҡмай ҙа ҡуя. Ирҙең ҡулы тирләгән, шыйғалаҡ туң балыҡ һымаҡ тотона миңә. «Әсәй!»— тип ҡысҡырырҙай булам, тик ҡыймайым. Ай урағы ҡапыл нәҙек кенә булып ҡалғандай күренде, әйтерһең, ҙур күҙе ҡыҫылып, һөҙөп кенә ҡарап тора. Ә носилкаларҙы тар тыҡрыҡҡа алып инеп киттеләр.

**8**

Артабанғы өс-дүрт йылда Ай урағын күрмәнем, шикелле. Яңы атай беҙгә һәйбәт мөғәмәләлә булды. Уның фатиры ике бүлмәле ине: берәһендә әсәйем менән ул, икенсеһендә мин йәшәйем. Башта минең, өйрәнеш иткәнсә, әсәйем эргәһендә йоҡлағым килде, әммә бер нисә көндән үҙемдең кескенә бөхтә бүлмәмә эйәләштем. Ап-аҡ стеналар, өҫтәл һәм ултырғыс — бөтәһе лә минеке һымаҡ. Юрғаным да элеккеһенән ҡалынраҡ һәм йылыраҡ. Әсәйем кәүҙәгә тулыланып китте, бит алмалары алһыуланды, ҡулдарындағы һөйәлдәр йомшарҙы. Мин дә ломбардҡа йөрөү хурлығынан азатмын. Яңы атайым мине мәктәпкә уҡырға бирҙе. Ул хатта һирәк-һаяҡ минең менән уйнап та ала торғайны. Тик ни өсөндөр, яҡшы кеше икәнен белһәм дә, уға «атай» тип өндәшергә теләмәнем. Ул иһә бөтәһен дә аңлай һымаҡ. Күңелсәк, шуҡ холоҡло ине, йылмайғанда күҙҙәре нурланып, матурланып китә. Әсәйем мине илгәҙәк булырға өгөтләй, үҙем дә тиҫкәреләнмәҫтәй, «атай» тип әйтерҙәй булам ҡай саҡ. Ул бит беҙҙе аслыҡтан йолоп ҡалды... Эйе, ошо өс-дүрт йылда Ай урағына текләп ҡарап торғанымды хәтерләмәйем... Бәлки, күргәнмендер, әммә иҫтә ҡалмаған... Ләкин атайым үлгәндә һәм әсәйемде ҡыҙыл носилкала алып барғанда Ай урағының ҡайһылай булғанын мәңге онотмаясаҡмын. Уның аҡһыл һалҡын нурҙары, нефрит ташындай битараф йөҙө ғүмергә хәтеремә уйылды...

**9**

Мәктәп миңә бик оҡшаны. Ысынында сәскәләр һирәк-һаяҡ ҡына күренһә лә, мәктәбемде шау гөл-сәскә эсендә ултырған һымаҡ тойҙом. Әле лә уны иҫкә төшөрөүем була, күҙ алдыма сәскәләр килеп баҫа. Атайымдың ҡәберен хәтерләһәм, Ай урағы, уның һалҡын елдә дерелдәгән өшәнес нурҙары хаҡында уйлай башлайым, ә мәктәп — күңел түремдә гөлдәр тергеҙә. Әсәйем

сәскә ярата, тик уларҙы һатып ала алмай. Онотҡанда бер кемдер сәскә бүләк итһә, шунда уҡ уны сәсенә ҡаҙап ҡуйыр ҙа, төҫө асылып, йәшәреп китер ине.

Яраттым мин мәктәпте. Шуға микән, мәктәп тураһында уйлаһам, сәскәләр иҫкә төшә.

**10**

Башланғыс мәктәпте тамамлар йылды әсәйем мине тағы ла ломбардҡа әйбер һалырға ебәрҙе. Үгәй атайым ҡайҙалыр киткәйне. Уның ҡайҙа, ни өсөн шулай ҡапыл китеп юғалыуын әсәйем үҙе лә белмәй ине, шикелле. Байтаҡ көндәр үтте, ә ул ҡайтманы ла ҡайтманы. Хат та яҙманы. Әсәйем яңынан һаҫыҡ ойоҡбаштар йыуа башлар микән? Әммә ул был хаҡта уйлап та бирмәгән кеүек, һаман да сәсенә сәскә ҡаҙап, ҡупшы кейенеп йөрөй. Ғәжәп! Ул иламай ҙа, киреһенсә, йылмая. Нишләп? Бер ни аңламайым. Мәктәптән ҡайтҡанда әсәйемдең ҡапҡа төбөндә баҫып торған сағына юлыҡҡыланым. Тағы күпмелер ваҡыт үтте. Көндәрҙән бер көндө урамда кемдер миңә конверт тотторҙо ла: «Әсәйеңә тапшыр. Ә һин үҙең күпме алаһың, һылыуҡай?» — тине. Битем ҡыҙарҙы, ғәрлегемдән башымды түбән эйҙем. Бына нисек икән хәлдәр?! Әсәйем менән был хаҡта һөйләшергә баҙнат итмәнем. Ул мине бик ярата ине һәм йыш ҡына: «Уҡы! Уҡы!» — тип ҡабатлай торғайны. Үҙе тома наҙан булған, исмаһам, миңә белем биргеһе килгәндер. Әлеге кәсепкә ул мине уйлап ҡына тотонған — шик юҡ. Әсәйемде күкрәгемә ҡыҫып илағым, гонаһҡа батма минең өсөн, тип әйткем килде. Ләкин әйтмәнем, көсһөҙлөгөм, сараһыҙлығым мине эстән бөктө, эстән көйрәтте. «Мәктәптән һуң ни эшләрмен икән?» — тигән уй ҙа борсоно. Әхирәттәрем менән дә шул хаҡта һөйләшеп ала инек.

Уларҙан ишетеүемсә, былтыр бер нисә ҡыҙҙы бай әфәнделәр икенсе ҡатынлыҡҡа алған. Бәғзе ҡыҙҙар «фәхишәлек»кә киткән. Был һүҙҙең мәғәнәһен белмәһәм дә, яман икәнен һиҙҙем. Әхирәттәрем иһә белеп һөйләгәндәй, рәхәтләнеп ләстит һаталар. Шунда башымдан бер уй йәшендәй ялтлап үтеп китте: мәктәпте тамамлағас, әсәйем мине шул юлдан ебәрергә ниәтләнмәй микән? Өйгә ҡайтырға, әсәйем менән йөҙгә-йөҙ осрашырға ҡурҡып йөрөгән көндәрем дә булды ошонан һуң. Уның тәм-томға тип биргән аҡсаларын тотонмай, йыя башланым. Физкультура дәрестәрендә аслыҡтан саҡ иҫемде юйып аумай ҡала инем. Башҡаларҙың тамаҡ ялғағанын күреп, уртыма йыйылған һеләгәйҙе йотоп ултыра торғайным. Барыбер тиндәремде сарыфламаным, йәнәһе, әсәйем мине ирекһеҙләй ҡалһа, ҡасып китергә йыйынам. Ҡайһы саҡта ҡулыма маонан да күберәк аҡса инә! Түҙеп торғоһоҙ ауыр тойғолар йәнемде иҙә башлаһа, көпә-көндөҙ күктән Ай урағын эҙләйем, ул миңә сабырлыҡ бирер, тынысландырыр төҫлө.

**11**

Иң ҡыйыны шул: әсәйемде ҡайһы ваҡыт яратмай, күрә алмай башланым. Ошо тойғо биләп алһа, уның мине атайымдың ҡәберенә алып барыуын хәтерләргә тырышам, шунда уҡ асыуым баҫыла. Әммә күрә алмауым барыбер ҡабатлана. Минең йөрәгем Ай урағы кеүек: бер мәлгә ялтырап тора ла ҡара һөрөм эсенә инеп йәшенә.

Әсәйем янына ирҙәр йыш килә, ул минән уңайһыҙланмай ҙа хәҙер. Улары миңә, ас эттәр кеүек, ауыҙ һыуҙарын ағыҙып ҡарай, күҙҙәренә ҡалъя булып күренәмдер инде — һиҙеп торам. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә күп нәмәгә

төшөндөм: кәүҙәнде аҫыл әйберҙәй күреп һаҡларға, һылыулығыңдың баһаһын белергә кәрәк. Көндән-көн матурая барыуымды тоям, был мине борсолдора ла, ҡыуандыра ла. Үҙ-үҙемде ҡурсаларлыҡ та, һәләк итерлек тә көсөм бар һымаҡ — нисек теләһәм, шулай буласаҡ. Тик ҡайһылай итһәм яҡшыраҡ булыр — аныҡ ҡына белмәйем әле. Әсәйемдән кәңәш һорағым килә, әммә уға барып һыйынһам, уны ятһам, мин үҙемде, ихтыярымды юғалтасаҡмын. Бәҫемде төшөрмәҫ өсөн уны күрә алмаҫҡа тейешмен — шуны аңлайым. Йоҡоһоҙ төндәремдә, барлыҡ уйҙарымды, шик-шөбһәләремде уртаға һалып уйлағанда, әсәйемде аҡылым менән аҡлайым, ярлыҡайым: ғәйебе юҡ, беҙҙең тамаҡты ҡайғыртырға тейеш тә баһа. Барыбер ул тапҡан ризыҡ тамағыма тора, йөрәгем берсә туҡтай, берсә ҡышҡы ажғыр ел кеүек ҡотороп тулай башлай. Һис кенә лә баҫылмай йөрәгем.

**12**

Хәлдәр оторо мөшкөлләнде. Ниҙер уйлап сығарырға форсатым ҡалманы, ахыры. Бер көндө әсәйем: «Йә, нисек? — тип туранан-тура өндәште. — Мин тиҙ ҡартаям, бер-ике йылдан ирҙәр әйләнеп тә ҡарамаясаҡ. Һин миңә ярҙам итергә тейешһең». Ысынлап та һуңғы араларҙа ул ныҡ биреште, битен күпме генә кершән менән һылаһа ла, йыйырсыҡтары беленеп тора. Һәм ул бер генә ирҙең ҡоло булырға хәл иткән, ҡулдан-ҡулға йөрөргә инде көсөнән килмәй. Тамам һулымаҫ элек тәғәйен берәүгә эйәләшеп ҡалырға кәрәк. Шул заманда уны бер сауҙагәр ир оҡшатып та йөрөй ине. Мин инде үҫкән ҡыҙ, һаман әсәйемдең носилкаһы артынан эйәрергәме ни? Үҙ аллы бер ҡарарға килергә кәрәктер. Әлбиттә, әсәйемә «ярҙам» итергә булһам, ул әлеге кәсебен ташлар ине, сөнки мин аҡса эшләй башлаясаҡмын. Ләкин быңдай юл менән аҡса табыу ихтималлығы ҡотомдо ала. Тамам өмөтө өҙөлгән ҡатындар ыңғайына һатылайыммы ни? Әсәйемдең йөрәге аяуһыҙ, ә аҡса тигән нәмәнең йөрәге бөтөнләй юҡ — быны беләм. Әсәйем мине көсләп этәрмәне был юлға, ә үҙ ихтыярыма ҡуйҙы — уға ярҙамлашырғамы, әллә икебеҙ ике яҡҡа китеп, бөтөнләйгә айырылырғамы? Әсәйем иламай, күптән бөтөргән инде ул иларын илап. Нишләргә һуң?

**13**

Мин бөтәһен дә мәктәп директорыма һөйләп бирҙем. Ул 40 йәштәр тирәһендәге, һимеҙ кәүҙәле, әллә ни аҡыллы булмаһа ла, әммә ихлас, йомшаҡ күңелле ҡатын ине. Унан башҡа тағы кемгә әйтәйем инде әсәйем хаҡында? Быға директрисаға эс серемде асҡаным юҡ ине. Һәр һүҙем уртымды утлы күмерҙәй өтөп сыҡты, тотлоғоп яфаландым. Ул мине аңланы, ярҙам ҡулы һуҙҙы. Аҡса бирә алмай ине, көнөнә ике тапҡыр ашатырға вәғәҙә итте һәм мәктәптең йыйыштырыусыһы менән бер бүлмәлә йәшәргә рөхсәт бирҙе. Матур итеп яҙырға өйрән, секретарға эш ҡағыҙҙары күсереп яҙырға булышырһың, тине. Шулай итеп, төп мәсьәлә хәл ителде: тамағым туҡ, йәшәргә мөйөш бар. Әсәйемде мәшәҡәттән арындырҙым. Был юлы ул носилкаға ла ултырып торманы, ҡайҙалыр, кем менәндер ҡараңғылыҡҡа инеп юғалды... Минең яҫтыҡ-түшәгемде ҡалдырғайны улай ҙа. Хушлашҡанда әсәйем күҙ йәшен сығарманы, әммә уның йөрәгенә ҡан һауғанын тойоп торҙом. Ул ғәзиз балаһы менән осрашыуҙан мәхрүм буласағын белә ине. Ә мин туҡтай алмай үкһеп иланым. Мин уның ҡыҙы, әхирәте, күңел терәге. Ләкин ярҙам итә, ул киткән юлға баҫа алмайым...

Әсәйем менән мин, берәҙәк эттәр һымаҡ, темеҫкенеп ризыҡ эҙләп, тамаҡ

хаҡына үҙебеҙҙе һатырға мәжбүр булғанбыҙ, әйтерһең, ашҡаҙандан башҡа беҙҙең бер нәмәбеҙ ҙә юҡ— һуңынан шул хаҡта йыш уйландым. Әсәйемә булған нәфрәтем үтте. Бөтәһен дә аңланым. Әсәйем дә, беҙҙең ашҡаҙандарыбыҙ ҙа ғәйепле түгел — йәшәр өсөн бит ашарға кәрәк. Әсәйемде һағынып, тағы күккә баҡтым. Был юлы унда Ай урағы юҡ, дөм-ҡараңғы ине. Әсәйем төнгө күләгәләй юҡҡа сыҡты. Уның ҡәбере ҡайҙа булырын да белә алмам инде. Берҙән-бер ғәзиз йән әсәйем ине, ә хәҙер был донъяла япа-яңғыҙ, үкһеҙ етем тороп ҡалдым.

**14**

Әсәйем менән күрешә алмағас, йөрәгемдә мөхәббәт тә ҡырау һуҡҡан гөл һымаҡ һулыны. Директриса ҡушҡан ваҡ-төйәк ҡағыҙҙарҙы күсереп яҙыр өсөн матур яҙыу өлгөләрен тырышып өйрәндем. Нимәлер эшләргә, бушлай ашаған дөгөнө аҡларға тейеш инем дәһә. Синыфташтарым иһә туҡтауһыҙ бер сүбәкте сәйнәй: кем нимә ашай ҙа кем нисек кейенә, тип. Мин һүҙгә ҡушылып бармайым, көн оҙоно үҙ эсемә бикләнеп ултырам. Шулай булғас ни, үҙ күләгәм генә миңә иптәш инде. Уйым-хәсрәтем дә — тик үҙ юҫығымда, башҡаларҙың миндә эше юҡ. Үҙемде үҙем йәлләйем, яратам, хуплайым, гүйә, үҙ асылымды сит кеше күҙе менән күҙләйем, һынайым. Үҙемдәге әҙ генә үҙгәреш тә мине һиҫкәндерә: берсә ҡыуандыра, берсә борсолдора. Әйтерһең, нәзәкәтле бер сәскәмен...

Көнөм шулай хыял менән уҙа, төш йәки кис еткәнен дә ашарға саҡырғастар ғына аңғарам, ваҡыт ағышын тоймайым да һымаҡ: әсәйемде иҫләһәм, үҙемдең инде сабый түгеллегемде аңлайым. Әммә һәр нәмәгә битарафмын; тиҫтерҙәрем көтөп алған ҡаникул тип, Яңы йыл тип атлығып тормайым. Ул байрамдарҙың миңә ни ҡыҫылышы бар? Ләкин барыбер ҙә үҫкән ҡыҙ икәнлегемде инҡар итә алмайым, алда яңы мәшәҡәт һәм хәүефтәр көткәнен һиҙемләйем. Үҙемдең төҫкә һылыулана барыуымды ла күрәм һәм шуға йыуанам; ниһайәт, үҙем алдында үҙ баһамды күтәрерлек бер сәбәп бар ҙаһа. Башта был хәл ҡыуандырғайны ла, аҙаҡ борсоуға һалды. Тәүҙә ғорурландым: ярлымын, әммә сибәрмен! Тап шул сибәрлегем хафаландырҙы ла инде: әсәйем дә йәмһеҙ түгел ине бит, ә бәхете булманы.

**15**

Айҙың ураҡ кеүек сағын күптән күргәнем юҡ, сөнки бик оҙаҡ уға ҡарарға ҡурҡып йөрөнөм; мәктәпте тамамлағайным инде, ә үҙем һаман да шунда йәшәйем.

Кистәрен мәктәптә ике ҡарт хеҙмәтсе генә — әбей менән бабай тороп ҡала. Улар миңә ҡайһылай мөғәмәлә итергә белмәй аҙаплана: уҡыусылыҡтан сыҡҡанмын, уҡытыусы йәки хеҙмәтсе лә түгелмен, хәйер, һуңғыһы миңә нығыраҡ тап килә кеүек. Эңер мәлендә ихатала йөрөп алам; Ай урағының алтынһыу нурҙарынан ҡасып, йыш ҡына өйгә йүгереп инәм, сөнки уға күтәрелеп ҡарарға йөрәгем етмәй. Бүлмәмдә иһә туйғансы уйлайым ул Ай урағы хаҡында. Бигерәк тә тышта ел ҡупһа, хыялым ҡанатланып китә, йылғыр ел, гүйә, һүрән яҡтылыҡты өйгә эйәртеп инә, үткәндәрҙе хәтерләттерә, унан да бигерәк бөгөнгөмдө уйлаттырып һағышландыра. Йөрәгем, гүйә, ай яҡтыһында осҡан ярғанатҡа әүерелә — аҡ нурға ҡойонһа ла, үҙе барыбер ҡара көйө ҡала; ә ҡара, осорға һәләтле булһа ла, ҡара инде ул— киләсәккә өмөтөм юҡтыр минең. Ләкин мин иламайым, ҡаштарымды ғына емерәм.

## 16

Ҡулыма әҙ-мәҙ аҡса керә башланы: бергә уҡыған ҡыҙҙар өсөн ваҡ-төйәк әйбер бәйләштерәм. Директриса рөхсәте менән, әлбиттә. Әммә ҡыҙҙар үҙҙәре лә бәйләмде белгәс, үҙҙәрен үҙҙәре ҡарай, улай ҙа, һирәкләп, өлгөрмәй китһәләр, минән бейәләй йәки ойоҡбаш һатып алалар. Ошо һөнәрем нисектер дәртләндереп ебәрҙе мине: әсәйем янымда булһа, уның ғына тамағын туйҙырырлыҡ аҡса эшләй алыр инем дәһә, тип тә уйлап ҡуям. Хәйер, бының бары тик хыял ғына икәнен аңлайым. Барыбер йөрәгемде йылыта шул хыял.

Әсәйемде һағынам, үҙәгем өҙөлөп һағынам. Бик-бик күргем килә уны. Осрашһаҡ, берәй юлын табыр инек әле, асҡа үлмәҫлек, тик үҙемдең фаразыма үҙем дә ышанып етмәйем шул... Уйлағанғалыр, әсәйем йыш төшөмә инә. Бер көндө ҡыҙҙар менән ҡала ситенә экскурсияға барҙыҡ. Йөрөй торғас, киске сәғәт биштәр булып киткән. Иң тура юлдан ҡайтырға сыҡтыҡ, шунда күмәс бешереп һата торған бәләкәй генә лавка эсендә әсәйемде күреп ҡалдым! Миңә арты менән ултыра ине, барыбер таныным. Ул мейес алдында ут ҡағыштырыу менән мәшғүл, күҙен дә күтәрмәй, бөксәйгән арҡаһын яҙырға ла форсаты юҡ. Әллә ҡайҙан уҡ күреп ҡалһам да, барып ҡосаҡларға ҡанатланһам да, ҡыйманым: ҡыҙҙар минән бармаҡ төртөп көлөрҙәр, тип ҡурҡтым, улар бит минең әсәйемде шундай икән тип күҙ алдына ла килтермәй. Башымды баҫып, күҙ йәштәрем аша ғына, һиҙҙермәй генә ҡараным әсәйемә, ә ул мине күрмәне лә... Уның янынан күмәкләшеп үтеп киттек. Күпмелер атлағас, боролоп ҡараным: әсәйем һаман шул ҡиәфәттә ултыра бирә. Йөҙөн асыҡ ҡына күрә алманым, боларған сәстәре тотош маңлайын ҡаплаған ине. Әлеге лавка торған тыҡрыҡтың исемен иҫемдә ҡалдырҙым.

## 17

Йөрәгемде, гүйә, ҡорт кимерә, әсәйемде барып күрмәйенсә йән тыныслығы тапмаҫымды аңлайым. Тап шул осорҙа мәктәптең директоры алмашынды. Элекке директриса иҫкәртеп ҡуйҙы: ул үҙе мине ҡурсаланы, ә бына яңы кеше ниндәй мөнәсәбәттә булыр — билгеһеҙ, йәғни үҙем хаҡында үҙем ҡайғыртырға тейешмен. Аҡсаларымды хисаплап төйнәнем: ике юань, ете мао һәм бер нисә баҡыр — тәүге мәлдәрҙә асҡа интекмәҫлек, әммә ҡайҙа барып баш төртөргә? Нишләргә?! Ҡул ҡаушырып ултырыуҙан фәтүә юҡ. Башыма килгән тәүге уй, әлбиттә, — әсәйем янына барыу. Тик ул миңә ярҙам итә алырмы? Күмәс һатыусы хужа уға асыуланһа, мине күреп? Әсәйемә бәлә һалырға тейеш түгел мин, уға былай ҙа ауыр. Үҙ яҙмышымды үҙемә атҡарырға кәрәк. Ә нисек? Уйлай-уйлай, ғәжиз булдым. Был донъя шул тиклем дә тар икән, кескәй ҡыҙсыҡҡа унда һыйыныр берәй мөйөш тә табылмаҒас?! Эт тә минән бәхетлерәк, ул урамда ла ята ла йоҡлай, ә кешегә — ярамай.

Әллә бер ҡайҙа ла китмәйем микән? Яңы директор нимә тиер? Юҡ, ишектән төрткөсләп сығарып ебәргәндәрен көтөп тормайым тип, үҙем киттем.

Тышта яҙ ине. Ләкин мин уның йылыһын тойманым, улай ҙа таждарын асҡан сәскәләр, тирә-йүндәге зөмрәт йәшеллек күҙемә эленмәй ҡалманы. Тик был сағыу төҫтәр йөрәгемде елкендермәне, яҙ минең өсөн һалҡын һәм үле ине.

## 18

Эш юллай башланым. Әсәйемде эҙләмәнем, үҙ көнөмдө үҙем күрергә ынтылдым. Ике көн донъя ҡыҙырып йөрөп сыҡтым, эш тапманым. Ниһайәт, әсәйемде аңланым һәм, тетрәнеп, илап, уны ғәфү иттем. Ул сит-ят әҙәмдәрҙең һаҫыҡ ойоҡбаштарын йыуып булһа ла аҡса эшләй ине әле, ә миңә уныһы ла юҡ. Әсәйем ахыр сиктә һайлаған юл — берҙән-бер булған. Мәктәптә алған белемем дә, тәрбиәм дә миңә ярҙам итмәй, былар — бай һәм азат кешеләргә генә мәртәбә. Минең синыфташтарым иһә уҡыуҙарының изгелеген күрер; улар һатлыҡ ҡатындарҙан рәхәтләнеп көлә, әсәйемдең фәхишә икәнен белмәйҙәр; күңелдәре күр, тамаҡтары туҡ. Эсемдән риза булдым кеүек: ас-яланғас булыуҙан ҡотҡарыусы осраһа, мин уның ихтыярына буйһонормон, теләгәнен үтәрмен. Әсәйем буйһона алған бит... Үлем хаҡындағы уй башыма инеп-инеп сыға, әммә йәшәгем килә! Һылыумын, йәшмен һәм йәшәргә тейешмен. Хурлыҡҡа батам икән, минең бында ғәйебем булмаясаҡ.

## 19

Ошо уй миңә тәүәккәллек бирҙе. Урамға сыҡтым. Ҡарағусҡыл зәңгәр күктә болот әҫәре юҡ, түбәлә генә Ай урағы эленеп тора. Мин ул ураҡҡа һоҡланып ҡарап торҙом. Эргәләге талға күктән нур ҡойола; ел сәскәләрҙең еҫен тарата, ҡыуаҡтарҙың ара-тирә һелкенгеләгән күләгәләре ерҙә ята. Ай янында ике йондоҙ емелдәй, уларҙы сихри фея күҙҙәренә оҡшатам. «Ай урағы — ул мине өмөтләндерә, күңелемә яҡты һәм наҙ бирә кеүек», — тигән уй уҙҙы башымдан.

## 20

Директрисаны барып күрергә ниәтләндем. Ул өйҙә юҡ ине. Ишекте үҙе матур, үҙе яғымлы бер егет асты. Мин ир-аттан гелән ҡурҡа инем, был кешегә ҡарата шөбһәм булманы. Ниндәй йомош менән килеүемде һорап, йылмайып ҡуйғас, йән бөтөнләй ирене лә ҡуйҙы. Уға барыһын да ихластан һөйләп бирҙем. Егет хәлемде аңланы, ярҙам итергә вәғәҙә бирҙе. Шул уҡ көндө, кисен, ул миңә ике юань килтерҙе, алмаҫҡа инем дә, директриса ебәрҙе был аҡсаны, тигәс, ала ҡуйҙым. Директриса егеттең ике туған апаһы икән, етмәһә, ул миңә фатир тапҡан, иртәгә үк шунда килергә ҡушҡан. Шигем ҡуҙғалып ҡуйғайны ла, әйтергә баҙманым: егеттең йылмайыуы йөрәгемә үтеп инде. Шик белдереп, шундай һөймәлекле, көләс кешене үпкәләтеп булмай ҙаһа.

## 21

Егеттең ирендәре минең битемә ҡағыла, уның баш ашаһында Ай урағын күрәм. Яҙғы ел шундай көслө, болоттарҙы ҡыуып, Айҙың йөҙөн аса, йылғаға эйелгән һығылмалы талдар тылсымлы көйгә бәүелә; сиңерткәләр һөйөү йырын йырлай; сәскә атҡан ҡыуаҡтарҙан иҫерткес хуш еҫ һарҡыла. Йылғаның сылтыр тауышына ҡолаҡ һалам, уның һыуын йотлоғоп эскән ҡыуаҡҡа ҡарайым да, нишләптер, уға оҡшағым килә. Бар донъя яҙҙың һутын, ғәйрәтен татып ҡалырға ынтыла. Мин дә, иләҫләнеп, бөгөнгө яҙғы кистең һулышын йотам, гүйә, үҙ-үҙемде онотам, наҙлы ел ҡанатында, тоноҡ ай нурында ирейем... Көтмәгәндә айҙы болот ҡаплай, һәм мин аңыма киләм — ҡайнар көс мине тыйылғыһыҙ тәҡәтенә әйҙәй. Ай урағы юғала, мин ихтыярымды юям һәм әсәйем һымаҡҡа әйләнәм!

**22**

Нишләргә лә белмәç халәттәмен: үкенәм, берсә һөйөнәм, илағым килә, үҙем көләм... Бер ҡасан күрмәç өсөн ҡасып китерҙәй булам, ләкин уны тағы һағынам һәм осрашырға тип хыялланам. Мин бер үҙем ике бүлмәле фатирҙа көн уҙғарам. Ул кис һайын килә. Үҙе һәр саҡ яғымлы һәм йомарт. Ризыҡҡа ҡытлыҡ кисермәйем, бер нисә яңы күлдәгем дә бар хәҙер. Матур әйбер кейһәм, сибәрлегемә һоҡланып, көҙгөнән күҙемде алмайым. Бәғзе ваҡыт үҙемә ныҡ асыуым да килә, ғәрлегем уяна, әммә тәрәнгә төшөп уйлағым килмәй. Әйтерһең дә, сихырланылар мине, йөрәкһенеп, бит алмаларым янып, иçәңгерәп тик йөрөйөм. Ҡулыма алып эшләр эш тә юҡ, белгәнем — кейенеп-яһаныу, биҙәнеү. Тулҡынланып, дәртләнеп кейенәм дә тағы ҡапыл үҙемде күрә алмай башлайым, илап ебәрәм хатта. Уға ла тейә был инерле-сығырлы кәйефемдең еле: йә хыялый шикелле туҡтауһыҙ үбәм уны, йә этеп ебәрәм, әрләп ташлайым; ә ул гелән йылмая...

**23**

Аныҡ ҡына ышанысым юҡлығын күптән аңланым инде; айҙы ла бит болот кинәттән ҡаплап ҡуя — шуның кеүек, минең киләсәгем дә ҡараңғы. Оҙаҡламай яҙ йәйгә тартылды, мин дә яҙғы иләçлектән арындым һымаҡ. Бер көндө, төш мәлендә, яныма таныш түгел ҡатын килде. Ул бик сибәр ине, әммә ни яғы менәндер фарфор ҡурсаҡҡа оҡшағайны. Инеү менән үкһеп илап ебәрҙе. Мин уны шундуҡ аңланым... Ғауға ҡуптарырға йыйынмағандай үҙе, минең дә ундай теләгем юҡ. Ҡатын, илай-илай, һүҙ башланы: «Ул беҙҙең икебеҙҙе лә алданы!» — тине ул. Мин башта, был да һөйәркәләр, тип уйлағайным, юҡ — ҡатыны икән. Ул әрләшмәне, бары тик бер үк һүҙҙе ҡабатланы:«Китегеҙ унан!» Ни ҡылырға белмәнем, миңә бик тә йәл ине был һылыу. Ярар, тип вәғәҙә иттем уға. Ҡатын йылмайып ҡуйҙы. Уға бер генә маҡсат зарур ине, ахыры, был донъяла: хәләл ефетен тик үҙенеке генә итеү.

**24**

Урам буйлап оҙаҡ йөрөнөм. Вәғәҙә биреү анһат та ул, ә нисек уны үтәргә? Ул бүләк иткән әйберҙәрҙе алғым килмәне: айырылышырға икән, ҡырҡа өҙөргә кәрәк араны. Бер нәмәһеҙ ҙә сығып китке килмәй. Ҡайҙа барырмын? Нисек тамаҡ туйҙырырмын? Кейем-һалымымды алдым — һатһам да аҡса. Шым ғына фатирҙан сығып киттем, ләкин үкенмәнем, күңелемдә — бушлыҡ, баш осондағы яңғыҙ болот кеүек, үҙемде ер менән күк араһында бер таянысһыҙ асылынып торғандай тойҙом. Бәләкәй генә бер бүлмә табып, шунда көнө буйы йоҡлап сыҡтым.

**25**

Бәләкәйҙән етешһеҙ донъяла үçкәс, аҡсаны ҡыçып тотона беләм. Әҙерәк аҡсам бар ине, бөтмәç элек тип, эш эҙләй башланым. Әллә ни өмөтөм булмаһа ла, белешеп ҡарайым әле. Үткән ике йыл эсендә мин апаруҡ өлкәнәйҙем, ләкин был минең эш табыу һәләтемде арттырмағайны. Ныҡышмалығым бар әлдә: иртәнән ҡара кискәсә ҡаҡмаған ҡапҡа ҡалмай. Ҡатын-ҡыҙға аҡса табыу ифрат та ауыр шул. Әсәйем хаҡлы, беҙгә тигән берҙән-бер юл — ул киткән юл. Минең уға аяҡ басҡым килмәй, әммә унан барыбер яҙлыға алмаçымды тоям. Күпме ныҒыраҡ тырышһам ҡотолорға, шунса үҙенә ныҒыраҡ тарта кеүек ул юл. Йөрәгемде ҡурҡыу ала. Өмөттәрем яңы айҙың нуры кеүек көсһөҙ, һүрәнәйә бара, һүрәнәйә бара. Бер аҙна үтте, ике аҙна — ышанысым

ҡаҡшағандан-ҡаҡшай. Ахыр сиктә, бер нисә йәш ҡыҙ менән бергәләп, ҙур булмаған ресторанға барҙыҡ, унда официантка кәрәк икән. Кескенә ресторан һәм әшәүәтһеҙ оло кәүҙәле хужа; беҙ бөтәбеҙ ҙә матур ғынабыҙ, белемһеҙ ҙә түгелбеҙ, ишелеп барған дәү башняға оҡшаған хужа ҡайһыбыҙҙы һайлап алыр, тип көтәбеҙ. Ул мине һайланы. Ҡыуандым, әммә уға рәхмәт әйтмәнем. Башҡа ҡыҙҙар миңә көнләшеп ҡараны: кемеһе илап, кемеһе әрләшеп, сығып киттеләр. Бына нисек түбән беҙҙә ҡатын-ҡыҙ баһаһы!

**26**

Бәләкәй генә рестораның «2-се номер» официанткаһына әйләндем мин. Баштараҡ өҫтәлгә нимәне ҡайһылай ҡуйыуҙы, иҫәп-хисапты белмәй аҙапландым, ә күпселек блюдоларҙың нисек аталғанын иһә ишетмәгән дә инем. Ҡаушап ҡалғайным да, «1-се номер», юҡҡа ҡайғырма, минең үҙемдең дә әллә ни тәжрибәм юҡ ул, тигәс, тынысландым. Беҙгә ҡунаҡтарға сәй яһау, таҫтамал биреү һәм аҡса алыу йөкмәтелгән. Ғәжәп! «1-се номер» яланғас беләгенә аҡ ебәк таҫма бәйләгән, таҫмаға «Туташ, мин һине яратам» тип сигеп яҙылған. Ул иртәнән кискә тиклем бүлтәйеп торған ирендәрен ҡыҙартыуҙан бушамай. Ҡунаҡҡа тәмәке тоҡандырғанда уның ботона тубығын терәй; вино ҡойғанда үҙе лә йотҡолап ҡуя. Ҡайһы бер ҡунаҡтарға ул айырыуса иғтибарлы, ә бәғзеләрен күрмәмешкә һалыша. «1-се номер» иғтибар итмәгәндәрен хеҙмәтләндереү миңә төшә. Уларға бик яҡын барырға ҡурҡам, сөнки ауыҙым бешкәне бар: ир-атҡа ышанырға ярамай. Бигерәк тә үтә тәрбиәле булып ҡыланғандарына шикләнеп ҡарайым, әҙерәк эсеп алһалар, танырлыҡ та түгел — йыртҡыс ҡиәфәтенә инәләр. Сәй яһағанда, таҫтамал биргәндә башымды баҫып, күҙемде күтәрмәй генә йөрөйөм. Ҡунаҡтар миңә һүҙ ҡушырға, шаяртырға тырыша, миндә уйын-көлкө ҡайғыһы юҡ. Киске 9-ҙан һуң, ҡунаҡтар таралыуға, еп өҙөрлөк хәлем ҡалмай, ныҡ арыйым. Бәләкәй генә бүлмәмә саҡ ҡайтып етәм, ҡайтам да сисенмәйенсә үк түшәккә йығылам. Таң атҡансы уянмай йоҡлайым. Уянғас, һөйөнөп ҡуям: үҙ көсөм менән аҡса табам, тип.

**27**

Эшкә мин иртә киләм. «1-се номер» сәғәт 10-сыла ғына килә, минән 2-3 сәғәткә һуңыраҡ. Ул миңә маһайыбыраҡ ҡарай, әммә усаллашмай, үҙенсә өйрәтә: «Улай уҡ иртә йөрөмә, таң менән кем килһен бында? Әҙ булһа ла йылмайырға тырыш, һин официантка бит, мәрхүмдәрҙе ерләү контораһында эшләмәйһең. Башыңды ла күтәрмәй торғас, кем һинең усыңа аҡса йомдорор? Бында ни өсөн килдең, аҡса эшләргә түгелме ни? Иҙеүеңде асыңҡыра, ебәк яулыҡ бәйлә — ҡунаҡтарға оҡшарһың, шулай итһәң!»

Уның хаҡлы икәнен аңлайым, минең арҡала уның да эш хаҡы кәмей: беҙгә счеттан тыш бирелгән аҡса уртаға бүленә. Минең уға асыуым юҡ, тыңларға тырышам, сөнки ул күберәк аҡса эшләргә ынтыла. Ҡатын-ҡыҙ бары тик шундай юл менән генә матди хәлен яҡшырта ала. Аңлайым, әммә һис кенә лә уның һымаҡ булғым килмәй. Үҙемдең дә көндәрҙән бер көндө уға оҡшарға мәжбүр булырымды күҙ алдыма килтерәм, әлбиттә... Әммә был юлға мин һуңғы сиктә генә баҫасаҡмын. Ә ул, һуңғы сик, йыраҡ түгел. Ошондай уйҙарҙан ярһып, ғәрләнеп, тештәремде шығырлатып ҡыҫам, әйтерһең, улар ғәйепле был хәлдәргә. Ике көндән һуң хужа мине иҫкәртеп ҡуйҙы: әҙәмсә аңларға теләмәйем икән, эштән ҡолаҡ ҡағасаҡмын. Быны ишетеп торған

«1-се номер» ирештергән була, йәнәһе, беҙҙең кеүектәрҙең банк директорҙарына кейәүгә сыҡҡандары ла бар, ана, затлы машиналарҙа елдереп, теттереп йәшәйҙәр. «Ә һин нишләп машинанан ҡолаҡ ҡаҡтың?» — тинем дә ҡуйҙым ыңғайына. Ул ирендәрен ҡыйшайтып, бот сапты: «Һин үҙеңде кем тип уйлайһың, бына табылған наҙлыҡай, дөрөҫ йәшәмәк берәү!» Яуап биреп торманым, көндәлек эш хаҡымды һорап алдым да киттем был эштән.

**28**

Бөлгөнлөк упҡынының ҡара шәүләһе миңә тағы ла нығыраҡ яҡынайҙы. Алыҫҡараҡ ҡасайым тип ынтылған һайын, ул эргәгә яҡыныраҡ шылыша. Эштән китеүемә үкенмәйем, ләкин әлеге шәүлә ҡотомдо ала. Берәй ир-атҡа һатылып ҡына хәл итеп булалыр, ахыры, был яҙмышты? Теге ваҡиғанан һуң мин ирҙәр һәм ҡатындар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең асылын аңланым дәһа. Ҡатын-ҡыҙҙың ихтыяры йомшай башлағанын һиҙеп ҡалһа, ир-ат уға талпан кеүек йәбешә. Ул боҙоҡ ирҙәргә беҙҙең тәнебеҙ генә танһыҡ, шул танһығы ҡанғансы ашата-кейендерә лә, туйып-биҙгәс, моғайын, йәберләй, хатта туҡмай башлайҙарҙыр. Эйе, ахыр сиктә ҡатын-ҡыҙ үҙен үҙе һатырға мәжбүр. Бәғзе ваҡыт уға был сауҙа ҡәнәғәтлек тә килтерәлер, анау юлы бит миңә лә рәхәт булды, хискә бирелеп, иреп китеп, яғымлы һүҙҙәр ҙә әйткәйнем хатта. Әммә был халәт тиҙ үтә, түбәнһенеү, ғәрләнеү генә тороп ҡала. Тик бер генә иргә бирелгәндә, наҙыңды ла сарыф итергә була, эйәләшергә лә мөмкиндер, ә бына әллә нисә кешегә ҡайҙан тапмаҡ ул наҙҙы? Әсәйемдең ул хаҡта бер ни ҙә һөйләгәне, аңлатҡаны булманы. Юҡ, һис тә күҙ алдына килтерә алмайым төрлө-төрлө ирҙәрҙең ҡосағына инеүҙе. Берәүгә, исмаһам... Теге юлы, тәүге тапҡыр, үҙемде һатам икән, тигән уй башыма ла инеп сыҡмағайны. Миңә егерме йәш тә юҡ ине... Уның менән йәм табырым кеүек тә ине. Яҙғы елгә иркәләнгән сәскә итеп тойҙом үҙемде, татлы һүҙҙәр аңымды томаланы. Иҫемә килгәндә, һуң ине инде, алдатҡыс төш кенә булған минең хыялым. Бер нисә яңы күлдәк һәм ваҡытлыса һыйлы тамаҡ — бары шул ғына... Башҡаса алданғым килмәне. Ләкин ас тамаҡ шаяртмай, ризыҡ — һәр нәмәнән зарур, ә ҡатын-ҡыҙ уны бары тик бер генә ысул менән еңел таба ала — үҙен һатып!

Мин айҙан ашыу эш эҙләү менән мәшғүл булдым.

**29**

Шул арала бергә мәктәптә уҡыған әхирәттәрем менән осрашҡыланым. Бәғзеләре колледжда уҡып йөрөй, күпселеге бер ҡайҙа ла эшләмәй, өйҙә ултыра. Әммә минең береһенә лә күҙем ҡыҙманы, киреһенсә, үҙемде уларҙан өҫтөнөрәк тойҙом. Мәктәптә мин уларҙан йүләрерәк инем, ә хәҙер улар минән дә иҫәр, һаман төш һәм өн араһында аҙашып йөрөүҙәре. Ҡупшы кейемдәре менән маҡтанып, йыуанып көн уҙғаралар. Ә ҡараштары егет-елән эҙләп ымһына, берәйһе күҙгә эләкһә, эстән генә мөхәббәт шиғырын ижад итә башлайҙар, гүйә. Ә минең көлкөм килә. Хәйер, аңлайым уларҙы, тамағы туҡтың уйында бары тик ғишыҡ мажараһы. Ғөмүмән, был донъя шулай ҡоролған: ирҙәр менән ҡатындар бер-береһенә ау үрәләр, кемдең аҡсаһы күберәк, шуның ау-йәтмәһе киңерәк, уға бер юлы бер нисә ҡорбан эләгә. Минең иһә кеҫәм таҡыр, йәшәр мөйөшөм дә юҡ. Йәтмәһеҙ ауларға йәки үҙемә ауға эләгергә — бүтән юл юҡ. Эйе, мин һабаҡташ дуҫтарыма ҡарағанда тормошто яҡшыраҡ аңлайым, тәжрибәм ҙурыраҡ.

**30**

Көндәрҙән бер көндө фарфор ҡурсаҡҡа оҡшаған бәләкәй кәүҙәле ҡатынды тағы осраттым. Ул мине ҡосаҡлап алды, әйтерһең, донъяла берҙән-бер яҡын кешеһемен. «Һеҙ яҡшы ҡатын, изге күңелле! Мин бик ныҡ үкенәм хәҙер,— тине ул ихластан,— һеҙҙең унан ваз кисеүегеҙҙе үтенгәйнем дә, тик юҡҡа ғына булды шул! — Ҡатын һулҡылдап илап ебәрҙе. — Бүтәнде тапты, йәшерәкте, матурыраҡты, китте лә кире ҡайтманы!» Бәләкәй ҡатындың һөйләгәндәренән шуны аңланым: ире менән һөйөшөп ҡауышҡан булғандар, әммә тегеһе аҙғын нәфселе булып сыҡҡан. Ә фарфор ҡурсаҡҡа оҡшаған был йән эйәһе һаман уны ярата, көтә, эҙләй. «Әгәр уны эҙләп таба алмаһағыҙ?» — тигәйнем, ул тағы ла нығыраҡ көйәләнеп китте. Баҡһаң, ул миңә көнләшеп ҡарай икән, мин бит — ирекле! Ә ул — ир ҡатыны, азат түгел, атаәсәһе лә иҫән — был да йоҙаҡ, бығау... Көлкө, биллаһи, миңә кемдеңдер күҙе ҡыҙа. Уның — ризыҡҡа, ә минең иреккә ҡытлыҡ юҡ. Ғәмәлдә икебеҙ ҙә бәхетһеҙ.

**31**

Фарфор ҡурсаҡ менән осрашҡандан һуң мин үҙемде берҙән-бер иргә һатыу теләгенән дә кире сигендем. Ир-атҡа күҙ уйнатып, нисек тә аҡса табыу ине хәҙер ниәтем. Мин бит бер кем алдында ла яуаплы түгел, мин — асмын. Тамаҡ хаҡына ирҙәрҙе әүрәтергә мәжбүрмен. Был — өҙөп сыға алмаҫлыҡ ҡулса. Әхирәттәрем дә, теге бәләкәй ҡатын да пассив хыялланыуҙан уҙа алмай, ә мин ҡул ҡаушырып ултыра алмайым, сөнки—тамағым ас. Ә ас тамаҡ—оло хәҡиҡәт ул.

Булған ваҡ-төйәгемде һатып, яңы күлдәк алдым. Былай ҙа Хоҙай һылыулыҡтан мәхрүм итмәгән мине, ҡупшы кейенеп алғас, тағы ла матурайып киттем һәм аҡса табырға тигән маҡсат менән урамға сыҡтым.

**32**

Күҙ уйнатыу, шаярыу-уйнаҡлау менән күпмелер бол йыймаҡмын үҙемсә. Юҡ шул, барып сыҡманы. Донъяны белеп бөтмәйем икән әле. Ир-атты тиҙ генә, еңел генә ҡармаҡҡа эләктереп булмай, имеш. Берәй зыялы ирҙе әүрәтеп, үпкән-ҡосҡан менән генә ҡотолоу ине иҫәбем. Улары киноға саҡыра йә урамда саф һауа һуларға, шунда берәй туңдырма алып бирә һәм — ас ҡарын ҡайтып йоҡлайым. Эйе, аңлашыла: үбешкән өсөн генә туңдырманан башҡа бер ни ҙә тәтемәйәсәк. Тимәк, һатылырға кәрәк. Бары шул саҡта ғына миңә тәмле ризыҡ, ҡупшы кейем һатып аласаҡтар. Ошо осор әсәйемде йыш иҫкә төшөрҙөм.

**33**

Бәлки, ҡайһы бер ҡатындар һүҙ уйнатыу, ҡаш һикертеү менән генә лә тамаҡ туйҙыра алалыр, тик минең ундай һәләтем юҡ.

Һәм мин һатлыҡ ҡатынға әйләндем. Ҡулға аҡса кереү менән фатир йүнләнем. Ир-аттың төрлөһө килә ине, араларында тәрбиәле, уҡыған әфәнделәр ҙә осрай. Улар түләй, мин — һатылам, берәү ҙә уңайһыҙлыҡ кисермәй, түбәнһенмәй. Башта барыбер ҙә ҡурҡыныс ине, йәшмен әле, йышылмағанмын. Әммә был оҙаҡҡа барманы, үҙемдең яңы тормошома тиҙ эйәләштем, оҫтарҙым. Дәртһеҙ, ялҡау булманым мин, ихлас биреләдем, ғишыҡ уйындарына, ҡулдарым, ирендәрем иркәләүгә маһир ине... Ҡунаҡтарыма

был, әлбиттә, нығ оҡшаны, улар мине башҡаларға маҡтап һөйләне, таныштоношона тәҡдим итте.

Бер нисә ай үтеүгә мин мөхәббәт сәнғәтен ярайһы уҡ яҡшы үҙләштерҙем, бер күҙ һалыуым етә ине ҡунағымдың кем икәнен тойомларға. Бай ирҙәр башта уҡ хаҡ ҡуя, аҡса мәсьәләһен күтәрә, үҙҙәренсә мине һатып алырға килгәндәренә баҫым яһай. Бындайҙар көнсөл, аҡса түләгәс, йәнәһе, мин — тик улар ғына уйнай торған бер тәтәй. Йүгәнләр сараһын таптым: илаша башлаһалар, өйөгөҙҙө табып, ҡатындарығыҙға барып һөйләйем, тип ҡурҡыттым. Шөрләйҙәр, әлбиттә. Әйтергә кәрәк, мәктәптә уҡыуымдың да кәрәге төшә ине. Ғөмүмән, белемдең файҙаһына инандым. Бәғзе ҡунаҡ аҡсаһын усына йомоп, артыҡ түләп ҡуймайым, тип ҡалтырап килә. Ундай әҙәмгә алдан уҡ иҫәп-хисап яһап, шарттар ҡуям: бының өсөн — шунса, шуның өсөн — бынса, тип. Бөтәһен дә тойоп ҡарағылары килә бит инде, ҡайтып тағы аҡса алып килмәй хәлдәре юҡ. Ә мин арттарынан көлөп ҡалам... Иң йәнде көйҙөргәне — һаран ирҙәр, әҙерәк түләргә тырышыуҙары бер әле, өҫтәлдәге ҡунаҡтарға тигән тәмәкене, хушбуй-фәләнде сәлдерергә маташалар. Күрмәмешкә һалышам, сөнки ундайҙар полиция саҡырырға, ғауға ҡуптарырға ла күп һорамай. Полицейскийҙар еҫкәнеп кенә йөрөй былай ҙа, уларға аҡса төртөп ҡотолам. Был донъяла, йыртҡыстар һәм йолҡҡостар донъяһында һөмһөҙ әҙәмдәр генә рәхәт йәшәй. Мин уларҙы йәлләмәйем. Ә бына әле мәктәптә уҡып йөрөгән һәүректәрҙе ҡыҙғанам. Кеҫәләрендә бер-ике көмөшө, ваҡ баҡыры сыңҡылдаған була, үҙҙәре шыбыр тиргә бата... Уларҙан да аҡса алам. Нишләмәк, бәй?! Ҡарт бабайҙар килгеләй — өй тулаһы бала, ейәндәре, ә былары мөхәббәт көҫәй. Аптырап ҡалам, ҡайһылайтып күрергә быларҙың күңелдәрен, тип. Аҡсалары мул икәнен һиҙәм, теге донъяға китер алдынан берәй семтем бәхет татып ҡалырға ымһыныуҙарын аңлайым. Үҙемде уларҙың теләктәрен үтәргә, һылап-һыйпап иркәләргә күндерәм. Бына шулай мин «аҡса» һәм «кеше» менән яҡындан таныштым. Аҡса кешенән ҡурҡынысыраҡ, кеше — йыртҡыс, ә аҡса — йыртҡыстың көсө.

## 34

Тәнемдең ҡурҡыныс сиргә дусар булыуын асыҡланым. Тетрәндем. Йәшәү тәмен юғалттым. Көндәр буйы урам буйлап йөрөйөм, бер нигә лә илтифат итмәйем, әйтерһең, йәнһеҙ бер өрәкмен. Әсәйемде күргем, бәхилләшкем килде. Эйе, мин үҙемде үлем тупһаһында торам тип хис иттем. Әсәйемде һуңғы тапҡыр бер ишек төбөндә күмер өрҙөрөп торғанын күргәйнем, шунда эҙләп киттем. Ләкин ул лавка бикле ине. Ҡайҙа күсеп киткәндер, берәү ҙә белмәй. Мин әсәйемде тағы ла ныҡышмыбыраҡ эҙләргә тотондом. Бәлки, ғәзиз кешем инде вафаттыр йә лавка хужаһы менән алыҫ-алыҫҡа күсеп киткәндер? Илай-илай бүлмәмә ҡайтып индем дә йыуынып-сайынып, таҙа күлдәк кейеп карауатҡа барып яттым һәм үлемде көтә башланым. Әммә ул килмәне лә килмәне. Бер мәлде ишек шаҡынылар. Кемгәлер кәрәгем төшкән, тимәк. Ярай, кил, кәрәгеңде ал да, һиңә лә йоғор минең ҡәһәрле сирем. Башҡалар алдында ғәйепле тоймай инем, үҙ ихтыярым менән фәҡирлектә тыумағанмын даһа. Урынымдан тороп, әҙ-мәҙ биҙәнеп, шарап эсеп алдым да ишегемде астым...

Теремекләнеп киткәндәймен. Утыҙ-ҡырҡ йәш бирергә булалыр хәҙер миңә. Күҙ төптәрем күгәреңкерәп тора, сирле тәнем ут булып яна, ләкин был хәлемә иғтибар итмәҫ булдым: тәмәке тартам, шарап эсәм — ҡыҫҡаһы,

сәләмәтлек, оят, намыҫ хаҡында уйланмаҫҡа өйрәндем. Миндә бары тик әлеге лә баяғы тамаҡ ҡайғыһы. Аҡса хәстәре генә. Тамағым һыйлы, өҫтөмдә ҡупшы кейем — шуға йыуанам, алданам һәм йәшәйем, йәшәйем һымаҡ...

**35**

Бер көндө, иртәнге сәғәт 11-ҙәрҙә, тупһала аяҡ тауыштары ишетелде. Мин ғәҙәттә, 10-да ғына карауаттан торам, 12-гә тиклем эске кейемдә йөрөйөм. Ялҡауландым, дәртһеҙләндем шулай. Сәғәттәр буйына ултырғыста түмәр кеүек ултырам, уйланмайым, хыялланмайым, хатта ҡымшанмайым да. Теге аяҡ тауыштары тынып ҡалды, кемдер һаҡ ҡына ишекте тартты. Ҡуҙғалырға теләгем дә, көсөм дә юҡ, ултыра бирәм. Ишек тотҡаһын ысҡындырмаған икән тыштағы кеше, тағы тартты. Түҙмәнем, астым ишегемде, асһам — әсәйем!

**36**

Етәкләшеп өйгә индек, ер-һыу илаштыҡ. Әсәйем әллә ни ҡартаймаған. Теге лавкасы уны ташлаған икән, ғаиләһенә әйләнеп ҡайтҡан. Иң хәйерсе биҫтәлә фатир табыр өсөн әсәйемә барлыҡ мөлкәтен — кейем-фәләнен инде — һатырға тура килгән. Ике аҙнанан ашыу мине эҙләгән, ниһайәт, килеп тапҡан. Башта ул мине таныманы, ишекте асҡас, бер күтәрелеп ҡараны ла боролоп китә башланы, әгәр үҙем тауыш бирмәһәм, китер ҙә ине. Ҡапыл илауҙан туҡтаным да һыным ҡатып көлөргә тотондом: ул ҡыҙын эҙләп тапты, ә ҡыҙы — фәхишә! Ул мине астан үлтермәҫ өсөн һатлыҡ ҡатынға әйләнгәйне, ә хәҙер мин уны аҫырар өсөн фәхишәлегемде дауам итергә тейешмен. Әсәйемдең кәсебе нәҫел яҙмышына әйләнде!

**37**

Әсәйем мине йыуатыр, тип өмөтләнгәйнем. Хәлемде еңеләйтмәһә лә, алдаҡ булһа ла, йомшаҡ һүҙ ишетәһе килә ләһә. Әсәйҙәр донъяла иң оҫта алдаҡсылар, уларҙың яғымлы ялғанын беҙ ысын итеп ҡабул итәбеҙ. Ләкин әсәйем мине хатта юрамал да иркәләп торманы. Хәйер, аңлайым: унда бары тик торлаҡ ҡайғыһы. Ул минең матди хәлем, кейемем, табышым менән генә ҡыҙыҡһынды, әйтерһең, фәхишәнең кәсебендә бер хилафлыҡ та юҡ. Сирләүем хаҡында әйткәс тә битараф ҡалды, әҙерәк ял ит, тимәне. Дарыуға барып килергә теләген генә белдерҙе. «Гел шулай көн итербеҙме икән?» — тигән һорауыма яуап бирмәне. Һиҙәм, ул барыбер мине йәлләй, борсола. Үҙенсә ярҙам итергә тырыша, ашарға әҙерләй, өйҙө йыйыштыра һәм йәшертен генә йөҙөмә күҙ һала, хәлемде самалай. Әммә, ташла был кәсебеңде, тип әйтә алмай. Аҡылым менән мин үҙем дә аңлайым, башҡа һөнәрем юҡ таһа, икенсе бер эш табыу мөмкин дә түгел. Ә ризыҡ заруры көн дә күҙеңә ҡарап тора. Өҫ-башыңды ҡарарға, фатир өсөн түләргә лә кәрәк. Әсә, ҡыҙ бала, намыҫ — был һүҙҙәрҙең юғары асылынан ни фәтүә? Аҡса ул бәғерһеҙ, уға барыбер...

**38**

Әсәйем, йәнәһе, ҡайғырта, шымсы кеүек, артымдан тикшереп, тыңлап йөрөп йәнемде көйҙөрә. Асыуланмаҫҡа тырышам да, түҙә алмай, әрләп ҡуям: ҡыҫылмаған ере юҡ, бигерәк тә аҡса мәсьәләһендә. Уның, бисараҡайымдың, аҡса күрһә, төҫһөҙләнгән күҙҙәре балҡып, тоҡанып китә. Ҡунаҡтар алдында ул хеҙмәтсе сүрәтендә йөрөй, әммә улары аҡсаға һаранлана башлаһа,

сығырынан сыға, һуҡрана, мине уңайһыҙ хәлгә ҡуя. Минең кәсептә тупаҫлыҡтың файҙаһы юҡ. Ҡартая килә, мин дә әсәйем һымаҡ мыжыҡҡа әйләнерменме, минең йөрәгем дә, аҡса һымаҡ, ҡаты, битараф булып ҡалырмы? Әсәйем ҡунаҡтарҙың аҡсаһын да сәлдергеләй, эшләпәһен, бирсәткәһен йәшергеләй. Мин ғауғанан ҡурҡам, ә уның иҫе лә китмәй: «Беҙ бер йылда ун йәшкә ҡартаябыҙ, иртәгәге көндө ҡайғыртырға кәрәк», — тип кенә ҡуя. Ныҡ иҫергән ҡунаҡты әсәйем һөйрәп тигәндәй урамға сығара, берәй мөйөшкә алып барып ултырта ла ботинкаларын да һалдыра хатта... Ғәжәп, ундай ҡунаҡтар кире килеп, әйберен таптырып йөрөмәй, алама дандары сығыуҙан шөрләйҙәрҙер, моғайын. Бәлки, татлы минуттар хаҡына, шуларҙы иҫләп өндәшмәйҙәрҙер? Һәр хәлдә, беҙ уларҙан түгел, ә улар беҙҙән ҡурҡа.

**39**

Әсәйем хаҡлы, беҙ бер йылда ун йәшкә ҡартаябыҙ. Ике-өс йылдан мин үҙемдең ныҡ ҡына бирешеүемде, төҫ ташлауымды тойҙом. Тәнем элекке түгел, ирендәремдән ҡан ҡасты, күҙҙәрем ҡыҙарып тора, ҡарашым йонсоу. Төш еткәнсе йоҡлаһам да, арып уянам. Ҡунаҡтар быны күрмәй түгел, әлбиттә, һирәгерәк килә башланылар. Мин, уларға ярарға була, икеләтә ялағайланам, уйнашсы ролен оҫта башҡарам, шуның һайын уларҙы нығыраҡ күрә алмайым. Тора-бара, үҙ-үҙемә оҡшамай, бөтөнләй яһалма, эскерле ҡатынға әүерелдем. Телмәрем дә фәҡирләнде, нәзәкәтлегем юҡҡа сыға барҙы. Шул арҡала миңә зыялы, зауыҡлы ҡунаҡтар ҙа һирәк-һаяҡ ҡына килә башланы. Улар «ҡошсоғом» тип йөрөткән наҙлыҡай былбыл инде аралашыу сәнғәтен юғалтҡан һайыҫҡанға әйләнде...

Эйе, эске халәтем — һайыҫҡан, тыштан тутыйғошҡа оҡшап ҡалдым — сағыу кейенмәй хәлем юҡ, исмаһам, шулай күҙ әүрәтергә кәрәк тәһә. Ирендәремде салт ҡыҙыл төҫкә буяйым, битемә ҡалын итеп кершән яғам һәм фәхишәлек маһирлығымды оятһыҙ рәүештә ҡулланам.

Ҡайһы бер минуттарҙа миңә үҙ үлемемде ап-асыҡ күрәм кеүек тойола. Ҡулыма аҡса төшкән һайын, асылымда, үҙәгемдә нимәлер өҙөлә, һына, үлә. Аҡса, бер ҡараһаң, мине йәшәтә, икенсе ҡараһаң — үлтерә... Мин үлемемде алдан күрәм, көтәм. Үлем тураһындағы уй бөтә башҡа уйҙарҙы мейемдән ҡыҫырыҡлап сығара. Көн артынан көн уҙа шулай... Ана ул, минең шәүләм — әсәйем; мин — уның күсермәһе. Тәнемдең һуңғы күҙәнәгенәсә ҡатып бөткәс, мин сал сәсле, сырыш битле, кипкән-короған ҡараҫҡыға әйләнәсәкмен. Яҙмышым шундай.

**40**

Үҙемде көсләп йылмайырға мәжбүр итәм. Әкренләп аҡылдан яҙам. Хәсрәтемде илап баҫыр әмәл юҡ. Әммә, йәшәүем ни тиклем генә мәғәнәһеҙ булмаһын, барыбер ғүмер ғәзиз, үлемдән зарурыраҡ, шуғалыр үҙемсә йәнтәслим йәбешеп ятам уға.

Ҡылған яҙыҡтарымда үҙемдең туранан-тура ғәйебемде лә танмайым. Әйткәндәй, мин үлемдән ҡурҡмайым да, бәхетлеләр өсөн генә ҡот осҡостор ул. Минең күргән-кисергәндәрем күптән үлем ғазаптары сиген ашҡандыр, тим. Әммә, тормошто яратмайым, тип әйтә алмайым, сөнки яратам, тик үҙ өлөшөмә төшкәнен түгел. Мин хыял иткән гүзәл тормош төштә генә күренә шул, уянһам — ҡәһәрле ысынбарлыҡ баш осомда ғына көтөп тора. Был донъя төш түгел, ә торғаны бер тамуҡ. Әсәйем мине кейәүгә сығырға өгөтләй, икебеҙ ҙә әҙәмсә йәшәрбеҙ, тип өмөтләнә. Мин — уның өмөтө.

## 41

Төрлө ирҙәр ҡосағында, ҡулдан-кулға йөрөп, мин мөхәббәттең нимә икәнен дә оноттом. Башҡа берәүҙе түгел, үҙемде лә яратмайым. Кейәүгә сығыр өсөн кемделер алдарға, күҙ бәйләргә, «яратам» тип ышандырырға кәрәк. Әлбиттә, мин күптәрҙе ҡармаҡлап ҡараным, тик берәү ҙә ыңғайламаны, ҡатын итеп алам, тимәне. Аҡса хакимлыҡ иткән донъяла кешеләр һалҡын аҡыллы бит. Бай ир өсөн фәхишә бурҙан да яман, сөнки ул үҙе лә бурлыҡ арҡаһында мөлкәт туплаған даһа. Бәлки, мин төнгө ҡунағымдан аҡса һорамаһам, һатылмаһам, мөхәббәт хаҡында һүҙ ҙә сығыр ине...

## 42

Тап шул мәлдә мин полиция ҡулына эләктем. Ҡала властары әхлаҡ тураһында хәбәр һөйләп кенә ҡалмаҫҡа, ә ысынлап эшкә тотонорға булған, күрәһең. Бай фәхишәләргә теймәгәндәр, әлбиттә, аҡса төрткәс, улар дөрөҫ юлға баҫҡан тип иҫәпләнә. Ә мине холоҡ төҙәтеү йортона урынлаштырҙылар, эшкә өйрәтә башланылар. Кер йыуыу, аш-һыу әҙерләү, бәйләм бәйләү — быларҙы мин күптән беләм... Ошо һөнәрҙәр менән генә көн күреп булһа, бер ҡасан да әлеге хурлыҡлы кәсебемде һайламаҫ инем. Ләкин, әйткәндәремә иманым камил булһа ла, берәү ҙә миңә ышанманы. Эште һөй, егәрле, тотанаҡлы бул, шул саҡта ғына киләсәккә хаҡ ризыҡ таба йәки кейәүгә сығып, ғаилә ҡора алырһың, тип өгөтләнеләр.

Был кешеләр үҙ хәҡиҡәттәрен ихлас инанып тылҡыйҙар, тик мин бер нәмәгә лә, бер кемгә лә ышана алмайым. Төҙәтеү йортонда булған йөҙәрләгән ҡатындарҙың ун-нисәһе кейәүгә сыҡҡан икән, шуларҙы үрнәк итеп һөйләп кинәнәләр. Ә миңә был көлкө, биллаһи. Беҙгә тикшереү менән бер чиновник килгәйне, уның күрәләтә уйҙырма һөйләп тороуына түҙмәнем, ғәрлегемдән битенә төкөрҙөм. Шунан һуң инде мине бер ҡайҙа ла сығармай башланылар, бикләп тоттолар. Мине тәрбиәләй, йүнәтә алмаҫтарын аңлағас, йәмғиәт өсөн ҡурҡыныс кеше тип, төрмәгә яптылар.

## 43

Төрмә — фәлсәфәүи урын ул, унда әҙәм тормошоноң бушағайым бер тамаша икәнен ныҡлап, төптән аңлайһың. Төрмәнән сығырға ынтылманым да, был уй башыма ла инеп сыҡманы. Иректәге йәшәйешем ниməһе менән яҡшыраҡ ине һуң? Әгәр азат тормошта минең өсөн саҡ ҡына арыуыраҡ берәй мөйөш барлығын белһәм, ошонда, төрмәлә, үлгем килмәҫ ине, сығырға тырышыр инем, алдамайым. Ләкин ундай мөйөш донъяла юҡ! Булмағас, ҡайҙа мине килеп табыр үлем — барыбер түгелме ни? Ә иң мөһиме, мин яңынан бында үҙемдең иң яҡын дуҫымды — Ай урағын күрҙем. Күптән, бик күптән күрмәгәйнем, өҙөлөп һағынғайным үҙен. Әсәкәйем, бахырҡайым, ни хәлдә икән? Мин Ай урағына ҡарап уйға батам, хәтер даръяларын кисәм...

**Гөлнур ЯҠУПОВА тәржемәһе.**

## ҺЫНАУҘАР ҺЫНДЫРА АЛМАНЫ

Упҡынға батып үлгән айғырҙың муйынында ултырып, үлем ҡурҡынысы янаған хәлдә ҡалғас, ирекһеҙҙән ғүмеремде ус төбөндә ҡалғандай тойҙом. Көсхәл менән ҡалҡынып, һаҙлыҡтан сурайып сығып торған төпһәгә һикерҙем. Тултырып ҡар яуа, тирә-яҡтағы ҡарағайҙар күренмәй ҙә.

Хлебороб исемле ошо айғырҙы менеп бөгөн иртәнге алтыларҙа уҡ 7-се холоҡ төҙәтеү лагерына килгәйнем. Айғырҙы һаҡсы һалдатҡа тапшырып, урман киҫеүсе тотҡондар ат менән бүрәнә ташыған ергә йүнәлдем. Ярҙамға һалдат бирергә иткәйнеләр ҙә, алманым. Бысылған ҡарағайҙар аяҡ аҫтында түшәп һалған кеүек ята. Уларҙың ботаҡтарын "саңғы"ларға тейәп, ат менән бер урынға ташып өйәләр.

Кисә лагерь етәксеһе Пелевин мине саҡырып алды ла бында эшләгән аттарҙың имгәнеп йәки яраланып ҡайтыуының серен асыҡларға ҡушты. Ҡараңғынан тороп, ҡайнаған һыу, арыш икмәге менән тамаҡ ялғаным да, ветфельдшер Иванов эйәрләп килтергән Хлебroom менеп, урманға юл тоттом.

Тотҡондарҙың тауышынан бөтә тайга яңғырап тора. Урмансыларҙың йөгөн тарта алмаған аттарҙы һүгенеп туҡмауын, бер меҫкен хайуанҡайҙың, алғы аяҡтарын терәп, ауыр йөктө ҡуҙғатырға тырышыуын күрҙем. Шул саҡ бер тотҡон аттың башын күҫәк менән туҡмарға кереште. Асыуымдан, йүгереп барып, тегенең күҫәген ҡайырып алдым да ситкә ырғыттым. Күҙе тонған был әҙәм йыуан ҡайын ботағын алып киҙәнгәйне, ялтанып, ағасын эләктереп алдым. Ашарҙай булып бер-беребеҙгә ҡарап торғанда, "Наших бьют!" тип һөрән һалып, күҫәк күтәргән тотҡондар беҙҙе уратып та алды. Меҫкен хайуан алдына барып баҫтым да:

– Ҡарағыҙ, атты ниндәй хәлгә төшөргәнһегеҙ? – тип ҡысҡырҙым. – Етеһигеҙ ағасты тартырға хәле етмәй бит уның.

– Бүрәнәне күпме тейәп ташыуҙа һинең ни ҡыҫылышың бар? Нисек теләйбеҙ – шулай ташыйбыҙ. Тайгала беҙ хужа, – ти былар. – Әйҙә, күҫәк эләкмәҫ элек, табаныңды ялтырат! Юғиһә бында һинең кеүек батырҙарҙың ҡайта алмай ҡалғандары ла булды.

Яман һүгенеп, мине күҫәктәре менән төрткөләргә тотондолар. Шул саҡ төркөмдө йырып берәү сыҡты.

– Доктор, һинме ни был? Танымай ҙа торам. Һаумы? – тип яурыныма ҡулын һалды. – Нимә булды, ниңә тауышланаһың? – Ул тирә-яғына ҡаранды. Эштең нимәлә икәнен белгәс: – Доктор хаҡлы. Хәҙер үк өс кубометр бүрәнәне бушатайыҡ, – тип ул йөк башына менеп тә китте. "Саңғы"ла биш кубометрҙай бүрәнә ҡалғас, ҡалын кәүҙәле йөк аты, йыуан тояҡтарын гөпөлдәтә баҫып, йөктө урынынан ҡуҙғатты.

Мине бәләнән ҡотҡарған был ир менән осрашыу былай булды. Бер санитар

менән йылҡы һарайында станокка бәйләп ҡуйылған аттың тояғын дауалай инек. Шул саҡ һарай аръяғындағы юл буйында винтовканан атҡан, ҡысҡырышҡан тауыштар ишетелде. Йүгереп барһам, ҡанға батҡан тотҡондо ике һалдат винтовка приклады менән дөмбәҫләй. Үҙем дә һиҙмәҫтән, һалдаттарҙың икеһен ике яҡҡа этеп ебәрҙем. Аптеканан тиҙ генә бинт, дарыуҙар алып килеп, теге әҙәмдең ҡанаған, емерелгән битен, танауын марля менән бәйләп, зонаға оҙаттым. Шул ир мине хәтерендә ҡалдырған икән.

Урман ҡырҡҡан ерҙә йөрөп, ҡыҫҡа көн кискә ауышты. Миңә үҙем йәшәгән 8-се лагерға ҡайтырға ла ваҡыт. Күҙәтеү вышкаһына килеп, бәйле торған Хлебообыма һикереп мендем дә уны ҡайтыр һуҡмаҡҡа төшөрҙөм. Тайгала тиҙ ҡараңғы төшә, көндөҙөн дә ҡояш бейек шыршыларҙың осонан ары күтәрелмәй. Әлеге мәлдә ҡояш байыуға ыңғайлап, шыршыларҙың яртыһына саҡлы түбәнәйгәйне. Яҡты күҙҙә юлды алдырып ҡалайым тип, айғырымдың бөйөрөнә типтем. Уға шул ғына кәрәк – шунда уҡ сабыуға күсте. Күп тә барманым, тултырып ҡар яуырға тотондо. Аҡ ҡарҙан тайга яҡтырғандай кеүек булһа ла, тиҙҙән ҡараңғы төштө. Ер, һуҡмаҡ, бөтә тайга күмелеп, айырып алғыһыҙ бер күренешкә әйләнде. Шыршыларҙың олондары ғына күҙгә салына. Миңә тағы ла ун биш саҡрым самаһы үтергә кәрәк. Юлға арҡыры ауған шыршылар йышайҙы, уларҙы атты атлатып ҡына урап үтергә тура килә.

Айғырым бер мәл юртыуҙан туҡтап, аяҡтарын шапылдатып, әле уңға, әле һулға ынтылды ла тубығына саҡлы батты. Ҡапыл теҙгенде тартҡайным, атым бороолдо ла арт һыны менән ергә убылып, ҡорһағына ятты. Аяҡтарымды өҙәңгенән ысҡындырып, күтәрелеберәк ятҡан ҡар өйөмөнә һикерҙем. Хәҙер мин айғырға ярҙам итә алмайым инде. Уның арт һыны батҡандан-бата. Оҙаҡ көрәште үлем менән айғырым. Бер саҡ ал һыны ғына упҡын өҫтөндә – мороно батҡаҡҡа тығылып, сәсәп, тынып ҡалды. Уның әле йылыһы китеп бөтмәгән өҫтөнә яуған ҡар иреп, тирә-яҡҡа йылы быу күтәрелә. "Бөтәһе лә бөттө!" тигән һығымтаға килеп, күҙҙәремде йомдом. Тын алмаҫҡа тырышып, йәнем менән ҡыйыштым. Йәнемдең йәшәүен туҡтатырға күпме генә көрәшһәм дә, барып сыҡманы. Әллә йәшәүгә ынтылыш ҡуҙғалдымы: битемә төшөп ирегән ҡарҙы, бысраҡты бейәләйем менән һөртөп, күҙҙәремде астым. Ҡараңғы. Туптура төшөп, ҡар яуа. Тубыҡтар, бил ҡатҡан. Ныҡ итеп өшөй башланым. Тәнемде ҡапшап, һыуланыуымды белдем. "Туңмаҫҡа тырышырға кәрәк", – тигән уй килде башыма. Ҡулдарыма таянып, аяҡҡа баҫҡайным, сайҡалып китеп, кире ултырҙым. Кәүҙәмде төрлөсә борғолап, ҡатҡан билемде яҙырға тырышып, бөгөлә-һығыла башланым. Тырыша торғас, бер аҙ йылындым кеүек. Тирә-яғыма күҙ ташлайым, бер нәмә лә күренмәй. Шулай ҙа миңә яҡынырақ бер йыуан шыршының шәүләһе салынды. "Ҡоро ер шул яҡта булырға тейеш", – тип бейәләйҙәрҙе сисеп, ҡар аҫтынан ҡатыраҡ ер эҙләп, бармаҡтарымды күтергә тығам. Бәхеткә күрә, ҡаты ергә төртөлдөм. Шатлығымдан алға ынтылдым да шыршыға барып етмәҫтән, аяҡтарым менән ҡаты ерҙе тойоп, ергә ауҙым. Мәңгелек йоҡоға талған тыныс тайганы күҙемде асып байҡайым. Күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғыла үлемесле тынлыҡтан башҡа бер нәмә лә юҡ. Юлһыҙ ҡараңғыла бынан китеү мөмкин түгеллеген беләм.

Яртылаш серегән шыршы төбөндә ултыра торғас, йоҡоға тартты. Арҡамды ағасҡа уңайлабыраҡ терәп, тубыҡтарымды ҡосаҡланым. Төндәрен туңдырһа ла, көндөҙөн йылытып, иретә башлай ине. Ҡар яуһа ла, әле туңдырырлыҡ һалҡын түгел. Йоҡоно еңеү өсөн, бейәләйемде сисеп, маңлайҙы, сикәләрҙе ыуғылайым, ләкин тағы өшөтөргә тотондо. Юҡ, былай ултырһам, ҡатып

үлеүем бар, тип аяғүрә баҫтым. Ширшыны бер-ике әйләнгәс, үлтереп асығыуым һиҙелде. Иртәнге алтыла бер киҫәк икмәк менән ҡайнаған һыу эсеп күп йөрөп булмай икән.

Күңел тулып китте, һыҡтап-һыҡтап, тыйыла алмай илайым. Бер аҙ еңеләйгәндәй булдым, хәл дә инде кеүек. Айғырҙың әле йылыһы китеп бөтмәгән елкәһенә сытыр ташып өйөргә керештем. "Бәлки, шунда йылынырмын", – тигән уй ҡыуаланы мине. Бер аҙҙан, ысынлап та, арҡам йылынып китте, ә тубыҡтарымды тиренән тегелгән ҡыҫҡа итәкле курткам менән ҡапланым. Шул ҡәҙәре ауырайтып йоҡо баҫты, күптән онотолған бала саҡ ваҡиғалары тығылышып-тығылышып иҫкә төштө.

...Ҡараңғы һыуыҡ өйҙә бер үҙе ҡалған бала, быялалары туңған тәҙрә рамына тотоноп, урамға баға. Маңҡаһын, күҙ йәшен бәләкәй йоҙроҡтары менән битенә һылап, инәһен саҡырып илай ул. Аҙнабикә апаһы килеп, яланғас баланы үҙҙәренең өйөнә алып китә.

...Ҡояш йылытҡан тәҙрә төбөндә уйнап ултырам. Инәйем, утын тейәлгән сананы бора алмай, өй мөйөшөнә килтереп түкәтте лә утынын шунда бушатырға кереште. Яланғас тубыҡтары ҡып-ҡыҙыл булып шешеп ҡабарған.

...Өткәйемдең мине тубығына баҫтырып һикерткәне бик томанлы ғына күҙ алдыма килә. Бер нисә хәлле крәҫтиәнде Себергә һөргән мәл был. Өткәйем менән мулла бабайым, ҡулға алыныуҙан ҡурҡып, Урта Азияға ҡасып китә. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ул шунда алынып, 1942 йылдың майында хәбәрһеҙ юғала.

Инәйем көн дә мине фермаға алып барып, һөт йылытҡан ҙур ҡаҙан ҡырына, йылыға, ултыртып ҡуя. Һуңыраҡ мин быҙауҙарға һөт эсерергә өйрәндем. Бер мәл һыйырҙар һеләгәйҙәрен ағыҙып, иҙелмә сире менән ауырый башланы. Быҙауҙарҙың иһә һеләгәйе ағып та тормай, ята ла үләләр. Унарлабы ғына, шул иҫәптән мин менеп йөрөгән үгеҙ быҙауым да, тере ҡалды. Мин уға "Майор" тигән ҡушамат бирҙем. Йүкәле буйында быҙау көткәндә мин уның өҫтөнә менеп, биленә арҡыры ятам да ташлап киткәнсе бәүелеп барам. Шулай был быҙау үҙе лә миңә өйрәнеп китте. Инәйем уларға һөт эсереп бөтөргәс, артымдан йүгереп йөрөп эсергә һораған Майорға тағы ла һөт бирәм.

Һуғыш сыҡҡас, ауылдың бөтә ирҙәрен шунда алдылар. Миңә ул саҡта ун йәш тулып уҙғайны. Бөтә мал-тыуар менән, инәйемә эйәреп, Ағиҙел буйындағы йәйләүгә күстек. Унда мин быҙауҙар көтөп йәйләүҙә ҡалам, инәйем ҡарайып янған бәләкәй генә сүлмәккә аш бешереп алып килә лә мине үлән араһына ашарға ултырта. Туйғас, бәләкәй генә көлсәләр төрөлгән сепрәкте ҡулыма тотоп, быҙауҙарҙы йәйләүгә ҡыуам.

Ситән аласыҡта өс малай һәм ҡарт ҡарауылсы торабыҙ. Һауынсылар һыйыр һауырға килеп-ҡайтып йөрөй. Беҙ – Петя Мазунин, Васька һәм мин – Ағиҙел ярына китәбеҙ. Арығансы һыу ингәс, бейек текә ярҙа аяҡтарҙы һәлберәтеп ултырып, үткән пароходтарҙы күҙәтәбеҙ. Көндәрҙең береһендә ҡояшта йылынып ултырғанда, оҙон троска тағылған баржа һөйрәтеп Баҡраҡ ашлыҡ әҙерләү пунктына китеп барған пароходты күрҙек. Уның лапылдатып әйләнгән тәгәрмәсе артына кәмә тағылғайны. Петя торҙо ла:

– Азамат, әйҙә, шул кәмәгә йөҙөп барып ултырайыҡ! – тип һыуға сумды. Унан ҡалышмай йөҙөп барып, мин дә теге кәмәгә менеп ултырҙым. Көтмәгәндә пароходтың палубаһында бер кеше һауаға мылтыҡтан атып ебәрҙе. Ҡурҡыуыбыҙҙан беҙ шунда уҡ һыуға сумып, ярға йөҙөп сыҡтыҡ. Икенсе тапҡыр ҡараңғы төшкән ваҡытта сатыр өйөлгән һалға ут төртөп, бер пароходҡа ҡаршы ағыҙып ебәрҙек. Пароход тиҙлеген туҡтатыбыраҡ, һалдан уң

яҡкараҡ боролоп, урап үтергә мәжбүр булды. Беҙ, өс малай, һикерешеп-көлөшөп туя алмай, был хаҡта аласыҡта ҡалған ҡарауылсы Ибрай бабайға ла һөйләнек. Әммә ул көлмәне.

Тиҙҙән Петя һуғышҡа алынып, шунда үлеп ҡалды. Васька менән миңә һыйыр көтөргә ҡуштылар. Ә быҙауҙарҙы Нәфисә апайға бирҙеләр. Икенсе йылында Васьканы ла ФЗО-ға алып киткәс, көтөүҙә яңғыҙым тороп ҡалдым. Петя менеп йөрөгән, сапҡан саҡта елкәһенә ыйыҡ эрендәре сәсрәп осҡан юрға ат хәҙер минеке. Ул өйрәнеп бөткән, теҙгенде тотмаһаң да, һыйырҙарҙы урман эсендә күреп, алдарына сығып, бороп ебәрә. "Ярҙамға көтөүсе алып киләм", – тип ферма мөдире Гөлминиса апай көн һайын вәғәҙә бирһә лә, бер аҙнанан артыҡ көтөүҙә бер үҙем йөрөнөм. Өйгә ҡайтып мунса инергә лә форсат булмағас, бет баҫты. Кейемдең йөйҙәренә ап-аҡ булып һырышҡан һеркәләр хатта ҡояшта ла үлмәй.

Мин көрәктәй һаҡаллы Мазунин ҡарт эргәһендә йоҡлап йөрөйөм. Ул йәйге селләлә лә һырма мамыҡтан тегелгән ҡышҡы салбарын сисмәй, шул килеш йоҡларға ята. Ҡатын-ҡыҙ уға яҡын бармай, танауҙарын баҫып, йыраҡтан урап үтәләр. Моғайын, миңә беттәр унан күсәлер, тип аласыҡтың икенсе яғына фуфайкамды йәйеп йоҡлай башланым.

Бер көн күгәүендән безләгән һыйырҙарҙы йыйып, бакенщик Әхмәҙулла бабайҙың яр башына ҡаҙып ултыртҡан бағанаһына атымды бәйләнем дә һыуға һикерергә торһам, ярҙан илле метрлап һыу эсендә бер аҡ нәмәнең ағып килгәне күренде. Абайлабыраҡ ҡараһам, сәстәре һыу ыңғайына һуҙылған, арҡаһы өҫкә ҡалҡҡан мәйет икәне асыҡланды. Ни эшләргә? Тотоп алып, ярға терәткәндә шәп булыр ине лә, ҡурҡыта: нисек уны йөҙөп барып тотаһың. Шул саҡ күҙем яр буйында ятҡан таяҡтарға төштө. Бер оҙон ҡолға тотоп, осон мәйеттең арҡаһына төшөргәйнем, барабан һуҡҡан һымаҡ, гөп итеп ҡалды. Арҡаһы шыма булғанлыҡтан, эләктереп булмай. Маташа торғас, ҡолға менән сәсенән бороп эләктереп, ярға йөҙә башланым. Ҡоро ергә сыҡҡас, мәйетте ярға терәп, ҡолғаны мәтегә батырып ҡуйҙым. Хәҙер мәйет миңә ҡурҡыныс та түгел кеүек. Атым эргәһенә килһәм, бер генә һыйыр ҙа күренмәй, Ҡораш бәлеһенә табан китеп бөткәндәр, имеш. Ҡояш байый яҙғансы һыйырҙарҙы көс-хәл менән йыйып, йәйләүгә ҡыуҙым. Һауынсыларҙың асыуы ҡабарған: "Эшкинмәгән малайға ышанып, һыйыр көтөргә ҡушҡанһың", – тип Гөлминиса апайҙы әрләйҙәр. Эштең низә икәнлеген төшөндөргәс: "Эй, Хоҙайым, ул әҙәм һыу ингәндә Баҡраҡ заготзерноһында иген тейәгән баркас аҫтына кереп юғалған. Таба алмағандар", – тип йәлләп уфтандылар.

Мөдир миңә ярҙамға икенсе көтөүсе – аяҡтары күгәрсендекеләй ҡыҙарып-ҡарайып ҡатҡан, ҡорһағы киндер күлдәгенән күкрәгенә табан ҡабарып сыҡҡан Мазһарҙы алып килде. Малайҙың ыштаны ла тубыҡтарын саҡ ҡаплап тора ине. Нимәнән тегелгән һәм ниндәй төҫтә икәнен аныҡ ҡына белеп тә булмай. Фуфайкаһын ҡултығына ҡыҫтырып, көлсәләр һалынған тоҡсайын тотоп, малай эргәмә килеп баҫты. Аласыҡта үҙем ятҡан ерҙән урын күрһәтеп, әйберҙәрен шунда ҡуйҙыҡ. Гөлминиса апай икебеҙгә лә әле генә ҡайтҡан феләктәрҙән әсегән һөт һалып биреп: "Әйҙәгеҙ, ашағыҙ ҙа һыйырҙарҙы һауырға алып ҡайтығыҙ", – тине.

Сеүәлектә туплап ҡалдырған һыйырҙарҙың яртыһы ҡуҙғалып, яр буйлап китеп бара. Тиҙ генә бороп килтерәйем тип, сыбыртҡы шартлатып, һөрән һалып, һыйырҙар артынан йүгерҙем. Ләкин, күп тә үтмәй, артымда "Азамат!" тип илаған тауышҡа әйләнеп ҡараһам, көтөү үгеҙе Майор, Мазһарға яҡын килеберәк, үкереп, ер тырнап тора. Кире боролорға тура килде. Майорға йоҙроҡ

төйнәп, "Кәрәгеңде бирермен!" тип әрләп, һыйырҙар араһына индереп ебәрҙем дә Мазһарға һыйырҙарҙы ҡыуалап алып килергә ҡуштым.

Иртәгәһен төш еткәс, теге малайҙы йәйләүгә әсегән һөт, эремсек артынан ебәрҙем. Үҙем һыйырҙарҙы Ағиҙелдә һыу эсереп, туплағас, һыу инеп сыҡтым да ҡомға тәгәрәнем. Күрәһең, йоҡлап киткәнмен. "Азамат!" – тип һуҙып сыҡҡан тауышҡа күтәрелеп ҡараһам, Мазһар урман ситендә сыбыртҡыһының осона нимәлер беркетеп маташа.

– Бына ҡара, сыбыртҡы осона тимер бәйләнем. Хәҙер Майорҙы проучу, – тине лә был үгеҙ яғына китте. Майор ҙа, шуны ғына көткәндәй, һыйырҙар янында Мазһарға ҡарап тора. Бер ваҡыт сыбыртҡы осона бәйләнгән тимер шыйлап үгеҙҙең арҡаһына килеп төштө. Күҙ асып йомған арала Мазһар ҙа, күлдәге ялбырап, һауанан осоп төшөп килә. Күҙе тонған үгеҙ малайҙы ер өҫтөндә тулатып һөҙөргә кереште. Тиҙ генә йүгереп барып Майор менән Мазһар араһына керҙем. Аҡайған күҙҙәре менән миңә ҡарап, маңҡаларын сығарып бышҡырҙы ла үгеҙ артҡа сикте. Мазһарҙың иһә күҙҙәре йомоҡ, ҡуҙғалмай ята бирә. Ҡулынан тотоп, һелкетеп ҡарайым. Илай яҙып инәлеп: "Тортор!" – тип ҡысҡырһам да, малай өнһөҙ ята бирҙе. Майор ситтән генә минең Мазһар менән булашҡанымды күҙәтә. Бер аҙҙан ул минең хәлде һиҙҙе, буғай: ғәйепле бала һымаҡ, башын түбән эйеп, һыйырҙар ятҡан урынға йүнәлде.

Тубыҡланып ултырып, Мазһарҙы әйләндереп-тулғандырам. Әмәлгә ҡалғандай, ҡорһағы эргәһендә ҡыбырҙаған ап-аҡ йыланға оҡшаған нәмә күҙгә салынды. Меҫкендең эсәге бүҫелеп сыҡҡан икән. Ярҙам өмөт иткәндәй, тирә-яҡҡа ҡарайым, юҡ, бер кем дә күренмәй. Шул саҡ Мазһарҙың башы ҡуҙғалып, нәҙек кенә ыңғырашҡан тауышы килде. „Иҫән икән“, – тип шатланып киттем. Бер аҙҙан малай күҙҙәрен асты ла: „Ҡайҙа, Майор?“ – тип кире йомдо. Мин: "Эсәктәрең сыҡҡан, үләһең бит, тор!" – тигәс, күҙҙәрен тағы асты. Эсәктәрен күлдәгенең эс яғына төрөп, уң ҡулы менән тотороп, һулаҡай ҡулын елкәмә һалып, аласыҡҡа табан атланыҡ. Гөлминиса апай ат менән Еҙем-Ҡарандан ҡайтып ҡына төшкәйне: "Әй, Аллаҡайым!" – тип һамаҡлай-һамаҡлай, һөт феләктәрен тиҙ генә бушатты ла: "Әйҙә, тиҙ генә ултыр!" – тип Мазһарҙы йәшел үләнгә күтәреп һалып, эсен фуфайкаһы менән япты. "Апай, асыҡтым, һөт эсәм", – тип малай башын күтәрә. Гөлминиса апайҙың: "Әй, Хоҙайым, әле генә эсәгеңде эсеңә тығып ҡуйҙыҡ. Юлда тағы сыҡһа, ни эшләрмен? Юҡ, бирмәйем", – тип әйтеүе булды, Мазһар күҙ йәше түгеп иларға кереште. Бер котелок әсегән һөттө ул бер тынала эсеп тә ҡуйҙы.

Көндәр һалҡынайып, көҙ ҙә етте. Һыйырҙар тупланған ҡомлоҡта Нәфисә апайҙы ҡалдырып, үҙем аласыҡҡа ашарға ҡайттым. Күрәм: Сәләй сүгермәге яғынан берәү килә. Кәүҙәһе ныҡ ҡына йоҡарып, бите-йөҙө ағарынған Мазһар, имеш. Маһайыбыраҡ, башын күтәрә биреп:

– Азамат, бына ҡара! – тип ул күлдәген арҡаһына тиклем күтәреп, ҡорһағын күрһәтте. – Операция эшләнеләр.

Шатлығымды йәшерә алмай, ике ҡулым менән уның beләктәренән тотоп һелкетеп:

– Мазһар, көтөүгә килдеңме? – тип һораным.

Ул, башын ситкә бороп:

– Беләм көтөүҙең нимә икәнен. Өгөтләмә! Мине хәҙер әсегән һөт эсереп, бер тин түләмәй көн буйына көтөү көттөрә алмаҫтар. Һыйырҙарығыҙҙы үҙегеҙ көтөгөҙ! – тине лә боролоп ҡайтып китте.

Башҡаса Мазһарҙы күрергә тура килмәне. "Мазһар инәһен үлтерергә ҡайтҡан, имеш", – тигән шомло хәбәр ишетелде. Ниндәй сәбәптәндер – билдәһеҙ.

Шуны беләбеҙ: ете-һигеҙ йәшлек малайҙар ауыл уртаһындағы күлгә мурҙа һалып, кистәрен яр буйына ятып ҡарауыллай торғайныҡ. Ләкин иртән күҙебеҙҙе асыуға мурҙалар яр буйында тырым-тырағай ята инеләр. Һуңынан күргән кешеләр әйтте: Мазһарҙың инәһе, күлдәген күкрәгенә хәтле күтәреп, һыуға инә лә мурҙаларҙы ярға сығарып, балыҡтарын ала икән.

Һуғыш йылдарында йүнләп уҡымаған көйөнә дүртенсе класты тамамлағас, Еҙем-Ҡаран урта мәктәбенә бишенсегә барҙым. Өҫ-баш йоҡа килеш һигеҙ саҡрым йөрөп уҡыу, бигерәк тә ҡыш көндәрендә, ифрат ауыр булды. Бер көн инәйемдең һуғыштан контузия алып ҡайтҡан бер туған ҡустыһы Бәҙретдин ағай:

– Апай, малайыңды йонсотоп, Еҙем-Ҡаранға йөрөтмә. Андреевка мәктәбенә ебәр, русса ла өйрәнер. Өс кенә саҡрым бит, – тине.

Алтынсы класты ташлап, тағы ла дүртенселә рус ауылында уҡый башланым. Андреевкаға йөрөүселәр бер нисә малай инек. Класс һыуыҡ, йүнләп яғылмай, шуға күрә ғәләмәт өшөттөрә. Шулай ҙа урыҫ малайҙары менән һуғыша-һуғыша яҙға хәтле йөрөнөм дә ҡабат барманым. Көҙөн яңынан Еҙем-Ҡаран мәктәбенә алтынсы класҡа төштөм. Инәйем: "Ятып уҡы, балам", – тип Мәхүбә әбейҙәрҙә фатир ҙа һөйләшкәйне. Ә унда ултырып яҙышырға өҫтәл юҡ, түбә таҡтаһына эленгән етеле лампа ла йүнләп яҡтыртмай. Ҡаҡ һикелә йоҡа ғына балаҫ йәйеп, өҫкә лә туҙып бөткән балаҫ ябынып та йоҡлай алмағас, өсөнсө көнөнә тағы ла йөрөп уҡый башланым. Бурандарҙа бер көн фатирҙа ҡунып, икенсе көн үҙебеҙҙең ауылға ҡайтып, етенсе класты ла бөтөрҙөм. Һигеҙенсегә ауылдан өсәүләп йөрөнөк: Рауза, мин, Әнүәр. Ҡышҡы каникулдан һуң дәрескә һуғышҡа алынмаған уҡытыусы Ҡылый Шәрәфи килеп инде. Бер аҙ класҡа ҡарап торҙо ла, бармағы менән төртөп:

– Тороғоҙ! Ярты йыл уҡығанлыҡҡа аҡса алып килдегеҙме? – тине.

Беҙ буранда өшөп килеп, ҡалтырашып ултыра инек. Аяғүрә баҫҡас, ҡурҡыуҙан бөтә тәнебеҙ ҡалтырап, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, Ҡылый Шәрәфигә ҡарап тора башланыҡ. Беҙҙең буш ҡул менән килгәнде аңланы ул.

– Сығып китегеҙ! – тип ишеккә табан ҡулын һуҙҙы.

Беҙ ҡулдан-ҡулға йөрөп туҙып бөткән китаптарыбыҙҙы күкрәккә ҡыҫтыҡ та сығып киттек. Ҡайтышлай ат һарайына һуғылдыҡ. Ябығып, йөндәре ҡойолоп бөткән ҡорсаңғы аттарҙы газ камераһына ҡыуалап индереп йөрөгән кешеләрҙе күреп туҡтаныҡ. Баҡһаң, меҫкен хайуандарҙы күптән түгел генә һуғыштан алып ҡайтҡандар икән. Тегендә-бында өҙөлгән ҡайыштар туҙышып ята. Әнүәр менән икебеҙгә ҡайыш һорап алып, билдәрҙе быуып ҡайтып киттек.

Ҡышын ат егеп Сермән яланынан бесән ташыным. Аҙын мине тағы ла, ыйыҡ атымды мендереп, йәйләүгә мал көтөргә ебәрҙеләр. Көндәрҙең береһендә бригадир йәше ағып, йүнләп күрмәгән күҙҙәре менән миңә ҡарап: "Азамат туған, атың менән наряд буйынса Еҙем-Ҡаран почтаһына бар әле", – тине. Яланда бер үҙем һыйыр көтөү еләткәйне. Бурлы ауылынан почта ташый башланым.

Көндәрҙең береһендә почта мөдире Һәҙиә апай:

– Азамат туғаным, мә пистолет, – тип усының төбөндә генә ятҡан бәләкәй нәмә һуҙҙы. – Бөгөн һуңғы көнөң, аҡса алып ҡайт та эшең бөттө.

Утыҙ саҡрымдағы Бурлыға төш ваҡытында ғына барып еттем. Әле уйлап, аҡылым етмәй: ул ваҡытта миңә ун дүрт йәш кенә булған. Бер ниндәй документһыҙ, эйәр алдына аҡса тулы ҡапсыҡ сығарып һалдылар. Йөк ауыр ғына, ат ҡуҙғалғанда йә уңға, йә һулға шыуыша. Бер ҡул менән ҡапсыҡты, икенсеһе менән теҙгенде тотоп киләм. Саптырып та, юрттырып та булмай.

Бер нисә ауылды үтеп, Канаш тигән сыуаш ауылын сыҡҡас, сөбөрләп аҡҡан һай ғына йылғаға яҡынлаштым. Тирә-яғы ҡыуаҡлыҡ, ә юл ҡапҡа кеүек кенә аралыҡтан, һыуҙан үтә. Атты әкрен генә һыуға төшөрөп, ҡороға баҫыуым булды, талдарға ышыҡланып торған ҡап-ҡара йөҙлө, аҡайған күҙле берәү оҙон күҫәге менән башыма ҡарай һелтәнде. Үҙем дә һиҙмәҫтән башты һулаҡай тубығымдан да түбән эйеп өлгөрҙөм, күҫәк аттың осаһына эләгеп, ул үрә һикерҙе лә сабырға кереште. Арыу ғына ер киткәс, артыма боролоп ҡараһам, юл уртаһында аяҡтарын киреп, оҙон таяғына таянып торған юлбаҫар күренде. Пистолетты сығарып: "Хәҙер мин һине атып үлтерәм!" – тип ҡысҡырҙым да атты инде күренеп торған Еҙем-Ҡаранға ҡарай саптырҙым. Ҡапҡа төбөнә йүгереп сыҡҡан Һәҙиә апай:

– Эй, Азамат туғанҡайым, иҫән-һау ғына ҡайтып еттеңме? – тип ҡапсыҡты күкрәгенә ҡыҫып, почтаға инеп китте.

Пистолетты тапшырып, өйгә ҡайтып киттем. Теге юлбаҫар Еҙем-Ҡаран кешеһе, һуғыштан ҡасып ҡайтып, тирә-яҡты тетрәткән бандит Нәжми булған икән.

Артабан почта ташыманым. Атымды йәйләүгә илтеп бирҙем дә дүрт йыл көтөү көтөп, бер тин дә ала алмағас, ауылға ҡайттым. Аҡсаһыҙ уҡырға алмайҙар. 150 һум аҙ аҡса түгел бит. Минең менән бергә мәктәптән ҡыуылған Әнүәр Черниковкаға таныштарына барып, экскаваторсы һөнәрен үҙләштерҙе. Һуңынан уның эскелеккә һалышып, нисәнселер ҡаттан һикереп һәләк булғаны ишетелде. Мин дә ситкә сығып китер инем, тик өйҙә инәйем ете һум пенсияға яңғыҙы йәшәй, ә апайым – йыраҡ ауылда кейәүҙә. Ҡыҫҡа буйлы Шакир ҙа алтынсы класстан ары уҡый алманы, сөнки һигеҙ саҡрым йөрөп уҡыуы, бигерәк тә ҡыштарын, бик ҡыйын. Архангель районының Карташовка ауылында нефть тапҡандар икән, тип ишеттек тә Шакир менән шунда эш эҙләп киттек. Беҙҙең ауылдан урыҫтар йәшәгән Путиловка аша һигеҙ саҡрым юл үтергә кәрәк. Эш табылды: беҙгә траншеялар ҡаҙырға, торбалар күмергә ҡуштылар. Шуныһы һәйбәт: ауылда бер киҫәк икмәк табырмын тимә, ә бында палаткаларҙа йәшәгән эшселәр өсөн ашхана бар. Ашау хаҡы 30 тиндән артмай. Берәр буханка икмәк һатып алырға ла рөхсәт ителә. Бер айҙан миңә – 17, ә Шакирға 7 һум эш хаҡы бирҙеләр. Ул эшкә башҡаса килмәне, сөнки атаһы һуғыштан терһәген имгәтеп ҡайтып, ауылда иҫәпсе булып эшләй башланы. Ә миңә нисек тә 150 һум йыйырға кәрәк. Көнөнә етешәр метр ҡаҙыһам да, 20 һумдан артыҡ түләнмәй, сөнки минең бер ниндәй документым юҡ.

Көндәрҙең береһендә метр ярым тәрәнлегендәге траншея төбөнән балсыҡ ырғыта инем. Ҡараһам, өҫтә мин ырғытҡан балсыҡ өйөмөндә аяҡтарын айырып баҫып, миңә ҡарап торған ерән сәсле ҡыҙ күренде. Быға хәтле яланғас ҡыҙ тәнен күрмәгән малай, ҡатып ҡалдым.

– Эй, парень! Так нельзя много копать, – тип миңә табан эйелеберәк, ер ҡаҙығандағы кеүек, ҡулдарын ишаралап ҡысҡырҙы был. – Умрешь ведь.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың көрәк тотоп үткеләүҙәрен быға тиклем күргеләгәйнем. Баҡһаң, улар әсир немкалар икән. Артабан уларҙы тирә-яҡты байҡап эҙләһәм дә, күрә алманым. Германияға ҡайтарып ебәргәндәр, имеш. Йәй буйы эшләп, 100 һум да аҡса туплап булманы. Көҙгө ямғырҙарҙа аяҡ аҫты батҡаҡҡа әйләнде, итекһеҙ йөрөрмөн тимә. Кирза итек тә һатып алғас, аҡса тағы ла кәмене.

Ҡышын беҙҙе тағы ла Сермән яланынан бесән ташырға ҡуштылар. Төшкә туҡталғанда өйҙәге һыйырға ашатырға һалам да ҡайта. Яҙ еткәс, мин тағы Карташовкаға ер ҡаҙырға киттем. Был юлы уҡыу башланғанға тиклем 150 һум

йыйып, һигеҙенсе класҡа барҙым. Көҙҙән ғинуарға хәтле ҡар ярып булһа ла йөрөп уҡыйбыҙ. Ә яҙға табан Рауза менән икәү генә тороп ҡалабыҙ. Рауза күберәк ятып уҡый, ә мин юл юҡта – саңғыла, юл төшһә, йәйәү йүгерәм. Еҙем-Ҡарандан ике саҡрымда яңғыҙ ғына һерәйеп ултырған Апуш ҡарамаһына еткәндә, яҡтыра башлай.

Шулай йүгереп барған килеш бер саҡ уңға боролоп, аҡланға күҙ ташланым. Мин барған юлдан йыраҡ түгел теҙелешеп, ҡойроҡтарын, осло морондарын алға һуҙып, минең менән йәнәшә биш-алты бүре саба. Нишләптер мин уларҙан ҡурҡманым, оҙатып-ҡурсалап йөрөүсе изге йән эйәләренә оҡшатып, йүгереүемде белдем. Бәүелгән, тулҡынға оҡшатып сапҡан бүреләр теҙмәһе Торналар һаҙына табан китеп, күҙҙән юғалды.

Ҡышҡы каникул кистәренең береһендә иртәгәһе көнгә кейем-һалымды әҙерләп йөрөй инем, инәйем, яртылаш туңған тәҙрәгә күрһәтеп:

– Улым, ҡара әле, ниндәйҙер уттар йымылдай. Кемдәрҙер тәмәке тартып тора, ахырыһы, – тигәнгә килеп ҡараһам, бер ни ҙә күренмәне.

"Туҡта әле, тәҙрә алдындағы ҡар һырынтыһына менеп ҡарайым", – тип күтәрелһәм, бүре эҙҙәре күреп, хайран ҡалдым. Шуныһы ғәжәп: ни өсөн улар мин йәшәгән йортҡа төбәп килгән? Әҙәм ышанмаҫлыҡ был ваҡиға миндә күп йылдар тынғылыҡ бирмәгән хәтирәләрҙе яңыртты.

...Һуғыш алдынан биш-алты йәштә – инәйем ҡараған быҙауҙарҙы, ә ун йәштә һыйыр көтөп йөрөгәнемдә бүреләр, әлбиттә, күргән. Ҡараңғы төндә Ҡаракүл аръяғындағы бүре ояһына барып сыҡҡас, инә бүренең мине туҡтатыуы, ләкин йыртҡыстарға хас булғанса, өҫтөмә ырғымауы, бүреләрҙең мине белеүе, бәлки, күрәһе килгәндәрен раҫлай. Апуш ҡарамаһы янында мине оҙатып йүгергән бүреләр өйөрө, тәҙрә алдындағы ҡар һырынтыһына ултырып күҙәтеүҙәр – был ваҡиғалар осраҡлы йәки бер тапҡыр ғына булған күренештәр түгел, ә бүреләрҙең аҡыллы йыртҡыс икәненә ишара итә.

Күп михнәт сигеп унынсы класты тамамлағас, хәрби комиссариат мине Өфө ҡалаһына ебәрҙе. Йыйылыу пунктында ятҡанда бер майор минең менән һөйләшеп китте. Яҡташым булып сыҡты ул, Табын ауылынан икән. "Инәйемде бик һағындым, ул бер үҙе генә йәшәй. Ҡайтып киләйем әле. Иртән килеп етермен", – тип унан рөхсәт һораным. Майор ышанды. Майға буялып бөткән составтың Ишембай нефть яҡкылығынан яй ғына беҙҙең яҡҡа үтеп барғанын күреп, һикереп мендем дә Таҙлар станцияһына саҡлы килдем. Ҡояш байығайны инде. Үтәгән юлына төшөп, ҡуйы ерек урманына еткәс, Баҡраҡ юлына боролдом. Ҡараңғыла Иҙел ярындағы ҡуйы талдар араһына килеп терәлгәс, тиҙ генә сисендем дә һыуға сумдым. Әхмәҙулла бабайҙың текә яр башында ултырған өйө күренмәһә лә, туп-тура йөҙөп, кәмәләр торған урынға барып төкәлдем. Кәмәләрҙең береһен сисеп, һикереп мендем дә Иҙелдең аръяғына ишеп сығып киттем. Тәҙрәне шаҡып инәйемде уяттым. Ул:

– Балаҡайым, йән киҫәгем, ҡайттыңмы ни? Эй, Хоҙайым, Аллаһы Тәғәләм ишеткәндер инде теләктәремде. Балаҡайым, күрер көндәрем булыр икән, – тип ҡосаҡлап иланы. Нимәгә тотонорға белмәй, өй эсендә сәбәләнеп йүгереп йөрөп, сәй ҡуйҙы. Май, ҡороттарын өҫтәлдә ҡайҙа ҡуйырға белмәй, балғалаҡтарын тотоп, мине ашатырға тырышты. Сәй эсеп бөткәс:

– Улым, аҙыраҡ серем итеп ал. Яҡтырыр ҙа инде. Мин һыйырҙы һауып алам да аш ҡуйырмын, – тип һөйләнә башлағайны, мин:

– Инәй, миңә хәҙер үк китергә, – тип тә әйтеп өлгөрмәнем, ул тағы иларға тотондо.

Оҙон һиртмәле ҡоҙоҡ эргәһенә хәтле оҙата килгән инәйем, кәкрәйеп

ҡатҡан бармаҡтарын яурынымдан ысҡындыра алмай һамаҡлап: "Балаҡайым, күҙ нурым", – тип күтәрелгән ике ҡулын төшөрмәй, ҡараңғыла тороп ҡалды. Иҙел буйына килеп еткәндә Сулпан йондоҙо ҡалҡып, таң беленә, ә Таҙлар станцияһына килеп еткәндә, ҡояш ағас баштарынан күтәрелә ине. Стәрле яғына туҡтаған составҡа ултырып ҡалаға килеп төшһәм, казармала егеттәр күренмәй. Майор:

– Һуңланың, ун – ун биш минут элек оҙаттыҡ, ә документтарың миндә, – тине. Бер аҙ уйланып торғас: – Минең башҡа уй килде әле: әгәр ҙә документтарыңды биреп, Өфөгә уҡырға ебәрһәм? Инә алмаһаң, тура бында килергә һүҙ бирһәң, тура Өфөгә ебәрәм, – тип ысҡындырҙы.

Саф күңелдән вәғәҙә итеп, шул көндө үк мин Өфөгә килдем. Иртәгеһен, ҡайһы институтҡа ғариза бирәйем икән, тип үҙем белгән берҙән-бер урын – Колхоз баҙарына йүнәлдем. Ҡаранып килә ятҡанда Ауыл хужалығы институты бинаһы күренде. Уйланып тормай, ҡабул итеү комиссияһына ғариза яҙып бирҙем. Ғаризаны алып ҡалған апай: „Имтихандар иртәгә үк башлана, рус теленән инша яҙырға килегеҙ“, – тип ҡалды. Иртәгәһен абитуриенттар менән шығрым тулы залға инеп, инша яҙҙым.

Ике көндән һуң иншалары ыңғай баһа алған абитуриенттарҙың исем-фамилиялары яҙылған исемлектә үҙ фамилиямды тапҡас, түбәм күккә тейерҙәй булды. Рус теле һәм әҙәбиәтенән имтиханда ла һорауҙар минең өсөн ауыр булманы. Әҙерләнеп тә тормай: "Мөмкинме? Мин яуап бирергә әҙер", – тигәс, бер уҡытыусы ҡатын: "Йә, ярай, башла", – тип тыңларға әҙерләнде. Русса йүнләп һөйләшә белмәһәм дә, әсәрҙең эстәлеге хәтерҙә булғас, өҙөп-йолҡоп тигәндәй Митрофан образы (Д. Фонвизиндың „Недоросль“ повесынан – **Ред.**) тураһында һөйләргә керештем. Һуңынан, һығымта яһағандай, „Митрофан уҡырға тырышмаған, өйләнергә тырышҡан“ тип әйтеүем булды, имтихан алыусылар шарҡылдап көлөргә тотондо. Минең: "Эх, боҙҙом бит эште, харап булдым. Минән көләләр бит, ят та үл“, – тип ҡот алынды. Тел оҫталығы булмаһа ла, грамматикаһын да арыу ғына белә инем, һөйләнем. Һуңынан зачетканы алып ҡараһам, әҙәбиәттән „бишле“, грамматиканан „дүртле“ ҡуйылғайны. Ҡанат ҡуйғандай, осоп сығып киттем. Артабан химия, физика, биологиянан имтихандарҙы ла „дүртле“гә тапшырып, шатлығымды бүлешергә ауылға ҡайтып киттем.

– Оҙаҡҡамы, балам? Иҫән-һау ғына ҡайттыңмы? – тигән һорауҙары менән инәйем, күҙ йәштәрен яулығының осо менән һөртә-һөртә, тупһа аша ҡулымдан етәкләп үк алды.

Институтҡа имтихан тапшырыуымды һөйләп биргәс, шатлығынан ни эшләргә белмәй: "Балаҡайым, асығып бөткәнһеңдер инде. Сәй йылытам, сәй эсәйек", – тип йүгереп әҙерләнә башланы. Ҡоротлап, ҡаймаҡ менән тәмләп, һөйләшеп һүҙҙәрҙе бөтөрә алмай, ултырып сәй эстек. Иртәгеһен ихаталағы кәртә-ҡапҡаларҙы ныҒыттым. Ҡасан институттан хәбәр килер икән? Килмәһә, Стәрлетамаҡҡа хәрби комиссариатҡа барырға, тип бер аҙнанан ашыу уйланып йөрөй торғас, институтҡа ҡабул ителеүем тураһында хәбәр килде. Шатлығымдың сиге юҡ: мине хәҙер армияға алмаясаҡтар, уҡырға тейешмен. Паспорт юллап ауыл Советына барһам, унда: "Беҙ ауылдан китергә бер кемгә лә справка бирмәйбеҙ", – тинеләр. Инәйемә ҡайтып һөйләгәс, ул бер аҙ уйланып торҙо ла һуғыштан аяғы имгәнеп ҡайтып, хәҙер КПСС-тың Ғафури район комитетында эшләгән Зиннәт ағайға барырға кәңәш итте. Йәш саҡта ул атайымдың дуҫы булған икән.

Район үҙәге Красноусольскийға кисләтеп кенә барып еттем. Ҡунырға урын

эҙләп тапҡансы ҡараңғы ла төштө. Бер ҡат балаҫ түшәлгән иҙәнгә ятыуым булды, йоҡоға талғанмын. Иртүк райкомға килеп, Зиннәт ағайҙы күрҙем. Йомошомдо белгәс, телефонды алып: „Фәхретдинова, бына минең эргәлә бер егет ултыра. Ул һиңә барыр, ярҙам итереңә ышанам", – тине лә сәй эсереп, тамағымды туйҙырып оҙатты. Зиннәт ағайға рәхмәттәр әйтеп, паспорт ала торған йортҡа киллем. Кискә табан документ кеҫәлә ине инде. Шатлығымдың сиге юҡ, уны бүлешергә Зиннәт ағайға йүгерһәм дә, уны тап итә алманым. „Инәйем ошолай кәңәш итмәһә, паспорт ала алмаҫ инем", – тип уйландым.

Табын ауылына килеп еткәндә, ҡояш байығайны. Тағы ла ҡырҡ биш саҡрымлап юл үтәһе бар. Юл ситендә ултырып, ҡалған көлсә менән майҙы ашаным да, ҡулдарымды һелтәй-һелтәй, алға ынтылдым. Еҙем-Ҡаранға килеп ингәндә, тәҙрәләрҙә яҡты юҡ ине, бик һуң булғандыр, күрәһең. Ҡулда сәғәт булмағас, ваҡытты ла белеп булмай. Ауылды сығып, Ғәззә ҡыуығына килеп еткәндә, тамаҡ кибеп, һыу эске килде. Һыу эҙләп элек һунарға йөрөгән һаҙлыҡҡа йүнәлдем. Йәй бик эҫе булғас, һаҙлыҡ кибеп бөткән икән, тамаҡ сылатып булманы.

Ауылға инер алдынан юл буйындағы иген өйөмө эргәһендә егелгән ат күренде. Шундағы бағанаға һөйәлеп, ныҡлабыраҡ ҡараһам, ике шәүлә арбаға иген урлап тейәй. Уларҙың ҡарауылсы Бәҙретдин бабай менән Мазһарҙың уҫал ағаһы Айҙар икәнен асыҡлағас, ҡурҡыуымдан тәндәрем зымбырлап китте. Айҙар мине күреп ҡалһа, иҫән ҡалдырмаҫ. Бер аҙҙан ул йөгө өҫтөнә ултырып, атын ҡыуа-ҡыуа, Андреевка яғына китте.

Паспортты күргәс, инәйем уны күкрәгенә ҡыҫып: "Балаҡайым, хәҙер уҡырға китерһең, һиңә кейем-һалым алыр өсөн һыйырҙы һатырға кәрәк булыр. Мин дә ҡартайҙым, ҡышҡылыҡҡа бесән дә әҙерләй алманым", – тине. Йәкшәмбе иртә менән һыйырҙы етәкләп Еҙем-Ҡаран баҙарына килдек тә, һатыулашып та тормай, Ташаҫты ауылынан берәүгә һатып та ебәрҙек. Өр-яңынан кейенеп, бәләкәй генә сумка тотоп, баш ҡаланың Гоголь урамындағы дөйөм ятаҡҡа урынлашып, уҡый ҙа башланым. Һағыныуыма сыҙай алмай, тәҙрә аша урамдан үткән-һүткән кешеләргә ҡарап ауылдаштарҙы эҙләйем. Ике аҙнанан һуң кәнфит, булка, бер буханка икмәк алып, ауылға ҡайтып килдем.

Икенсе уҡыу йылында инде мин аҙна һайын түгел, айына бер генә ҡайтып йөрөнөм. Институтта ярты йыл һайын 150 һум түләп уҡыуымды белеп, Пушкин урамында йәшәгән Әсхәт ағайым: "Һин нимә, ҡустым, аталары һуғышта үлгән студенттарҙан түләтмәйҙәр бит. Атайың һуғыштан ҡайтманы. Ул шунда һәләк булған. Мин хәҙерҙән үк юллай башлайым", – тине. Оҙаҡ та үтмәй, ул атайымдың 1942 йылдың майында хәбәрһеҙ юғалыуы тураһында белешмә алып бирҙе. Ҡалған ике йыл ярымды мин түләмәй уҡыным.

Бер кис студенттар менән Опера һәм балет театрына барҙыҡ. Тәнәфес ваҡытында, залдың икенсе ҡатына күтәрелеп бейегәндә, мин Алия исемле ҡыҙ менән таныштым. Ул өҫтөнә күгерәк төҫтәге, тубыҡтарынан түбән төшөп торған күлдәк кейгәйне. Аҡ йөҙлө, ҡыйылып торған ҡара ҡашлы, матур ҡыҙ. Мин уны тансыға алып төштөм. Икебеҙҙә лә оҫталыҡ самалы булыуға ҡарамаҫтан, тора-бара өйрәнеп киттек. Һуңынан Алияны Ағиҙел аша һалынған күпер төбөндәге ятаҡҡа оҙатып ҡуйҙым.

Яҙҙың сәскәләргә тулышҡан мәлендә, беҙ имтихандар биргән ваҡытта, Черниковкала йәшәгән ике туған Миңлемөхәммәт ағайым тыуған көнөнә саҡырҙы. Ҡунаҡҡа сәскәләр күтәреп, Алия менән икәүләп барып, башҡа ҡунаҡтар менән күңелле ял иттек. Мөхәммәт ағай аккордеонда бик оҫта уйнап, минән "Азамат"ты йырлатты. Әллә эсмәй эскәнгә, әллә күп эселеп,

иҫергәнмен. Иртәгәһен ауыртҡан баш менән трамвайҙа Алияның күҙенә ҡарарға оялып ҡайттым. Уның да һөйләшергә теләге һиҙелмәне.

Дүртенсе курс имтихандарын тапшырып бөткәс, Сәйфулла исемле студент менән мине практика үтергә Әбйәлил районына ебәрҙеләр. Унан әйләнеп ҡайтҡас, бер магазиндан Ҡытайҙа тегелгән ҡиммәтле бостон костюмды ҡултыҡҡа ҡыҫтырып сығып килгәндә, бер төркөм ҡыҙҙар араһында Алияны күреп, ҡысҡырып ебәрҙем. Ул да йүгереп килеп: "Азамат, ҡайттыңмы ни?"– тип ҡосаҡлап уҡ алды.

...Яртылаш йоҡлапмы, әллә иҫемде юғалтыпмы байтаҡ ятҡандан һуң уянып киттем. Башты күтәреп тә булмай, көс-хәл менән аяҡҡа баҫтым. Ҡараңғы. Ҡар яуыуҙан туҡтаһа ла, күктә йондоҙҙар күренмәй. Ғүмер буйы төньяҡты күрһәтеп торған Тимер ҡаҙыҡ йондоҙон күрһәм дә, ҡайһы яҡҡа юл тоторға самалар инем. Сайҡала-сайҡала, дерелдәп ятҡан сытырға баҫыр-баҫмаҫ ҡына атлап, ҡороға сыҡтым. Ҡалтырап торған тубыҡтарым, ҡаты ерҙе тойғанғамы икән, тынысланды. Тамағым кипкәйне, бейәләйемде иренемә терәнем, әммә ҡар иремәне. Хлебороб батҡан урында һыу барлығын белеп, тубыҡланған килеш ҡулды мүк аҫтына тығам да, болғансыҡ һыуҙы услап алып, ауыҙыма терәйем. Бер аҙ уртлағас, еңеләйеп киткәндәй булдым. Өшөһәм дә, тағы йоҡо баҫа башланы. Йылынырға тырышып, шыршы тирәләй бик оҙаҡ йөрөнөм дә, хәлдән тайып, ултырырға мәжбүр булдым. Йоҡо иһә үҙенекен итә. Ҡолағыма Алияның: "Азамат, йоҡлама! Бер ҡасан да тора алмаҫһың", – тигән тауышы ишетелгән кеүек булды. Ҡул-тубыҡтарымды ҡыймылдатырға тотондом.

Бер аҙҙан яҡтыра башлаған кеүек тойолдо. Йоҡом асыла биргәндәй булып, тамам һушыма килдем. Көсөмдән килгән хәрәкәттәр яһап, тороп баҫтым. Ҡояштың ҡайһы яҡтан сыҡҡанын күрергә тырышып, урынымда өйөрөләм. Ҡараңғылыҡты ҡыуып таң беленә башлаған яҡ – ҡибланың ҡайҙа икәнлеген асыҡланым. Миңә тағы ун биш саҡрым самаһы ҡар йырып барырға кәрәк икән. Тоҡтондарҙы эшкә йөрөткән юл әле мин торған Тунгуска йылғаһы ағып сыҡҡан шишмәләрҙән түбәнерәк уйһыулыҡтан, биш-алты саҡрым ситтәнерәк уҙа. Күп тә бара алманым, аяҡтарым тыңламай башланы. Ауыҙ-иренем кибеп, тын алышым һыуыҡ торба аша кергән һымаҡ тойола. Атлағанда ҡатҡан һырма салбарҙың тубыҡтары йүнләп бөгөлмәй, итек тә ауыр. Әле генә яҡтырған кеүек ине, ни эшләптер, тағы ҡараңғы төшә башланы. Атлап түгел, ике таяҡ менән этенеп, тубыҡтарымда шыуышҡан һымаҡ алға барам. Ҡараңғы булыуға ҡарамаҫтан, йүнәлеште үҙгәртмәҫкә тырышам. Хәл тамам бөттө, шыршы остарынан башҡа бер нәмә лә күренмәй. Салҡан яттым. Тайга тып-тын. Ҡолағыма яҡында ғына тимер юл вагонының тыҡылдаған тауышы ҡағылғандай булды. Көсөргәнеп тыңлайым, эйе, паровоз минән йыраҡ түгел уң яҡҡа үтеп китте. Ҡайҙан көс кергәндер, тороп баҫтым. Ике ботаҡҡа таянып, тимер юлға табан шыуышып, тиҙҙән юлды күтәреп ҡаҙылған соҡорға тәгәрәп төштөм. Тимер юлға шыуышып менеп, башты рельсҡа һалып бер аҙ ятҡас, шпалдар араһына һуҙылдым. Күпме ваҡыт үткәндер, бер саҡ вагондар яҡынлашыуын тойоп, паровозға ҡаршы баҫтым. Һөйрәп тигәндәй, мине кабинаға индереп ултырттылар. Ҡуҙғалып киткәс, машинистарҙың береһе миңә ҡарап торҙо ла:

– Ваня, смотри! Он же доктор, который живет с Кусумбаевым на конюшне, – тине.

Бында нисек килеп юлыҡҡанымды һораштылар. "Һөйләшә алмайым, һыу", – тип ымланым. Тиҙ генә йылы сәйле фляжканы ауыҙыма килтереп терәнеләр. Ауыҙ-ирен йомшарғас, мин: "Аҙаштым, атым упҡында батып үлде", – тигәнгә береһе:

– Ә ул – Тунгусканың башы. Шунда бер яҡташыбыҙ һунарға китеп, әйләнеп ҡайтманы. Ул урын ҡыш та туңмай, ҡыр кәзәләре, боландар ул ерҙе урап үтә. Хайуан-йәнлектәр кешеләргә ҡарағанда аҡыллыраҡ була шул, – тип һүҙен бөтөрҙө. Ул арала лагерға ла килеп еттек. Береһе: "Мин докторҙы конюшняға хәтле оҙата барам", – тип аптекаға тиклем ҡултыҡлап килтерҙе.

– Доктор! Иҫән-һау! Һине икенсе көн эҙләйбеҙ. – Күсембаев, ҡоластарын йәйеп, арҡамдан дөпөлдәтеп һөйҙө. Ишектә йоҡа ғына, оҙонса кәүҙәле, ап-аҡ йөҙлө матур ғына бер ҡыҙ күренде. Фонендоскопын яланғас тәнемдә шылдырып йөрөтөп тыңлағас: "Үпкәһенә бер аҙ һыуыҡ тейҙергән", – тип дарыуҙар бирҙе. Хәлемдең яҡшырмауын күреп торған Күсембаев: "Мин хәҙер", – тине лә ҡайҙалыр сығып китте. Күпмелер ваҡыттан һуң зонала эшләгән фельдшер килде лә, минең ниндәй хәлдә ҡайтып кереүемде һорашҡас: "Переохлаждение организма", – тине. Күсембаевтан саф спирт алды ла, беҙгә арҡаһы менән торған килеш шприцына һурҙырып, шуны ҡан тамырына ебәрҙе. Мин ҡайҙа ятҡанымды ла онотоп, икенсе донъяға күскән һымаҡ булдым. Күҙемде асып ҡарағанда, бүлмәләгеләр йә икегә айырыла, йә бергә ҡушыла ине. Мин иҫереүҙәнме, әллә ике тәүлек йоҡламағанғамы, ҡаты йоҡоға талып, икенсе көн ҡараңғы төшөүгә генә уянып киттем.

Аҡрынлап мин йүнәлдем. Эшемдә лә хәлдәр ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, имгәнгән, сирле аттар ҡырҡа кәмене. Хеҙмәт кенәгәмдә маҡтауҙар күбәйҙе. Бер мәл тышта дөпөлдәгән тауышҡа йоҡонан уянһам, хәле бөткән бер һалдат килеп инде.

– Доктор, пойдем! Произошло убийство. Берите побольше бинтов, – ти был.

Бинттар тултырылған сумканы тотоп, лагерь ҡапҡаһы янына килһәм, эстәрәк һуҙып һалынған мәйеттәр өйөмө күҙгә салынды. Проходнойҙа ҡурҡыуҙан ағарынған шәфҡәт туташы Маша бер тотҡондоң башын марля менән урап маташа. Бүлек начальнигы мине яраланған тотҡондарға ярҙам итергә ебәрҙе. Берәүҙең яралы арҡаһын бинт менән урағанда "Доктор!" тип ҡысҡырған тауышҡа әйләнһәм, баш осонда ялтыраған бысаҡты шәйләнем. Уң ҡулымды бысаҡлы ҡулға ҡаршы ҡуйып, һулы менән теге әҙәмдең муйынына төрттөм. Институтта уҡығанда боксерҙар секцияһына йөрөмәһәм, был һөжүмдән, моғайын, ҡотолоп булмаҫ ине.

Братск лагерынан күсереп килтерелгәндәр менән урындағы тотҡондар араһындағы өҫтөнлөк өсөн бәрелештә тиҫтәләрсә кеше урынында ятып үлде, илленән ашыуы ауыр йәрәхәтләнеп, Красноярск ҡалаһына оҙатылды. Яралыларҙы йыйып, барактарға урынлаштырғас, проходнойға барһам, Маша мине көтөп ултыра, имеш.

– Бер үҙем ҡайтырға ҡурҡам. Бер нисә тотҡон ҡасҡан, тинеләр. Оҙатып ҡуй әле, зинһар, – тип ялбарҙы ул.

Ризалаштым. Минең күҙ алдында уҡ сисенде лә пружинаһы иҙәнгә саҡлы һығылып төшкән карауатына менеп ятты был. Ҡайтырға теләп ишеккә йүнәлгәйнем, Маша, ҡапыл тороп, мине көс менән карауатына ултыртты.

– Бер үҙем ҡалырға ҡурҡам. Ҡайтма! – тип танауын һөртөп иларға кереште.

– Һуң бит инде. Мине Күсембаев ағай көтә. Ҡайтайым, – тип ишекте асам. Маша ныҡыраҡ һыҡтап, мине ҡайтармаҫҡа була, ялбарып илағас, кире инәм. Урман упҡынында, бөтә донъяны онотоп йоҡоға талған минутта Алияның: „Азамат, йоҡлама! Йоҡлаһаң, тора алмаҫһың!“ – тигән әсе тауышы ҡабатланғандай булды. Ҡорт саҡҡандай һикереп торҙом да сығып киттем. Ярты юлды үткәс: „Тал сыбығы һымаҡ бөгөлөп илаған ҡыҙҙың яңғыҙын ҡалдырып ҡайтып кит, имеш. Юҡ, ярамай былай“, – тип кире боролам. Маша

тубыҡтарына күкрәге менән ҡапланып үкһей ине. Эргәһенә ултырғайным, ул миңә табан әйләнеп, курткамдың төймәләрен ысҡындырҙы ла ҡуйыныма кереп сумды…

Һауын һыйырҙар аҫралған бүлексәгә мине күптән эшкә саҡыралар ине. Ул әле эшләгән 7-се бүлексәнән алыҫ та түгел – шунда күсеп киттем. Бер көн һыйырҙарҙы ҡарап йөрөгәндә, ветфельдшер йүгереп килгән:

– Доктор, һине бер ҡатын телефонға саҡыра, – ти был.

Барып трубканы алһам, Маша икән.

– Мин Сосновка станцияһында яңғыҙым ултырам. Вокзалда бик һыуыҡ. Үтенеп һорайым, килеп ал инде, – тип ялбара был.

Ун саҡрым үтеп, Машаны юлда кейеп йөрөгән толобома урап, 3-сө лагерға киттем. Йәшәгән йортомдоң бер бүлмәһенә индереп ултыртҡас, был: "Эсем ҙурая башланы, шуға күрә һинең эргәңә күсергә булдым. Хәҙер бында эшләй башлайым", – тип аңлатты. Ә минең башымдан һөйөклөм Алия бер минутҡа ла китмәй. Йылы бүлмәлә Машаның бер үҙен ҡалдырҙым да аптеканы йыйыштырыусы апайға барып: „Бөгөндән ошонда йәшәй башлайым. Өфөлә мине һөйгән ҡыҙым көтә, йәйгә отпуск алып, өйләнеп киләм“, – тип аңлаттым.

Бер көн беҙҙе йылҡы паркы директоры ҡунаҡҡа саҡырҙы.

– Бейек ҡойма аръяғындағы бер йортта төрмәнән сығарылған ирҙәрен алып ҡайтырға килгән ҡатындар мәжлес ойошторған, – ти был. – Мине һеҙҙең арттан ебәрҙеләр.

Ҡунаҡтар һанап бөткөһөҙ күп. Өфөнән килгән табип Александр Булатов менән мине түргә ултырттылар. Яҡташым күп эсеп иҫерҙе лә бер мәл тышҡа сығып китте. Мин дә уның артынан эйәрҙем. Тәмәке тартмаһам да, ситтәрәк ултырып, ҡунаҡтарҙы күҙәтәм. Бер саҡ ҡаршыһында торған иҫерек ир Булатовтың муйынына һуҡҡайны, яҡташым шым ғына артына ауҙы ла китте. Тиҙ генә йүгереп килеп, һөжүм итеүсенең эйәк аҫтына бик ҡаты төрттөм. Ләкин ул йығылманы, миңә ташланды. Икенсе төртөүҙән тегенең танауынан ҡан китеп, ағас төпһәһенә әләгеп йығылды ла, тороп, яңынан миңә ташланды. Тамаша ҡылып тороусыларҙың хәҙер бөтәһе лә миңә ябырылды. Үҙем артҡа сигәм, яҡын килгәндәрен бокс алымы менән бәреп йығып торам. Ихата кәртәһенә килеп төртөлгәс, ат ҡараусы тоҡтондар, кәртә аша һикереп төшөп, мине уратып алдылар ҙа: "Доктор, хәҙер беҙ был бандиттарҙы ергә түшәп һалабыҙ. Наших бьют!" – тип һөрән һалып, тегеләргә ташландылар. Ҡулдан килгәнсә өгөтләп, көскә туҡтаттым.

Емерелеп, сәнскеле тимер сыбыҡтары аунап ятҡан төрмә стенаһы буйына ҡараңғы төшә башлағас ҡына килеп еттем. Бындағы ветфельдшер менән мин күптән таныш. 3-сө бүлексәгә дарыуҙар алырға бер нисә тапҡыр килгәне бар. Ул йәшәгән йортҡа килеп туҡтауым булды:

– Таня, Таня! Ана, һин һағынған доктор килде. Әйҙә, сыҡ, тиҙерәк ҡаршы ал! – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра, Чельцов атымдың дилбегәһенән әләктереп, ҡоймаға бәйләп тә ҡуйҙы. Ул ауыҙында бер-ике генә теше ҡалған, ябыҡ кәүҙәле, оло йәштәрҙәге кеше. Атылып килеп сыҡҡан Таня, ҡулдарын һоноп, мине күкрәгенә ҡыҫты. "Ниңә бик оҙаҡ килмәй йөрөнөң, доктор?" – тип күҙҙәремә төбәлде. Өйгә индек, Таня, сүгәләп ултырып, ботинкаларҙы һалдырҙы.

– Атың ныҡ тирләгән. Септә менән ябып ҡуйығыҙ, – тип һөйләнеп Чельцов килеп инде лә өҫтәлгә араҡы ҡуйҙы. Мин дә ике шешә спиртты: "Береһе – ауырыу малдарға, икенсеһе – Таняға", – тип көлөп, өҫтәлгә ултырттым.

Бик оҙаҡ ултырып кителде. Ишек төбөндәге бейек эскәмйәгә урын йәйеп, Таня мине шунда яҡтырҙы, ә үҙҙәре ике яҡҡа асылмалы ишектән төпкә инеп киттеләр. Күҙгә йоҡо инмәй ятҡанда, Чельцов, кейенеп, яныма килде лә:

– Доктор, мне необходимо ехать. Приеду завтра, не скучайте, – тине лә тышҡа сығып китте.

Эргәмә килгән Таня: "Доктор, тебе холодно, дрожишь. Пойдем, согреешься", – тип ҡулын билемә һалды. "Юҡ, юҡ, өшөмәйем. Хәүефләнмә, Таня", – тинем дә икенсе яҡҡа әйләнеп яттым. Кем белә был ҡартластың ниндәй уй менән төн уртаһында йәп-йәш ҡатынын ят ир-егеткә ҡалдырып киткәнен? Бында ниндәйҙер сер бар. Нисек кенә тән-йөрәгең тартһа ла, сыҙарға кәрәк.

Ғәйепле кешеләй, күтәрелеп ҡарамай ғына сәй эсеп ултырғанда, ишектән Чельцов килеп инде лә: „Ну как, без меня не скучали?“ – тип һораулы ҡарашын беҙгә төбәне. „Вроде нет“, – тинем, ә йәш ҡатын өндәшмәне, сәй эсеүен дауам итте. Чельцов сисенде, дәртләнеп, көләп кергән төҫөн үҙгәртеп, түбән тауыш менән: „Танюша, я немного замерз, налей, пожалуйста, по рюмочке“, – тип миңә ҡаршы ултырғысҡа терәлде. Эскәс, миңә йән кергәндәй булды. Кейенеп, аттар һарайына йүнәлдек. Чельцов юлда ла миңә һүҙ ҡатманы. Ә мин, Чельцов менән ҡатынын көнләшеп һөйләшмәй, тип борсолам. Аттар һарайында эште бөтөрөп урамға сыҡһам, бер яҡ ситтәрәк торған Таня күренде. Ул йәшле күҙҙәре менән миңә ҡарап:

– Доктор, ҡасан киләһең? Көтәм һине, – тип бышылданы. – Ҡурҡма, һин мине аңламаның. Көтәм, кил оҙаҡламай.

Юлда үҙемә шундай һығымта яһаным: "Кем ҡорбандары былар? Ниндәй яҙмышҡа буйһоноп, ошо ҡәһәрле донъяға килеп тарығандар, ҡарасҡыға әүерелгәндәр? Эй, Хоҙайым, әгәр булһаң, түҙеп тормаҫ инең был хәлгә".

Ярты төн ауғас, аптекаға ҡайтып, карауатҡа йығылғас, үҙемдең турала ла уйландым: "Ә мине һуң бында кем эшләтә һәм ниндәй хаҡҡа?"

Иртән ҡаты-ҡото икмәк менән сәй эскәс, ҡатын-ҡыҙҙар зонаһына киттем. Иртәнге һауымға ла күп ҡалманы. Иң элек ирле-ҡатынлы Крыловтар эшләгән йәш быҙауҙар аҙбарына һуғылдым. Михаил тотҡондағы ҡатыны эргәһенә килеп быҙауҙар ҡараша ине. Барып инһәм, тәмәке төтөнө аша саҡ күренгән өс ир ултырғыстарына һөйәлеп, күҙҙәрен йомоп шып-шым ултыралар. Эштең нимәлә икәнен аңлап, тауыш ҡуптарманым, сөнки наркомандарҙы кәйефләнгән сағында борсоһаң, улар бер нәмә менән дә иҫәпләшмәй, имеш. Әйләндем дә сығып киттем. Бер нисә тапҡыр иҫкәртелеүгә ҡарамаҫтан, аптекала эшләгән Князев наркотикты зонаға килтереп һатҡан, имеш. Уны эшенән бушатырға тура килде. Уның урынына бер нәмә лә аңламаған Михаилды ҡуйҙым. Бер аҙҙан ике малсы килеп:

– Доктор, әгәр ҙә Князевты ветфельдшер итеп кире ҡуймаһаң, үҙеңде ғәйепле, – тип сығып китте.

Оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Бер саҡ эштән ҡайтып киләм. Артта бысраҡ шапылдаған тауышҡа әйләнһәм, ике ир артымдан эйәреп килә. Өс-дүрт аҙым етмәйерәк туҡтанылар ҙа, бысаҡтарын сығарып, шым ғына ҡарап торалар. Бәй, аптекала "кәйефләнеп" ултырған бәндәләр бит! Һүҙ әйтергә лә өлгөрмәнем, береһе, бысағын күтәреп, миңә ташланды. Беләгенә һуғып, бысағын ергә ташлаттым да, тиҙ генә эйелеп алып, үҙенә ҡаҙарға күтәргәйнем, икенсеһе аҙбар яғына ҡаса башланы. Быныһы иһә тубыҡланып: "Доктор, үлтермә инде. Нимә теләһәң – шуны эшләйем", – тип ялынырға тотондо. Көс менән тегенең бысағын алдына ҡаҙаным да, һуҡмаҡҡа төшөп, ҡайтып киттем.

Отпуск ваҡыты ла етте. Өҫтә лә, аяҡта ла йүнле кейем юҡ. Айына 96 һум эш

хаҡы алам. Өфө универмагында һатып алған ҡиммәтле костюмым иҫеректәр менән алышта йыртҡыланып бөткәйне. Үтескә 500 һум аҡса табып, юлға кәрәк-яраҡ, кейем яңырта башланым. Украинанан ҡыуылып килгән тегенсенән киң балаҡлы салбар, зоналағы итекселәрҙән сандали тектерҙем. Бер умартасынан ҡорт балы һатып алдым да Решета станцияһына килдем. Төндә үтә торған "Иркутск – Мәскәү" поезына билет алып тимер юлға сыҡһам, бер состав туҡтаған. Тауар вагондарының ғәҙәти ишектәре юҡ, ә ике яҡҡа асыла торған ҙур ишектәр бикле. Юғарылағы тар ғына тимер рәшәткәле тәҙрәләрҙән кемдәрҙер ҡул болғай: "Кешеләр, махоркағыҙ юҡмы? Тартырға берәй нәмә ырғытығыҙ әле!" – тип ҡысҡырыша. "Хөкөм ителгән бәндәләрҙер, күрәһең, Себергә алып китеп бараларҙыр", – тип уйланым. Үҙем тартмағас, кеҫәлә тәмәкем дә юҡ. Тиҙ генә йүгереп барып, магазиндан ике кеҫә махорка алып килдем дә эшелон буйлап тәҙрә аша таратып сыҡтым. Ул арала состав ҡуҙғалып китте. Таҡта, бүрәнә тейәлгән поездар һәр биш – ун минут һайын көнбайышҡа үтеп тора. „Ғәйепле, закон боҙған кешеләр ҡайҙан килә икән? – тип үҙ алдыма уйланам. – Иҫәбе-һаны булмаған хөкөм ителгәндәр менән тулған тауар вагондары тик көнсығышҡа үтә. Шул хәтле күпме икән ни ул бур-уғрылар? Уларҙың күплегенә йәмғиәт ғәйепле түгелме икән? Бәлки, хөкүмәтебеҙҙе шундай тәртип ҡәнәғәтләндерәлер?“

Беҙҙең Нәфисә апайҙы ла 1941 йылдың көҙөндә, арыш башағы ыуып, балаларына ҡыҙҙырып ашатырға тип ҡайтып килгәндә, райком вәкиле тотоп алып, хөкөмгә тарттыра. Нәфисә апай 1945 йылдың яҙында ғына төрмәнән ҡайтып, Ағиҙел йәйләүенә быҙауҙар көтөргә килде. Биш йыл урманда ағас киҫеүҙә йөрөп һаулығын юғалтҡан. Еҙем-Ҡаран май заводынан ҡайтарылған әсегән һөт менән тамаҡ туйҙырыуына ла ул шатланып бөтә алмай. Сөнки уның кеүектәрҙең күберәге күргән яфаларҙан сит-ят ерҙәрҙә үлеп ҡалған. Ошондай фажиғәле яҙмышҡа беҙҙең ауылдан ғына биш-алты ғаилә дусар булды.

Отпускыға ҡайтҡас, Алия йәшәгән ауылға барҙым. Ҡыҙ өйөндә булмай сыҡты. Ҡартинәһе, ул күлдәк тектерергә китте, тип аңлатты. Малдар ҡураһы янында йөрөгән ҡартатаһы янына барып та өлгөрмәнем, ҡуйы ҡара сәстәрен тулҡынландырып ҡапҡанан атылып ингән Алиям мине ҡосаҡлап та алды. Өнһөҙ генә күкрәгемә һырылды, мин дә уны ҡосаҡлап, сәстәренән үптем. Иртәгеһен икәүләп беҙҙең ауылға киттек. Инәйемдең шатлығының сиге юҡ ине. Бәҙретдин ағайымдың велосипедын алып, көн дә Ағиҙелдә һыу инеп, ҡояшта ҡыҙынабыҙ. Шатлыҡлы миҙгел бик тиҙ үтеп, хушлашыр көндәр ҙә килеп етте. Алия эшкә тәғәйенләнгән Сәүкә урта мәктәбенә килеп, бер нисә кешегә тәғәйенләнгән мәктәп йортонда уға ла бер карауат ҡуйып, матрас түшәнек. Ул арала колхоз бригадиры килеп, Алияны төнгөлөккә ырҙын табағына иген елгәрергә алып китте. Иртән ҡыҙ бик арып, саңға батып ҡайтып инде. Алдан һөйләшкән буйынса, район мәғариф бүлегенә барырға кәрәк ине. Юлға сығып, бер аҙ атлағас, Алиям: "Азамат, мин кисә ырҙын табағында ярамаған нәмә ашаным. Хәлем юҡ, эс китә", – тип яурыныма башын һалды.

Утыҙ саҡрымды көс-хәл менән үтеп, Красноусольскийға килеп ҡундыҡ. Алияның эсе иртән дә баҫылмағас, район дауаханаһына килдек. Бер аҙҙан ул аҡ кейемдә килеп сыҡты ла:

– Миңә ятырға ҡушалар, Азамат. Һин эшеңә кит инде, былай ҙа һуңланың, – тине.

Лагерға килеп, эшкә сыҡтым. Күпмелер ваҡыттан һуң мине почта бүлексәһенә телефонға саҡырҙылар. Ауылдан апайым шылтырата икән. Трубканы алыуым булды, ул асыулы тауыш менән:

– Һин нимә, унда мәрйәгә өйләнеп ятаһың? Алия шуны ишетеп, аҫылынып үлә яҙған, ҡотҡарғандар, – тине.

Был һүҙҙәрҙе ишетеү миңә бик ауыр булды. Гөрһөлдәп ултырғысҡа ултырып, башымды ҡаҡ өҫтәлгә терәнем. "Йәшәмәйем был донъяла, үләм" тигән уй менән аптекаға барып, нашатыр спирты алдым да ауыҙыма ҡойҙом. Артабан ни булғанын табип Булочевтың: "Кризис миновал", – тигәнен ишеткәс кенә аңланым. Мине эҙләп килгән ат ҡараусы иҙәндә иҫһеҙ ятҡанымды күреп, табип саҡырған. Күҙҙәремде асҡас, Булочев йылы сәй, һөт эсереп, ашҡаҙанымды йыуҙырҙы:

– Бәхетеңә күрә, күп эсеп өлгөрмәгәнһең. Тын юлдарыңды дауалаһаҡ, эшләй ҙә башларһың, – тип йыуатты.

Бында килгәс тә Алияға хат яҙып, почта йәшнигенә һалғайным, тик унан яуап булманы. Хат ташыусы миңә килгән хатты Маша йәшәгән квартираға илтеп биргән, имеш. Алияның адресын белеп алғас, был мәрйә үҙенең мәкерле хатын яҙып ебәргән дә инде. Киттем тегенең янына. "Бир Алияның хатын, – тим. – Беҙ, бала тыуғас, уны миңә бирәһең, минең яратҡан ҡыҙым бар, тип һөйләштек бит". Был ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтмәне. Ә хаттар тураһында: "Минән һорама, алманым да, ебәрмәнем дә", – тип әйләнде лә ултырҙы. Миңә эйәреп килеп, бергә йәшәй башлаған инәйемдең дә кәйефе китте. "Балаҡайым, ниңә мине был ҡәһәр һуҡҡан ергә алып килдең? Миңә бында ҡайғы уртаҡлашып, һөйләшеп ултырыр кеше лә юҡ бит", – тип иларға тотондо. "Инәй, мин һине Маша башҡаса миңә килеп бәйләнеп йөрөмәһен өсөн алып килдем, – тип ҡарайым. – Эште бөгөндән ташлап китә алмайым, ебәрмәйҙәр". Шулай ҙа һыуыҡ ғинуар айында плацкарт вагонға билет алып, инәйемде Өфөгә оҙатырға тура килде.

Тарыған ҡайғы-хәсрәттәрҙе оноторға теләп, эш менән булып йөрөй торғас, май ҙа килеп етте. Бер саҡ Булочев ҡунаҡҡа саҡырҙы. Барып инһәм, ишеккә ҡаршы өҫтәл артында – фельдшер, ә өҫтәлдең һул яғында Маша ултыра. Уға күҙ һалам, ләкин ул миңә түгел, түбән ҡараған. Һый-хөрмәт фельдшерҙың төрмәнән сығыу уңайынан әҙерләнгән икән. Ҡыштырҙаған тауышҡа өҫтәл аҫтына күҙ төшөрһәм, фельдшер, аяғын һуҙып, Машаның аяҡтарына баҫып маташа. Һикереп тороп, кейенә башлағайным, ҡатын, күлдәген тиртеп торған ҡорһағы менән миңә һылашып:

– Не оставляй меня! – тип йәшле күҙҙәрен миңә төбәп инәлергә кереште. – Болею я, веди меня домой.

Оҙатып ҡуйҙым, сөнки уның ауыры минән ине. Тулғаҡ тота башлағас, күрше ҡатын Зояны саҡырып килтерҙем. Оҙаҡ та үтмәй, ҡыҙ бала тыуҙы. Аҡ простыняға урап, Зоя сабыйҙы миңә тотторҙо ла:

– Һуйып ҡаплаған һымаҡ, һиңә оҡшаған, – тине.

Балаға исемде „Фәниә" тип ҡуштым. Теләһәм-теләмәһәм дә, Маша менән тормош ҡорорға тура килде. Бер-бер артлы Альбина һәм Альберт исемле балаларыбыҙ тыуып, биш кешелек ғаилә булып киттек. Артабан да „Краслаг"та ҡалғы килмәне. Лагерҙа эште тапшырып, Башҡортостанға ҡайтырға сыҡтыҡ. Танышыбыҙ Ислам ағайҙарҙа төн уҙғарып, вокзалға килдек. Мин Фәниәне алып, ауылға ҡайтырға теләнем. Маша ҡаршы килмәне. Юлға һөт-маҙар алырға сығып әйләнһәм, бала төрөлгән килеш диванда бер үҙе ята. Ҡатынды эҙләп тә таба алмағас, киске поезд менән ауылға ҡайттым. Ҡыҙымды имеҙергә Хәсби еңгәмә бирҙек. Миңә Еҙем-Ҡаранда эш табылды.

Байтаҡ ваҡыттан ҡыҙҙы алырға Маша килде. Өфөгә алып барып, уларҙы Киев ҡалаһына оҙатып ебәрҙем. Ләкин оҙаҡламай мине Бөрө ҡалаһының ит комбинатына баш ветврач итеп ебәрҙеләр.

Яңы йылда урамда байрамса биҙәлгән шыршыны ҡарап торғанда, арттан килеп кемдер ҡосаҡлап алды. Әйләнеп ҡараһам – Маша. Өшөгән, ҡалтырап тора. Өйгә алып ҡайттым. Ул Фәниәнән сәләм тапшырҙы. „Йүгереп йөрөй ҡыҙың, һине һағына“, – тип күңелде йомшартты. Оҙаҡламай ул ҡайтып, Фәниәне лә алып килде.

Маша күптән ата-әсәһе янына барырға өгөтләһә лә, ризалашмай йөрөй инем. Хәҙер башҡа сара ҡалманы, йыйындыҡ та күмәкләп Киевҡа барып төштөк. Ҡала таҙа, матур, икмәкле. Баш ҡаланан утыҙ саҡрымдағы Катюжанка ауылына килеп, Машаның тыуған йортонда йәшәй башланыҡ. Мине һөтсөлөк фермаһына ветфельдшер, ә ҡатынды медпунктҡа эшкә алдылар. Биш ай самаһы эшләгәс, өй ҡотлап күршеләр ҡунаҡҡа саҡырҙы. Шунда Машаның йорт хужаһын маҡтап, мине хурлағанын ишетеп, түҙмәнем, һикереп торҙом да сығып киттем. Иртәгеһен эштән китеү тураһында ғариза биреп, тағы ла бер тәүлектән юлға етер-етмәҫ аҡса алғас, Киев аша Өфөгә килеп, инәйем йәшәгән Ҡыҙыл Яр ауылына барҙым. Яҡтыкүлдәге йортто апайым һатып ебәргән икән. Мағаш тауы итәгенән ағып төшкән Еҙем йылғаһы буйында ергә йөҙтүбән йығылып, тупраҡты үбеп байтаҡ яттым. Артабан Мағаш тауына күтәрелеп, тыуған ауылым Яҡтыкүлде байҡаным.

Бер-ике көндән Красноусольскийға килеп, КПСС район комитетының беренсе секретарына индем. Әммә райком ярҙамының рәте булманы, әле бында, әле тегендә ебәреп тик йөрөттөләр. Бер саҡ Өфөлә Пушкин урамы буйлап китеп барғанда, институтта беҙҙән һуңыраҡ уҡыған Закиров осрап, һөйләшеп киттек. Ул:

– Һин „Башптицепром“ға бар. Унда ветеринар врачтар кәрәк, – тип кәңәш бирҙе. – Институтты беҙҙән алдараҡ тамамлаған Әфтәхов шунда эшләй. Бик кеселекле кеше.

Әфтәхов мине ҡошсолоҡ совхозына ебәрҙе. Директорҙы күреп һөйләшкәс, ул: „Парткомдың рөхсәтенән тыш эшкә алмайым,“ – тип мине партия комитеты секретарына ебәрҙе. Теге әҙәм – ҡорһаҡлы, ерән сәсле илле йәштәрҙәге сыуаш – сәйнәп ултырған нәмәһен йотто ла: „Беҙгә ветврач кәрәкмәй, үҙебеҙҙеке бар“, – тип кирегә һуҡты. „Башптицепром“ берекмәһенә әйләнеп килдем. „Ярай, иртәгә үк үҙем алып барырмын“, – тине Әфтәхов. Уның һүҙе тиҙ үтте, мине эшкә алдылар.

Совхоз ҙур, дүрт бүлексәһе бар. Бер осонан икенсеһенә тиклем утыҙ биш саҡрым. Дүрт ветфельдшер эшләй, суска фермаһы ла бар. Тауыҡтар ике фермала егермеләгән бинала урынлашҡан. Ҡоштар пастереллез йә холера менән сирләйҙәр. Продуктлылыҡ түбән. Бер нисә ай ҙа үтеп китте. Йөрәк әрней, хәҙер мине Украинала көтмәйҙәрҙер ҙә инде. Фәниәм киләһе йылда беренсе класҡа уҡырға төшә. Машаның ҡунаҡтар араһында мине кәмһетеүе ваҡыт үтеү менән онотолдо. Әсәләренең йөҙгә ҡара ягыуында балалар гәйепле түгел бит инде.

Айырым квартира юллап алдым да Катюжанкаға ғаиләм артынан киттем. Ҡараңғы төшә башлағанда ғына барып еттем. Балаларым һырып, ҡосаҡлап алды. Маша өйҙә күренмәне. Артынан урман заводы директоры килеп, хәрби уҡыуҙарға алып киткән. Ҡәйнәм аш бешереп, сәй ҡайнатып, өҫтәл артына ултыртҡас, Маша ҡайтып инде. Ул минең яҡҡа әйләнеп тә ҡараманы, хатта

иҫәнләшмәне лә. Кәйеф төштө. Икебеҙ генә ҡалғас, ҡатын миңә күтәрелеп ҡарамай ғына: "Зачем приехал?" – тине. "Алып ҡайтырға килдем", – тигәс, күҙҙәрендә бер аҙ йылылыҡ саткыһы күренде. "Килереңде көтмәгәйнем, ләкин ризамын. Һине онотоорға теләһәм дә, Фәниә гел генә иҫкә төшөрөп, "Когда папа за нами приедет?" тип һорауҙан туҡтамай", – тип яуапланы.

Тиҙ генә йыйынып, совхозға ҡайтып төштөк. Альберт менән Альбинаны көн дә бәләкәй санаға тейәп балалар баҡсаһына йөрөтәм. Маша шунда уҡ дауаханала эшләй башланы. Йорт бик йылы, кистәрен иҙәндә балалар менән тәгәрәшеп шаярабыҙ. Күп мәртәбәләр тарҡалған ғаиләбеҙ Фәниәбеҙ тырышлығы менән тағы ла уҡмашты, үпкәләр онотолдо. Тик йөҙ меңдән ашыу тауыҡтар араһында таралаған хроник ауырыу – холераны нисек бөтөрөргә? Ауырыу таралмаған хужалыҡ табып, унан алынған йомортҡаларҙы баҫтырып сығарып, бөтә булған тауыҡтарҙы алмаштырырға була. Ил буйлап йомортҡа эҙләп сығып киттем. Тәүҙә Силәбе өлкәһенә юлландым, ләкин бында йомортҡа һатмайҙар, үҙҙәре һатып алалар, имеш. Курган ҡалаһына килдем. Тармаҡ идаралығына барып, ҡайһы хужалыҡтарҙа йомортҡа һатҡандарын белгәс, фермаларын ҡараным. Береһе лә оҡшаманы, сөнки тауыҡтар яртылаш йөнө ҡойолоп йөрөй, үлем дә күп. Свердловск ҡалаһында ла юл уңманы, улар йомортҡаны Курган өлкәһенән һатып ала икән.

Оҙайлы сәфәрҙән ҡайтыуыма "Башптицепром"дан "Ленинградҡа бер айлыҡ курсҡа китергә!" тигән фарман көтөп ята. Унда бер ай буйы коллегалар менән танышып, тәжрибә уртаҡлаштыҡ. Ҡошсолоҡ тармағына күҙҙәр асылып, белем өҫтәлде. Ҡайтҡас, директорға инеп, уй-фекерҙәрем менән уртаҡлашып, мине СССР-ҙың көньяғына инкубация йомортҡаһы эҙләргә ебәреүен һораным.

Тәүҙә Одесса ҡалаһына юл тоттом. Ленинград ҡалаһында булғанда танышҡан иптәштәрҙең береһе Николайға барып керҙем. Ул ҡошсолоҡ фабрикаһына индереп, инкубация цехын күрһәтте. Тауыҡтар аҫралған шарттар, үлемдең аҙ булыуы мине ҡәнәғәтләндерҙе. Ләкин беҙгә йомортҡа һатыуҙан баш тарттылар. Шуныһы ҡиммәтле булды: мин бында эш алымдары менән яҡшылап таныштым. Ошонда уҡ Молдавияла ҡошсолоҡ фабрикаларының сәләмәт, таҙа булыуы тураһында ишетеп, шунда барырға булдым. Вагондары беҙҙең Рәсәйҙәге кеүек түгел, тар ғына, икешәр кеше ултырмалы итеп эшләнгән. Үкенескә ҡаршы, "Молдовоптицепром" берекмәһендә: "Беҙ яңы йылға тиклем инкубация йомортҡаларын һатыу буйынса килешеүҙәр төҙөшөп бөттөк", – тип яуап бирҙеләр.

Хәҙер ни эшләргә? Буш ҡул менән ҡайтып китке килмәй. Дубоссары ҡошсолоҡ фабрикаһына, күп михнәт сигеп, кискә генә барып еттем. Иртүк директор янына инһәм дә, юл бында ла уңманы. Албания сигенә терәлгән "Красноперс" совхозына ла барҙым, унда ла кире һуҡтылар. Бөтөнләй төшөнкөлөккә бирелеп, Кишиневҡа яҡын Дубровка ауылына килдем.

...Көн кисләп бара. Кинәт боролоштан "Газик" килеп сыҡты ла, мин ҡул күтәргәс, туҡтаны. Ултырҙым. Ҡасабаға килгәс, мин юлдаштарымды бер кафела һыйларға булдым. Баш зоотехник Черных, миңә ҡарап:

– Ниндәй шарап эсәһең килә? – тип һораны. Мин: „Һеҙҙең ихтыярҙа“, – тип яуапланым. Өҫтәлгә туп-тулы өс литрлы банка менән ҡарағусҡыл ҡыҙыл шарап килтереп ҡуйҙылар. Уны эсеп бөтөргәс, урамға сығып баҫтыҡ. Ветврач Черницкий миңә ҡараны ла рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе:

– Вот это да! Беҙгә юлда осраған ап-аҡ йөҙлө егет түгел, ә янып торған йөҙлө матур егеткә әйләнде бит.

„Ошонда ҡалдырып булмай инде“, – тип мине үҙҙәре менән алып киттеләр. Николай Черныхтың аптекаһына инеп, йөҙәр грамм спирт эсәйек тиһәк, ишек асылып китте лә, күҙҙәрен яулығы менән һөртә-һөртә, аҡ халат кейгән бер ҡатын килеп инде. „Маша йығылды, үлә“, – ти был. Баҡһаң, Маша – уның рекордсменка һыйыры, имеш. Йүгерешеп фермаға киттек.

Ҡорһағы яман күпкән ҡыҙыл һыйыр һарайҙың уртаһында башын артҡа ташлап ята. Күҙҙәре йомоҡ, дүрт аяғы ла төп-төҙ булып ҡатҡан. Черных сумкаһынан шприц сығарып, укол яһарға тотоноп китте. “Тыңлаштырып ҡарайым әле, рөхсәт ит”, – тигәйнем, ул бер һүҙһеҙ фонендоскопын миңә тотторҙо. Меҫкен һыйырҙың мускулдары ҡыҫҡармай, тик ҡайҙалыр тәрәндә тамсы тамғанды хәтерләткән тауыш ишетелә кеүек. Һыйырҙың өҫкө аяғын баш яғына күтәреберәк тарттырып, йөрәген тыңлайым, көсһөҙ генә тибә. Өс шешә спирт, “Эверс” аппараты, һөт катетторы, тәгәрмәскә тын тултыра торған насос һәм бинттар кәрәклеген әйттем.

Һыйырҙы төрлөсә ҡыландырабыҙ, тик һөҙөмтә генә юҡ. Шул саҡ Тунгуска упҡынында ике тәүлек тайгала аҙашып йөрөп, үтәнән-үтә һыуынғандан һуң йылына алмай ятҡанда, фельдшерҙың ҡан тамырына саф спирт ебәреү менән йылынып киткәнем иҫкә төштө. Башҡаларға күрһәтмәй генә фельдшерҙың ысулын ҡулландым. Хәҙер ярҙамды Хоҙайҙан ғына көтәбеҙ. “Доктор!” тип ҡысҡырып ебәргән һауынсыға ҡараһам, ул:

– Ана, ҡара, башын ҡуҙғата башланы, терелә бит, – тип һөйләнә. Һыйырҙың морононан тотоп ҡарайым, йылы тыны килә башланы. Аяҡтарын йыйып, башын уңайлап бороп һалдыҡ. Фонендоскоп менән йөрәген тыңлап ҡарайым, хәле яҡшыра башланғанын белеп, ҡайтып киттек.

Иртәгеһен тағы фермаға килдек. Зоотехник та унда ине. Аяғында торған рекордсменка һыйырға күрһәтеп, был: “Мы тебе памятник поставим!" – тип ҡысҡырҙы. “Һәйкәлегеҙ кәрәкмәй, тоҡом йомортҡаһы һатығыҙ”, – тинем. Был үтенесте директор ғына хәл итә ала икән. Киттек уның янына. Эштең ниҙә икәнлеген һөйләп биргәс, директор: “Баш зоотехник менән бергәләп хәл итегеҙ. Мин ҡаршы түгел”, – тип беҙҙе оҙатып ебәрҙе. Мин инкубацияға билдәләнгән ваҡытта килеп, йомортҡа йыйылғас, алып ҡайтып китергә тейеш булдым.

Башҡортостанға ҡайтҡас, директорға инеп хәлде һөйләп аңлаттым. Күсмә холера менән зарарланған 150 мең самаһы тауыҡты иткә оҙатып, улар урынына Молдавиянан ҡайтарылған йомортҡаларҙан себештәр сығарҙыҡ та ферманы ла сәләмәт себештәр менән тултырҙыҡ. Был эш минең ун ай ваҡытымды алды. Ә инде 1969 йылда үҙебеҙ тоҡомсолоҡ фабрикаһына әйләнеп, республиканы “Кетрос” йомортҡаһы менән тәьмин итә башланыҡ. Беҙгә хатта сит өлкәләрҙән дә килделәр. Йомортҡа етештереү буйынса совхозыбыҙ Башҡортостанда алдынғы урынға сыҡты. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бер саҡ хужалыҡты икегә бүлделәр. Совхоз үҙ ерҙәре менән – бер яҡта, ә ҡошсолоҡ фабрикаһы икенсе яҡта ҡалды. Иркенлектә ат егеп эшләп өйрәнгән кеше булараҡ, мин совхозда ҡалдым. Хужалыҡ ҙур, дүрт ауылдың бер башынан икенсеһенә сығыу өсөн егерме саҡрым үтергә кәрәк.

Ҡышҡы ҡаты һыуыҡ төндәрҙең береһендә ат менән ҡайтып килешләй, контора алдында һүгенә-һүгенә һуғышҡан ирҙәр төркөмөнә тап булдым. Тиҙ генә толопто сисеп, атты ҡоймаға бәйләнем дә һуғышсылар араһына килеп индем.

Бөрәү ҡарҙа, икенселәре аяҡ менән типкән һайын ҡысҡырып, бөгәрләнеп ята. Ә типкеләүселәр коллегаларым: баш зоотехник, баш агроном, профсоюз рәйесе, комсомол секретары булып сыҡты. Совхоз директоры Аллағолов та шунда. Бер нәмә лә белешеп тормай, тегеләрҙе берәм-берәм уңға-һулға ташлап бөттөм. Директор килде лә, бөгәрләнеп ятҡан кәүҙәнең башына баҫып тороп:

– Мин хәҙер һине үлтерәм! – тип хырылдарға кереште. Ҡыҙған килеш мин директорҙы эләктереп алдым да ҡоймаға бәрҙем. Ул башы менән бәрелде лә ергә шыуып төштө. Дүрт тағанлап аяғына баҫҡас, миңә ҡарап: "Был һиңә бушҡа үтмәҫ", – тип конторағa инеп китте.

Баҡһаң, иҫерек тракторсы мөйөштән боролғанда контораның ҡоймаһын эләктереп алып, ишек алдына килеп туҡтаған икән. Тиҙ генә директорҙы саҡырғандар. Ә ул тракторҙың кабинаһын асып, хужаһын һөйрәп төшөргән дә туҡмарға тотонған. Тракторсы – йәш, көслө егет – бирешергә теләмәгән, күрәһең. Көрмәкләшкәндә директорҙың йәнлек тиреһенән тегелгән курткаһының төймәләре өҙөлөп, йыртылып бөткән. Тауышҡа сыҡҡан башҡа белгестәр ҙә тракторсыға ташланып, типкеләргә тотонған. Ярым иҫһеҙ тракторсыны кабинетыма һөйрәп индереп, иҙәнгә һуҙып һалдым. Һаман ҡыҙыуы бөтмәгән Аллағолов йүгереп килеп инде лә (ул гел йүгереп йөрөй торғайны) ятҡан кешегә тағы типте. Асыуым килеп, мин дә директорҙың яңаҡ аҫтына ауҙарғансы төрттөм. Башҡалар инеп, уны алып сығып киттеләр. Тракторсыны санаға һалып, дауаханаға илттем.

Һуңынан суд булып, Аллағоловҡа шелтә бирҙеләр. Ә минең эш хөрт, совхозда бөтәһе лә ҡырын ҡарай. Эш һорап яңыраҡ эшләгән фабрикаға киттем. Директоры бер һүҙһеҙ ветеринар врач вазифаһына ҡабул итте.

Ләкин оҙаҡ эшләй алманым, "Башптицепром"ға саҡыртып, Благовар өйрәк фабрикаһына ветврач итеп ебәрҙеләр. Ул ваҡытта өс балам да Өфөлә институтта уҡып йөрөй ине. Өйрәк фабрикаһы тимер юлда түгел, бармайым, тип ҡаршылашып ҡарағайным да: "Улайһа һин беҙҙә эшләй алмаясаҡһың", – тинеләр.

Ике йыл ярым өйрәк фермаһында үтте. Предприятие планлаштырылған продукцияны бирә башланы. Был ваҡытта совхозда директор булып ҡасандыр бергә эшләгән иптәш тәғәйенләнгәйне, ул мине баш ветврач вазифаһына ҡуйҙы. Бер йылдан ашыу хужалыҡта эштәр яҡшы барҙы, малдар ишәйҙе, пландарҙы ваҡытынан алда үтәйбеҙ, эшселәргә премиялар бирелә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, йәй ямғырлы булып, игендәрҙе һуғыр мәлдә лә туҡтаманы, хатта үҫеп ултырған башаҡтар шыта башланы. Ырҙын табағына түгелгән иген дә ҡыҙып, үреп ятты. Көндәрҙең береһендә райком секретары килеп, беҙгә яңы директор ҡуйып китте. Ә элеккеһен "Сельхозтехника"ның район берекмәһенә инженер итеп ебәрҙеләр. Эшен тапшырғанда ул:

– Азамат туған, һаҡлан, хәҙер сират һиңә, – тип хушлашып, Шишмә ҡасабаһына күсенде.

Яңы директор Урманов та игендәрҙе боҙолоуҙан ҡотҡара алманы. Машиналар юлда, бүлексәләр араһында батып ултырҙы, хатта төндәрен ҡунғылап та ҡалдылар. Игенде тракторҙар менән буксирға алып ташырға тура килде. Яңы етәксенең беренсе этлеге шул булды: миңә беркетелгән "Газик"ты ғәмәлдән сығарып, гаражға ҡуйҙырҙы. Ат менән генә егерме биш саҡрым арала ятҡан ауылдарҙы йөрөп булмай. Аптырағас, үҙемдең люлкалы мотоцикл менән

йөрөп эшләргә тура килде. „Матай“ люлкаһын тарта алмай башлаһа, уны ҡайҙа этәреп, ҡайҙа трактор менән һөйрәтеп йөрөгәндә, күтән сиренә юлыҡтым. Тәүҙә мин уға әһәмиәт бирмәнем, эш тә күп, малдарҙы урынлаштырырға ла, ит тапшырыу планын үтәргә лә кәрәк. Аҙыраҡ эш кәмеп, инде атлап йөрөй алмай башлағас, декабрҙә больницаға барырға мәжбүр булдым. Мине ҡараған хирург: “Һин үҙең табип бит! Ниндәй хәлгә ҡалғансы йөрөгәнһең: некроз, күтәнең серей башлаған”, – тине.

Миңә Республика дауаханаһына йүнәлтмә бирҙеләр. Иртәгеһенә үк Өфөгә барып, больницаға яттым. Унда күргән михнәттәрҙе һөйләп тә бөтөрөрлөк түгел. Ике ай ярым ятҡас, ҡоро һөйәккә ҡалып өйгә ҡайтып килдем. Март айы, әле ҡар иреп бөтмәгән. Ат егеп эшкә сыҡтым. Ҡар ныҡлап ирей башлау менән ҡыш үлгән быҙауҙарҙың мәйеттәре күренде. Директор мине саҡырып алды ла:

– Нимә ҡарап йөрөйһөң? Ниңә быҙауҙарҙы үлтерәһең? Мин һиңә ҡаты шелтә бирәм. Иртәгә сәғәт туғыҙға райкомға саҡырттылар. Һуңламай барып ет, – тине.

Тәғәйенләнгән сәғәткә барып еттем. Оҙон өҫтәлде уратып ултырған райком ағзалары мине көтәләр ине, ахырыһы. Гел йылмайып торған беренсе секретарь:

– Ҡайҙа, бир партбилетыңды? – тип ҡулын һуҙҙы.

Түш кеҫәһенән партбилетты сығарҙым. Секретарь, асып та ҡарамай, билетты өҫтәлгә һалды ла, комиссия ағзаларына ҡарап:

– Был кеше аңлы рәүештә партия уставын боҙған, ике ай буйы взнос түләмәгән. Беҙгә ундай иптәштәр кәрәкме? – тип башҡаларға һүҙ бирҙе.

Беренсе булып ғүмере буйы райкомда эшләгән, үҙен башҡорт тип йөрөп тә, гел татарса һөйләшкән Сәлимов һүҙ алды. Мине төрлөсә кәмһеткәндән һуң: "Беҙҙең арала ундай кешеләр булырға тейеш түгел", – тип һүҙен тамамланы. Тағы ла бер кеше һүҙ алып: “Уставҡа буйһонмаған партия ағзаһы кәрәкмәй, сығарырға!“ – тине. Йылмайған йөҙөн үҙгәртмәй генә, беренсе секретарь дөйөм тауышҡа ҡуйҙы. Комиссия ағзаларының береһе генә ҡул күтәрмәне. Ике ай ярым ауыр операцияны кисергәнемде аңлаған был кеше колхоз рәйесе, Социалистик Хеҙмәт Геройы ине.

Байтаҡ йылдар өлгөлө эшләп тә, партияға инмәй йөрөнөм. Ләкин бер мәл совхоздың партком секретары Наум Николаевич:

– Азамат Нуриевич, күпме яҡшы эш башҡарҙың, фабриканы сәләмәтләндерҙең. Һиңә лә партия ағзаһы булырға ваҡыт, – тип өгөтләгәс, ризалыҡ биргәйнем. Шул кеше иҫән булһа, мине партиянан сығарырға ирек бирмәҫ ине.

Урамда район дауаханаһының баш табибы Альберт осраны ла, яурынға шапылдатып һуғып:

– Нимә, “главный”, башыңды түбән эйҙең? Һөйлә, ниңә килдең бында? – тип һораны. Эштең ниҙә икәнен белгәс, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе: – Улар бит һинең алдан ғына минең дә партбилетымды алып ҡалдылар. Кисә "беренсе"гә инеп, больница емерелеп бөткән, ҡыҫыҡ, ауырыуҙарға урын етмәй, ҡыҫылышып бер палатала дүртәр кеше ята; тын алырлыҡ та түгел, тип әйткән өсөн.

Иртәнге нарядтан сығып барғанда, директор мине туҡтатты:

– Нимә, һин үлектәрҙе йыйып, ҡәберлеккә оҙатмайһың? Бөгөн үк йыйыштырып бөтөгөҙ! – тип сығарып ебәрҙе.

Ятып ҡалғансы атып ҡал, тигән әйтем иҫкә төштө. Мине туҡмайҙар, ғәйепләйҙәр, ә мин, бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ күрһәтә алмай, буйһонам. Тоттом да үлгән быҙауҙар тураһында КПСС өлкә комитетына яҙып ебәрҙем. Бер айҙан Ауыл хужалығы министрлығынан килеп тикшерҙеләр. Тикшереүсе институтта бергә уҡыған, Әбйәлил районында бергә практика үткән Сәйфулла ине. Әммә директор уны үҙ яғына ауҙарҙы. Бер аҙна самаһы йөрөгәс, бер генә кибеп бөткән быҙау мәйете табылыуы тураһында акт барлыҡҡа килде.

– Азамат, һин артабан бында эшләй алмаҫһың, икенсе ергә кит, – тип кәңәш бирҙе Сәйфулла.

Иртән һимеҙ һыйыр һуйҙырып, яртыһын “Газик”ка тейәп, уны Өфөгә илтеп ҡуйҙылар. Курсташымдың ҡайтыр алдынан әйткән: "Һин уларҙың тамағына арҡыры килгәнһең. Өлкә комитетына яҙған хатың арҡаһында райком секретарына бирелгән шелтә бушҡа ғына үтмәҫ, китергә кәрәк", – тигән һүҙҙәре уйландырһа ла, өйҙә өс студент булып, уларға аҙна һайын ашарға ебәреү зарурлығы ниндәй ҙә булһа ҡәтғи ҡарарға килеүҙән тыйылырға мәжбүр итте.

Апрелдә һимертергә ҡуйылған үгеҙҙәрҙе бестерҙек. Тәүге төркөмдә ике кеше эшләһә, икенсеһендә мин үҙем генә инем. Икенсе көн баш ветврач Ғәлимханов бестергән үгеҙҙәрҙең ҡайһы берәүҙәренең аяғына баҫа алмай, ҡанһырап ятҡанын күреп, директорға индем. Ул: "Бөгөн кешеләр юҡ. Кисә нисек бескән булһаң, хаталарыңды шулай төҙәт," – тине.

Үгеҙҙәр төндә үлә ҡалһа, улар ғәйепте миңә ауҙарырға самалаған икән. Әммә мин меҫкен хайуандарға тейешле ярҙам күрһәтеп, уларҙы үлемдән ҡотҡарып ҡалдым. Баш ветврач вазифаһынан бушатырҙан алда “тоҡомло һыйырҙы һуйҙырған өсөн” директор мине судҡа биреп, бер мең һум штраф һалдырғайны. Ул саҡта был аҡсаға баҙарҙа ике һыйыр һатып алырға мөмкин ине. Суд ултырышында һыйырҙың ни өсөн һуйылғанын аңлатып бирҙем. Өсөнсө бүлексәнән машинаға тейәп килтерелгән ауырыу һыйырҙы үлмәҫ элек бысаҡлап, итен генә Раевка ит комбинатына алып барғайным. Унда ҡабул итмәгәс, ҡайтышлай итте суҫҡа фермаһына индереп, суҫҡаларға бешереп ашатырға ҡуштым. Һыйырҙың сирләү сәбәбен күрһәтеп, бухгалтерияға акт яҙып бирҙем.

Судья тәүҙә миңә биш мең һум штраф һалырға маташҡайны, бер ир тороп баҫты ла: "Мин судьяның хөкөмө менән килешмәйем. Эште Юғары судҡа ебәрәм", – тип ҡаршы төштө. Баҡтиһәң, ул прокурор булған икән. Бер аҙҙан мине БАССР Юғары судына саҡырып, Шишмә район суды сығарған ҡарарҙы кире ҡағып, мине аҡлап ҡайтарып ебәрҙеләр.

Ауырып больницаға барғайным, миңә бюллетень биреп, бер аҙнаға эштән азат иттеләр. Өйҙә үгеҙ тиреһе ята ине. Ял көнө шуны бәләкәй санаға һалдым да тире йыйыусыға илтеп тапшырҙым. Дүшәмбе эшкә сығып, кабинетымда ултыра инем, төкөрөктәрен сәсеп директор килеп инде.

– Һин нимә, бәләкәй сана тартып, үҙ эшеңде эшләп йөрөйһөң? – ти был. Минең аңлатҡанды ла көтөп тормай: "Һин шулай сирләп үлерһең?" – тип ҡысҡырырға тотондо. Урынымдан торҙом да тегенең алдына баҫып:

– Юҡ, мин үлмәйем! Бына һин үләһең! Ишеттеңме, үләһең, һинең үлгәнеңде мин күрәм, ә һин минең үлгәнемде күрә алмайһың, – тип кире өҫтәл артына барып ултырҙым.

Ишекте шартлатып ябып сыҡты ла был, белгестәрҙе кабинетына йыя башланы. Профсоюз рәйесе миңә лә йыйылышҡа инергә ҡушты. Инмәнем, эштән

бушатыуҙарын һорап ғариза яҙып, директорҙың алдына һалдым да туҡтап та тормайынса сығып киттем. Бында артабан да эшләү мөмкин түгел ине. Хеҙмәт кенәгәмдәге ике ҡаты шелтә менән, эш эҙләп, ҡасабанан сығып китергә тура килде. Дөрөҫ, кенәгәлә маҡтауҙар ҙа бар. Мәҫәлән, "Краслаг"та өс йыл эшләгән дәүерҙә өс маҡтау алдым, берҙе – ҡошсолоҡ фермаһында, Молдавиянан тоҡомло йоморҡҡалар алып ҡайтып, ферманы һауыҡтырған өсөн. Иң тәүҙә үҙем эшләп киткән ҡошсолоҡ фермаһына барҙым. Директор: "Эшкә ала алмайым, беҙҙең баш ветврач бар", – тип яуапланы. Мин: "Ул урынға ынтылмайым, түбәнерәк вазифа ла ярай", – тигәнгә: "Беҙгә һине эшкә алмаҫҡа ҡуштылар", – тине.

Районда эш таба алмағас, Өфөгә киттем, ләкин министрға индермәнеләр. Төшкә саҡлы ишек төбөндә тороп, министрҙың сыҡҡанын көттөм. Әммә ул һөйләшеп тә торманы, ауыҙ эсенән ниҙер мөңгөрләп, китеп барҙы. Белгестәр кабинетында ла бер кем юҡ. Секретарь: "Бөтәһе лә командировкала", – тип яуаплағас, урамға сығып киттем. Министрлыҡ тирәһе тып-тын, әйтерһең, үлеп-ҡыйралып бөткәндәр. Эш табыу өмөтө юҡҡа сыҡты. Үҙемдең тыуған илемдә минән баш тарттылар.

Ҡайтып китергә ашыҡманым, сөнки медицина институтында өс балам уҡый. Фәниә – дүртенсе, уртансы ҡыҙым Альбина – икенсе, ә төпсөгөм Альберт – беренсе курста. Бөтәһен дә күреп һөйләшеп, ҡалған аҡсаны бүлеп биреп, ҡайтып киттем. Хәҙер ҡайҙа барырға? Беҙ йәшәгән урындан ике-өс саҡрымда "Салауатнефтеоргсинтез" заводы өсөн аммиак эшкәртеүсе ҡоролма төҙөйҙәр ине. Баш инженерҙы күреп һөйләшкәс, ул: "Беҙҙә белгестәр генә эшләй, һиңә эш табып булмаҫ, – тип яуапланы ла, минең башты түбән эйеп уйланып торғанды күргәс: – Бәлки, төнгө ҡарауылға килерһең", – тип өҫтәне. Уйланып торорға урын юҡ, иртәгеһен үк төнгө ҡарауылсы булып эшкә сыҡтым. Төҙөлөштөң тирә-яғы тимер рәшәткә менән уратып алынғайны.

Төнгө сәғәт ун икеләрҙән һуң кемдер тимер ҡапҡаны туҡылдатып, миңә тиклем эшләгән ҡарауылсыны һораны. Күрәм: төҙөлөш материалдары урларға ат егеп, көмөшкә тотоп килгән. Күпме генә ялынһа ла, мин уны бороп ҡайтарып ебәрҙем. Ике айға яҡын эшләгәс, ябай эшселәр әҙерләй торған өс айлыҡ курсҡа барырға ҡарар иттем.

Ләкин мине тағы ла бәхетһеҙлек һағалаған икән. Бер көн райкомдың беренсе секретары осраны:

– Бәй, Мәүлитов, ҡайҙан килеп сыҡтың бында? – ти был.

– Эшләйем, – тинем дә китеп барҙым. Уҡырға барыусыларҙың исемлеге әҙер булып, юлға сығырға йөрөгәндә, инженер мине саҡырып алды ла:

– Мин һине уҡырға ебәрә алмайым. Райкомдан беренсе секретарь шылтыратып, һине уҡырға ебәрмәҫкә ҡушты, – тип документтарымды ҡайтарҙы.

Ҡабарған асыуҙы тыя алмай, райкомға барып индем дә секретаршанан "беренсе"гә үткәреүен һораным. Ләкин ул: "Ҡабул итә алмай, эше күп", – тине. Төш тә етте, тик эш сығарып булманы. Секретарша сығып китеүемде талап итә, "милиция саҡыртам" тип янарға кереште. "Ниңә тауыш ҡуптараһың? Мин бит шым ғына көтөп ултырам", – тип үҙемдекен ныҡышам.

Төштән һуң оҙон буйлы берәү килеп инде лә, миңә ҡарап:

– Һинме Мәүлитов? Әйҙә, миңә инәйек, – тине. Барып ингәс: – Һине эшкә алдылар, Салауатҡа уҡырға китә алаһың, – тип шатландырҙы.

Ике йыл ярымдай эшләгәс, аммиак базаһын Шишмә районына күсерҙеләр.

Әммә оҙаҡламай базаны ябып та ҡуйҙылар. Бер йыл эсендә ул емерелеп, әйберҙәре урланып бөттө. Утыҙ метр бейеклегендәге һурғыс торба ғына оҙаҡ һерәйеп торҙо. Һуңынан уны ла ауҙарып, бүлгеләп, кемдәрҙер ташып алды. Кәртәһеҙ ҡалған базаның һуңғы кирбесенә хәтле ҡуптарып алып киттеләр. Бына шулай өс миллион һумға төшкән халыҡ мөлкәте бер ниндәй эҙһеҙ юҡҡа сыҡты. Ғәйепләүсе лә, ғәйеплеләр ҙә юҡ ине. Тағы эшһеҙ тороп ҡалдым. Етмәһә, больницала, наркотиклы дарыуҙар теркәй торған журналды юғалтҡан, тип ҡатынымды ла эшенән ҡыуып ҡайтарҙылар. Бер аҙна тирәһе өйҙә илап ятҡандан һуң, санитар килеп, эшкә алып китте. Баш табип ҡайҙалыр юҡ булды.

Ҡайҙа барырға белмәй, эш эҙләп станцияға китеп барғанда, Еҙем-Ҡаран бригадиры Фәйзуллинды тап иттем. Ул мине бүлексә фермаһына эшкә алырға булды. Аҙна-ун көн эшләгәс, колхоз рәйесе саҡыртты. Ул белеме буйынса ветврач ине. Тороп, ҡул биреп ҡаршы алды.

– Коллега, ғәфү ит. Һине баш ветврач итеп ала алмайым, сөнки район һинең арттан күҙәтеүҙе туҡтатмаған. Ветврач булып эшлә, артабан күҙ күрер, – тине.

Күп тә үтмәй, мине баш ветврач итеп ҡуйҙылар. Ике йыл ярым эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡанда, совхозда директор булып минең менән бер осорҙа эштән ҡыуылған экономист Иванов эшләй ине. Мине саҡырып алды ла:

– Азамат абзый, приходи ко мне на первое отделение совхоза на работу, – тине. Иванов менән дүрт йыл ярым бергә эшләнек. Уны эштән алғас, китергә тура килде.

Пенсияға сыҡҡас, ғүмерем буйы иҫемдән сыҡмаған Алияны күрермен, тигән ниәт бар ине. Беренсе тапҡыр уның менән 80-се йылдарҙа осрашҡайныҡ. Ҡараңғы төшөп килгәндә ул кәртәнең – ихата, мин урам буйы яғында һөйләшеп торабыҙ. Ни тураһында – хәтерҙә ҡалмаған. Күпме ҡарашып торғанбыҙҙыр, мин хәлһеҙләнеп, кәртәнән һыпырылып ергә төштөм. Алияның: "Азамат, әгәр мине ятһаң, бында килгәнеңде бер кемгә лә һөйләмә. Ирем бик көнсөл", – тигәне хәтерҙә ҡалған.

Икенсе тапҡыр Сәүкә ауылына мин 2008 йылдың майында барҙым. Ауылда күп нәмә үҙгәргән, һорашырға кәрәк тә, тик иренең исемен дә, фамилияһын да белмәйем. Ауыл ситендәге өйгә туҡылдаттым. Йәш кенә матур ҡатын килеп сыҡты. Ул Алияның ире үҙенең ағаһы булыуы хаҡында әйтте лә:

– Ағайым вафат инде. Алия еңгәм хәҙер район үҙәгендә бер үҙе тора. Теләһәң, хәҙер үк телефондан һөйләштерә алам, – тине.

Телефондан бик яғымлы таныш тауыш ишетелде: "Кем һорай?" Мин ҡаушап, нимә әйтергә белмәй: "Был мин, Азамат", – тигәйнем, ул: "Бер ниндәй Азаматты белмәйем", – тине лә телефон трубкаһын һалды.

Шулай ҙа мин Алияның адресын белеп, сикһеҙ шатландым. Оло юл буйлап китеп барам, машиналар туҡтамай уҙа. Төнгә ҡарай кем инде район үҙәгенә бара. Ҡараңғы ла төштө. Ҙур борсолоу иңдән төшкәндәй, ҡулдарҙы йәйеп ергә салҡан яттым. Йоҡо килмәй. Ҡараңғылыҡ ҡуйырҙы, күктә йондоҙҙар йымылдай. Ана, әңер йондоҙо бигерәк асыҡ күренә. Шуға ҡарап, күптән күрешмәгән, әммә бер ҡасан да уйымдан сыҡмаған Алия менән осрашыу минуттарын көтәм. Өйҙән сығып киткәнгә лә ике көн үтте.

Бер саҡ тирле арҡама ер һалҡыны бәргәнен тойоп, тороп ултырҙым. Һауа еүеш, төн һалҡын. Ауылға барып, берәйһендә ҡунырға кәрәк ине. Бер йортта эскеселәр менән мажаралы төндө үткәргәндән һуң, район үҙәгенә килеп төштөм дә Алияның йортон эҙләргә керештем. Бик күркәм, матур ағас йорт

икән. Бәләкәй ҡапҡаға таянып, ихата эсенә күҙ һалам. Бәпкә үләне менән ҡапланған йәшел урам. Ҡапҡаны асып инеп, ишек ҡаҡтым. Яуап булмаһа ла, аяҡты сисеп инеп, ярым ҡараңғы залдың стенаһына һырышыбыраҡ торған Алияны күрҙем. Шәльяулығына уранған килеш хәрәкәтһеҙ генә миңә ҡарап тора был. Мин дә ҡулдарымды күтәрә биреп иҫәнләшеп, күҙемде һөйөклөмдән айыра алмай, бер аҙға ҡатып ҡалдым. Артабан икәүләп кухняға сыҡтыҡ.

Өҫтәл тулы ашамлыҡ ҡуйылған. Мин алып килгән "күстәнәс"тән хужабикә ҡырҡа баш тартты:

– Хәҙер улым төшкө ашҡа килә. Уның менән эсерһегеҙ.

Сәй эскәндә зоналағы ғауғанан һуң ҡурҡышынан илаған Машаны оҙатып барыуым, уның мине сығармауы тураһында һөйләй генә башлағайным, Алия: "Һөйләмә-ә-ә!"– тип ҡысҡырып ебәрҙе. Уның тәрән, аҡыллы ҡара күҙҙәрендә әйтеп бөтөргөһөҙ аһ-зар, үкенес сағылғанын күрҙем. Сәйҙән һуң урамға сыҡтыҡ. Хәтфә үләнле урамда ҡапма-ҡаршы һөйләшеп торабыҙ. Алияның башы асыҡ, елкәһе лә. Йылмайыу сағылған йөҙөнән ҡарашымды ала алмайым. “Үткәндәр тураһында хәтирәләр яҙырға уйлайым”, – тинем. “Миңә лә уҡытырһыңмы?” – ти. Икәүләшеп көлдөк. Көтмәгәндә йорт эргәһенә еңел машина килеп туҡтаны. Улы ейәнсәрен алып килгән, имеш. Хужабикә, шатланып, сабыйҙы күтәреп алды. Улын: “Атайыңдың танышы, күрергә килгән", – тип минең менән таныштырҙы. Ҡунаҡ китергә була кабинаһына ынтылғас, Алия: "Туҡта, абзыйыңды автобус туҡталышына алып бар инде. Ул килгәндә лә йыраҡ ара атлап арыған", – тигәс, улы шунда уҡ машина ишеген асып, "Рәхим итегеҙ!" тип миңә ишара яһаны. Хужабикә йылмайып, ҡулын болғап оҙатып ҡалды.

Байтаҡ ваҡыт уҙҙы. Алия иҫемдән сыҡмай, хат яҙырға фамилияһын да, адресын да алып өлгөрмәнем. Фәҡәт совхоз урамы ғына иҫтә ҡалған. Хәҙер ул ҡыҙ ваҡыттағы “Хөсәйенова” фамилияһында йөрөмәйҙер. Шулай ҙа хатты совхоз урамына Хөсәйеноваға ебәрҙем. Яуап оҙаҡ көттөрмәне, уны ҡат-ҡат уҡыным, ләкин эстәлегенең мине оҙатып ҡалған Алияның уй-фекерҙәренә тап килмәүе аптыратты. Йөкмәткеһе ҡыҫҡаса былай:

"Мин барыһын да оноттом, сөнки онtorорға теләнем. Уй-хыялдарға бирелеп йәшәргә ваҡыт та булманы, тормош мәшәҡәттәре етерлек ине. Үҙең уйлап ҡара, беҙҙең арала – ярты быуат ғүмер. Шуның эсендә барыһы ла онотолдо: уй-хыялдар ҙа. Булған хистәр ҙә, асыу-нәфрәт, үпкәләр һ.б.

Хәҙер элекке Азамат та, элекке Алия ла юҡ. Мин һине аңламайым: нимәгә кәрәк ул һиңә йәш саҡтағы ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөү? Миңә кәрәк түгел.

Беҙ хәҙер – оло кешеләр. Үткән ғүмерҙе, йәшлекте кире ҡайтарып булмай. Һин дә, мин дә үҙебеҙҙең тормош юлын үҙебеҙ һайлап алдыҡ. Хәҙер беҙгә балаларҙың иҫәнлеге, йән тыныслығы ғына кәрәк. Башҡа бер нәмә лә кәрәк түгел. Әле һинең ғаиләң бөтөн, ул да – ҙур бәхет".

Аҫта “10 ноябрь, 2008 йыл” тип ҡуйылған.

Хаттағы эстәлекле һәм тәрән фекерле һүҙҙәрҙе инҡар итерлек дәлилем дә юҡ, көсөм дә етмәй, сөнки ул яҙмыш тарафынан яралған. Әсе, йөрәк өҙгөс ҡайғыларҙы кисергән аҡыллы кеше һүҙҙәре. Тик беҙ яҙмышты һайламаныҡ, яҙмыш үҙе беҙҙе һайланы.

**Әхмәт МУЛЛАҒОЛОВ.**

***

БР Мәғариф министрлығы Мәләүез ҡалаһында башҡорт телен уҡытыу һәм өйрәнеү проблемаларына арналған төбәкара фәнни-ғәмәли конференция ойошторҙо. Прозаик, журналыбыҙҙың баш мөхәррире Әмир Әминев, шағир Фәнил Күзбәков конференция эшендә ҡатнашты һәм сығыштар яһаны. Мәғариф министры урынбаҫары А.Ш. Сурин етәкселегендәге йыйынға республиканан ғына түгел, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән дә 250-гә яҡын уҡытыусы саҡырылғайны. Әҙиптәр иһә йәш быуынды милли рухта тәрбиәләүҙә әҙәбиәттең ролен асыҡланы, матбуғатҡа яҙылыу мәсьәләләрен күтәрҙе.

***

Мәләүез ҡала мәҙәниәт һарайында матбуғат байрамы үтте. Ул сараны М. Буранғолов исемендәге китапхана менән "Матбуғат-сервис" ойошмаһы бергәләп әҙерләгәйне.

Байрамды инеш һүҙ менән ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Николай Рузанов асты. Урындағы журналистар ойошмаһы етәксеһе Сибәғәт Рахманғолов йөкмәткеле телмәр тотто. Йыйылған халыҡ алдында республика гәзиттәре һәм журналдары вәкилдәре сығыш яһаны, ә матбуғат һөйөүселәр уларға үҙ теләктәрен, тәҡдимдәрен еткерҙе.

"Ағиҙел" журналы исеменән байрамда баш мөхәррир урынбаҫары, шағир Рәмил Йәнбәк ҡатнашты.

***

Шағирҙар Фәнил Күзбәков, Рәмил Йәнбәк Дәүләкән ҡалаһы 3-сө гимназия-интернаты (директоры Р.С. Дәүләтова) уҡытыусылары, уҡыусылары, ата-әсәләр менән осрашыуға барҙы, яҙыусыларҙың XV съезына бағышлап уҙғарылған республика иншалар конкурсында 3-сө урын яулаусы XI синыф уҡыусыһы Шәрипова Фидалиәгә Маҡтау ҡағыҙы, иҫтәлекле бүләк тапшырҙы. Әңгәмәләрҙә матбуғатҡа яҙылыу, бөгөнгө әҙәбиәт торошона бәйле мәсьәләләр ҡуҙғатылды.

### Көйөргәҙеләге тантаналар

Яу һәм хеҙмәт батырҙарын, әҙиптәрен, сәнғәт оҫталарын онотмай көйөргәҙеләр. Яҙыусы, шағир һәм драматург Баязит Бикбайға һәйкәл асыу, 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы сардарҙарының береһе Кинйә Арыҫланов музейының 10 йыллығын, мәшһүр прозаик Рәшит Солтангәрәевтың тыуыуына 75 йыл тулыуҙы билдәләү – ошо фекергә ҡеүәт. Һуңғы йылдарҙа 32 ауылда һәйкәл асылған, 20 таҡташ ҡуйылған, яңыраҡ Яҡшымбәттә Ҡыпсаҡ бейе, башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуы идеологтарының береһе Ҡараҡужаҡ Мөшәүәлигә һәйкәл ҡуйылды. Скульптур эштәрҙең авторы – Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Өлфәт Ҡобағошов. Морапталда Баязит Бикбай иҫтәлеген мәңгеләштереү тантанаһында район хакимиәте башлығы Әхәт Ҡотләхмәтов, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбаев, ошо төбәктә тыуып-үҫкән әҙиптәр Ғәлим Хисамов, Тамара Ғәниева, Зөһрә Ҡотлогилдина, скульптураны асыуға спонсорлыҡ ярҙамы күрһәткән эшмәкәр Зөфәр Әбдрәхимов, педагогик хеҙмәт ветераны Ҡәттәл Арғынбаев сығыш яһаны.

Кинйәабыҙ ауылында, асылыуына 10 йыл тулыу айҡанлы, Кинйә Арыҫланов музейы менән дә ихлас таныштыделегация. Бөйөк Ватан һуғышында "батырҙар

төйәге“нән 62 яугир ҡатнаша, шуларҙың өсәүһе Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

Яңы Таймаç ауылындағы мәктәп Рәшит Солтангәрәев исемен йөрөтә. Яҙыусыны хәтерләү кисәһе мәктәп алдында уҙғарылды. Өфөнән килгән делегация ыңғайына Күмертау яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Кинйәғәле Абдуллин, журналистар һәм яҙыусылар Факил Мырҙаҡаев, Мөнир Ҡунафин, Закир Әҡбәров, Рәшит Солтангәрәевтың ҡатыны Динара ханым, әҙиптең апаһы, республиканың атҡаҙанған уҡытыусыһы Хәҙисә Кинйәбаева ла һағышлы хәтирәләре менән уртаҡлашты һәм мәктәп музейына яҙыусының монаяттарын тапшырҙы.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, халыҡ яҙыусыһы Нәжиб Асанбаев, халыҡ шағиры Марат Кәримов, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шағир Ирек Кинйәбулатов Ҡазан ҡалаһында үткән Ғ. Туҡайҙың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияла, Туҡай һәйкәле янында уҙғарылған шиғыр һәм йыр байрамында, М. Йәлил исемендәге Опера һәм балет театрында үткән тантаналы кисәлә һәм башҡа сараларҙа ҡатнашты.

...Ғабдулла Туҡайҙың юбилейына арналған Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойоштороуындағы тантаналы сара Башҡорт дәүләт филармонияһы залында ла уҙҙы. Тантанаға Ҡазандан Татарстандың халыҡ шағиры, Ғабдулла Туҡай исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Роберт Миңнуллин, Ғабдулла Туҡай исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәдиф Ғаташ килгәйне. Сараны Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаçары, шағир Ҡәҙим Аралбаев асты. Артабан кисәлә Ҡазан ҡунаҡтары, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Абдулхаҡ Игебаев, Марат Кәримов, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Назар, Башҡортостан Яҙыусылар союзының татар әҙиптәре берләшмәһе рәйесе Марис Нәзиров, Татарстандың халыҡ һәм Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, филология фәндәре кандидаты Марат Шәрипов, "Толпар" журналының яуаплы сәркәтибе, шағир Илдус Фазлетдинов сығыш яһаны.

## Силәбелә күсмә ултырыш

26 майҙа Силәбе ҡалаһында йәмәғәт ойошмаларының халыҡ ара-берлеге "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)“ Башҡарма комитеты Советының Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты менән берлектәге күсмә ултырышы булып үтте. Ултырышты ҡыçҡаса инеш һүҙ менән Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, Рәсәй Федерацияһы Федераль йыйылышының Дәүләт Думаһы депутаты М.Х. Йосопов асты. Күсмә ултырышта "Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуҙа төбәк ҡоролтайҙарының роле" (докладсы И.З. Солтанморатов), "Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының эшмәкәрлеге тураһында" (Ф.Ф. Ғайсина), "Хәҙерге шарттарҙа башҡорт телен һаҡлау һәм үçтереү проблемалары" (Р.З. Шәкүров, В.М. Бәҙретдинов) тигән темаларға докладтар, Башҡортостан Республикаһы элемтә һәм киң коммуникациялар министры Б.Н. Мелкоедов, Башҡортостан Республикаһының Свердловск өлкәһендәге даими вәкиле, өлкә ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Н.Ф. Тюменцева, Силәбе өлкәһе Мәҙәниәт министрлығының идаралыҡ начальнигы Л.Л. Контюкованың милли матбуғат, мәҙәниәт мәсьәләләренә арналған сығыштары тыңланды.

Фекер алышыуҙарҙан һуң ултырышта ҡатнашыусылар региональ ҡоролтайҙарҙың Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡорт халҡының социаль-иҡтисади хәлен яҡшыртыуға, милли мәғарифты, матбуғатты, туған телде, мәҙәниәтте һәм сәнғәтте һаҡлау һәм үçтереүгә йүнәлтелгән программаһын тормошҡа ашырыу буйынса ҡарар

ҡабул итте. Ҡарарҙа шулай уҡ күрше өлкәләрҙә башҡорт телендә элегерәк сығып килгән гәзиттәрҙе тергеҙеү, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм Башҡортостан радиоһы тапшырыуҙарын ретрансляциялау мәсьәләләре күтәрелде, Силәбелә башҡорт халҡының яуыз дошманы, палач А.И. Тевкелевтың (Тәфтиләүҙең) иҫтәлеген мәңгеләштереү мәсьәләһен ҡуҙғатыусыларға ҡарата ҡырҡа ҡаршылыҡ белдерелде.

Күсмә ултырыштан һуң "Силәбе өлкәһе башҡорттарының этник тарихы һәм рухи мәҙәниәте", "Силәбе өлкәһендә башҡорт эшҡыуарлығының торошо һәм үҫеше" тигән проблемалар буйынса түңәрәк өҫтәлдәр үткәрелде. Был сараларҙа Силәбе, Свердловск, Ҡорған, Ырымбур өлкәләре, Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайҙарының вәкилдәре, БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, БР Мәғариф министрлығының бүлек мөдире Рәйсә Күзбәкова, „Аҡ тирмә“ милли-мәҙәни үҙәге рәйесе Ләлә Биишева, тарихсы ғалимдар Ирек Аҡманов, Нәзир Ҡолбахтин, Азат Бирҙин, Юлдаш Йосопов ҡатнашты.

***

Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ урта мәктәбендә үткән сығарылыш кисәһендә мәктәп директоры Ғәбит Ғатин тантанала төрлө олимпиадаларҙа, конкурстарҙа, спорт ярыштарында призлы урындар яулаусыларҙы ҡотлап, уларға бүләктәр тапшырҙы.

Тағы ла бер традиция бар Тамъян-Таймаҫ мәктәбендә. Ул – прозаик Фәнис Янышевтың үҙ исемендәге премияһын тапшырыуы. Премияны тәүге булып алған Лүзиә Ҡунафина Өфөлә педколледж тамамлап, бөгөнгө көндә Бәләбәй башҡорт гимназияһында уҡыта. Артабанғы лауреаттар Зөһрә Йәнтүрина менән Алмас Янышев хәҙер – БДУ студенттары. Азат Бузанов 9-сы синыфты быйыл тик "бишле"гә тамамлаған, шиғырҙар яҙа, спорт менән шөғөлләнә.

Быйылғы премияға Таһир Йәнтүрин лайыҡ булды. Бишенсе синыфты ғына тамамлаһа ла, ул үҙен танытып өлгөргән: район кимәлендә үткәрелгән йәш ҡәләм тибрәтеүселәр конкурсында беренсе урынды яулаған. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса ла ул иң алдынғы.

***

Биш йыл рәттән Амангилде урта мәктәбенән әҙәби ижад һәм әҙәрмәнлек буйынса әүҙем балаларға шағир Әсхәл Әхмәт-Хужа үҙ премияһын һәм дипломын тапшыра. Быйыл бындай бүләккә 9-сы класс уҡыусыһы Юлиә Өмөтҡужина һәм 5-се класс уҡыусылары Илнара Ғүмәрова, Илмира Мортазина лайыҡ булды. Бүләктәр – "Ағиҙел" журналына яҙылыу квитанциялары һуңғы ҡыңғырау тантанаһында тапшырылды.

***

М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры һәм Башҡорт дәүләт университеты йәш драматургтар өсөн "Өмөтлө ҡәләм – 2011" конкурсы иғлан итте. Унда университеттан һәм уның филиалдарынан 35 йәшкә тиклемге студенттар, магистранттар, аспиранттар һәм хеҙмәткәрҙәр ҡатнаша ала. Әҫәрҙәр башҡорт телендә булып, 2011 йылдың сентябренә тиклем театрҙың әҙәби бүлегендә ҡабул ителә.

***

Өфөлә Халыҡ-ара музейҙар көнөнә арналған "Төнгө музей" акцияһы уҙғарылды. Әҙәби ҡомартҡылар, яҙыусыларҙың әҫәрҙәре, ҡульяҙмалары, шәхси әйберҙәре һаҡланған Милли әҙәбиәт музейы Мәжит Ғафуриҙың йорт-музейында йәш быуында Тыуған илебеҙ мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләү маҡсатында ойошторған сараны үҫмерҙәрҙең асфальтта һүрәт төшөрөүе, йәш шағирҙарҙың "Асыҡ микрофон" конкурстары, йыр-моң, боди-арт буйынса мастер-класс тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итте.